(Башк)
F 21



РАМИ ГАРИПОВ

ПРОИЗВЕДЕНИЯ

В ТРЕХ ТОМАХ

III

УФА
"КИТАП"
2001

С(Баш)
Г21

РӘМИ ҒАРИПОВ

ӘҫӘРҘӘР

ӨС ТОМДА

III



- 454486 -

ӨФӨ
"КИТАП"
2001

УДК 894.343-3
ББК 84 (2Рәс=Баш)
F 24

Төҙөүсеһе *Н. В. Гарипова*

Рәссамы *А. Р. Гарипов*

45486

БИБЛИОТЕКА
Республиканского
издательства
«БАШКОРТОСТАН»

Гарипов Рәми

F 24 Әҫәрҙәр (өс томда). 3-сө том: Көндәлектәр, хаттар, тәржемәләр. – Өфө: Китап, 2001. – 640 бит.

ISBN 5-295-02982-4

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың сираттағы томында уның ижади ғүмере дауамында яҙылған көндәлектәре, мәкәләләре, хаттары урын алды.

ТП–91

УДК 894.343-3
ББК 84 (2Рәс=Баш)

ISBN 5-295-02982-4

© Төҙөүсеһе Гарипова Н. В., 2001

Кондәлектәр

1961

18 май.

Салауаттың урманға барғанда биргән һорауҙары.

— Атай, был сәскәләрҙең исеме нисек?

— Һары сәскәләр, улым. Һыйырҙар яратып ашай уны.

— Ә малай ашамай.

— Малайҙар ҙа ашай — көстәре күп була, ә һыйырҙың һөтө күп була.

— Атай, бынау һыйыр ниңә теге яҡҡа сығып бара?

— Аръяҡта үлән ҡуйы була, шуны ашарға сыға.

— Ә ағып китмәйме?

— Юҡ, ул бит һәләк матур йөҙә.

— Ә мин белмәйемме?

— Ҙур үҫкәс, һин дә белерһең...

— Атай, ниңә был паромдың ике кәмәһе бар?

— Ауып китмәҫкә. Паромға бит ана машиналар ҙа керә. Бойҙай ташыйҙар.

— Атай, унда бик түбән тауҙар бармы?

— Бик түбән түгел, бик бейек тауҙар тиң. Бар улар.

— Атай, был ниндәй соҡорҙар?

— Силос соҡорҙары улар, улым. Бына шунда кукуруз сәсәләр ҙә, үҫкәс, комбайн менән урып алалар, шунан күмәләр. Аҙаҡ ҡаҙып алып, ҡыш буйы һыйырҙарға ашаталар.

— Тәмле буламы?

— Тәмле, телеңде йоторлоҡ була.

— Әллә һинең ашап ҡараған бармы?

— Юҡ, ашамаһам да беләм.

— Атай, ағас алырға һин шунда килгәйнеңме?

— Эйе.

— Сыйырсыҡтар шунда йоҡлаймы?

— Юҡ, улар ауылда йоҡлай, бында тик селәүсен эҙләргә генә киләләр.

— Нәмә яҙаһың, атай?

— Ҡоштар матур һайрай тип.

— Атай, ана сәскә! Ҡайтҡанда алып ҡайтырбыҙ йәме?

— Ярар.

— Ана тағы берәү, икәү. Атай бынауһы нәмә?

— Һөтләгән.

— Ашайҙармы уны?

— Ашайҙар.

— Нәмәһен ашайҙар?

— Һабағын.

— Ә сәскәһен ашамайҙар, имәләр генә, эйе бит?

— Эйе, улым, эйе. Атты тик йомшаҡ юлдан ғына алып бар. Аяҡтары ауырта бит.

— Алдағы аяҡтарымы?

— Алғыһы ла, артҡыһы ла...

Бара торғас, тағы бер һорау:

— Атай, ҡыш бабай кемдең бабайы?

— Бөтә кешеләрҙең дә бабайы.

— Ә алла бабай?

— Юҡ ул алла бабай!..

— Үлтергәндәрме?

— Үлтермәгәндәр, ул бөтөнләй булмаған.

Аттың тирләгәнен күреп Салауат тағы:

— Ат әллә үлергә тырыша инде? — ти.

— Ниңә?

— Ана әллә ҡайҙан һыу аға.

— Тирләгән бит ул...

— Был кемдеке урман, атай?

— Бөтә кешенең дә урманы ул.

— Ә иң алда беҙҙеке булғанмы?

— Юҡ, ул иң алда бөтә кешенеке булған. Хәҙер ҙә. Беҙҙеке лә, бабайҙарҙыҡы ла, әбейҙәрҙеке лә, малайҙарҙыҡы ла, һинеке лә — бөтә кешенеке. Шуның өсөн бөтә кеше лә уны яратырға тейеш.

* * *

Ҡайтҡанда умырзая сәскәләрен йыябыҙ.

— Һин Фәниә апаңа йый, ә мин мамама йыям, — тим.

— Юҡ, һин Фәниә апаға, ә мин мамаңа, — тип ҡаршы төшә.

Шулай килештек тә, күп итеп умырзая йыйып алдык. Мин тик бөрөләнеп сәскә атырға ултырғандарын ғына йыям, ә Салауат бөтәһен дә йүгереп-йүгереп йыя. Тик сәскәләре ҡайтып еткәнсе лә йәшәй алманы, һулып бөттө. Мин үземдекен бүлеп бирҙем.

18.VIII.

Бына — беҙ Малеевкала. Серафимович исемендәге Ижад йортондабыҙ. Марат менән Рафаэль 7-се бүлмәгә, мин элекке врач бүлмәһенә — 15-се бүлмәгә урынлаштым.

Мәскәүҙән Белорус тимер юлындағы Дорохово станцияһына килеп төшкәс, станцияла бер сәғәт ярым нишләргә лә белмәй ултыра инек, ижад йортонан еңел машина менән килеп алдылар.

Литфондта путевкалар биреүсе Мәри Абрамовна беҙҙе ултыртып ҡуйҙы. Беҙгә билдәләнгән бүлмәләргә икенсе кешеләр урынлашып бөткән. 25-се бүлмәне Яҡуп Ҡолмой алған булып сыҡты. Беҙ һүҙгә килешеп тормайынса, ҡайҙа етте шунда ҡалырға риза булдыҡ. Рафаэлдең кәйефе ҡырылып китте, Марат бер көлкө хикәйәләр китабын уҡырға кереште, ә мин бына, бүлмәне бер аҙ тәртипкә килтерҙем дә, ҡәләм сарларға ултырҙым. Юҡһа, һуңғы ваҡытта салғы-һәнәк тоторға ғына өйрәнеп киткән ҡулдар. Яҙынырға ла ҡыйын.

Бына хатта һөйләм төҙөүе лә әллә нисек — ят бер эш кеүек. Ә яҙыу һағындырған, эшләге килә.

Эште төштән һуң башларға булдыҡ. Иртәнге сәйҙән һуң урман буйлап йөрөгәндә, ныҡлы көн тәртибе булдырырға, өсөбөҙ ҙә шул тәртипте боҙмай һаҡларға һүҙ ҡуйыштыҡ.

18/VIII.

Кис. Эшкә төштән һуң да тотоноп китә алманыҡ. Көн болотло, баҫлыҡтырып тик тора. Мин төшкө аштан һуң йоҡлап алырға тигән тәҡдим индерҙем. Рафаэль дә, Марат та риза булдылар. Шулай итеп, өс кешегә бер автор булыу бик ҡыйын икән. Әле беребеҙҙең, әле икенсебеҙҙең эш кәйефе юҡ. Ләкин йоҡлап торғас, сәй эстек тә, эште башларға булдыҡ. Тәүҙә персонаждарҙың алдан әҙерләнгән диалогтарын уҡып, бер аҙ характерҙары билдәләп сығырға, унан һуң һәр характерға ярашлы ситуация юлдарын — икенсе пәрҙәнең сюжетын төҙөп ҡуйырға тотондоҡ. Һәм тәүге рейд уңышлы ғына сыҡты буғай. Өсөбөҙ ҙә эш дәрте менән яна, эҙләнә, илһамлана башланыҡ.

Шулай итеп, эш башланды.

Сәрәт 1-се яртыға тиклем ултырҙыҡ та ятырға булдыҡ.

Бер аҙ ваҡыт, ут һүнеп торғанда, май шәм яҡтыртып эшләнек. Утты бик ныҡ күк күкрәгәнгә һүндерҙеләр, буғай. Бына әле лә йәшен йәшнәп, күк күкрәп тора. Йәшен яҡтыһында урман бик асыҡ күренеп ҡала ла, бейек шыршы баштары тағы ла ҡараңғылыҡҡа сумып юҡ була. Тағы, тағы...

Тәҙрәнән оҙаҡ ҡына шул күренеш менән һоҡланып торҙом.

Япраҡтар шаулай. Урман гөү килеп тора. Һуңғы күк күкрәүҙәрелер инде был. Йәй үтеп тә китте. Хәҙер инде көҙгө ямғырҙар башланыр. Өйҙәгеләр нишләй икән?..

19/VIII.

Икенсе күренештә башланыҡ. Бик ауыр бара. Сөнки Нурҙың дә, Зөһрәнең дә характерҙары әле асыҡланмаған, икеһе лә ҡатмарлы образдар. Шулай ҙа образға инә башланыҡ кеүек. Тик көндөң ямғырлы булыуы ғына күңелде томалап тора. Иртәнән бирле быҫҡаҡлап ямғыр һибәләй... Унан һуң өс кешегә бер кеше булыу ҙа бик еңел түгел — өсөбөҙ өс яҡҡа тарта. Аҡҡош, суртан, ҡыҫала кеүек булабыҙ. Ә йөк урынынан ҡуҙғалмай ҙа тиерлек.

Кис. «Граф Монте Кристо»ның 1-се сәриәһын ҡараныҡ. Бына ҡайҙа сюжет ҡора белеү!.. Ләкин әкиәт шул, бер ҙә ышандырмай. Ә шулай ҙа класс уҡыусылары кеүек ҡыҙығып ҡарайһың. Мин уны уҡымай ҡалдым. Ләкин бәләкәй саҡта төнө буйы күрше малайы Кимдең һөйләгәне әле лә иҫемдә. Бик күп мажара китаптарын мин тик уның һөйләүе аша белдем. Аҙаҡ русса уҡый башлағас, улар уҡылмай ҡалды. Бала саҡта уҡый торған китаптар татар-башҡорт әҙәбиәте һәм тәржемәләр менән генә сикләнде, әлбиттә. Бына шуның өсөн дә хәҙер күп уҡыған кешеләр араһында ҡыҙарырға ла тура килә.

20/VIII.

Бөгөн дә көн төшкә тиклем ямғырлы булды. Эш бармай. Туҡталып ҡалдыҡ. Сөнки геройҙарҙың характерҙары асыҡ билдәләнмәгән, көслəп һөйләштерәбеҙ, ләкин был эш ҡомдан арҡан ишергә тырышыу кеүек мәғәнәһеҙ. Рафаэль артабан эшләүҙе талап итеп мыжый, ә Марат менән минең эшкә ҡул

бармай. Рафаэль беҙҙе ялҡаулыҡта, ә беҙ уны диктаторлыҡта ғәйепләйбеҙ. Ул бер үҙе бер-ике диалог яҙып ҡараны ла беҙҙе әрләргә тотондо, ә Марат менән мин диванға һуҙылып яттыҡ та шиғырҙар тураһында хыялланырға керештек.

— Давай, лучше һәр беребеҙ айырым яҙып ҡарайыҡ, — тип тәҡдим итте Рафаэль.

Ләкин былай ҙа эш барып сыҡмағас, урманға сығып киттек. Бик оҙаҡ урман буйлап бәхәсләшеп йөрөнөк. Пьеса тураһындағы бәхәс политик бәхәскә әйләнеп китте, ләкин быныңбер ниндәй ҙә файҙаһы теймәне...

Урмандан, киреһенсә, бер-беребеҙгә асыу килеп, арып ҡайттыҡ. Бер-беребеҙгә ҡарағы ла килмәй хатта... Күңелде һалҡын, тупаҫ бер өмөтһөҙлөк солғап алды. Ваҡытты былай мәғәнәһеҙ рәүештә һәләк итеү өсөн эс боша, бөтә был хәлдән хатта күкрәк тығыҙланып тора. Әллә был Малеевканы ташлап китергәме? Ҡайҙа китергә? Китергә аҡса юҡ. Тирә-яҡта эшһеҙ йөрөгән ауырыу-сырхау ҡарт-ҡарсыҡтарҙың шул тиклем күп булыуы, бер туҡтауһыҙ ашау менән мәшғүл булыуы ла күңелде иҙеп тора. Был Малеевкаға путевка алып бик яңылыштыҡ беҙ. Был ижад йорто түгел, әллә ниндәй мәғәнәһеҙ инвалидтар йорто. Ну ашайҙар ҙа һуң был әрәмтамаҡтар, көнө буйы тығыналар ҙа, аш һеңдереү өсөн, ҡырмыҫҡалар кеүек, урман юлдары буйлап мыж килеп йөрөйҙәр. Бер генә ысын яҙыусыны күрмәҫһең. Бөтәһе лә әҙәбиәт тирәһендә ураланыусылар һәм уларҙың ғаиләләре, туған-тыумасалары. Бөтәһе лә май йыялар, ҡорһаҡ үҫтерәләр, тел сарлайҙар.

Бер нисә ҡарт ҡына эшләй булһа кәрәк. Беҙҙең Әҙәбиәт институтының элекке профессоры Павел Иванович Новицкий, бер чечен ҡарты, Төрөкмәнстандан килгән рус яҙыусыһы Бишеп Алиев — шулар ғына эшләй булһа кәрәк. Ҡытай теленән тәржемә итеүсе, элек беҙҙең институтта ҡытай әҙәбиәтен уҡытҡан Эйдлин һәм минең менән бер курста уҡыған Игорь Сеньков бар ине — улар ҙа ҡайтып китте.

Я. Ҡолмой Сабитов тигән бер татар ағай (полотер) менән эсеп йөрөй, йә ваҡытын бильярд уйнап үткәрә. Беҙҙең уның менән уртаҡ һүҙебеҙ ҙә юҡ. Әйтерһең, беҙ башҡа республиканан килгән таныштар ғына. Бик ҡыҙыҡ бит? Ғәжәп!.. Әллә үҙен пьесаға тотоп индерергәме?

— Давай индерәбеҙ! Бөтә Ҡолмой, Ихсан, Иҙелбай һәм Мөслим Мараттарҙы, бөтә графомандарҙы бергә йыйған бер

тип тыуҙырырға кәрәк! — тигән фекергә килдек. Исеме әйҙә Дауыл Шәрәфи булһын!.. Юҡһа шағир Нур образын был типтан башҡа асыу мөмкин дә түгел. Образ үҙ мөхитендә генә тыуырға тейеш...

Төшкө аштан һуң Рафаэль бильярд һуғырға киткәс, Марат менән бөтә образдарҙы барлап, характерҙарҙы һәм уларҙың маҡсат-нагрузкаларын, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен аныҡлап сыҡтыҡ. Пьесаның социаль йөкмәткеһен билдәләү менән үк, ҡапыл өмөт сатҡыһы балҡып киткәндәй булды. Рафаэль бүлмәгә ҡайтып ингәндә инде, беҙҙең йөҙҙәргә ижад төҫө кереп, күңелдәрҙе илһам ҡанаты һыйпап киткәндәй ине... Ул да беҙҙең фекергә ҡушылып китте.

— Һин юҡта беҙҙең баш эшләй, һин беҙҙең инициативаны быуып тораһың икән! —тип көлөштөк.

Иртәгә Марат «Йәш гвардия» издательствоһына Мәскәүгә барып килгәс, иртәнән һуңға ныҡлап эшкә тотонорға кәрәк, тигән ҡарарға килдек.

— Беҙ бик аскеттарса йәшәйбеҙ бит әле, — тине Марат. Һәм беҙ ҡатын-ҡыҙҙар яғын да ҡараштырырға булдыҡ. Ләкин— һәләтлек етмәй! Быҙауҡайҙар шул беҙ был яҡҡа. Шулай ҙа өмөт юҡ түгел.

20/VIII.

Марат Мәскәүгә китте, Рафаэль бильярд уйнай, мин Пришвиндың библиотекаға ҡатыны бүләк иткән «Незабудки» китабын алып уҡырға тотондом.

* * *

Пришвиндың ҡатыны ла үҙе кеүек. Бик ҡыҙыҡлы фекер йөрөтә. Сәнғәттәге һаранлыҡ тураһында:

«... Жизнь становится все напряженней в стремлении лучших людей разрушить преграды — националистические, имущественные, всякие, — порождающие вражду и войну на земле. И чем обширней пространства, охватываемые этими усилиями, тем короче сигналы — от народа к народу, от поколения к поколению. Вот откуда, может быть, и рождается отчасти лаконизм в словесном искусстве — и стих и лозунг, — чем дальше расстояние, тем короче зов».

«Мы, поэты и художники, — говорит Пришвин, — не являемся, как раньше думали, «избранниками», будто бы мы живем, а внизу где-то прозябают обыватели. Нет! Мы ничем не отличаемся от других, если их дело является творчеством жизни» (1930).

Пришвиндың ҡатынына яҙып ҡалдырған васыяты:

«Завещание.

Верно судить о писателе можно только по семенам его, понять, что с семенами делается, а для этого время нужно и время. Так скажу о себе (уже 50 лет пишу!), что прямого успеха не имею и меньше славен даже, чем средний писатель. Но семена мои всхожие, и цветочки из них вырастают с золотым солнышком в голубых лепестках, те самые, что люди называют незабудками. Итак, если представить себе, что человек, распадаясь после конца, становится основанием видов животных, растений и цветов, то окажется, что от Пришвина остались незабудки.

Милый друг, если ты переживешь меня, собери из листиков этих букет и книжечку назови «Незабудки»!

* * *

«Добро само по себе неказисто на вид и убеждает нас только, если осветит его красота. Дело художника — это, минуя соблазн красивого зла, сделать красоту солнцем добра».

* * *

«Любить — это делать».

20/VIII.

Төн. Башҡа төндәргә был төн бөтөнләй оҡшамаған. Моңһоу һәм татлы төн был!..

Күңел, ахыры, шундай нескә бер ҡыл, хатта бер тауыш ҡына ла унан ғәжәп матур моң сығара ала! Кеше күңеленә, күрәһең, бик аҙ, бик бәләкәй генә ҡағылыу ҙа етә...

Бына әле генә урманда йөрөп ҡайттыҡ. Ләкин урманда түгел, ниндәйҙер сихыр донъяһында йөрөп ҡайттым мин!..

Үҙемә үҙем аптырайым.

Ни булды һуң? Бит, артыҡ бер ни ҙә булманы бит?

Кинонан сыҡтыҡ. Бөтәһе лә ғәҙәттәгесә. «Люблю тебя, жизнь» картинаһын ҡараныҡ. Рафаэль, әйҙә бер ҡыҙ менән таныштырам, тип, ул ҡыҙҙы бергәләп оҙата киттек. Рафаэль менән улар былтыр уҡ танышҡандар. Ҡыҫҡа ғына романдары ла булған. Ә миңә нәмә: мин тик бергә оҙата ғына барам, һүҙҙәрем дә юҡ һәм ул ҡыҙҙы бөтөнләй белмәйем дә. Хәйер, исемен беләм — Катюша. Уҡытыусы, педучилище бөткән, икенсе йыл ғына уҡыта. Һәм Рафаэлдең уның хаҡында әйткән «бик темпераментный ҡыҙыҡай» тигән һүҙҙәре генә бар. Бына шул ғына.

Ләкин «бына шул ғына» ла минең тыныс күл кеүек үлеп ятҡан күңелгә таш ырғытҡан кеүек булды. Талғын ғына урман шауы иҫерткес бер йырға, урман араһынан күренеп ҡалған ай ярсығы ниндәйҙер бер хыял йомғағына әйләнде. Серек ағас ваҡтары баҙлап янған йондоҙ булып балҡыны. Бәшмәкле еүеш урман еҫе күкрәккә ярып ингән хуш еҫ булып аңҡыны. Һәм ҡолаҡ төбөндәге яғымлы ҡатын-ҡыҙ тауышы әйтеп аңлата алмаҫлыҡ бер наҙ булып бөтә тәнгә таралды...

Миндә кеше уяныу менән мин бик бәхетле, ләкин үҙемдең өс кеше араһында артыҡ булыуым менән бик моңһоу инем. Минең бөтә күңелем бына ошо моңһоу, үкенесле бәхет менән тулып йөрөнө. Был төнгә шул бәхет өсөн дә рәхмәт...

Ләкин Рафаэлдең мине был сәйер хәлгә ҡуйыуы, үҙе ҡыҙҙы ҡосаҡлап, иҫнәп йөрөүе һәм бының менән ҡыҙҙы ла бик уңайһыҙ мөнәсәбәткә ҡалдырып, уйын уйнауы аңлашылып етмәне...

Минән көлөү, әлбиттә, күңелле. Минең кеүек кешеләрҙән мин үҙем дә көлөр инем...

Шулай ҙа рәхмәт был төнгә!

21/VIII.

Иртән яҡшы ғына эшләп алдыҡ. Дауыл Шәрәфи менән иҫерек шәп килеп сыҡты! Ғөмүмән, төп геройҙарҙан башҡалар яҡшы килә. Ләкин Мәскәүҙән Мараттың Иван Зуйков тигән бер журналист иптәше килеп, эште өҙҙө. Малеевка эргәһендәге Тучковский совхозына командировкаға китеп бара. Бөгөн совхозда комсомолецтарҙың отчет-һайлау йыйылышы була икән. Мин бының менән бик ҡыҙыҡһынып китеп, Марат менән бергә беҙ ҙә барырға булып киттек. Бәлки, Юлдаш — комсорг образына

берәй һыҙат бирерҙәй яңы бер прототип табырбыҙ, тип уйланыҡ. Унан һуң Мәскәү өлкәһендәге комсомол ойошмаларының эше менән танышыу теләге лә бик ҙур. Рафаэль бармаҫҡа булды, беҙ киттек.

Ләкин йыйылыш булманы. Совхоздың үҙәк усадьбаһынан да хатта бик аҙ килгәндәр. Отчет-һайлау йыйылышы иртәгәгә күсерелде. Партия программаһының проекты тураһында лекция тыңланыҡ.

Комсомолдың хәле, күрәһең, ҡайҙа ла бер — комсомолға ҡул һелтәп кенә ҡарайҙар, администрация бында ла шулай юлға арҡыры һуҙылып ята икән. Управляющийҙар бүлексәләге комсомолецтарҙы йыйылышҡа ебәрмәгәндәр.

Ҡайтҡанда йәйәү ҡайттыҡ. Тучковонан Иҫке Рузаға, Рузанан, Мәскәү йылғаһы аша сығып, Малеевкаға атланыҡ. Зуйков иҫке Рузала автобусҡа ултырып китте. Юлда туғандар ҡәберлектәренә туҡталып Мәскәү аҫтындағы һуғыштар тураһында һөйләшеп алдыҡ.

Ҡәберлектәр бик тәртипле тотола. Һәйкәлдәр ҡуйылып, сәскәләр ултыртылған, веноктар һалынған. Күрәһең, уларҙан кеше аяғы өҙөлмәй...

Беҙ ҡайтҡанда, Рафаэль бильярд уйнарға киткәйне. Бик мауыҡтырғыс уйын — иртәнсәк Марат менән мин дә бильярд таяғын тәү ҡат ҡулға алып ҡараныҡ. Рафаэль беҙҙе дәртләндереп-ҡупайтып өйрәтергә тотондо. Беҙҙән дә бильярд уйнаусылар сығырға мөмкин тигән ҡарарға килдек.

Ләкин бына драматургтар сығырмы, юҡмы — билдәһеҙ әле. Эш бик әкрен бара. Һәр һүҙ өсөн бәхәсләшәбеҙ, әрләшәбеҙ... туҡтап ҡалабыҙ ҙа тағы дауам итәбеҙ.

Кис Марат менән урманда йөрөнөк. Ләкин беҙгә тигән ҡыҙҙар осраманы. Ә Рафаэль байрам итә буғай бөгөн — әле һаман юҡ та юҡ. Беҙ бөгөн дә ауыҙ асып ҡалдыҡ.

— Былай булмай, иртәгә ныҡлап тотонорға кәрәк әле, — тине Марат.

Йәнәһе беҙҙән дә эш сығасаҡ!..

* * *

Мараттың һүҙҙәре мине лә нығытып ҡуя, юҡһа, өмөтһөҙ йөрөү үҙенде үҙең урлап йөрөү кеүек...

* * *

Кисәнге төн күңелгә бер ауыртыу һалып ҡуйҙы һәм был ауыртыу рәхәт... Сөнки һәр бер күңел ауыртыуы аҫтында шифыр көсө йәшеренеп ята бит. Шунһыҙ яҙыу ҙа мөмкин түгел.

* * *

Шифыр яҙаһы килә. Ләкин был пьеса бөтә иғтибарҙы, бөтә ваҡытты үҙенә генә тартып тора. Эштән һуң ултырырға инде арытҡан була.

22/VIII.

Бөгөн иртән тәүге ҡабат ҡояш күренде!.. Асыҡ һауаға сығып, ике ҡарт имән менән сайырҙары аҡып торған бар ҡарт ҡарағай аҫтында ултырҙыҡ. Бик матур урын. Рәхәтләнеп тәмәке көйрәтергә лә яҡшы. Юҡһа, бүлмәлә уңайһыҙ — Рафаэль дә, Марат та тартмайҙар. Шулай ҙа улар пьеса хаҡына минең тәмәке төтөнөн йоторға ла риза булдылар.

Төшкә тиклем Эмиль менән Зөһрә диалогтарын яҙып бөтөрҙөк. Яҡшы сыҡты, буғай. Зөһрәгә яңы һыҙаттар өҫтәлде, Эмилдең характеры ла ҡатмарлана төштө. Уңышлы ғына деталдәр ҙә табылды. (Кәмитсе, философ һәм «ведь улыбка флаг корабля» һ. б.).

Төштән һуң бильярд уйнап алдыҡ. Мауыҡтырғыс уйын — мин Маратты ике ҡабат отҡан булдым. Отоуы күңеллерәк, әлбиттә. Ләкин ваҡытты отторҙоҡ. Төштән һуң күк күкрәп ямғыр яуып алды. Киске сәйгә тиклем йоҡо һимерттек, сәйгә лә һуңлап ҡалғанбыҙ. Мин тороуға, Марат инеп, бик мөһим хәбәр әйткәндәй:

— Сәйгә барып йөрөмә, һуңлағанбыҙ, — тип сығып китте.

Киске аштан һуң тағы бильярдҡа йәбештек, унан һуң «Граф Монте Кристо»ның 2-се серияһын ҡарап, пьеса тураһында һөйләшеп алырға урман буйына сығып киттек. Шәрәфи менән Гөлназ диалогы хаҡында бик оҙаҡ бәхәсләштек. Сөнки Дауыл Шәрәфи Яголыҡ эшләп, бер үк ваҡытта ҡыҙ ҙа булырға, быуаҙ ҙа булырға тейеш ине.

24/VIII.

Һаман ямғыр ҙа ямғыр. Ауылда нисек икән, әгәр ауылда ла шулай булһа, бойҙайҙы бөтөнләй ура алмайҙарҙыр инде...

Өйгә бөгөн дә хат яҙып булманы. Йә эште йүнләп эшләп булмай. Ваҡыт бик бушҡа үтә кеүек. Күңелде ниндәйҙер ҡәнәғәтһеҙлек тырнап тик тора. Юҡ ҡына нәмәләр өсөн дә бәхәсләшеп тик ултырабыҙ.

Юлдаш менән Зөһрә диалогтарын яҙа башлау менән үк ҡаршылыҡ китте. Рафаэль мин әйткән һүҙҙәргә йөҙөн һытып:

— Юҡ, улай түгел, булмай улай, — тип илай ҙа ебәрә. Шунан һуң бөтә дәрт һүрелеп, фекер туҡтай ҙа ҡала, инициатива бөтөнләй юғала һәм яҙыуы ла ҡыҙыҡ түгел. Бер-беребеҙҙең ауыҙына ҡарап ултырабыҙ ҙа ултырабыҙ. Бер һөйләмде яҙыр өсөн әллә күпме бәхәсләшергә кәрәк. Марат бик ҡыҙыҡ позицияла — нейтралитет һаҡлап, көлөп тик ултыра.

— Исмаһам, һин әйт берәй һүҙ, — ти Рафаэль уға. Ләкин Марат ике яҡҡа ла баҫым яһамай.

Рафаэль менән минең мөнәсәбәт бик ҡырҡыулаша бара. Уға Шекспир подтекстары булһын да, Погодин диалогтары булһын! Ләкин булмағанды ҡайҙан алаһың, беребеҙ ҙә Шекспир түгел шул!.. Бер юл да яҙмай ултырғансы, Абдуллин хәтле яҙһаҡ та бик шәп булыр ине лә бит, ләкин яҙылмай пьеса! Бер-беребеҙгә мәғәнәһеҙ ҡараш ташлап, үҙ-үҙебеҙҙе көслөп тик ултырабыҙ. Тағы бер ҡаршылыҡтан һуң мин түҙмәнем:

— Давай, Рафаэль, илама! Йә үҙең әйтмәйһең, йә кеше әйткәнен яратмайһың, ниңә улай үҙ фекереңде генә диктовать итәһең? — тип ысҡындырҙым. Ул ҡулындағы блокноты менән ҡәләмен беседка эскәмйәһенә атып бәрҙе лә:

— Мә, яҙығыҙ үҙегеҙ! — тип тороп китте.

— Давай, яҙ, Марат! Соҡсоноп, һүҙгә бәйләнеп ултырмайыҡ, аҙаҡ төҙәтербеҙ һөйләмдәрҙе, — тинем мин.

Секретарлыҡты Марат алды.

Ләкин диплом ҡатырғаһына еткәс, ҡатырғаға терәлеп туҡтап ҡалдыҡ.

Шундай иҙелгән кәйеф менән иң яҡты, бөтә пьесаға ҡанат булып торорға тейеш булған күренеште яҙыу мөмкин дә түгел ине.

Бер-беребеҙгә асыу килеп, күңел ҡатып, һүҙһеҙ-ниһеҙ, баҫынҡы кәйеф менән корпуҫҡа ҡайтып, бүлмәләргә тара-

лыштыҡ. Етмәһә мин бысраҡҡа тайып йығылып, еүешләнеп, бысранып ҡайттым. Нишләптер аяҡтар ҙа һыҙлай башланы. Бигерәк тә уң аяҡ һыҙлай. Элек быға бер ҙә иғтибар иткән юҡ ине, бөгөн тәүге ҡабат быға иғтибар итеп, бик күңелһеҙләнеп ҡуйҙым. Бер көн килеп, аяҡтан яҙып ҡуйыуың да бар. Бөтә организм шундай таҙа, бер ҡасан да әле ауырыу-сырхау күргәнем юҡ, ә бына аяҡтан ҡалырға мөмкин — еүешләндем, һыҙлаштырып ҡуя. Әллә ревматизм, әллә берәй башҡа төрлө һөйәк ауырыуы башланырға итә? Белмәйем...

Көн бушҡа үтте. Кис «Сильные мира сего» картинаһын ҡарағас, ҙәем генә Пришвин күперен сығып, төнгө урман буйлап йөрөп килдем һәм бөтә асыу, ризаһыҙлыҡ урман араһында тороп ҡалды. Зөһрә менән Юлдаш сәхнәһен уйлап йөрөп, был сәхнәне ҙәем генә яҙғым килеп китте. Урман юлындағы бер көн күргән ағас сөрөктәре тағы ла йондоҙға әйләнгән кеүек булды...

Бөгөн төш ваҡытында Катюшаны күргәндә, уның, теге төндө телгә алып:

— Йә, кеше эшләп ҡуйҙыңмы? — тип һорауына ҡаршы:

— Эшләнем, барып ҡарағыҙ, — тип ялғанлағайным, хәҙер шул һүҙемде дөрөҫләп, ағас сөрөктәренән юлға ҙур бер кеше башы эшләп киттем.

Әгәр был күренеште ситтән берәй кеше күреп торһа, мине, әлбиттә, һис һүҙһеҙ, бер аҡылдан яҙған кешегә һанар ине. Ләкин мин был һүрәтте йырлай-йырлай илһамланып ижад иттем: кеҫәлә йөрөгән асҡыс менән ағас сөрөктәрен ҡайырып алып, юлға ҙур бер «К» хәрефен дә яҙып ҡуйҙым. Миндә әле малайлыҡ хисе бөтмәгән, ахыры. Шул да бына күңелдән көндөҙгө кәйефте ҡыуып сығарҙы, буғай. Бындай саҡта яҙғы килә.

Мараттар бүлмәһенә ингәс, Рафаэль ҡағыҙ киҫәгенә ниҙер яҙып ятҡан еренән, бик етди төҫ менән:

— Йә ручкаңды бир, йә бына яҙырға ултыр, — тип бойорҙо.

Мин бер ни ҙә әйтмәй, яҙырға ултырҙым һәм, туҡтап-нитеп тормай, бер тынала 8 битте яҙып ташланым!..

Был бөгөнгө көн өсөн подвиг ине, әлбиттә. Рафаэль уны, йөҙөнә бер ниндәй ҙә йылмайыу эҫәре сығармай, бик ғәҙәти эшкә һанағандай, бик эшлекле ҡиәфәт менән генә ҡабул итте. Хатта Марат та ҡулдарын йыуып, аяҡтарын күтәреп, тәгәрәп китмәне!.. Ә мин уның:

— Драматург бит һин беҙҙең, Рәми! — тип ҡотлауын көткәйнем. Шулай итеп, минең подвиг артыҡ ҙур әһәмиәте

45486

БИБЛИОТЕКА
Республиканского
издательства
«БАШКОРТОСТАН»

булмаған сираттағы ҡара эш итеп кенә ҡабул ителде. Һәм мин үҙем дә быға артыҡ әһәмиәт бирмәҫкә тырышып: «биш» тигән награданы өмөт итеп маташманым.

Ә был еңеү, зур еңеү ине бит!

Һәм беҙ, драматургтар, яңынан ижад дәрте менән яна башланыҡ. Илһам көсө беҙгә кире әйләнеп ҡайтты!

— Иртәгә ныҡлап эшкә тотонорға! — тигән ҡарарға килдек.

Эш китәсәк хәҙер!

25/VIII.

Китмәйерәк торһон әле... Иртән тороуға Рафаэлгә телеграмма килеп төштө: Гөлсәсәк бик ауыр хәлдә ята, бик ҡыйын операция яһаясаҡтар икән. Баланы ярып алырға ғына мөмкиндер.

Рафаэль ҡайтып китергә тейеш. Пьесаны артабан дауам итеп тә булмай, дауам итер булһаҡ, өсөбөҙгә лә ҡайтырға кәрәк. Бик ҡатмарлы һорау килеп тыуҙы: нишләргә? Өсөбөҙҙә өс төрлө фекер.

Рафаэль: «Әйҙә ҡайтайыҡ та Өфөлә эште дауам иттерербеҙ, ярты юлда туҡтап ҡалмаҫҡа кәрәк,» — ти.

Мин әйтәм: «Бер килгәс, шул тиклем ерҙән ҡайтып йөрөүҙә лә мәғәнә юҡ. Пьеса, шундай хәл килеп тыуғас, хәҙергә ятып торорға ла мөмкин. Шифырҙар яҙырға тотонорға кәрәк. Былай ҙа бик күп ваҡытты бушҡа үткәрҙек,» — тим.

Ә Марат тағы ла ике арала тороп ҡалды. Ҡайтырға ла ҡаршы түгел, бында ҡалырға ла мөмкин уға. Ике фекеренә ике төрлө сәбәбе лә бар: өйҙәгеләр аҡсаһыҙ тороп ҡалған. Ләкин нәшриәттән аҡса алып һалырға ла була. Икенсенән, бында тороп ҡалһа, әллә ни яҙыр пландарым да юҡ, ти. Шулай ҙа яҙа башлаһаң, яҙырға ла булыр ине.

Шулай итеп, Рафаэлдең хәле ап-асыҡ: ҡайтырға! Ҡайтмау мөмкин түгел. Ғүмер буйы үкенерлек хәлгә ҡалыуы ла бар, кем белә?

Ә Мараттың позицияһы ныҡлы түгел, бик икеле.

Минең башҡасараҡ хәл, тормошта ла, әҙәбиәттә лә, эштә лә бик борсоулы хәл: берҙән, торор өй ҙә юҡ, аҡса ла юҡ, ҡайҙа эшләү ҙә әле билгеһеҙ. Ҡатын ике бала менән бер үҙе мәктәптең интернатында ғына тороп ҡалған. Миңә бик зур ҡыйынлыҡ менән генә китергә тура килде, ҡатын менән дә, партком, райком менән дә һүҙгә килешеп бөттөк. Әгәр ҙә Өфөгә ҡайтып киткәндә, мин

унда түҙеп ята алмайым инде, тура ауылға ҡайтасаҡмын. Сөнки кеше өҫтөндә ятып булмаясаҡ. Былай ҙа мин Рафаэль менән Мараттың иҫәбенә ятам.

Икенсенән, минең инде өсөнсө йыл матбуғатта сығыш яһағаным юҡ. Журналға биргән шиғырҙар кире ҡағылды, ә гәзиткә биргәндәре әле һаман баҫылмай ята. Был хәл мине бик борсолдора башланы инде. Өсөнсө йыл үҙ исемеңде матбуғатта күрә алмау бик күңелленән түгел. Был хатта мораль яҡтан мине бик изеп килә. Минең ижади яҙмышҡа ҡарата ниндәйҙер бик сәйер мөнәсәбәт һиҙелә. Үҙе юҡтың— күҙе юҡ шул.

Ә өсөнсөнән, минең яҙылған нәмәләр хәҙер ике китапҡа етерлек, уларҙы бик ныҡытып эшләп сығырға кәрәк. Ә яҙаһы нәмәләр бынан да күп, бер йыл туҡтауһыҙ эшләгәндә лә, материал етерлек — муйындан. Ләкин эшләргә бер ниндәй ҙә мөмкинлек юҡ. Хәҙер бына ошо бөтә ҡаршылыҡтар бергә килеп төйнәлгән дә иркенләп тын алырға ла ирек бирмәй.

Иң ҡиммәтле нәмә хәҙер миңә — ваҡыт! Тиҙерәк китапты әҙерләп нәшриәткә тапшырыу кәрәк. Ә пьеса әле боғаҙға ҡаҙалып торған нәмә түгел минең өсөн. Әле уның киләсәге һәнәк менән һыуға яҙылған. Етмәһә, уны яҙыу процессы ла ысын ижад характерында түгел, ниндәйҙер эске бер ризаһыҙлыҡ менән бара. Әгәр ҙә ул хәҙерге кимәлдән күтәрелеп китә алмаһа, бик бәләкәй фекерле, ғаилә-көнкүреш мәсьәләһе менән генә сикләнеп ҡалған ғәҙәти бер пьеса ғына буласаҡ. Дөйөм әҙәбиәт һәм тормош фонында тикшереп ҡарағанда, мин уға әллә ниндәй ҙур әһәмиәт бирә алмайым. Ул әле үтә бер яҡлы, өйрәнсек бер пьеса ғына булып ҡалырға ла мөмкин. Унан һуң беҙ өсөбөҙ ҙә өс төрлө автор, нисек кенә дуҫ булмайыҡ, барыбер бик күп нәмәләргә бер төрлө ҡарай алмайбыҙ. Бер-береңдең фекерен бер-береңә көсләп тағып булмай, мине ғазаплаған мәсьәлә башҡа берәүгә ул тиклем ғазаплы мәсьәлә булып тормаҫҡа ла мөмкин. Һөҙөмтәлә өс кешенән торған уртаҡ авторҙың фекере бик уртаса булып сығыуы ла бар, һәр кемдең тормош материалы һәм уны ижади фекерләүе лә төрлөсә.

Беҙҙең бик оҙаҡ бәхәсләшеп ултырыуҙарҙың файҙаһы аҙ күренә. Сөнки ҡайһы саҡта беҙ бер-беребеҙҙе аңларға ла теләмәйбеҙ. Шунлыҡтан пьеса бик ҡыйын яҙыла. Әлбиттә, бергәләп эшләүҙең бик ҡыҙыҡ мәлдәре лә бар, шулай ҙа күңелһеҙ күренештәре күберәк.

Ғөмүмән алғанда, мин шундай фекергә килдем: тәжрибә өсөн был бик ҡыҙыҡ хеҙмәттәшлек, ләкин ысын ижад эше өсөн бындай коллектив хеҙмәттәшлек алымы үҙен аҡламай. Бәлки яңылышамдыр, ләкин, минеңсә, өс кеше бөтә яҡтан да камил булған бер баланы тыуҙыра алмайҙыр инде.

Бының өсөн башҡа шарттар кәрәк. Минең ҡарашым шулай.

Ләкин Рафаэль мине:

— Был һинең яҡтан намыҫһыҙлыҡ буласаҡ. Һин ишәк кеүек ҡарышаһың да тораһың. Үҙеңдең эгоистик маҡсаттан ғына сығып эш итәһең, — тип ғәйепләне. Мин:

— Комплементтарың өсөн рәхмәт, ләкин ундай хәлдә минең был эштә ҡатнашыуымдың кәрәге лә юҡ, — тип башҡаса бәхәсләшеп торманым.

Был, әлбиттә, бик көлкө хәл.

Ләкин арыу уҡ күңелһеҙ ҙә...

26/VIII.

Рафаэлдең малайы бар!.. Өфөнән телефон аша һөйләштеләр. Беҙ Марат менән башта ышанмай торҙоҡ. Шаярталыр тип уйланыҡ.

Ләкин малай ысынлап та тыуған икән!

— Донъяға бер Нур өҫтәлде! — тигән Рафаэль. Һәм Марат пьесаның II шаршауының икенсе күренешен тамамлаған биткә: «Малай тыуҙы» тип яҙып ҡуйҙы. Миңә был әҙерәк булып тойолдо ла: «Рафаэлдең малайы бар. 26/VIII.61.» тип өҫтәп яҙып, ике яҡтан кәртәләп ҡуйҙым.

— Уратып алма инде һин, йә үлеп ҡуйыр, — тине атаһы.

Шулай итеп, Рафаэль дә атай хәҙер. Шифыр яҙып төш юрауы ысынға әйләнде. «Профессорҙар: малай бик ныҡ ҡысҡырҙы, шәп булыр малай, тигәндәр», — тине Рафаэль. Ләкин малайҙы йыуырға беҙҙең беребеҙҙең дә рәте юҡ. Шәп булған булыр ине! Атай кешене ҡоро ҡул менән генә ҡотланыҡ.

* * *

Икенсе пәрҙәнең икенсе күренеше бөттө. Мин яҙған өлөштө редакторлағанда тағы ла бик ҡаты бәхәсләштек. Ниндәйҙер һөйләм төҙәтеү манияһы беҙҙә. Миңә, әлбиттә, үҙем яҙғанды боҙҙороу бик йәл. Теш-тырнағың менән һуғышырға тура килә.

Сөнки Юлдаштың характеры миңә асығыраҡ күренә. Юлдаштың һүҙҙәре минең үҙ һүҙҙәрем. Уларҙың подтексы бик ҡатмарлы ауыл тормошона бәйләнгән. Сәхнә сюжетына улар яҡып керергә тырыша. Юлдаш ауыл тормошо менән тулы. Шунлыҡтан Рафаэль менән Маратҡа ул һөйләгән һүҙҙәр ятыраҡ булып тойола. Икенсенән, был өлөштө бергәләп яҙмағанлыҡтан, Юлдаш менән Зөһрә диалогтары уларға еңел генә килеп кергән кеүек. Ә миңә был бик аңлайышлы. Әгәр ҙә беҙ өсөбөҙ ҙә был күренештә параллель рәүештә айырым яҙһаҡ, иң уңышлы килеп сыҡҡан вариантты һайлап алған булыр инек, уны башҡа варианттар менән тулыландыра алыр инек. Ләкин былай эшләнмәне. Юлдаш менән Зөһрә сәхнәһенә күскәс, беҙ туҡталып ҡалдыҡ. Шунлыҡтан миңә айырым яҙырға тура килде. Һәм бына ул күренеш дөйөм текст эсендә үгәйһетелеп кенә ҡабул ителде. Мин хатта уны яҙғаныма ла үкенеп ҡуйҙым. Яҙмай ҙа мөмкин түгел ине, әлбиттә. Артабанғы үҫеш, бөтә сюжет һыҙығы, характерҙар логикаһы был күренешкә бәйләнгән һәм уға пьесаның ҙур нагрузкаһы төшә.

27/VIII.

Өсөнсө күренешкә күстек. Дауыл Шәрәфи, Алма ханым Нур эшләгән редакцияға киләләр. Дауыл Шәрәфиҙең редактор менән һөйләшеүе бик уңышлы килеп сыҡты. Инде Алма ханымдың һөйләшәһе ҡалды. Ул да яҡшы сығасаҡ. Ләкин бына Нур менән редактор Айтуғановты биреү ҡыйын. Ыңғай образдарҙы биреү киреләренә ҡарағанда бик ауыр. Сөнки кешеләге иң яҡшы сифаттар тәрәндә ята, ә кире яҡтар, кәбәк кеүек, өҫкә ҡалҡып ҡына тора. Уларҙы күреүе лә аңһат. Яҙыусының таланты ла нәҡ кешенең байлығын асып бирә белеүҙәлер инде. Быныңөсөн үҙеңә бай булырға кәрәк. Ләкин беҙҙә әле был байлыҡ бик самалы. Шуға күрә лә ыңғай образдар беҙҙең яланғасыраҡ, бер яҡлыраҡ килеп сыға...

Бай булғанда ғына яңы, үҙ һүҙеңде әйтергә мөмкин.

* * *

Төн. Пришвинды уҡыйым. Ғәжәп: Пришвинды уҡып сығайым әле, тип уҡыған кеше, минеңсә, урманды күрәйем әле, тип урман ситенән үтеп киткән кеше менән бер — ул урманды күрмәй.

Урманды күрер өсөн урманда йөрөргә кәрәк, һәр бер ағас менән һөйләшергә, уның хәлен һорашырға һәм бергәләп хыялланырға кәрәк.

* * *

Беҙҙең менән бер өҫтәлдә ултырған тәңкитсе ҡатын — Вишневская, мин Пришвин тураһында һорағас:

— Мин Пришвинды уҡырға яратмайым, — тине. Шунан һуң ғына беҙ уның менән һөйләшә башланыҡ.

Сөнки унда тәүҙә мин уйлаған йәшерен бер донъя, серле бер матурлыҡ ҡалманы, ул ҡатын минең күҙ алдыма яп-яланғас булып килеп баҫты.

Ашағанда ла китап уҡып ултырыуына ҡарата мин:

— Бөтә был ашамлыҡтарҙы ла, китаптарҙы ла ашҡаҙанығыҙ нисек һеңдереп өлгөрә? — тинем.

Ул көлдө лә ҡуйҙы. Аҙаҡ аҡланған һымаҡ:

— Һеҙ быға иғтибар итмәгеҙ, — тине. — Мин шулай өйрәгәнмен инде.

Әлбиттә, ул Пришвинды бер ҡасан да уҡый алмаясаҡ. Сөнки Пришвинды ашҡаҙан менән уҡып булмай. Бындай уҡыусы урманға барһа ла урмандан тик бәшмәктәр генә алып ҡайтасаҡ. Урман уға китап түгел, бәшмәк үҫә торған урын ғына.

Ә мин Пришвин менән һөйләшәм һәм был һөйләшеүҙең шатлығын бөтә кешеләргә лә еткергем килә. Пришвиндың васыяты ла шул.

* * *

Иду вперед силой веры своей в лучшее, а путь расчищаю сомнением (Пришвин).

* * *

В мыслях у людей бывают сомнения, предваряющие утверждение: человек сомневается лично, а к людям приходит уже со своим утверждением. Так точно и в жизни у людей бывают постоянно несчастья, и сильные люди переносят их легко, скрывая от людей, как сомнения.

Но когда после неудачи приходит радость, то кажется всегда, что эта радость нашлась не только для себя, а годится для всех. И радостный счастливый человек бьет в барабан.

Так, сомнения, неудачи, несчастья, уродства — все это переносится лично, скрывается и отмирает. А утверждения, находки, удачи, победы, красоты, рождение человека — это все сбегается, как ручьи, и образует силу жизнеутверждения.

Когда я открыл в себе способность писать, я так обрадовался этому, что потом долго был убежден, будто нашел для каждого несчастного одинокого человека радостный выход в люди, в свет. Это открытие и легло в основу жизнеутверждения, которому посвящены все мои сочинения.

* * *

Әгәр ҙә тәнҡитсе ҡатынға был васыят ят булһа, ниңә ул тәнҡитсе?

Фәжәп — әҙәбиәттә әле күпме әҙәбиәт тирәһендә йөрөүселәр. Әгәр улар уҡыусы ғына булһалар, әҙәбиәткә файҙанан башҡа бер ниндәй ҙә зыян булмаҫ ине, ләкин уларҙың әҙәбиәтсе булыуы — зыян...

* * *

28/VIII.

Ҡыҙ яратҡан кешеһенән ҡаса, тиҙәр. Ләкин был дөрөҫ түгел, яратҡан кешеңә ынтылаһың. Ынтылыу ғына— яратыу. Ә ҡасыу — ул яратыуға әҙерлек йәки ярата башлау ғына әле. Мөхәббәт уғы башта артҡа сигә, артҡа сиккәндә кереш нығыраҡ тартыла һәм уҡ та алға нығыраҡ ынтыла.

Яңы фекер ҙә шулай артҡа китеп, шикләнеүҙән тыуа. Башҡаларға күсеү өсөн дә тәүҙә ул шик аҫтына алына, яңы фекер һәр саҡ бәхәс тыуҙыра. Бәхәсһеҙ фекер ҙә булмай.

Бәхәстә хәҡиҡәт тыуа. Кешенең ижады ул тәбиғәт менән бәхәсләшеү.

Бөгөн иртәнән кискә тиклем эшләнек. Иң яҡшы көн булды был. Шәрәфи редакцияға килеп, Айтуғанов менән һөйләшеп бөтөр-бөтмәҫтән, Алма ханым килеп керҙе. Ярайһы ғына һөйләшә!.. Ире тураһында гәзиткә яҙып сығыуҙарын һорай, һорай

ғына түгел, талап итә. Редактор менән һөйләшеүгә өйҙә (I пәрҙәнең II күренеше) бик ныҡ әҙерләнеп килгән; үҙенең тормошон баштан-аяҡ һөйләп бирә һәм шәхси тормошҡа йәмәғәтселектең ҡыҫылыуын даулай. Редактор Айтуғанов бик аҡыллы яуап ҡайтара. Әҙәби газеталағы «Можно ли войти без стука» тигән мәҡәлә был һөйләшеүгә төп нигеҙ булып ятты. Кис төнгө икегә тиклем Дауыл Шәрәфи тураһында һөйләштек. Күңелле хәҙер. Эшләге килеп тора. Дауыл Шәрәфи менән Нур редактор бүлмәһенә шаулашып килеп керәләр. Нур уның шиғырҙарын юҡҡа сығара, полосанан алып ташлау өсөн һуғыш.

Шәрәфигә ҡайҙан шиғыр табырға? Кем шиғырын ҡулланырға? Булған халтураны бирергәме, әллә уйлап сығарырғамы?

Бер көн мин Яҡуп Ҡолмойҙоң шиғырҙарын уҡып ултырғайным. Күңелгә оҡшаған бер генә шиғырын да тапманым. Уларҙы уҡығас, шиғыр ҙа яҙғы килмәй...

Бына әле Шәрәфигә шиғыр кәрәк булғас, мин:

— Әллә Ҡолмойҙоң берәй шиғырын урлайбыҙмы? — тип тәҡдим иттем. — Теләһә ниндәй шиғырын алһаң да ярай, бер ҙә һайлап-нитеп тораһы юҡ. Теләһә папкаһы менән алып кер!...

— Аҙаҡ үҙенә шул сәхнәне уҡып күрһәтер инек, — тине Марат. — Нишләр ине икән?

— Үлер ине, — тип ҡуйҙы Рафаэль.

Шулай булғас, урламаҫҡа булдыҡ. Тик торғанда, ниңә кеше үлтерергә? Бөтәбеҙ ҙә унан тинләп-һумлап булһа ла аҡса алып торабыҙ бит әле!..

— Әйҙә Шәрәфигә үҙебеҙ яҙайыҡ шиғырҙы, — тине Марат. Мин баш тарттым. Бөтә көсөңдө биреп тырышһаң да, Шәрәфи кеүек яҙып булмаҫ.

— Ярар, үҙем яҙырмын, — тип, Марат үҙе генә яҙырға булды. Сығарһа, ул сығарыр.

29/VIII.

Ләкин Шәрәфи шиғырҙарын редакцияла тикшермәҫкә булдыҡ. Уларҙы инде әҙәби бүлек советында тикшергәндәр. Шунан һуң ул:

— Был шиғырҙарҙы юҡҡа сығарыусылар— ҡәбәхәт кешеләр, — тигән.

(Бер ваҡыт Әхтәм Ихсандың шиғырҙарын Союзда тикшергәндән һуң Ихсан шулай тигән)

Быны Рафаэль һөйләне. Шәрәфи шиғырҙарын секретариат аша үткәргән булып сыға.

Күренеш шунда туҡтап ҡалды. Сөнки иртән Маратты Мәскәүгә оҙаттыҡ. Аҡса алырға китте. Мин, берәй аҡты алып ҡайт, тип заказ биреп ҡалдым.

Ҡайтып килгәндә юлда Маша ҡаршы осраны. Әллә ҡайҙан уҡ балҡып килә. Рафаэль уны күреү менән:

— Һин алға китә тор, мин һөйләшеп алайым әле. Бөгөн берәй төрлө осрашырға кәрәк, — тип Маша артынан Пришвин күпере яғына урман араһына кереп китте. Мин алға китә торҙом, ул ҡыуып еткәс:

— Ниңә китмәнең бергә? — тинем.

— Ниңә китергә? — тип ҡуйҙы Рафаэль, ҡоро ғына итеп. Йәнәһе уныһында һинең эшең юҡ, үҙебеҙ беләбеҙ, тигәнде аңлата инде был.

* * *

Китапханаға инеп китаптар аҡтарырға тотондоҡ. Сөнки ҡайтып еткәндә генә Владимир Федорович Пименов — «Театр» журналының баш редакторы осраны ла, беҙҙең пьеса менән ҡыҙыҡһынып, бер аҙ сәхнә төҙөлөшө тураһында һөйләшеп торҙоҡ. Ҡыҙыҡ ҡына һөйләшеү булды. Аталар һәм балалар мөнәсәбәтенә ҡағылып, хәҙерге пьесаларҙағы штампҡа туҡталды.

— Юҡ, беҙҙең пьеса улай түгел, бына яҙып бөтәйек әле, уҡып сығырбыҙ һеҙгә, — тинек.

Владимир Федорович беҙҙең менән бер өҫтәлдә ултыра. Бик күркәм, ябай кеше. Луговской тибындараҡ. Ләкин беребеҙ ҙә уның пьесаларын уҡымағанбыҙ. Шуның өсөн хатта һөйләшеүе лә уңайһыҙ. Пьесаны уға уҡығанға тиклем уның берәй үҙ пьесаһын уҡып сығырға булдыҡ. Ләкин китапханала уның пьесаларын тапманыҡ, «Театр» журналында мәҡәләләре генә бар. Мин журналдың 1960 йылғы 9-сы номерынан уның «Театр администраторы» тигән мәҡәләһен уҡырға керештем. Бик ҡыҙыҡ мәсьәлә күтәрелгән.

Рафаэль Афиногеновты аҡтарып ултырғанда бик ҡыҙыҡлы бер материалға тап булды. Быға тиклем әле был хаҡта бер кемдең дә әйткәне юҡ ине.

А. Н. Афиногеновтың 1957 йылда «Искусство» баҫмаһында сыҡҡан «Статьи, дневники, письма. Воспоминания» тигән китабында Ромен Ролландың 1935 йыл 24 сентябрҙә Вильневтан Афиногеновҡа яҙған бер хаты бар. Шул хаттың аҙағында Ромен Роллан беҙҙең башҡорт театры һәм Башҡортостан тураһында яҙа.

Тулыһынса күсереп ҡуям: «Я хочу просить Вас передать мою благодарность — несколько запоздалую — коллективу Государственного башкирского театра, а в частности его директору товарищу Мифтакову (Мифтаховты шулай хата баҫҡандар шикелле), и заведующему художественной частью товарищу Магадееву. 26 июня, спустя несколько дней после моего приезда в Москву, они прислали мне письмо с приглашением посетить какой-либо их спектакль, но я не смог быть у них. Количество полученных впоследствии писем помешало мне тут же ответить им, позднее я не знал куда адресовать ответ. Сегодня мне пришла в голову мысль просить ваш журнал передать им его. Скажите, с какой симпатией я отношусь к ним и как мне радостно видеть расцвет жизни башкирского народа, и в частности его искусство. Я слышал также об их крупных успехах в области экономики и шлю им свои поздравления.

Р. Р. (Роллан)

* * *

— Быны бит Әбүбәкер Усманов табып алһа, бына бындай мәкәлә яҙып сығыр ине! — тинем мин Рафаэлгә.

— Яҙыр ине! — тип ҡуйҙы ул да. Унан һуң Афиногеновтың сәхнә тураһындағы бик ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәрен, фекерҙәрен уҡып ултырҙыҡ.

— Был пьеса беҙҙе әллә ниндәй донъяға индереп бара әле, — тине Рафаэль.

Ысынлап та, был пьеса яҙыла башлау менән беҙ үҙебеҙ ҙә үҫә башланыҡ, башҡаса күҙәтә, башҡаса күрә, башҡаса аңлай башланыҡ, шикелле. Пьеса барып сыҡмаған хәлдә лә ул беҙгә бер ҙур мәктәп буласаҡ.

* * *

Киске аштан һуң Рафаэль менән байтаҡ ҡына һөйләшеп йоронөк. Урманды сығып, ауылға киткән юл буйлап барғанда, яңғыҙ ғына өйгә күрһәтеп:

— Ҡыш Мостай ағай менән йөрөгәндә, Мостай ағай, шул өйгә керәһе килә, ти торғайны, — тине Рафаэль.

— Ауыл ситендәге, йә яңғыҙ ултырған өй шулай тарта ла тора шул. Ауыл ситендәге өйҙә бит йә бик ярлы, йә бик бай кеше йәшәй, — тинем мин.

— Ә беҙҙең ауылда иң ситтәге өйҙә Закирьян мулла тигән кеше йәшәй, — тип Рафаэль бик ҡыҙыҡ бер кеше тураһында һөйләп алып китте.

Аҡса алыштырған ваҡытта 30 мең аҡсаһы булған, ә үҙе ғүмер буйы фәҡир төҫкә кереп йәшәгән. Өҫтөнә-башына ямаулы кейем кейгән, кейеме яңы булһа ла, ямау һалдырып йөрөй торған булған. Өйөнә уның кеше кермәй, урамына ла кеше аяғы баҫмай, әгәр ҙә берәй кеше йомош менән килһә, Закирьян ҡарт уға ҡаршы сығып, йомошон тышта ғына йомошлап, килгән кешене кире бороп ебәрә икән. Ә өйөнә барып ингәндә, өй эсе шул тиклем ярлы, ҡаҡ өҫтәл менән ҡаҡ һикенән, самауыр менән мендәрҙәрҙән башҡа артыҡ бер ни ҙә юҡ. Стенала һарғайып бөткән ҡағыҙға Ҡөрьәндән бер сүрә яҙып ҡуйылған һәм өйҙә бөтәһе лә шиндәйҙер тып-тын бикле тормош менән йәшәйҙәр, кеше менән артыҡ һөйләшеп бармайҙар. Ҡатыны ла, улы ла шулай. Улы үҙе хәҙер ВУЗ бөтөрөп, Өфөлә университетта хатта уҡытып та йөрөй. Рафаэль уны урамда осратып:

— Кәбир, өйләнмәнеңме әле һин? — тип һорағас, өйләнмәнем тигән. Ә үҙе өйләнгән икән. Бәләкәй саҡта бик яҡшы уҡыған, ауылдағы ҡаршы тау башына сығып, үҙе гел китаптар уҡып ята торған булған, ләкин бер кем менән дә аралашмаған. Хәҙер Кәбир ауылға ҡайтһа, ауыл халҡы уның ҡайтыуын үҙе киткәс кенә белеп ҡала икән. Ғәжәп типтар бит!.. Тот та бер хикәйә яҙ. Ни өсөн шулай улар? Сәбәбе ниҙә? Рафаэлдән һорашып ҡараным, белмәй.

— Яҙ һин бер хикәйә, һорашып белер кәрәк улар хаҡында, — тинем мин.

— Белеп тә булмай шул уларҙы, — тине Рафаэль һәм Шакирьяндың Әхмәт бабай менән бергә таҡта ярып йөрөгән бер ваҡиғаһын һөйләне. Әхмәт бабай уның ярылып бөткән ҡоршаулы ҡупыһын бер саҡ Әйгә ырғытып, уға тимер һауыт та бирep ҡараған икән.

Бына шул хаҡта бик оҙаҡ һөйләшеп йөрөнөк тә, ҡайтҡас Корнейчуктың «Платон Кречет» тигән пьесаһын уҡырға керештек. Башҡа бик күп фекерҙәр килде...

30/VIII.

Марат бөгөн дә ҡайтманы.

Тәүҙә пьесаға тотонмай, уны көтөп йөрөнөк. Файконың «Концерт» драмаһын уҡый башланыҡ та, уны ла ташлап ҡуйҙыҡ. Бик күп һүҙле, ялҡытҡыс. Бер ни ҙә бирмәй.

Үҙебеҙҙең пьесаның Нур менән иҫерек һөйләшеүенә яңы өлөш өҫтәнек — бик яҡшы килеп сыҡты, буғай. Мин Урмановты геолог-инженер итергә, уның эҙләнеүсе булыуын күрһәтергә тәҡдим иттем. Рафаэль риза булды. Был ғаиләләге ҡаршылыҡтарҙы асырға ла киңерәк мөмкинлек бирә. Ғүмер буйы таш аҡтарып, хазиналар эҙләгән ире Алма ханым өсөн бәхет эҙләмәй. Иҫеректең уны «алтын кеше» тип атауы ла тәбиғиерәк килеп сыға. Иҫеректең теленә фотокорреспондент Әхмәтьяновтың «точно» һүҙен индерҙек. Иң мәғәнәле урындарҙа «точно» тип ҡуя. Механик рәүештә — үҙен дурак тигәнгә лә «точно!» ти!.. Редакциялағы бәхәсте ике вариантта яҙҙыҡ.

* * *

Эш туҡмағы аш инде.

Аш булһа эшләп була.

* * *

Сәнғәттә ҡыҫҡалыҡ йоҙроҡ кеүек булырға тейеш: йоҙроҡ нығыраҡ тейә.

* * *

31/VIII.

Тойғо — сәскә, фекер — уның емеше. Улар бер-береһенән башҡа йәшәмәй һәм был мөмкин дә түгел. Аҡылһыҙ тойғо — ҡыҫыр сәскә, тойғоһоҙ аҡыл — ҡороған емеш ул. Ҡыҫыр сәскә емеш бирмәгән кеүек, ҡороған емештән дә сәскә үҫеп сыҡмай.

Поэзия — минең өсөн аҡыллы тойғо йәки тойғоло фекер. Шунда ғына уның тормошо һәм тормошҡа кәрәклеге.

23/II.

Ил төҫө

Шағирҙың ни тиклем үҙ иленең тауышы булырға мөмкинлеген Рәсүл Ғамзатов миҫалында күргәргә мөмкин. Мин, мәҫәлән, Дағстанды элек Шамиль исеменән башҡа күҙ алдыма килтерә алмаһам, хәҙер уны Рәсүл Ғамзатов исеменән башҡа күҙ алдыма килтерә алмайым. Ул Дағстан поэзияһына азатлыҡ бирҙе, ул Советтар Союзын яулап алды.

Был яу Шамилдең ғазауат һуғышынан көслөрәк, әлбиттә.

Күп халыҡтар башҡортто Салауат исеме менән белә. Ләкин башҡорт поэзияһын күҙ алдына килтерерлек исем хәҙергә юҡ әле, ул исем тыуыр тип ышанғы килә.

М. Кәрим? Нишләптер уны бик ҙур шағир итеп танығанда ла илебеҙ төҫө итеп танып булмай әле. Халыҡтың аһ-зары юҡ унда. Бәлки шунда уның оло талантының трагедияһылыр ҙа? Башҡорт шиғырын ул иң юғары баҫҡыҫҡа күтәреүсе булһа ла, ысын башҡорт халыҡ шағиры була алғаны юҡ. Президиум уға исемде Башҡортостан халыҡ шағиры тип дөрөҫ биргән.

Ләкин донъяла башҡорт халыҡ шағиры ла тыуырға тейеш.

26/II.

Поэзияла һүҙҙең тәҫьир көсө нәмәлә һуң? Ул йәнһеҙ нәмәне лә йәнле итә, иң абстракт төшөнсәне лә конкрет төшөнсәгә әйләндерә.

Был халыҡ ижадында ла, хәҙерге поэзияла ла шулай.

Уралҡайым, һинән ҡырҡып алһам,
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ талдарың,

Тамып та ғына ҡала ҡырҡҡан саҡта
Яуҙа үлгән батыр ҡандары.

Йәки Урал-тау халыҡ ижадында «Уралып ятҡан Урал» ул. Күҙ алдына Урал тере булып килеп баҫа. Быны ысын шағир бик яҡшы тоя.

Урал үҙе боҙ диңгеҙҙең һыуын эсә,
Ә ҡойроғо ҡойона Аралда.
Быуаттарҙың баш өҫтөнән ҡарап,
Мәғрур тора бында ҡаялар...

Хатта абстракт «быуат» та бында бит башлы күҙле йән эйәһенә әйләнә.

Поэзия мөмкин булмаған нәмәне мөмкин итә. Йәки Мостайҙа ул Европа менән Азияны пар ҡанаты итеп осҡан гигант ҡошҡа әйләнә. Һәм беҙ уға ышанмайынса булдыра алмайбыҙ.

Шунда ла инде һүҙҙең шиғри көсө һәм ул онотолмай.

Һүҙҙәр менән тере, әлбиттә.

К. Паустовский: «Ничто так не омолаживает слова, как поэзия» тип бик дөрөҫ әйтте.

27/II.

Культ ул уға культлаштырыусы кешелә генә түгел, ә беҙҙең үҙебеҙҙә.

Беҙ әле һаман да «царистәр» бит, уйлап ҡарағанда. Табынабыҙ төрлө йәшел йорттарҙағы кешеләргә, ә улар шул уҡ әсәнән тыуған, бер үк тишектән сыҡҡан кешеләр.

Йәшел йорттан киткәс, бөтәһе лә йәйәү йөрөй, сиратта тора, кеше менән ҡул биреп күрешә, йылмая. Әҙәмсә ҡылана. Ә тегендә ултырғанда ул алла, ете ҡат күктә ултырған кеүек. Етәкселәр менән халыҡ араһында милиционерҙар һ. б. тора. Был иң зарарлы кәртә.

Газеталар яҙмышы ҡурҡыныс аҫтында ҡалғас, шул йортҡа барҙыҡ, ә беҙҙең менән һөйләшеп тә торманылар.

Унтер Пришибеев кеүек: «Таралығыҙ!» — ғына тинеләр. Әҙәм көлкөһө. Ә беҙ бит — яҙыусылар, журналистар — партияның ярҙамсыһы тип аталған кешеләр. Шул кешеләрҙе эт кеүек ҡыуып ебәрҙеләр. Был көндө мин ғүмеремдә онота алмам.

Ә, һүҙҙә «Халыҡ!» — тиҙәр.

Ләкин хәҙер халыҡ һарыҡ түгел инде. Ул күп һүҙҙе бар тип тә белмәй. Ә Ленин бөтә Рәсәйҙе ҡабул иткән, тыңлаған, аңлатҡан. Ҡайҙа ул күмәк Ленин? Ә ул «беҙ һәләк булһаҡ, ни бары бюрократиянан ғына һәләк буласаҡбыҙ» тигән. Һәм был бюрократия бик күп тере фекерҙе, тере эште һәләк итә. Беҙҙең иң аяныслы, иң ҙур етешһеҙлегебеҙ был, трагедиябыҙ был.

Ә яҙыусы был хаҡта фекер әйтә алмай. Бынығы тағы ла аянысыраҡ.

Ҡасан был Ҡытай стенаһы емерелер, былай булһа? Был бит хатта иң намыҫлы кешеләрҙе лә ике йөҙлө Янус булырға мәжбүр итә.

Редакцияға хәҙер бик йыш элекке министрҙар советы председателенең урынбаҫары Сәйетбатталов килә, көлә, күрешә, һин дә мин. Хатта «Әҙәби телде ҡайһы гәзит-журналды уҡып ныҡыраҡ өйрәнергә була?» тип кәңәш тә һорай. Хәҙер килеп иҫенә төшкән!.. Ә бит шул кеше бынан бер йыл элек кенә беҙҙең мәҙәниәттең яҙмышын хәл итеп ултыра ине!..

Артистар уның приемныйында көтөп ултырғанда:

Министрҙар Советында
Сәйебаттал ултыра,
Уның өсөн булды ни ҙә,
Булманы ни культура!

тип бик дөрөҫ йырлаған икән. Ә бит шундайҙар беҙҙә иҫ киткес күп. Уларҙы кәметеү бик ҡыйын. Әҙәбиәт быны күрергә тейеш. Әгәр ул быны күрмәһә, һуғыша торған әҙәбиәт түгел, ә фәхишә әҙәбиәт кенә.

Был фәхишәлектән нисек ҡотолорға? Бына ошо һорау тынғы бирмәй миңә! Культ ул мыйыҡлы бесәй генә түгел шул. Культ ул беҙҙең үҙебеҙҙә — ҡаныбыҙға һеңгән.

29/II.

Фәжәп хәл: поэзия беҙҙең шиғыр китаптарында китаптың йә уртаһынан ғына, йә бөтөнләй һуңғы битенән башлана (Даянда). (F. Әмириҙә — уртанан).

Хәҙер беҙҙең поэзияның тарихына тарихи ҡараш ташларға мөмкиндер инде. Ә хәҙер ул тарих бар. Беҙҙең ул тарихты ла 37-се йыл алып киткәйне бит? Даян бер мәл уны кемдер Тютчев шәкерте тип иҫәпләгәнгә хәтере ҡалған:

— Мин Тютчевты уҡығаным да юҡ, белмәйем дә, — тигәйне. Минең оялып ултырғаным ғына иҫтә.

Тютчевты белмәйенсә, ғөмүмән, шиғыр яҙып маташыуҙың мәғәнәһе бармы икән? Уны ла белмәгәс, шағир булыуҙың кәрәге лә юҡ, минеңсә.

8/III.

Иртән Әхмәт (Лотфуллин) килде. Мәскәүҙән ҡайтҡан. Күргәҙмәгә ҡуйған картиналары тураһында яҡшы фекерҙәр ишетһә лә, Мәскәүгә хәтере ҡалған бик.

— Ысын сәнғәт юҡ, сауҙа ғына бар, — тигән фекергә килеп ҡайтҡан.

Сиратҡа тороп балаларға печенье алдыҡ та оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Әхмәттең яратҡан һүҙе: «Стимул юҡ эшләргә».

9/III.

Шевченконың «Васыят»ын тәржемә иттем. Үҙемсә, был — хәҙергә башҡортса иң яҡшы тәржемә. Дейҙтең мәҡәләһен дә Шевченконың 150 йыллығы өсөн үҙем тәржемәләнем. Арыу ғына әҙәм теленсә булды, шикелле.

10/III.

«Васыят» сыҡты. Мәҡәлә лә. Миәссәрҙең тәржемәләре лә арыу ғына. Ләкин еңелерәк. Шевченконың рухын, үҙен тойоп етмәй. Шулай ҙа төрлө Хөрмәттәрҙең булдыҡһыҙ тәржемәләре менән сағыштырғыһыҙ. Ни тиһәң дә Миәссәр — шағир, тик юҡҡа әрәм була, ваҡлана.

13/IV.

Йыйылыш булды. Һаман да минең докладты тылҡыйҙар. Тимәк, юҡты һөйләмәгәнмен икән. Електәренә үткән тегеләрҙең. Кимдәрҙә Әнүр менән бер яртыны һуҡтыҡ та, ҡайтҡас, урманға сығып, яҙҙың һуңғы ҡарына һуҙылып ятып, йондоҙҙар менән һөйләшеп яттым.

Йәл, тик Рәшит Ниғмәти ағай юҡ, ул да минең менән һуҙылып ятып берәй аҡыл әйтер ине, исмаһам. Ул юҡ шул. Дөрөҫ һүҙ ҙә юҡ әлегә. Шул хаҡта ағастар менән һөйләштек.

Шулай ҙа дөрөҫ һүҙ буласаҡ. Ул тыуып килә. Баязит Бикбай ағай, иҫерек булһа ла, берҙән бер дөрөҫ һүҙ әйтеп ҡалдырҙы. Уның был көнөн онотмаҫҡа кәрәк. Ә ҡалғаны ҡарға ҡаҡырығына ла тормай. Беҙҙә әле әҙәбиәт өсөн йәшәгән кеше бик аҙ, бөтәһе лә тип әйтерлек әҙәбиәттә тик үҙҙәре өсөн генә йәшәй. Сәғит ҡарт та төлкө ҡойроғон ҡайҙа тығырға белмәй. Шулай әрәм булыр инде бахырың, Оронбор төлкөһө, әҙәм көлкөһө. Шулай ҙа был көн күңелле — кемдең кем икәнен яҡшы белеп ҡалаһың. Ғәйнан ағай ҙа үҙ исеме тураһында ҡайғыртып, химия тураһында олоғара бер лекция уҡып торасы. Марат фәхишә ҡатындар һымаҡ йылмайып ултырған була, ә Рафаэль башын аҫҡа эйгән дә тик ултыра.

Яу киткәс кенә батыр, аҡыллы, философ. Ә кәрәк саҡта ауыҙынан бер тамсы һүҙ ҙә ҡайтарып ала алмаҫһың. Юҡ инде, әҙәбиәттә һуғышыу былай булмай. Әйтерһең, әҙәбиәт шунда ултырыусы әҙәбиәтселәр өсөн генә. Ә халыҡ ул кемдең күңелендә бар, кемдең күңелендә юҡ — уны бер Аллаһы тәғәлә үҙе генә белә. Һай, ҡасан тыуыр икән беҙҙең үҙ ир-егеттәребеҙ? Ҡыҫҡаһы — эшләргә, эшләргә кәрәк. Ә мин күпме ваҡыт инде эшләмәйем...

27/I.

ЧЕРЧИЛЛЬ

Черчилль үлде —
һуңғы арыҫланы
Үлеп барған иҫке донъяның.
Черчилль үлде.
Ташҡа Черчилль инде,
Был донъяға сыҡмаҫ уянып...
Черчилль үлде.
Черчилль беҙҙең илде
Бишегендә саҡта быуырға
Теләһә лә,
Гитлер ҡулын һуҙғас,
Ярҙам итте уны ҡыуырға.
Уны ҡыуғас — беҙҙе быуырға.
Күпте белде, тик белмәне шуны
Үлгәс әле шуға ғәрләнә —
Бишектәге бала ир арыҫлан була,
Бишектәге бишкә төрләнә.
Коньягына сумып батты Черчилль,
Теләгәйне ерҙе ҡосорға.
Тик үҙенә етте ҡолас ҡәбер
Теге донъяларға — осорға...
Бишектәге бала ир уртаһы булды,
Тиҙҙән тотор ерҙе усында.
Шулай ҙа ул, ысын дошманым, тип
Бер таш ҡуйыр башы осонда...

25/II.

Беҙ, башҡорттар, аттарыбыҙ һымаҡ,
Үтә сабыр, үтә түҙемле.
Әммә, бер ярһыһаҡ, тотоп тыйып булмай,
Тартһаң да ныҡ теҙгенде...

Алдан юл ярып барған кешегә һәр саҡ ҡыйын, ләкин күп ваҡыт күңелһеҙ түгел. Уның ҡайғыһы ла, ҡыуанысы ла ҙурыраҡ. Ә әҙер юл — бөтә яҡтан да еңелерәк.

* * *

Мине алдарлыҡ бул, тик үҙеңде алдама. Ә мин алданмаҫҡа тырышырмын. Был икебеҙ өсөн дә үҫеш, шатлыҡ булыр.

26/II.

Зәңгәр күҙле хыялым,
Ҡайҙа һин еремдә,
Әллә һин, айҙаһың?

17/III.

Яҙыусылар Союзында — РСФСР яҙыусыларының II съезы тураһында асыҡ партия йыйылышы.

М. Шолоховтың инеш һүҙе — принципиаль, теләктәшлек тураһында.

Бер полк кешеләре һымаҡ һөйләшергә саҡырҙы.

Леонид Леонов доклады. Башҡортостандан 27 кеше ҡатнашты. РСФСР-ҙа 3000-дән ашыу яҙыусы. 156 телдә әҙәбиәт тыуҙырыла. Соболев докладында РСФСР халыҡтарының әҙәбиәтенә айырыуса киң туҡталды. «Рус түгелмен, ләкин россиян мин» девизы.

Башҡорт әҙәбиәтенә айырыуса ҙур иғтибар булды. I пленум да беҙҙә үткәйне. РСФСР яҙыусылар союзы ойоштороло ғас уҡ.

Беҙҙең яҙыусыларҙың әҫәрҙәренә ныҡ туҡталып китте.

Поэзиянан прозаға күскән шағирҙар: М. Кәрим, Б. Бикбай, Х. Ғиләжев, Ә. Атнабаев һ. б. Поэзия — бөтә әҙәбиәттең ата-әсәһе. Ҙур проза әҫәрҙәренең иң яҡшы әҙерлек мәктәбе.

* * *

Тәржемәгә ҙур урын. Оригиналдың рухын аңлау — тәржемәсе өсөн иң мөһиме. Р. Ғамзатовтың тәржемәселәре: Гребнев, Козловский. Шундай дуҫлыҡ булғанда ғына ысын тәржемә булырға мөмкин.

* * *

Ойоштороу эштәре: выездной пленумдар, кәңәшмәләр. Ләкин был ғына етмәй, яңы саралар эҙләргә кәрәк.

Йәш кеше винтик булырға теләмәй, хужа булырға теләй, ләкин һүҙ ташҡынында сәсәп ҡала. Тәжрибәле оло кешенән ҡурҡыу бар. Коммунисҡа ҡаршы ҡуйыла (Аксеновта).

Ә. Бикчәнтәевтең әҫәрҙәре был тәңгәлдә ыңғай яҡтан иҫкә алына («Ожмах вәғәҙә итмәйем»).

Хеҙмәт темаһы докладта ҙур урын алып торҙо. «Бруски»ҙан алып «Хлеб — имя существительное»ға тиклем ентекле анализ. Колхоз тормошо шулай ҙа беҙҙә бөтә дөрөҫлөгө менән яҡтыртылғаны юҡ әле.

Ф. Әсәнов — кукуруз һәм мөхәббәт — үтелгән этап бит был. З. Нурғәлин күккә күтәреп сыҡты. Профессиональ анализ яһаманы.

Һуғыш темаһы. Тәүге һәм һуңғы һалдаттың үлеүе тураһында бер кем дә белмәй әле. Ә улар араһында донъя яҙмышын хәл иткән оло трагедия — героизм булды.

Үлгәндәрҙе онотмаҫҡа. Беҙҙең яҙыусылар күбеһе һуғышта ҡатнашты. Ә яҙған әҫәрҙәр бик аҙ. Үҙ ваҡытында дөрөҫ установка булманы.

Башҡорт атлы дивизияһы темаһы тапланды, бысратылды. Ә яҙаһы күпме батырлыҡтар бар. 250 герой биргән Башҡортостан.

Сығыштар: Сергей Васильевич Смирнов литинститут хаҡында оло һүҙ ҡуҙғатты. Кәрәк һүҙ. Әҙәби һәйкәлдәр, ҡомартҡылар тураһында ҙур һүҙ булды.

РСФСР Яҙыусылар Союзы — тәржемә үҙәге булырға тейеш.

Книпович беҙҙең әҙәбиәтте бик ентекләп уҡып бара. Сергей Наровчатов эстрада шағирҙары тураһында бик яҡшылап һөйләне. Ҡатын-ҡыҙҙар шиғриәтенә ода. Иң самими поэзия. Фашизмды еңеүгә 20 йыл тулыуҙы яңы әҫәрҙәр менән ҡаршыларға кәрәк беҙгә. Йырҙар, иҫтәлектәр, поэмалар булырға тейеш. Май номерын еңеүгә арнарға. Мемориаль таҡталар ҡуйылһын.

һуғышсы шағирҙарҙың ҙур кисәһен үткәрергә кәрәк. Совет власының 50 йыллығын, Лениндың 90 йыллығын ҡаршылау. Совет власы өсөн көрәш, граждандар һуғышы, коллективлашыу, бишйыллыҡтар тураһында беҙгә күп һәм яҡшы әҫәрҙәр яҙаһы бар әле. Ленин образы хаҡында беҙгә бик ныҡ уйланырлыҡ. Яуаплы һәм изге тема. Әхләки хоҡуҡ булыу ҙа кәрәк. Ленин поэзияла ла, сәхнәлә лә йәшәргә тейеш.

Б. Бикбай. Съезд бик эшлекле үтте. Йомғаҡ яһаманы, бурыстар билдәләне. Съезд ҡуйған мәсьәләләргә иғтибарҙы тупларға кәрәк. Маҡсат айырым кешеһеке генә булып ҡалмаһан. 50 йыллыҡҡа, Лениндың 100 йыллығына көстө һалырға. Октябрь революцияһы башҡорт халҡына нәмә бирҙе? — бына шул хаҡта яҙырға кәрәк. Руденконың «Башҡорттар» китабының юлы буйынса үтеп, бөгөнгө башҡорттар тураһында бер документаль-художестволы китап яҙырға ине. Бригада менән сығырға кәрәк быныҡ өсөн. Башҡортостанда революция осорон «Тихий Дон» һымаҡ әҫәрҙә күрһәтергә ине. Хөкүмәт эсендә һуғыш, ниндәй ҡатмарлы осор бит. Мин шул осорға арналған опера яҙырға йыйынам.

З. Биишева. Күптән уйлап йөрөгән нәмәләрҙе әйтергә ине. Әйтмәһәң, эс ташып бара. Эш тураһында һөйләшәбеҙ икән, һыйлап-һыйпап ҡына үтмәй, ҡайһы бер нәмәләрҙе ҡуҙғатып та китергә кәрәк.

Съезда ҡайһы бер ултырыштарҙы М. Кәрим алып барҙы. Ҡыуанып, ғорурланып ултырҙыҡ.

Ғамзатов, Кулиев, Шогенцоков, Кешоковтар рәтендә тора. Ләкин М. Кәрим ҡайһы саҡта тамырҙарын онотоп китә. Үҙе генә хәл итеп ташлай. Ш.Мәхмүтовтың китабын шулай кәңәшләшмәй сығарып ебәрҙе. Бабаев, беҙгә башҡорттар шулай кешенән (Н. Хикмәт, П. Неруда) алып яҙа икән, тигән һүҙ әйтте. Ауыр булды күңелгә.

Шулай уҡ докладтағы ҡайһы бер тезистар менән килешеп булмай. Партия матбуғатында Динис Исламов кеүектәрҙе иҫкә алырға мөмкин инеме һуң? Х. Ғиләжевте телгә алырлыҡ түгел инеме? Был коллегиаль хәл ителһен ине. Атнабай, Асанбай, Динистар кеүек мине «әҙәбиәт тыуҙырыусылар» рәтенә тыҡмай, мине ҡарттар итеп кенә телгә алалар. Дашкин ~~мине~~ баҫмай. Йәштәр газетаһында нишләп һине баҫайыҡ, ти. Ә үҙе Бикҡәнтәйҙе баҫып ҡына тора. Ә минең «Уйҙар, уйҙар» шулай йәштәр тураһында булып та, баҫылманы. Трилогия

тураһында. Ҡатын-ҡыҙ яҙа икән, уға иғтибарлыраҡ булырға кәрәк. Кетлинская был хаҡта яҡшы әйтте. Кешенең рухын күтәреү ҙур эш. Ләкин эшләгән эште күрмәү, кәмһетеү тенденцияһы бар беҙҙә. Мостай. «Бына трилогияң»ды телгә алдыҡ, яҙ инде», — ти. Яҙырмын, Алла бирһә. Октябрҙең 50 йыллығына.

М. Ғәйнуллин. Партийность — верный компас. Соболев был хаҡта бик ныҡ әйтеп китте. Шолоховтың соцреализмды билдәлеүе — великолепный билдәләү. Партиялылыҡ — халыҡсанлыҡ. Образдарҙың интеллектуаль кимәле — иң мөһиме бөгөн. Ул яҙыусының үҙ кимәленән килә. Философик, идеологик кимәле түбән икән, ул нисек уҡыусыны ҡәнәғәтләндерһен. Ғаилә ығы-зығылары тирәһендә генә уралыу менән ҙур фекер әйтеп булмай. Күләгәле яҡтарҙы күберәк күрһәтәбеҙ. Динис Исламов иҫерек, енси яҡтан аҙғын кешеләрҙе күберәк яҙа. Уны съезда әйтеп китеү кәрәкмәҫ ине.

Драма әҫәрҙәренә хужаһыҙлыҡ ҡарашы йәшәп килә. Театр — великая кафедра. Үрнәк алырлыҡ герой быйыл сәхнәлә юҡ беҙҙең.

Бөйөк Ватан һуғышы темаһы аҡ тап булып ҡала. Ә беҙҙең яҙыусылар күбеһе ҡатнашҡан. Фронтта ла, тылда ла халыҡ подвигын күрһәтергә кәрәк.

Ғ. Әмири. Съезд — трамплин. Еңеү көнө етеп килә. Ватан һуғышы прозала етерлек дәрәжәлә яҡтыртылмаған. Бик сәйер булһа ла. 1946 йылда генерал бүлмәһенә йыйылып, союз председателе: «Хәҙер һуғыш бөттө, тыныс тормош тураһында яҙығыҙ», — тип установка бирҙе. Был ҙур зыян итте. Сталинград тураһында китап яҙып бөттөм. Лениндың «Если идеи овладевают массами — это величайшая сила», — тигән фекерен һалырға тырыштым. Был «Катюша»ларҙан көслө.

Йәштәрҙе тәрбиәләү бик кәрәк.

Байраҡ — сепрәк — символ.

Башҡорт ғәскәрҙәренең Петроградты һаҡлауы тураһында яҙмаҡсы булам. 50 йыллыҡҡа яртыһын яҙырмын тип уйлайым. Яҙыусылар Союзы — хоккей командаһы түгел. Ләкин беҙгә лә «нервыны һаҡлап» еңеп сығырға кәрәк. Мы легко ранимы.

Сәйфуллин. Башҡорт әҙәбиәте киң аренаға сыҡты. Съезда был хаҡта әйтелде. Журнал 20 меңдән ашып китте. «Совет Башҡортостаны»ның тиражы артты. Талап ҙур. Тәрбиәләгән әҫәрҙәр генә киң тарала.

Н. Мусин — талантлы яҙыусы — ашыға, ҡабалана. Х. Ғилә-жевтең «Погонһыҙ һалдаттар»ы бик оҡшаны. Шул заман күҙ алдына килеп баҫа.

Театр яңы бинаға күскәс, репертуар икеләтә артыҡ булырға тейеш. Ләкин драматургтар яҙмай. Балалар яҙыусыларына ла үпкә ҙур. Тәнҡитселәр күҙәтеүҙәр генә яһай.

Ғ. Әхмәтшин. Йыйылышта һөйләшәбеҙ ҙә артабан идара яҙыусының ижады менән ҡыҙыҡһынмай. Конкретно бер ни ҙә эшләнмәй. Мин 20 йыллыҡҡа пьеса яҙып бөттөм, роман өҫтөндә эшләйем. Театр — драматург — Яҙыусылар Союзы араһында бәйләнеш юҡ. Театр баһаһы һәр саҡ дөрөҫ булмай. Секция илке-һалҡы ғына эшләй. Худсовет эшләмәй.

Вәзих Исхаҡов. Октябрь революцияһы. Вострецов — (Бирск) четырежды Герой гражданской войны. Мәктәптәрҙә Башҡортостан геройҙары тураһында һүҙ юҡ. Блюхер («Железный поток»). Генерал Шайморатов — Башҡорт атлы дивизияһы. Нәшриәт ыжламай.

Ә. Мирзаһитов. 50 йыллыҡ, 100 йыллыҡ — календарҙағы ҡыҙыл бит кенә түгел. Ишморатов «Дауылға ҡаршы». Петроградты яҡлау тураһында.

С. Агиш. Мин дә Баязит телендә һөйләйем. Беҙ съезда булмаһаҡ та съезд менән йәшәнек.

Йыллыҡтар. Бурыстарҙың иң тәүгеһе — оҫталыҡ. Ләкин оҫталыҡ етешмәй әле. Производство тураһында булһа, әҫәр аҡһаҡ сюжетҡә ҡоролһа, мөхәббәт темаһы ҡултыҡ таяғы булып йөрөй. Йәки мөхәббәт тураһында булһа, производство — ҡултыҡ таяғы. Ләкин был органик рәүештә бәйләнгән булырға тейеш. Башҡорт дивизияһы төҙөлгәндә, беҙ 3 яҙыусы ебәрҙек: Карнай, Ихсан, Насыров. Карнай ҡайтманы, роман да ҡайтманы. Карнай ҡалды, роман да ҡалды. Ә ҡайтҡандар РСФСР съезы барғанда беҙҙең яҙыусыларҙы РСФСР Верховный суды судить итеп ята. Башҡортостан съезы барғанда БАССР Верховный суды бара ине. Бына мин СССР съезына барам, унда ла шул суд булыр микән. Был Иван Иванович менән Иван Никифорович ҡасанға тиклем ыҙғышыр икән. Бынан көлөү өсөн Гоголь кәрәк бит. Тәржемә башҡортсанан кәрәк, ә руссанан башҡортсаға кәрәкме? Юҡ. Хәҙер русса яҡшы беләләр. (??)

Р. Бикбаев. Каруанһарай. Йыйынға бөтәһен дә йыйып, төйнәп бирергә ине. Характер, портрет, яҙмыштарҙы ла. Ә һин

барыһын айырым-айырым биреп, тарҡатаһың. Халыҡтың Каруанһарай һалыуға төрлө-төрлө реакцияһы күренмәй. Шунда уҡ ҡаршылыҡтарҙың төйөнөн һалып ҡуйырға ине. Ә былай ҡағылып китеү генә ярамаҫ. Ауылдан-ауылға хәбәрҙәр, ҡарттарҙың кәңәш-төңәш итеүе, аң-белемгә ынтылышы, ғөмүмән, тарихи мөнәсәбәт булһын ине. Дәүләт әһәмиәтендәге эш бит.

* * *

Байҙың байлығы бөтһә лә ҡырҡ йылһыҙ даны бөтмәҫ, ти (Ишбулды ағай).

3/VII.

Һәнәк. Ер елəккәйҙəре лə беште инде. Арыш та емлəнеп килə. Бойҙай əле яңы баш ҡоҫкан. Ҡурай елəге өлгөрөп килə. Һандуғастар тынып ҡалһа ла, һаман да əле урман яңғыратып кəкүк саҡыра. Тиҙҙəн инде тамағына арыш башағы тығылып, ул да һаҡауланыр. Йəй уртаһы етте. Һыу кис тə, иртəн дə, көндөҙ ҙə йылы — йəнең теләгəнсə һыу инергə була. Ҡарағат, елəк өҙөп ашайһың, балтырғанын, ҡуҙғалағын ауыҙ итəһең. Иң йəмле һəм шул уҡ ваҡытта йəйҙең дə ғүмере ҡыҫҡа икəнен тоя башлап торған саҡ. Тəбиғəтте минең əле былай ентекləп күҙəткəнем юҡ ине. Ə быйыл бөтə йəйем тəбиғəт ҡосағында үтə. Уйланырға ла күп сəбəптəр бар. Яҙырлыҡ нəмəлəр ҙə баштан ашҡан. Ləкин мин көндəлек кенə лə алып бара алмам— иң үкенеслеһе шул. Ə яҙырға, һəр бер күренештe ҡағыҙға теркəп барырға ине. Ни хəл итəһең — булмай.

Беҙҙең экспедиция Беүə буйҙарын йөрөп сыҡҡас, яңынан Танып буйына, Мəнəккə ҡайтты. Мин дə, бер аҙна Өфөлə, Шишмəлə йөрөп килгəс, яңынан экспедицияға ҡайттым. Ғəжəп— мин был тиклем дə археология менəн мауығып китермен тип башыма ла килтергəнем юҡ ине. Шулай итеп мин археолог булып барам, буғай.

Экспедицияға яңы кешеləр өҫтəлде. Мəскəү антропологы Мария Степановна Акимова етəкселегендə МДУ студенттары — Наташа Прокурина, Надя Заводник, Оля Жукованан тыш беҙгə тағы Өфө студенттары өҫтəлде. Хəҙергə əле исемдəре генə билдəле: Харис Закиров, Дамир, Лена Кремер, Рəйсə Ғабитова, Людмила.

Быныңөҫтəүенə бөгөн генə Нефтекамск уҡыусылары ла килеп ҡушылды. Лагерь хəҙер тотош бер археологтар ҡалаһына əүерелде — ҡайнап тора. Нияз менəн «Алға» колхозына барып,

көтөүҙән бер тәкә тотоп алып ҡайттыҡ. Иртәгә ныҡлы эш башланасаҡ. Беҙ киткәс, Байтимер ҡалған группа менән ҡаҙына торғас, бер баш һөйәгенә юлыҡҡан. Иртәгә асып ҡараясаҡбыҙ. Тәкә алырға барышлай беҙ ҙә Редькино ауылы эргәһендә Таныптың бейек текә яр башында бер ҡәберлек табып ҡайттыҡ. Иртән тәкә һуйғас, бәлки, беҙ шунда юлланырбыҙ.

Лагерҙа бөгөн төндә ЧП булған. Ләкин кемдең кем менән булғанлығы әлегә билдәһеҙ. Мин яланда аҙашып йөрөп ҡайтҡас, усаҡ янында сыланған кейемде киптереп, таң атҡансы һөйләшеп ултырҙыҡ. Исеме Өмөт булһа ла бер ниндәй ҙә өмөт юҡ. Тиҙҙән инде улар беҙҙән китәсәк. Мин эйәһеҙ тороп ҡалдым хәҙергә. Шуға, ахыры, үтә эс боша. Мин ҡайтып киткәс, уға, ахыры, эйәләре табылған... Бөгөн хатта һөйләшергә һүҙ ҙә юҡ. Етмәһә, иртән уң аяҡтың бәпсәй бармағын ҡаймыҡтырып, уныһы һыҙлай. Егетлек күрһәтергә тырышыуҙан, әлбиттә. Өҫтәүенә шул уң аяҡҡа Б-ҙең итеген яңылыш кейеп алғанмын да аяҡ ҡыҫылып этләнергә тура килде. Фөмүмән, ауыр көн. Ел иҫә, урман һалҡын тауыш сығарып шаулай. Хатта кис һыу ҙа инмәнем. Ярай, ҡайтып ятыуҙан яҡшыһы булмаҫ. Эңер төштө, яҙыуы ла мөмкин түгел...

Кис. Усаҡ янындағы һөйләшеүҙәр.

Р: — Һеҙ нәмә алып ҡайттығыҙ? — тине.

— Тәкә, — тинем мин.

— Күрһәт әле, — ти был.

Бер аҙ арттан барҙы ла кире боролдо. Мин бер ни ҙә өндәшмәнем. Серле бер ынтылыш булды был. Фөмүмән, беҙҙең төйәк сер менән тулы.

Өмөтөм янына теге һандуғас килеп һайрарға тотондо. Ҡулы менән хатта иң нескә йөрәк ҡылдарыңа ҡағылырға әҙер. Кисә ике хикәйәһен уҡып ҡаңғыртҡайны, бөгөн ошо ҡылдарға ҡағыла. Күңелдә әллә ниндәй юшҡын ултырып ҡалды. Бына усаҡ янына раскладушканы ҡуйҙым да, башҡалар йоҡларға таралғас, ҡайһы бер нәмәләрҙе теркәп ҡуйырға булдым. Усаҡ яҡтыһында бик иркенләп яҙып була икән. Б. минең койкала палаткала ята. Ә мин уныҡында, усаҡ янында.

Аҫас япраҡтары бер өҙлөкһөҙ аҡҡан һыу тирмәне һымаҡ шаулап тора. Тирә-яҡта ниндәйҙер көҙгө моңһоулоҡ бөгөн.

Өмөтөм яныма килеп теге һандуғас хаҡында:

— Ниндәй егет ул, нормальныймы? — тип һораны. Мин бары:

— Кисә хикәйә уҡыған егет, — тип кенә яуап бирҙем дә өндәшмәнем.

Өфөнән юлда килгәндәге күренеш күҙ алдында. Төн. Күк күкрәй.

4/VII.

Көн байыны. Ер өҫтөн шәфәҡ алһыулығы ғына яҡтыртып тора. Үләндәргә хуш еҫтәрен аңҡытып ысыҡ төштө. Һыйыҡ эңер эсендә тирә-яҡтағы урман өҫтөнән мәсет манаралары һымаҡ теркеләр генә, юғарыраҡ ҡалҡынып һаман да көн яҡтылығын һемереп ҡалырға тырышҡандай, бер урында ҡатып ҡалған. Аяҡ аҫты һил, тынлыҡ тиһәң хата булыр. Яҡын арала ғына ер һутын эсеп туя алмаған буровойҙар геүелдәй. Уларға тартай, бытбылдыҡ тауышы һәм ниндәйҙер кескәй ҡошсоҡтоң нескә, хәүефле, болоҡһоу сипылдауы ҡушыла. Һауа тулы һуҡыр себен, серәкәйҙәр безелдәүе. Яңы ғына яҡты йондоҙ ҡалҡҡан. Башҡа йондоҙҙарҙың сығырға тырышыуы ла һиҙелмәй әле.

25/IX.

Бөтә эште эшләп бөтөп булмай. Учалыға тайҙым! Ленинградҡа китер алдынан ултырып уйланып алырға кәрәк.

Күпме генә барам тиһәм дә, күпме генә саҡырһалар ҙа, был районға күпме генә иҫтәлектәр бәйләнмәһен, 37 йәшкә етеп, әле һаман Учалыны күргән юҡ!..

Былтыр Спартак Ильясов күпме саҡырғайны, быйыл — Венера Бузыҡаева. Ләкин бер ниндәй ҙә мөмкинлек булманы. Эш, мәшәҡәт, ығы-зығы... Ҡасан шуларҙың бөтәһенән дә айнып, үҙ иркеңдә булып, үҙең теләгән ерҙә үҙеңсә генә йөрөргә инде!

Ирәмәл менеп булмаҫ, бәлки; шулай ҙа Учалының үҙен күрергә кәрәк! Унан һуң, бәлки, Әбйәлил менән Баймаҡҡа ла һуғылып үтеп булыр. Йәшлек, студентлыҡ эҙҙәренән!

Учалы — беҙҙең журналды иң күп алдырған райондарҙан. Журналға яҙышыусылар ҙа байтаҡ ҡына. Рәмзилә Хисаметдинова, Әсмә Мөсәлимова, Иҡдисамов ҡарт. Унан һуң Абрар Ғабдрахманов, Нәжиә Аллаярова, Марат Минһажетдинов — бөтәһе лә шул төйәктән бит!.. Унан һуң тәбиғәте, йырҙары, һөйләше — бөтәһе лә беҙҙең районға — Салауатҡа— яҡын.

Салауат–Учалы поездына ултырҙыҡ та киттек. Лина (Владелина Якубова — беҙҙең фотокорреспондент) купейныйға билет алып ҡуйған икән. Шуның өсөн артыҡ мәшәҡәт булманы. Тик редакциянан шифырҙар дәфтәре менән административ бүленеш китабын алырға онотҡанмын.

Станцияға төшкәндә, Лина вокзалда ине инде. Ул да яңы ғына төшкән. Вокзалда Ихсан Әхмәтйәнов осраны. Ҡырып тейәп алған. Иглинға ҡайтып бара. Иглиндан йөрөп эшләй. Эргәһендә бер аҫыл ҡошо ла бар ине. Ихсан булһын да буш йөрөһөн, имеш!.. Юлда һөйләшеп барырбыҙ, исмаһам, тип, бергә ултырырға булдыҡ. Ләкин проводница ултыртмай маташты. Төрлөсә һайрап,

бригадирҙы күндерҙек тә, вагонға инеп, мин алған яртыны бүҫкәрттек. Егетем минең юлдашҡа ҡармаҡ һала башланы. Мин, буфетҡа һыра алырға ингәндә, әҙерәк сама белергә, ханымыбыҙҙың бик әҙәпле булыуы тураһында тегенең ҡолағына тишеп ҡуйҙым. Теге бер-ике анекдоттан ары китә алманы. Былай ҙа ҡырын тейәгән кеше, арыу уҡ «ләх» булып, төшөп ҡалды. «Уңғанһулға һуғылма, туп-тура өйөңә ҡайт», — тип оҙаттым. «Ярар», — тигән булды. Шиғырҙары хаҡында ыңғай һүҙ ишеткәс, бик тәьҫирләнеп китте. «Һеҙҙең журналда баҫылмаған хәлдә лә, һинең шул һүҙеңде ишетеү еткән миңә», — тине.

Уны оҙатҡас, бер аҙ һөйләшеп ултырҙыҡ та, йоҡлап алырға булдыҡ. Ҡайҙа инде ул йоҡо: уйҙар, уйҙар, уйҙар һәм билдәһеҙлек... Шулай ҙа, бик арығанлыҡтан, йоҡлап киткәнмен. Хатта Златоуст менән Оло Мейәсте үтеп киткәнде лә һиҙмәгәнмен. II-Мейәскә етер алдан ғына уянып киттем.

26/IX.

Көн ҡояшлы, ләкин көҙгөсә һалҡын. Мейәс вокзалында поезд оҙаҡ ҡына туҡталып торҙо. Вагондан төшөп, ары-бире йөрөп, үҙемдең бала саҡ тороп ҡалған Мейәсте күрмәй үтеүемә бик үкенеп алдым.

Бала саҡ. Атай — командир. Беҙ бөтә ғаиләбеҙ менән Мейәстә торабыҙ. Оло күл буйы. Инәйем шул күл мәкеһе алдында кер йыуа, дөрөҫөрәге — сайҡай. Һалҡын ҡыш, мәке ауыҙынан быу борҡора...

Икенсе күренеш — ҡышҡы буран. Мин уйнарға сығып, әллә ҡайҙа китеп, аҙашҡанмын. Тик бороңғо сиркәү манараһына ҡарап ҡына үҙебеҙҙең торған урамды килеп таптым...

Өсөнсө күренеш — күл буйындағы яланғас, беләү ташлы тау. Шул тауҙан мин беләү таштар эҙләйем. Ни өсөн эҙләгәнмендер, матур булғанғамы, кәрәк булғандырмы, уныһын Аллаһы тәғәлә үҙе генә белә. Ләкин ғүмеремдә әле бер нәмәне лә шул тиклем тырышып эҙләгәнемде хәтерләмәйем...

Дүртенсе күренеш — беҙ торған өйҙөң баҙына төшөп, инәйем менән бергәләп хужа ҡарсыҡтың өрөк һыуын эсеү. Донъяла шул өрөк һыуынан да тәмле эсемлек эскәнем юҡ, буғай. Бәлки, был шулай тойолалыр ғына. Тик шуныһы ғәжәп: ни өсөн инәйем шул өрөк һыуын үҙе ҡайнатмайынса, минең менән бергәләп баҙға төшөп ултырҙы икән?.. Ғәжәп хәл!.. Күрәһең, һәр тыйылған нәмә

тәмлерәк булалыр. Аҙаҡ минең өсөн бик күп тыйылған китаптар — иң тәмлеһе ине бит. Д. Юлтый, А. Таһиров, Б. Хәсән, «Һәнәк һуғышы» (Ғ. Йәһүзин), «Октябрь» журналы, «Совет әҙәбиәте», Ш. Бабич шиғырҙары, Хәсән Туфан. Хөсәйен бабайҙың өй башынан япраҡтар аҫтында ятҡан китаптарҙы Дыуан-Мәсет-ленән Арҡауылға тиклем йөкмәп алып ҡайтыу!.. Уларҙы бөтә кешенән йәшереп, үҙем йүнләп алған май шәм йәки усаҡ яҡтыһында йотлоғоп уҡыу. Инәйемдең әрләү-янауҙары һәм тәүге шиғырҙар. Улар ҙа тыйылған өсөн иң изге нәмәгә әйләнделәр. Бәлки, мин шағир ҙа булмағанмындыр, бары тик үҙ һүҙле, үтә үҙһүҙле булған өсөн генә яҙғанмындыр?

Ә, бәлки, Мәүлиҙә — тәүге балалыҡ мөхәббәте генә яҙҙырғандыр уларҙы. Бәлки, әле һаман ошо тойғом яҙҙыралыр? Бәлки, бәлки...

Мәүлиҙә!.. Учалы тигән һүҙ ҙә ошо исем менән бәйләнгән бит. Мәүлиҙә, миңә тәүге шиғри һүҙҙәр яҙған һәм мине лә яуап шиғырҙары яҙҙырған Мәүлиҙә, ете йыл хаттар яҙышҡандан һуң, һуңғы ҡабат мин уны ошо ергә — Учалының Мулдаҡай ауылына уҡытырға оҙатып ебәргәндән һуң, иргә сығып, өс көн дә тормай, Учалы ҡайынына аҫылынып үлгән Мәүлиҙә!.. Минең уға яҙған шиғырҙар дәфтәрен миңә Мәскәүгә һалып ебәргән уҡытыусы дуҫы кем булды икән?

Уның үлем сәбәбе лә, бөтәһе лә әле сер миңә. Ҡәберенә, исмаһам, бер ҡайын ултыртып китергә ине, ләкин ваҡыт бик сикле. Эш муйындан!.. Йәй йөрөйһө ине, иркенләп!.. Үҙ иркеңдә!..

Ҡайҙа ул ирек? Ҡайҙа һинең теләгеңде хуп күргән кешеләр? Һәм бөтәһен дә нисек аңлатып торорға? Кемгә кәрәге бар уның?

Һәм иң тәүге иҫтәлек!..

Сасҡау ҡыш. Сана аҫтарында ҡар шығырҙай; шығырҙамай, ә сыйылдай. Мине ҙур толопҡа төрөп ултыртҡандар. Бәләкәй генә толоп тишегенән икһеҙ-сикһеҙ зәп-зәңгәр күк күренә. Тишектән бармаҡты тығып, ҡайырыбыраҡ ҡараһаң, ботаҡтарын ҡар һығылдырған ҡарағайҙар күренә, ә тағын да ныҡлабыраҡ тырышып, артҡа боролоп ҡараһаң, ауыҙ-морандарына боҙор-соҡтар туңған ат баштары, ап-аҡ керпектәре аша һөҙөлөп ҡараған ат күҙҙәре.

Был — минең донъяны тәү башлап асыуым ине. Ләкин был донъяны асыуға атаң-әсәң дә ҡаршы килгәс, был донъяны күреү миңә иң ҡәҙерлеһе ине. Һәм, моғайын, ул миңә иң ҡәҙерлеһе булып ҡалыр. Арҡауыл, Ҡаратау, Учалы, Мейәс юлы!..

Бына шул юлға мин тағы аяҡ баҫтым. Элекке күк донъя кеүек күк күҙҙәр ҙә минең эргәлә. Тик шуныһы йәл: көҙ, бәлки, ғүмер көҙөлөр... Тыйылған көҙ!..

26/IX.

Райкомда. Беренсе секретарь Байрамғол совхозына киткән. Пропаганда бүлеге инструкторы Фәтҡуллин Рәшит Вафиевич менән һөйләшеп, Байрамғолдан машина саҡырттырҙыҡ.

Пропаганда бүлеге мөдире — Шакиров Марат Ниғмәтйән улы. Йор һүзле башҡорт. Минең менән бер йылғы (1932 йылда тыуған). Райондың хужалығы, алдынғы кешеләре менән таныштырҙы.

Ахун ауылы — райондан иң алдынғы. «Ҡыҙыл партизан» колхозы гәзит-журналдарға яҙылыуҙы 24 сентябргә үк бөтөргән. Райондағы берҙән-бер мишәр ауылы. Иң ҙур ауылдарҙан. Халҡы — 4 мең! Граждандар һуғышында бик актив ҡатнашҡандар. Шуға ла колхоздары «Ҡыҙыл партизан» исемен йөрөтә. Ләкин үҙенсә бик ҡаршылыҡлы. Иң дини һәм иң культуралы ауыл. Мәсеттәре әле һаман эшләй.

Учалы районы гәзит-журналдарға яҙылыу буйынса 25-се урында. «Башҡортостан ҡыҙы»н 1969 йылдың башына 1686, бөгөнгө көндә 1800 экземпляр алдыра. 2000-гә еткерергә кәрәк.

Учалы районында бөтәһе — 70396 кеше булып, шуларҙың 43870-е ауылда, 26526-һы Учалы ҡалаһында йәшәй.

Төп халҡы — башҡорт, типтәр ауылы, бер мишәр ауылы — Ахун.

1971.

Нәмә ул шиғыр?

Шиғыр яратмаусыға хат. Күптән түгел шиғыр тураһында һүҙ сыҡҡас, шундай һүҙҙе ишетергә тура килде:

— Нәмәгә ул шиғыр? һ.б.

Шиғырҙы шағирҙар тыуҙырмаған. Уны халыҡ тыуҙырған. Шиғырҙың милли тамырҙары эпостар, ҡобайырҙар, мәҡәл һәм әйтемдәр, йомаҡтар, йырҙар, һамаҡтар, сеңләүҙәр, таҡмаҡтар.

«Орсоҡ йыры», «Урал йыры» — кәрәк булған, сығарған. Беҙҙә поэзия, шиғыр тигән һүҙҙәр ҙә булмаған, ә шиғыр – поэзия булған. Сәсәндәр тураһында. Ул — тарих, халыҡтың эске донъяһы, рухи мәҙәниәте. Уның кеше мал булыр ине. Башҡа халыҡтарҙың ижады. Донъя мәҙәниәте. Был мәҙәниәтте танымаҫҡа мөмкин, күрмәҫкә, ләкин бынан ул юҡ тигән һүҙ түгел бит. Ҡояштан ҡапланырға мөмкин, ләкин ҡояшты ҡаплау мөмкин түгел. Ул йәшәй һәм йәшәр.

Салауат шиғырҙары. Тәүге шағир ҙа Салауат.

Кеше бишектә ятҡанда уҡ йыр, шиғыр тыңлай башлай. Хатта «Ҡөрьән»дә бит шиғыр менән яҙылған.

Кешеләр тереләй ергә күмелгәндә йыр йырлап үлгәндәр. Уля Громова — «Демон». Кешелек тормошоноң оло бер донъяһы ул, тимәк.

Шекспир драмаларын шиғыр менән яҙған. Хатта Карл Лукрецийҙың фәнни трактаттары шиғыр, Ломоносовтың «О пользе стекла»һы шиғыр менән яҙылған. Фән һәм поэзия.

Халыҡ әкиәттәрендә фәнни гипотезалар.

Поэзиянан фән тыуған. Әлишер Навои, боронғо гректар. Поэзия прозала ла бар. Энгельс Бальзак тураһында. Жюль Верн һәм фән. «Интернационал» — шиғыр бит, ниңә уны һыҙып ташламайһың. XXII съезд аяғөҫтө тороп иң тәүҙә ошо йырҙы йырланы.

Марсельеза, Варшавянка. Улар — революция ҡоралы. Һин шуны күрмәҫкә теләр инеңме?

Винтовкалар менән бергә шифыр китаптарын һалып киттеләр. Музейҙа яралы китаптар һаҡлана. Фронт хаттары бәйет, шифырҙар менән яҙылды. Ни өсөн? Уның, тимәк, көсө бар. Гагарин, Титов уны ғаләмгә алып менделәр.

* * *

Әҙәбиәтте өс кеше тыуҙыра: береһе уларҙың — яҙыусы (мин), икенсеһе — уҡыусы (һин), өсөнсөһө (третий не всегда лишний) — ул тәнһитсе (Мин, һин, Мөхәмәтәмин!).

Уҡыусы яҙыусының яҙғанын бер тынала уҡыһын өсөн яҙыусы бөтә ғүмерен бирә. Бер сәғәттә уҡып сыҡҡан өсөн, бәлки, бер йыл ултырырға кәрәктер.

Ә ул — тәнһитсе? Нимәгә? Артыҡ кеше булмаһын өсөн ул яҙыусының теләгән һәм уҡыусының талабын белергә тейеш. Посредник.

Әгәр ҙә шулай булмаһа, уның кәрәге юҡ.

Шуның өсөн ул яҙыусынан да, уҡыусынан да күберәк белергә тейеш. Уҡыусыны ла, яҙыусыны ла өйрәтһен. Бының өсөн ул яҙыусы әҫәренең көсө кимәлендә яҙа белһен, үҙенең юҡ-бар фекерен яҙыусыға таҡмаһын.

Китаптар тураһында

Китап уҡыу — ижади процесс. Үҙ фекерҙәреңдең уяныуы, үҙең дә һиҙмәҫтән үҫеүең.

Иван Петрович Павлов писал в своей биографии:

«Под влиянием литературы 60-х годов, в особенности Писарева, наши умственные интересы обратились в сторону естествознания, и многие из нас, и я в том числе, решили изучать в университете естественные науки».

Книга часто открывает подростку его призвание. Константин Эдуардович Циолковский с самого детства, с тех пор как прочитал книгу «Из пушки на Луну» Жюля Верна, мечтал о межпланетных полетах.

«Книга быть может наиболее сложное, великое чудо из всех чудес, сотворенных человеком на пути к его счастью и могуществу будущего».

Нельзя лишать людей этого чуда.

27/III.

Есениндың «Фарсы моңдары»н «Ағиҙел»гә илтеп бирҙем. Абдулхаҡҡа, Йыһатҡа, Ярулла ағайға көсләп тигәндәй уҡып сыҡтым.

Редакция: ләм-мим!.. Әйтерһең, минең тәржемәләр хаҡында һүҙ әйтеү ҙә тыйылған. Стәрлетамаҡ ваҡиғаһынан һуң бөтәһе лә шаңҡып ҡалған. С. Галин һатҡан Әсхәл өсөн...

— Ормайбыҙ ҙа беҙ, бына шиғыр яҙабыҙ, исмаһам! — тип үҙ-үҙемде йыуатҡан булдым.

Хәким ағай Игебайға: «Маҡтама күҙ алдында!» — тине. Игебай: «Япраҡ хәтле булһа ла изгелек эшләйем һиңә,» — тигән була.

28/III.

Радио: «Горький һәм музыка».

1. Бетховен квартеты.
2. Бородиндың «Урта Азияла» тигән музыкаль картинаһы.
3. Римский-Корсаков — «Шәһрәзада».
4. Стравинский — «Изге яҙ» («Весна священная»).

Ғәжәп әйберҙәр! Күҙ алдына ниндәй генә күренештәр килмәй! Музыкала ниндәй һүрәтләү көсө!..

Сүл йыры
(Бородиндың «Урта Азия» моңон тыңлағанда)

Икһеҙ-сикһеҙ ҡайнар ҡом сахраһын
Ярып бара сабыр дөйәләр.
Сүл елдәре тауҙай ҡом тулҡынын
Аяҡ аҫтарына өйәләр.

Ҡом да ҡом тик! Ҡом-йыландар
Табындарын сағып ҡалалар.
Тик дөйәләр ғорур, тыныс атлай,
Төшкән кеүек ергә Аллалар.
Мәңгелекте ялғап мәңгелеккә,
Тартылғанда каруан сылбыры,
Төштәремдә сихри илдәр күреп,
Тыңлап барам мин дә сүл йырын.

28/III.

Эйе, был күренеш минең бөгөнгө хәлгә бик ауаздаш. Күңелдә ысынлап та ҡом бураны, әсенеү ҙә яңғыҙлыҡ һағышы ғына... Ярай әле, иң ауыр көндәр «Фарсы моңдары» менән үтеп китте.

Ниндәй ваҡлыҡ, ике йөҙлөлөк, әшәкелек кешелә! Бер ҡар йомғағы тәгәрәп төшһә, тауға әйләнә, төймә лә дөйә булып күренә. «Демагог, милләтсе, скандалист, вождизм, авантюрист, самореклама...» Ниндәй генә ҡушаматтар тағылманы бер бездарь арҡаһында. Эй замана, эй кешеләр!.. Түҙ, йөрәгем, түҙ!.. Эшләргә, ең һыҙғанып, теште ҡыҫып эшләргә лә эшләргә кәрәк — берҙән-бер йыуаныс шул ғына.

Әгәр минең бер генә шифыр юлым ҡалмаған хәлдә лә, тәржемәләрем ҡалырға хаҡлы!

Үҙеңде-үҙең юҡ итеүҙән бер кемгә лә файҙа юҡ. Ауыҙың тулы ҡан булһа ла, дошманың алдында төкөрөргә ярамай.

Яҡшылыҡ эшлә лә һыуға һал, халыҡ белмәһә, балыҡ белер... Хаҡ әйтелгән һүҙҙәр!

30/III.

Төнгө 2-се ярты. Шеллиҙең был шифырын эле институтта саҡта «Клим Самгиндың тормошон» уҡып йөрөгәндә үк тәржемә итергә дәртләнеп ҡуйғайным, нисә йыл үтте! — булманы. Бөгөн килеп бер тындан тәржемә иттем. Күрәһең, был кәйефте — бушлыҡ кәйефен — 17 йыл буйы көтөргә кәрәк булған!.. Бер кешенең ғүмере! Салауат тыуыуы, хәҙер инде атаһына ҡул күтәрерлек булыуы. Кисә кис көрмәкләшеп алдыҡ. Минең көс әсәһе менән икеһенә етерлек булһа ла, нервылар бөтөнләй бөткән икән!.. «Я тебя породил, я тебя убью!» — тигән Бульбаға әйләнгәс, нисек йәшәмәк кәрәк инде!.. Бөтә ҡағыҙҙарҙы йыйып

ауылға ҡайтып китергә иткәйнем дә, аҡса булманы. Надя, ишекте бикләп алып, сығарманы. Тышҡа, ҡараңғы төнгә ҡарап ултырҙым ултырҙым да, сисенеп ятырға булдым. Ниндәй ахмаҡлыҡ! Иң ҡурҡытҡаны — үҙемә ҡул һалып ҡуйыу... Күрәһең, мин үҙ үлемем менән үлмәмдер инде... Хатта уйлауы ла ҡурҡыныс!.. Иртән йөрәк сәнсте...

31/III.

Дилми Муса Йәлилдең «Йырҙарым» шиғырына көй сығарған. Ғәжәп көй! Муса Йәлилде башҡорт иткән дә ҡуйған. Ләкин көйҙөң йөкмәткеһе шиғырҙың йөкмәткеһенә бөтөнләй тура килмәй кеүек.

Ләкин шуныһы ғәжәп: Дилмиҙең бөтә йырсы-композиторҙарҙан айырылып торған үҙ моңо, үҙ тауышы, үҙ һүҙе бар!

«Озимандия»ның русса тәржемәһе:

Я встретил путника:
он шел из стран далеких
И мне сказал : вдали,
где вечность сторожит
Пустыни тишину,
среди песков глубоких
Обломок статуи
распавшейся лежит.
Из полустертых черт
сквозит надменный пламень,
Желанье заставлять
весь мир себе служить;
Ваятель опытный
вложил в бездушный камень
Те страсти,
что могли столетья пережить.
И сохранил слова
обломок изваянья:
«Я — Озимандия,
Я — мощный царь царей!
Взгляните на мои
великие деянья,

Владыки всех времен,
всех стран, всех морей!»
Кругом нет ничего...
Глубокое молчанье...
Пустыня мертвая...
и небеса над ней...

Ҡот осҡос шәп тәржемә шул. Мин бының сиреген дә бирәп еткермәгәнмендер. Бына һиңә Бальмонт!.. Шул тәржемәһе менән генә лә мәңге йәшәрлек!..

15/V.

Төн. Ай. Йүрүҙән буйында йөрөп ҡайтып «Атай йорто»н уйланым. Бер утыҙлап шиғыр булырға тейеш. Яңы китап.

Көндөҙ күтәрмәне рәтләнем, урам һеперҙем. Иртән Камила әбей (дәүәңкәй), Ғәйниямал әбей, инәйем менән аш бешереп (ҡаҙ ите), сәй эстек. Ғәйниямал әбейҙең бер теше лә юҡ, рәхәтләнеп ит ашай. Тик бүҫере генә йонсота. Үҙе, инәйем әйтмешләй, ыһ та итмәй, һыу ташый.

— Баланың тыуғанына ҡыуанма, торғанына ҡыуан, — ти дәүәңкәй. Радик хаҡында һөйләшкәндә, — Шайтан күк биглай малай, — ти. Радик — Ғариф ҡарттың бишенсе быуыны. Дәүәңкәй Мөхәмәттәхин ҡарттыйым (атайымдың атаһы менән бер туған. Иҫкесә (ғәрәпсә) яҙып, бригадир булып та, лесник булып та эшләнем, — ти. — Йәғәфәр (атайым) минең яҙыуҙы рәткә килтерә торғайны — учетчик саҡта, — ти. Әле ҡоҙағыйҙың (Фәниә киленең әсәһе) Ҡөрьән килтереүен көтә.

Бөтә һөйләшкәнде магнитофон менән генә тыңларға ине лә— юҡ. Күпме байлыҡ әрәм китә!

Кис Урал кейәү менән Мәршиҙә ат егеп килделәр. Ҡара туры ялҡау ат. Радик әйтмешләй, «бысраҡ ат». Йүрүҙәндән шулай ҙа һыу ташырға ярай. Ике бидон һыу килтерҙем мунсаға. Шәрип ағай (элекке мәктәп директоры) плотник Рәҡип ағайҙы өйөнә илтеп ташланы. Мунса бураҙандар ҙа эскәндәр. Рәҡибе аяғында ла баҫып тора алмай. Ләх иҫерек.

— Һейеп алайым әле, ти, үҙе кәрәк нәмәһен дә тапмай, — ти Шәрип ағай.

— Ҡайтҡас һейерһең. Рамил, күтәреп кенә арбаға һал әле.— Шулай тигәс, мин биленән ҡыҫып күтәреп алғайным, Рәҡип ағай төтөн һымаҡ еңел генә. Арбаға һуҙып һалғас, башын да ҡалҡыта алмай... Олаҡтырҙыҡ.

Урал менән Мәршиҙә бәрәңге, балыҡ килтергәндәр. Айсыуаҡ тотҡан. Инәйем Рәмзиә еңгәмдәргә Радик менән һөткә киткәйне.

Мәршиҙәгә самауыр ҡайнатырға ҡуштым да үҙем һыуға киттем. Ҡайтыуға уха ла бешкән, самауыр ҙа ҡайнаған, Урал ярты һын да табып килтергән. Классический уха булды. Айсыуаҡ хатта алабуға ла эләктергән. Күбеһе ҡомай, сабаҡ. Һурпаһы телеңде йоторлоҡ!

Уларҙы оҙатҡас, Әнүәр килеп керҙе. Хәс тә Таһир ағайҙың үҙе инде!

— Өс балам бар, — тигән була.

— Өфөләгеһе иҫәпкә кермәйме? — тигәс:

— Ул минеке түгел, — ти. Мин әйтәм:

— Һуйып ҡаплаған Әнүәр!

Юҡ, ышанмай. Әллә белгертәһе килмәй.

— Берәй яртың юҡмы, ағай, — ти, — кеше бар.

— Әкрәмдә, бәлки, барҙыр, — тигәс, тайҙы.

Өйҙәре тирәһенән үткәндә, бисәһе осраны. Бер кеше лә юҡ икән. Теләнселәп йөрөй. Шулай ҙа Әкрәмгә киттем. Тәҙрә шаҡып, исемемде әйттем, Тәғзимә апай таныманы. Әллә таныһа ла танымамыш кеше булды. Ҡулы менән түшен ҡаплаған, ахыры, яланғас.

— Төндә ништәп йөрөйһөң? — тигәс, артыҡ ныҡышып торманым, ай аҫтына сумдым. Уттары һүнде. Һандуғастар ғына шашына. Ай туп-тулы, яҡты. Радик әйтмешләй, ай хәҙер «ватылмаған». Ә мин ҡайтҡанда ай «ватыҡ» ине, ярты һы ғына тора ине.

Нишләптер, төбәктә һандуғастар юҡ, ә ауыл ҡыуаҡтарында һайрай. Бигерәк тә Йүрүҙән аръяғынан ныҡ ишетелә!

Күңелдә әллә күпме шифыр, иҫтәлектәр, уйҙар, тик яҙырға тыйылып торам әле — яңыса яҙа башларға ине...

16/V.

Өфө менән һөйләштем, Надя, йома көндө обкомға Клара Төхвәтуллинаға кереп сығырға кәрәк, ти. Китаптар хаҡында һөйләшеү өсөн. Был ниңә кәрәк булғандыр инде. Мин һыҙғанып, эшкә тотонғас ҡына.

Баҡсаны ҡаҙып бөтөрҙөм. Ҡарағат, ҡурай еләк төптәрен генә таҙартаһы ҡалды. Бәрәңге сәсеп ҡуйырға кәрәк.

Атау ҡарсығы, Микуланан алда сәсергә кәрәк, тигәйне Мәсәғүттә, автобус көткәндә. (Микула — иҫкесә майҙың 9-ҙы була). Тимәк, ваҡыт. Ләкин Арҡауылда бик ҡуҙғалмайҙар әле. Баҡсаларҙа сүп-сар ғына яндыралар. Кисә Фәҙелей ҡарсыҡтар тирәһендә бер ҡыҙ яндыра ине. Төндә. Ут янындағы ҡыҙ үҙе бер шиғыр ҙа бит ни — ут янына барыр саҡ үткән, күрәһең. Зерхут (сырхау) үләненә генә уралынып ятаһы ҡалған. Беләктәр һыҙлай. Ҡояшта яныуҙан йөрәк тә ауыртып ҡуя, ҡырҡтан һуң тырҡ, тигәндәре дөрөҫ, ахырыһы. Тик мунса ғына бөтә һыҙланыуҙы һыпырып алғандай була. Бөгөн инәйем, мин баҡсаны бөтөүгә, мунса яҡҡайны — ожмах мунсаһы!..

Был мунса хаҡында шиғыр яҙмай булмаҫ. Әлегә эскиз:

Ожмах мунсаһы

Башы ла юҡ беҙҙең мунсабыҙҙың
Ҡарағура (алабута) үҫә башында.
Ләкин баштамы һуң инде хикмәт? —
Бөтә хикмәт уның ташында.
Ташы былай бик ҡыҙыу ҙа түгел,
Юҡҡа-барға бармай тыжылдап.
Тик бер ҡыҙһа, ете ҡат тирең бәреп сыға —
Ләүкәһендә ултыр ыжылдап.
Ә япрағы — ожмах елпеүесе —
Бар ереңде һөйөр япрағы!
Май айының йәшел томанынан
Хикмәтлерәк ни һуң бар тағы?!
Йәшел томан тәндәреңә һеңә,
Һин балауыҙ булып ирейһең.
Бөтә тирең менән сирең сыға —
Яңынан тыуғаң һымаҡ йөрөйһөң.
Юлсы-юламандар, дуҫтар, уҙамандар,
Беҙҙең өйгә тейеп китегеҙ.
Минең әсәй яҡҡан мунсанан һуң
Баллы сәйен ауыҙ итегеҙ.
Һеҙ донъяға яңынан тыуырһығыҙ,
Йәшәреп ярты ғүмергә.
Һис тә генә үкенмәҫһегеҙ, тим,
Баҫыуҙарығыҙға минең был ергә.
Ә муйылдар! Хуш еҫе!..

h. б.

Мунсанан һуң — 200 гр. — Йүрүҙән буйы. Ай юлдары тимгел-тимгел. «Һары ла сәс» һәм һандуғас тауышынан иҫереү. Бөйөк хыял: китапханасы ғына булып ауылда эшлә ине лә бөтә ауылды йәшеллеккә — тирәктәргә, ҡайындарға, муйылдарға, миләш-баландарға, сәрүи-сирендәргә төр ине; Йүрүҙән буйында, ҡарағат, ҡурай-еләк баҡсаһында дуҫтар менән шиғыр уҡып ултыр, ай аҫтында кәмәлә йөрө, таң һыҙылып атҡанда йәрәгә эләккән балыҡтарҙы тултырып ҡайт та, йоҡлап торғас, мунса инеп, уха ашап, тағы шау-гөр килеп баҡсала ултыр ине.

Өй эргәһендә, тау битендә шуларҙы уйлап ултырҙым әле. Тормошҡа ашмаҫ хыялдар булып ҡалыр, ахыры, ләкин, бер уйлап ҡараһаң, ашмаҫтай бер ере лә юҡ һымаҡ. Тик <u>тәүәккәллек һәм ихтыяр көсө генә кәрәк. Ә иң мөһиме — ғаиләңдән аңлауы.</u> Юҡ шул. Нисектер күңел ышанмай, ләкин, бер был идиллия минең иң ҡәҙерле хыялдарымдың береһе. Ә мин насар китапханасы булмаҫ инем, әлбиттә. Мирхәйҙәр Фәйзи хәтле генә эшләп булыр ине әле. Ауылды йәшелләндереү, йәштәрҙе туплау, радио-гәзит, үҙешмәкәрлек, спорт, стадион, каток, һ. б. әллә күпме нәмәләрҙе ойоштороп булыр ине. Әҙәби кисәләр, уҡыусылар конференцияһы, китап һатыу, китапҡа мөхәббәт уятыу — былар бик мөмкин һәм бөгөнгө көндә бик кәрәкле нәмәләр бит. Ләкин хужаларҙың быны аңлауы һәм һиңә ярҙам итергә әҙер тороуы кәрәк. Ниндәй шәп, бай китапхана тупларға булыр ине. Яҙырға ла күпме ваҡыт булыр ине.

Ә яңы өй хаҡындағы хыялдар, столярный мастерской, баҡсасылыҡ...

Мин, ахыры, был хаҡта уйлап аҡылдан ғына яҙырмын инде. Ирекһеҙҙән Такубокуҙың «Өй» тигән шиғыры иҫкә төшә лә бик моңһоу булып китә. Шулай уҡ ай аҫтында мин ултыртҡан тирәктәр шауламаҫ микән ни?

Йүрүҙән менән ҡайынлыҡҡа хәтле тирәктәр, ҡайындар, миләш-баландар ултыртҡанда ниндәй шәп булыр ине. Күҙ алдыма бөтә күренеш килеп баҫа: схема (*Аҡауылды йәшелләндереү планы төшөрөлгән. Н. Ғ.*).

Май айының йәшел томанынан йыйып алған ҡайын япрағы. Шунан ожмахтарың торһон!

Мунсанан сығыуға ай аҫтында муйыл сәскәләренең хуш еҫе һиңә хушбуй һипкәндәй...

21/V.

Сәғит ағайға некролог яҙыр өсөн генә ҡайтҡанмын икән...

Байрамов, Әсәнов, Асанбаев, Кирәй Мәргән менән яҙышҡ. Һуңғыһы ниндәйҙер ҡәнәғәтлек кисерә. Вәзихтән үҙенең исемен ҡуйыуын үтенә.

Исем!.. Ә ул инде һыуытҡыста ята. Рафаэль Ғәлиев үҙ ғүмерендә иң бөйөк эш эшләгәндәй:

— Холодильникка һалып ҡайттым, — тип ултыра. Бөйөк тә!..

Үлем хәбәрен беренсе Байбурин әйтте. Әсәнов менән Союздан төшөп киләләр ине. Бер башҡорт заты юҡ. Бөтәһе моторныйға (заводҡа) киткән. М. Хәйҙәров инеп сыҡты. Бер ҡайғыһы юҡ. Мәңге үлмәҫтәй һымаҡ. Ә миңә ул элек бер башҡорт ҡорбаны ине.

Кешеләр ниндәй ҡатмарлы! Бер Динис кенә минән ағай хаҡында иҫтәлек яҙыуҙы һорай. Ә минең ҡәләм тоторлоҡ та хәлем юҡ ине. Китапхананан русса справочник барып китерҙем — Байрамов шунан күсерҙе. Мин әйткеләп торҙом.

Ә иҫемдә — Ерәнсәй. Һуғыш. Балалыҡ хыялдары. Сәғит ағай менән Жан Лоҡманға тәүге сәкүш килтереү... Һәм ағайҙың Амантай хаҡындағы һуңғы һүҙҙәре... (— Ғабдулла Амантай килмәнеме? — тип иҫен юғалтҡан).

Ә F. Амантай 1937 йылда уҡ «дуҫы»нан яҙған...

Рауил дә юҡ, исмаһам, яҡташы Йыһат та.

F. Әмири — ҡан дошманы — телефондан хәлен белеште. Ә минең күҙ алдыма һуңғы күренеш килеп баҫты. Холодильниктағыһы:

— Вор! — тип ҡысҡырҙы. Ә донъялағыһы:

— Убийца! — тине.

Һәм Союз залында һуғышып китә яҙҙылар. Ағайым ҡулындағы таяғы менән төртөп ебәрҙе — тик теймәне, шикелле. Ә мин бына некролог яҙышам. Күңелдә — юшҡын. Фәрҙәнә апай ҙа больницала ята. Күпкә түҙә алмаҫтыр инде. Бер-береһен яраталар ине, буғай (дөрөҫ аңлаһам). Иң илағаны ҡыҙҙары ғына булыр. Бигерәк тә — Лена класташ, Ғәзизә...

Бөгөн төндә йөрәк ауыртып уяндым, тик Надяға әйтмәнем — күрәһең, миңә лә күп йәшәйһе ҡалмағандыр инде. Тик кешесә үлергә ине. Бының өсөн тик кешесә йәшәргә генә кәрәктер. Хәҙер миңә үлем бик тәбиғи нәмә. Ҡурҡытмай. Тик был донъя йәлерәк ҡала...

Ниндәйҙер шиғыр юлдары уралана:

Аҡҡошом, аҡҡошом,
Ҡанатыңды ҡаҡ, ҡошом,
Йөрәгемә изге уттар,
Изге уттар яҡ, ҡошом.
Кем? Алла белә!..

Бәлки, «аҡ күңелле, һаҡ күңелле» халыҡ ҡыналыр. «Башҡорт илселәре»ндә беҙҙең бөтә трагедияны ла бирергә ине...

22/V.

Үҙе өсөн генә йәшәмәгән кешенең тирә-яғында кешеләрҙең күпме мәғәнәһеҙлеге тулып ята...

Бөтә донъя, донъяла ниндәй яҙ булһа ла, тормош теге холодильник ише...

Йәшә-йәшә лә, ян-ян да кемдәрҙеңдер мәғәнәһеҙлеге өсөн үл, имеш! Чехов — устрица вагоны! Евтушенко — во весь рост... Һәм өс көндән һуң һин бисәңә лә кәрәкмәйһең!.. Аһ, инәкәйҙәрҙе онотабыҙ шул. Ә һинең ни кисергәнеңде, ни ашайһың, ни эсәһең килгәнеңде тик улар ғына һиҙеп-белеп тора... Шулай ҙа мәрхәмәтһеҙ беҙ уларға, был донъяның үҙе һымаҡ бәғерһеҙ, шәфҡәтһеҙ, кешелекһеҙ... Инде бер ус тупраҡ ташлайһы бер генә кешем ҡалды — Сәләх ағай. Ә ҡалғандары инде үҙҙәренең даны, үҙҙәренең малы өсөн генә. Миңә кем ташлар — ?.. тик инәйем генә булмаһын ине.

Уны үҙем генә йыйыштырһам ине — бөтә теләгәнем шул ғына...

Эй, ғүмер!
Ил, ер-һыу, ҡояш!..

4/VI.

Яубүләктә — олатайҙар төйәгендә. Элек тотошо менән тиерлек беҙҙең олатайҙар — Ғәйфуллиндар ауылы ине.

Сал сәсле Ғәрифә кәтекәйем — ил инәһе — Шайтан Көҙәй йортонан Мырҙалар йортона килен булып төшкән өләсәй, Хайрулла Ғәйфуллиндың байбисәһе, күңелендә Салауат хаҡында хикәйәттәр тулы ҡарсыҡ — миңә 7-8-9 йәштәрҙә Йүрүҙән кисеүен сыҡҡанда әллә күпме доғалар уҡып:

— Мөхәммәт Фәлиәссәләм рәсүлебеҙ ярлыҡаһын үҙеңде, Хыҙыр Ильяс булһын юлдашың! — тип уң ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, һул ҡулын бер туҡтауһыҙ болғап, мин кисеүҙе сығып күҙҙән юғалғансы оҙатып ҡалыр ине. Тауышы әле лә ҡолаҡ төбөмдә: бәрхәт һымаҡ йомшаҡ, күгәрсен гөрөлдәүе һымаҡ яғымлы, изге доғалар — Салауат әйтеү һымаҡ арбаусан булыр ине ул тауыш... Ҡәберемә дуҫтар тупраҡ ташлағанда ла ошо тауыш миңә һәр саҡ ишетелеп торор һымаҡ.

— Кәтекәйеңә бер ус тупраҡ ташла, балам, — тигәс, мин иң элек уға бер ус еләк ташланым, унан һуң бер ус тупраҡ яуҙырҙым.

Әле лә тамаҡҡа төйөлгән ауыр ҡурғаш алҡымды һығып алғандай. Алҡымды... Әйтерһең, хәҙер уйлағанса, мин хазинаһын күмдем халҡымдың. Һөйләп бөтөлмәгән хикәйәттәрҙе, изге әкиәттәрҙе, балалыҡ хыялдарымды, Йүрүҙәнкәйҙең ебәк тулҡындарын, ус төптәремдә йыбырҙаған аҡ сабаҡтарҙы, биш таш уйнай торған йоморсаҡ таштарҙы, Йүрүҙәнкәй тигеҙләгән ҡаты ҡомда тимгетеп ҡалдырған сабый аяҡтарының мөһөрөн; бәпкә үләндәр өҫтөндә уйнаҡлап сапҡан ҡолондар кешнәүен, түңгәкле һаҙамыҡтарҙағы кәзә талдары төбөндә үҫкән уттай ҡына гөлдәрен, мәңгелек һәм һәр саҡ яңы зыярат ҡайынлығындағы кәкүк саҡырыуҙарын, әрәмә ҡарағатлыҡтарынан ишетелгән сыңрау торна моңдарын, төнгө тынлыҡта яңғыраған аҫау айғыр кешнәүен, байтал, бейәләр сырҡырауын, тартайҙар, һунайҙар, бытбылдыҡтар, Саҡ менән Суҡ зарҙарын, һарығышҡай, үтәбикә ялбарыуҙарын, ҡараҡойроҡо менән күк боҙҙарҙы ярған аҡ сәпсек сырҡылдауын, ике күҙенә лә аҡ ҡылау һалған шаҙра битле Өлкөндө ҡартының еҙ ҡурайҙан ҡанһырап сыҡҡан Зөлхизә һағыштарын, инәйем йырлағанда күҙ йәштәрем менән тыңлаған Салауат йырҙарын (бигерәктә:

«Сабыр инем —
алдым һаҙ,
атыр инем
уғым аҙ»

тигән ерҙәрен дә), бер оло афәт тойоуҙарым, шүрәлеләр, енбәрейҙәр, өй эйәләре, ат эйәләре, бисуралар, шайтан вә убыр уттарына ышаныуҙарым, кәтекәй өйөн йышҡанда аңҡыған ҡараҡай сайырының һәм бөтә еҫтәрҙән айырылып торған тик мин генә яратҡан инәйемдең хушбуй һымаҡ тир еҫе, мин туғыҙ йәшкә хәтле имгән күкрәк һөтөнөң шәрбәте, Бужый һыуының

аяҡтан һуғып йығырлыҡ ҡаты ағымы буръяҡланып, ажғырып ятыуҙары, саҡ-саҡ ағыҙып алдан китмәй ҡалған үҙәккә үткес ҡар һыуҙарының һалҡынлығы, Ҡаратауҙың монарланып ятҡан сихырлы күк-еллеге, Ҡаратау партизандары хаҡындағы серле хәбәрҙәр, Арҡауыл тауы аҫтында атып үлтерелгән шәһиттәрҙең һуңғы күҙ ҡараштары, һәнәк һуғыштары хаҡында ишеткәндәр. Сабир мулла өйө эргәһендә йәшен атҡан тәүге трактор — Фордзон — Бишәүҙәр менән Арҡауыл араһындағы хәҙрәт ҡәбере, Динислам мулла ҡәбере эргәһендә үҫкән ҡарағайҙар шомо, улар эргәһенән үткәндә белер-белмәҫ доғаларымды уҡына-уҡына йүгереп үтеп китеүҙәрем донъяны, ғөмүмән, тәүге ҡабат тойоп, тынып-белеүҙәрем бөтәһе-бөтәһе лә бөгөн миңә сабый саҡтың ошо биш бармағы ҡыҫҡан бер ус тупраҡҡа, бер ус еләккә һыйған һымаҡ... Нурылла быуайым: ул көнгә инде утыҙ дүрт йыл, ти, еләк бешкән ваҡыт ине, ти.

Ә миңә, нишләптер, еләк сәскә атҡан һымаҡ ине. Ә ниңә ул саҡта минең ҡулда бер ус еләк — турғай башындай еләк, ҡыҙыл сәкмән һымаҡ түшәлеп ятҡан еләк, иҫтә ҡалған?

Бәлки, балалыҡ аңында ап-аҡ йондоҙ төҫлө еләк менән, бешеп, ҡырмыҫҡалар уйғыслап бөтөргән иң тәмле еләктәр бергә ҡушылғандыр...

Бөгөн ҡоластарымды киреп, боронғо торналар батшалығында күккә ҡарап, йәшел үләндә ятҡанда, ҡолағыма кәтекәйҙең доғалары менән бергә бөтә ошо еҫтәр, иҫтәлектәр йөрәгемде ярғандай булды.

Өс көн, өс төн шулай ятыр инем, мине юғалтып, инәйем әллә нәмәләр уйламаһын тип, тиҙерәк Мәсәғүткә ашыҡтым.

Йәшен йәшнәп, күктән-күкрәп тирә яҡта күгелйем болоттар йөрөнө, тик ямғыр ел-дауыл, менән үтте лә китте. Һеңдереп кенә яуманы. Күҙ йәштәрем менән генә был тыуған ерҙе һуғарып булмаҫ, ахыры...

Ниңә минең күңел шулай икән? Әллә ғүмер бик аҙ ҡалдымы? Күрәһең, минең ихласлығымды бик күптәр рәнйеткән... Дуҫтар ҙа, дошмандар ҙа, иң яҡын туғандар ҙа...

Эй, изге ҡарсыҡ, ил инәһе, кәтекәйем, 34 йыл аша ярлыҡаһын мине изге доғаларың, тауышың мин был донъяларҙан киткәнсе ҡолағымды наҙлап, иркәләп, гөрөлдәп торһон:

— Хыҙыр Ильяс булһын юлдашың! — тиң. Тик онотма:

— Ҡыҙыл йондоҙ булһын юлдашың, ҡыҙыл йондоҙ булһа, юлдашың, мең дошманға торор бер башың! — тип тә йырла!..

Минең әле эшем бик күп... «Атай йорто»на «Кәтенәй ҡәберен» һәм «Өс туй», «Теләк теләгәндә» шиғырҙарын өҫтәргә кәрәк. Көҫәнәй, Динар Әхтәров, ҡатыны, Мөслимә, һ. б. «Хайуандар»ҙы ла онотмаҫҡа ине. Интернат, Зәкәриә, Азамат, Нурылла быуай, Хәтирә әбей, Нәфисә апай, юл, май, Вәриҙә апай, Р-ның теше, тиҙәк, мал булыу, мунса, Гөлнар һағышы. Радик — тракторист — боронға дуҫ, Мәнәүрә, паромдағы хәл, тәртә һындырыу, ветеринар ҡыҙ, ярҙамлашыу.

— Ҡыҙ кешенең ундай гонаһы булмай, — тигән була.

Динарҙың инәһе, Ҡаймырасов Ғилемхан таҙ, мотоцикл, һобыштың быуынға ултырыуы, быйма баҫыусы уйланыш ҡарты, Ҡорғаҙаҡ, Дыуан, студент.

— Һинең тешең ынйы тиҙәр, мин күрәйем. (Венера Милосская. һ. б.)

* * *

Гөлнарҙың одеколон менән инәйемдең арҡаһын ыуыуы...

Шул тиклем һағынған да бала булыр икән!..

* * *

— Һис тә йоҡтай алманым бөгөн. Ахыры, урын үҙгәләп маташам, — ти инәйем, өйгә ҡайтҡас.

* * *

4/VII.

Мәнзүмә апайға ҡапҡа эшләнем. Хәжәр әбей сығып ҡарап йөрөй ҙә:

— Иҫкегә тейҙең, иҫең китер инде, — ти. — Йә ҡорал-ҡорамалы бармы ни аның. Ир мактаныр ҙа ҡорал эштәр, ти бит. Йә, балам, баштағас, ташлама инде. Борон әйткәндәр: «Меңгәшмә, меңгәшһәң, күтең ауыртһа ла өндәшмә», — тигәндәр, — ти.

Мин инде, ауыртһа ла өндәшмәнем. Ҡапҡаһын кискә эшләп бөтөп ҡуйҙым.

5/VII.

«Иртән һөт-ҡаймаҡ барып ал инде, минең ҡыл да ҡыбырҙатыр хәлем юҡ, — тип Хәжәр әбей килгән. — Аш-фәләп бешерһәң, берәй сөңкә генә һурпа алып ҡуйырһың, ҡоро сәйҙән үҙәгем өҙөлөп бара», — ти.

Аҙаҡ, баҡсаһына кәзә кергәс, тағы килеп еткән. «Кешегә ышанма, балам, — ти. Юламсының йылтырағы, бот араһындағы шылтырағы, тигән боронғолар. Әнә шул юламсылар буяуыңды һөт тип бәпкәләреңә эсереп киткән бит,— ти. Ғәлимә апайҙың ҡыҙыл сепрәк бәйләгән кәзәләрен «бүре кинәнгерҙәре» тип әрләй.

— Нисә йәштәһең инде әбей? — тип һорағас.

— Аны кем шутлап утырған инде. Буғым да белмәйем. Әҙ генә лә һушым ҡалмаған, — ти.

— Иртән ҡапҡа төбөгөҙҙә аҡ күлмәкте кеше тора ине, киткәндәр, тинем. Хәҙергеләр ниңә шул аҡ күлдәк кейгән була икән. Бер әйҙәнгәнсе ҡарая лаһа ул, — тип «хәҙергеләрҙе» орошоп китте.

Унан һуң: «Бәҫәреп утырмайым әле», — тип Ғәйниямал әбей килеп етте. Аяғын ҡаймыҡтырып, робот аяғы һымаҡ итеп, сатандап, таяҡҡа аҫылынып йөрөй. Сабитынан зарлана.

— Эскәнме тағы? — тигәс,

— Эскән, эскән. Эт ашаған буғын ҡуямы ул! — ти.

«Изәлинтәһен» алып китте (изолента).

— Радиуаңды ларылдатып ҡуйған да — әллә бик танһыҡмы шул урыҫтың тауышы? (Ғәйниямал әбей).

* * *

Кискә табан Хәжәр әбейемә аш ашатып сығарҙым.

— Һай, рәхмәт, балам. Юл йөрөгәндә юлың уңғыры, хәл кереп китте ләһә, — тигән була.

Үлем!..

Миңә һалынмаған үҙ өйөм, һөйөлмәгән ҡатыным, тыңлап бөтмәгән балаларым һөйләшеүе (башҡортса), уҡылмаған китаптарым, менмәгән тауҙарым, уртламаған шишмәләрем, асмаған шағирҙарым, тыңлап бөтмәгән, яҙылмаған шиғырҙарым, йырҙарым, йөрәгемдә туңып ҡалған күҙ йәштәрем, бөтә дуҫтарыма бүлеп бирә торған татлы һыйым, хыялым теләгем генә!..

27/VII.

Йоматау. Бәшмәктәр батшалығында. Тәүге ҡабат мин бәшмәк менән ысынлап ағыуландым буғай.

— Мин бынан һуң Гарипов түгел, Грибов, — тинем ҡатынға.

Хәсән Туфанды эҙләү һәм Кирәй Мәргән...

«Огонек» лагерының начальнигы Раил Мәжитович Насиров коньяк эскәндә:

— Был бит башҡорт ҡатығы түгел ҡырлы стакан менән эсергә, — тине һәм ашалмаған колбаса ҡалғас: — Быға бит аҡса түләнгән, — тип ашатырға тырышты.

Үҙешмәкәр юморист һәм әлегә билдәһеҙ кеше. Ҡатыны Флюрала — Фәриҙәнең сифаттары (Бикбашаның).

Киске эш: баҡса утау — крәҫтиән булып тыуырға ғына кәрәк, ә башҡаса булмай.

* * *

«Өкө»лә һөйләшеү: әҙәбиәт һәм сәнғәттең шундай кешеләр ҡулында булыуы — беҙҙең бөтә фажиғәбеҙ!..

Әгәр ҙә артабан да шулай дауам итә ҡалһа, урмансы булыуың мең артыҡ. Исмаһам, урмандарҙы һаҡлап ҡалырға булыр ине...

* * *

Маяковскийға — 80!.. Грубо, зримо — как водопровод, сработанный еще рабами Рима!..

Ҡоллоҡ — иң кәмһеткес күренеш. Ҡолдарҙың иң бөйөк эше — ҡоллоҡ империяһын емереүҙер. Ә Маяковскийҙың иң бөйөк һүҙе: «Нужно поэтов хороших и разных». Әгәр ул үҙе бер 15—20 йыл йәшәй алған булһа, Маяковскийҙың дошманы булып үлер ине. Уның үлемендә — оло социаль трагедия. Үлемендә — уның бөйөклөгө. Үҙен еңә алһа, ул тағы ла бөйөгөрәк булыр ине.

Асеевтың «Лад»ы — уның ҡоллоғонан ҡот осоу бөйөклөгө. Ләкин — һуңлау.

Нефертити — иң ғазаплы уйҙарым һәм минең донъяға, дуҫ-иштәргә, үҙ-үҙемә ҡараштың яңы бер башланғысы.

Етте — үткәндәргә юл ябыҡ. (Рауил, Әсхәл, Хәсән, Тимер һ. б.).

Айыҡ фекергә килер ваҡыт инде.

— Һаумы, бөйөк обыватель... (Фүмеремдәге иң ҙур юғалтыу.) Һығымта:

Дуҫтар өсөн үлһән үл, вә ләкин үҙ ышаныстарың менән үл, мөхәббәтеңде улар ҡулына бирмә!..

Ни өсөн тыуған булһаң, шуның өсөн һуғышып үл!

Кемдәргәлер үҙ исеме өсөн генә тырмашыуҙа ваҡытлы бер баҫҡыс ҡына булыу — иң ҙур хата һәм хурлыҡ.

Һин батшаһың икән, үҙ батшалығыңа үҙең хужа бул — һинең өсөн бер кем дә үҙең теләгәнсә хакимлыҡ итмәҫ.

Һинең донъяңды емерһендәр, ватһындар, уның көлөн туҙҙырып бейеһендәр, тик һин ахырғаса үҙ донъяңды үҙең ҡара. «Был уның донъяһы ине», — тиһендәр... Ул донъя — шифриәт... Үлемең етһә, дошмандарыңды кинәндереп үлмә!..

* * *

Үлемең тереләргә йәшәргә ярҙам итһен!..

* * *

Ысын шағирға иң кәрәкле не — ихтыяр көсө. Яңғыҙ булһаң бул, тик үҙеңә, үҙ ышаныстарыңа, үҙ маҡсатыңды хыянат итмә. Шунда ғына һин халыҡтыҡы.

Минең өсөн иң ерәнгес нәмә — кеше ҡатындарына ымһыныу (садизмдың тағы ла бер ерәнгесерәк төрө).

Нәфсең теләй икән, донъяла яңғыҙҙар аҙ түгел... Ә дуҫ-иштәрҙең ҡатынына ымһыныу... бынан да мәғәнәһеҙ, бынан да оятһыҙ, бынан да түбән хайуанлыҡтың булыуы мөмкин түгел!

23/VII.

Йә, кем генә һине
һатмаған да
Йә, кем генә һинән
көлмәгән?!!

- — - — - — - — - — - — - -

Ултыра төрөк солтаны,
Ултыра — уйҙар ҡора.
Ҡәһүәһен һемереп ҡуя ла

Көлөп, мыйығын бора.
- — - — - — - — - — - — -
Шаңдаҡ ҡыҙарһа,
Киленең ул тапҡандай күр,
... ҡыҙарһа,
Киленең ҡыҙ тапҡандай күр.
(Тауатар).
- — - — - — - — - — - — -
«Иҫке ағас өй»мө, әллә
«иҫке бер ағас өй» мө!
Әлбиттә — бер.
(Р. Солтангәрәевкә).

3.VIII.

Шул уҡ Союзда. Зөлфәр Хисмәтуллин, Ноғман Мусин, Рафаэль Фәлиевтәр менән һөйләшеү. Әхнәф Байрамов —Гөлнарға путевка юллау һәм үҙемдең башты олаҡтырыу хаҡында.

Абдулла Исмәғилев менән ӨК алдында ҡыҙбатыр хаҡында һөйләшеү.

Рәйес Миһрановтың атаһы үлеү сәбәпле бирелгән ҡайғы хәбәре өсөн дә йәшел йорттоң һары эйәһенән ҡаты шелтә эләккән.

— Был инде ҡәбер өҫтөндә бейеү, — тинем.

Тағы бер яңылыҡ.

Азаматтың лагерь начальнигы Насиров:

— Шулай ҙа мин аңлап етмәнем: һинең ирең ниндәй эш менән шөғөлләнә? — тип һораған. Ә минең яртым:

— Ул насар шағирҙарҙан иҫәпләнмәй, — тигәс, тегеһе:

— Шундай чепуха эш менән шөғөлләнә тип уйламағайным, — тигән. Минең ҡатын да ризалашҡан!..

Мин был «яңылыҡтан» һуң Азаматты бөгөндән үк кире алып ҡайтырҙай булдым. Тик бөтә бәлә шунда: әлеге — «ярлы көнөң ялыныс...»

Шул «аҡыл эйәһе» — үҙешмәкәр «остряк» һинең балаңдың педагогы булһын әле! Әй, замана...

Ә ҡатыны Флюраның өҫтәлендә ғәжәп матур китаптар күреп, ире быларҙы уҡыйҙыр әле, тип уйлағайным. Хәйер — ярай.

Ниндәй генә нәжестә ҡойонһам да, ниңә һуң мин бер яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа, сафлыҡҡа ышанам икән! Бәлки, минең

бөтә фажиғәм дә шундалыр... Әллә минең бөтә ғүмерем ҡот осҡос бер хата микән? Ә үҙем:

Хаталар ҙа булыр тормошоңда,
Тик тормошоң хата булмаһын, —

тигән булам. Инанам. Яҙам. Бала саҡтан бирле ошо ғазаптарҙы кисерәм. Ниңә? Үҙеңдең бишегең тирбәлгән өрлөктәге тырма тешендә йөрәгең туҡтаған көүҙәң тирбәлеп тороу артығыраҡ түгелме икән был донъяла?

Иң ҡурҡытҡаны — ошо һорауға ыңғай яуап бирһәң — бөтәһе лә бик еңел хәл ителәсәк. Тик әҙәм балаһы донъяға тыуғас, үҙенең ауыр бурысын үтәп китергә тейеш түгелме һуң? Юҡ, был — хурлыҡ юлы!.. Түҙәлмәҫлыҡ булһын, ләкин йәшәргә кәрәк! Һандуғас һайрауын ишетер, балалар күҙенә бағыр. йәшен йәшнәп күк күкрәүҙәрен тойоу өсөн генә лә йәшәргә кәрәк!

Миңә ҡанат ҡуйған хыялдар ҙа, дуҫлыҡ та, мөхәббәт тә селпәрәмә килде... Ә шулай ҙа юлда ниҙер бар кеүек. Өмөтһөҙ генә шайтан, тигәндәр. Ә мин өмөтлө әле, тимәк, йәшәргә, дошмандарыңдың алдында ауыҙың тулы ҡанды төкөрмәйенсә йәшәргә, бөтә әселекте йотоп булһа ла йәшәргә, йәшәргә, йәшәргә кәрәк. Инде тегендә барыбер былай ҙа күп ҡалмаған, үҙ ҡулдарым менән һыҡмайынса ла шартлар был йөрәк, шартлағансы — бөтәһен дә татып, үҙ һүҙеңде әйтеп китергә кәрәк. «Тыуҙым, ғазапландым, киттем» генә булмаһын инде... Тыуғас, көйөн дә, һөй ҙә, һөйөл дә — һәм үҙеңдән һуң һинең төҫөңдө һаҡлаған емештәрең дә сәселеп ҡалһын.

Ҡасып китһәң дә сәсеп кит! Йәнең менән дә, тәнең менән дә! Бәлки, беҙҙән һуң көслөрәк, баҙығыраҡ, матурыраҡ быуындар килер. «Рәхмәт» һүҙен, бәлки, ишетмәһәң дә — әйтерҙәр.

Кешегә, уның тере зиһененә, ижад көсөнә табынам мин. Ә тормоштоң һутын, яҡтылығын, саф һауаһын урлаусы ике аяҡлы шаҡшыға түгел, яҡшыға табынам.

Эй, кешелектең үлемһеҙлеге, буйһонмаҫ рухы, мәңгелеге шундай ауыр саҡтарҙа саҡ ҡына көс бир миңә, бир!.. Иманымды һаҡлаш минең, ышанысымды! Рухи имгәк итмә минең күңелемде. Ул күңел өсөн күпме күңелдәр кителгән, күпме бығауҙар сыңлаған, күпме ҡорбандар ятып ҡалған!..

Ник. Баумандың һүҙҙәрен үҙем өсөн тағын да бер күсереп ҡуям (бәлки, мин бәхетлелер ҙә): «Счастливый тот, кто идет неуклонно без страха и сомнений, туда и прямо, куда указывает ему его совесть и убеждения».

3—4 мең йыл йәшәгән оло ағастарҙан фәһем ал, уларҙы боҙлоҡтар ҙа, янғындар ҙа ала алмаған... («Комсомолка»ла Песковтың тағы бер ғәжәп әйберен уҡыным бөгөн. «Большие друзья». 30.VII.73).

Секвойялар алдында беҙҙең ғәҙәти ағастар үлән генә, беҙҙең үлем дә үлән үлеме генә. Ә оло ағастар — секвойялар — мәңгелек тиерлек. Уларҙың ҡабығына хәҙер кешеләрҙең иң шаҡшылары ла үҙ исемдәрен яҙып ҡалдыра алмай. Америкала был вәхшилекте тыйғандар икән... Кеше үҙ исемен үҙе ҡалдырырға тейеш!..

Все дурное очень хорошо прилипает к человеку, а человечное — трудно. Потому что человеку очень легко быть снова обезьяной — этим он был, а быть человеком сейчас ей едва ли возможно... Слишком большой путь он прошел с того дня, когда впервые встал на обе ноги и, наконец, достал луну и звезды...

Беренсе дуғаны бөгөүсе кеше — даһиҙарҙың даһийы — тәүге тәғәрмәсен яһағанда, моғайын, йыландан өйрәнгәндер... Ҡайһы бер йыландар, ҡойроғон тешләп, тәғәрмәс һымаҡ тәғәрәй, тиҙәр. Ә тәғәрмәс шыуышыу түгел инде!.. Тәғәрмәс кешегә тиҙлек биргән!.. Ә тиҙлек — бөтә алға китеште!.. Тимәк, кеше тәбиғәттән өйрәнгән. Юҡҡа ғына йылан аҡыллы кеше, тимәйҙәр...

7.VIII.

Өфө ял йортона урынлаштыҡ. Тештәргә капитальный ремонт башланым.

13.VIII.

Мостай ағай менән эш хаҡында һөйләшеү.

«Мин һәр саҡ «за». Тик Хәким үпкәләмәһен. Һин минең исемдән дә обкомға кереп һөйләшерһең», — тине Фәриткә.

Тик мөхәррир Мирзаһитов: «Партия йыйылышын көтәйек. Шуға хәтле берәй фекергә килербеҙ. 16-да «или»-«или», — тигән була. Йәнәһе лә уның өсөн бер ни ҙә юҡ, коллектив хәл итәсәк. Ә ул, эштән китһә лә, буласаҡ аппарат хаҡында ҡайғырта. Юҡһа Хәким ағай уға эшен тапшырғанда йыйын этрәгәләмде тултырып киткән булып сыға.

Ни булһа ла Өлкәгә инеп сығырға кәрәк булыр. «Башҡортостан»да, «Аҡиҙел»дә — Динис, Хәсән, Йыһат, Игебай, Ғәйниә, Шакир Янбай, Рәйес Низамов менән һөйләшеү.

Заһиҙә автографтар йыйып йөрөй — Мәсетленән. Полиграфия, художество. Сәйерлек.

24.VIII.

М. Кәрим, Хәким Ғиләжев, М. Басыров.

Өсөнсө көн аҡса эҙләйем — юҡ. «Тапмаһаң — ҡайтып кермә». Эсеү. Рафаэль, Ихсан, Миәссәр, Рәфис, Рауил.

1.IX.

Гөлнар ҙа уҡырға төштө! Һуңғы ҡошсоҡ та инде үҙ юлында. Ҡасан ғына Салауатты шулай оҙатҡайным, Азаматты... Хәҙер — быныһын, иң ҡәҙерлеһен... Эй, ғүмер!..

Яратам ҡыҙымды,
Яратам Гөлнарҙы,
Сөнки ул бөгөн
Мәктәпкә барҙы, —

ул быны үҙенә күрә бик мөһим ҡабул итте. Яҙып килештерергә ҡул етмәй...

4.IX.

Эш хаҡында Клара Төхвәтуллина менән һөйләштем. Ахуньянов «Пионер»ға барһын тигән. Ләкин Шәриф ағай урын юҡ, ти. Тарих, тел, әҙәбиәт институтында Нур Зарипов, Чемерис менән һөйләштем. Ике айға кесе фәнни сотрудник итеп алырға мөмкиндәр. Башҡаса барыр ер ҡалманы, буғай. Радио минең эш түгел.

Союзда Тимер менән һөйләшеп, Ғүмәр Әбделмәнов менән берәй районға сығып китергә булдыҡ.

Былай тик ятып эш сыҡмаҫ. Бөгөн тештәргә капиталь ремонт бөттө. Салауат Йәрмәкәй районына колхозға эшкә китте. Азамат, Гөлнар — мәктәптә, ҡыҙыҡайға мәктәп — хәҙер үҙ йорто.

Өйҙә ултырырға ла мөмкинлек бар хәҙер, ләкин ҡулға бер эш тә бармай. Етмәһә, бөтә черновиктар, институттан алған тәржемә тексы ла — бөтәһе ауылда ҡалған. Ә ҡайтырға автобус йөрөмәй, ящурҙан карантинға япҡандар районды... Мөмкинлек тә юҡ.

7.IX.

Маҡар — Ишембай районына киттек. Тимер, Ғүмәр Әбделмәнов, Зәбих. Таксист Мөхәммәт. Юлда аварияға осраныҡ. Булгаково тауын төшкәс, юл айырсаһында бер грузовикка килеп төкөлдөк...

Таксиҙың уң ҡанаты грузовиктың артҡы һул тәгәрмәсенә барып керҙе.

Ишембайға кис кенә килеп төштөк. «Заря» гостиницаһы — 20-се бүлмә. Искәндәр ҡурайсы — Олтан Македонский булып сыҡты.

8.IX.

Ишембай горкомында. Миңдәүләт Байғотлин — элекке Баймаҡ секретаре (ВЛКСМ) — бында а/х бүлеге мөдире. Райкомдан Өфөгә Ғайнан ағай Әмиригә шылтыраттыҡ. Вторникка килеп етергә булды.

Өгөт-нәсихәт бүлеге мөдире минең элекке мәктәптәш — Камил Вәхитов — бер аҙ һүлпәнәйә төшкән, элеккесә ихласлығы тышҡа бәреп сығып тормай. Ләкин төҫ-ҡиәфәте, иғтибарлығы, баҫалҡылығы һаман элеккесә.

Ямғырға зарлана.

— Көнө буйы, төнө буйы яуып тик тора. Игенде йыйырға ирек бирмәй, — ти. — Ә иген быйыл иҫ киткес. Ҡайһы колхоздарҙа — Әхмәрҙә — гектарынан 52.8 центнерға барып етте. «Юбилей» сортлы бойҙай сәселгәйне, шул аҡтарылып уңды ла ҡуйҙы. Әлегә район буйынса — уртаса 24 центнер. Был ямғырҙарҙан һуң бик кәмер инде...

Ҡайһы ауылдарҙа осрашыу үткәреү буйынса маршрут төҙөнөк. Тәүге осрашыу бөгөн Әхмәр ауылында булырға тейеш. Рауил Ниғмәтуллин ойоштораҫаҡ. Башта — мәктәптә, аҙаҡ, кис — ауыл клубында.

Горком комсомолдың беренсе секретаре һаман элекке мөләйем ҡыҙ икән. Үҙен ҡатыштырмағанға ниндәйҙер артыҡ кеше һымаҡ тойғандай. Аптыраған аҡ тешле көлөүҙән башҡа бер ни ҙә күрһәтә алмай. Мөдир урынбаҫары Мансур ағай Сәйфуллин дә элекке һымаҡ ҡорға ҡатышып китә алмай йөрөй. Райком иерархияһы инде: һәр кемде үҙ ҡалыбында сиклəп тота.

Ашап сыҡтыҡ. Һылыу һынлы официантка Фәлиә һыра һорағас, белмәй:

— Нәмә һуң ул? — ти.

— Пиво инде, — тип көлөштөк. Ә кисәңгеһе Гуля исемле ине.

— Башҡаса исемем юҡ, — ти.

Юҡ булһа, юҡтыр — ни хәл итәһең заманаһын?

9.IX.

Бөгөн — беҙгә ял. Батырға ла ял кәрәк. Сөнки рәт бөттө. Ә Әхмәрҙәге кисә шәп үтте. Мин генә күберәк ләпелдәп ташланым, буғай. Шулай ҙа кәрәк ине.

Завклуб эсеп йоҡлап ҡалды. Залдан кәзә тәкәләренең еҫе сыға. Мәрйәм иртә сыҡҡан. Механизатор. Өсөнсө балалары нормаль, мәгруп ҡыҙҙары һуҡыр. Өфөлә. «Һандуғас һайраған була»ға Зәбих Мамалимов арыу ғына көй сығарҙы. Яҙғыса яҡты, еңел, елкендергес.

Тик сыуаш мотивы нығыраҡ шай. Эшпайҙы хәтерләтә.

Кис тип, төн инде. Ҡыҙыл йондоҙ менән яҡты йондоҙ. Ишембай дача ҡаласағын хәтерләтә. Шау йәшеллек. Ҡайын да тирәк, миләш-кәләш. Яңыларына соҡор ҡаҙығандар. Болоттар карауаны. Дежурный сәйәси мәсьәләне ҡуҙғата, ҡағылмау хәйерлерәк. Улар Туҡайҙы тоямы ни?

«Осто донъя ситлегенән тарһынып күңелем ҡошо» — минең хәлгенәм ошо...

Онотмайым тыуған көнөмдө (Онотмаҫ өсөн үлер көнөндө). Кешенең бөтә ғүмере ҡыҫҡа бер һыҙыҡҡа һыя. 1932—1999 (?)...

Күреү сәйер был донъяны Сәғит ҡартһыҙ... Бер нәмәне лә күрмәгәнгә хәтле шулай тойолор, ахыры.

28.I.

Шулай итеп, сәфәрем икенсе ҡат Урта Азияға. Был юлы— Төркмәнстанға. Сәғдиҙең 200 йыллығына.

Сәғди беҙҙең Салауат һымаҡ яугир шағирҙары.

Салауат исеменән ҡотлау шифры яҙырға ине.

«Башҡорт сюитаһы» тигән китаптан башҡа бер ниндәй ҙә бүләк әҙерләп алып булманы — ярай инде, дөйә лә бүләк, төймә лә бүләк тип шул китапҡа шифр яҙып тапшырырмын.

Ҡайҙа барһам да шул ҡара һаҡалымдан ҡотолоп булмай — ярлылыҡ иҙә.

30.I.

Көндөҙ төш ваҡытында Мары ҡалаһын — өлкә үҙәген үтеп киттек.

Поездан төшөп, бер һумға ун мантый алып ашаным. Ярайһы ғына. Унан, вагон-ресторанға инеп, тамаҡты нығытып сыҡтым. Унда бер ҡуй бәрәсе хәтле ҡаракүл бүрек кейгән төркмән ҡартына ҡарап килдем. Музей ҡарттарының береһелер инде. Ҡап-ҡара үҙе, һаҡалы ап-аҡ.

* * *

Ҡайҙа ғына күҙ төбәмә — дала, дала,
Киңлегенә күҙең төбәп күҙең тала.
Был мәңгелек далала һин — ҡамғаҡ ҡына,
Шул моңһоу уй йөрәгеңде өҙөп ала.

Теджен — Урта Азиялағы иң тәмле ҡауын төйәге икән. Авгонда килеүсе ҡатын-ҡыҙҙың Теджен ҡауыным юҡтан хәле бөттө. «Уралға ҡайтҡанда ҡауынды шунан ал», — тиҙәр.

Ташкент ҡауының маҡтамайҙар. Ҡарап тороуға матур булһа ла, Теджен ҡауынына етмәй, тиҙәр.

Ҡар бында Яңы йыл алдынан ғына яуған. Ҡайһы урында дала ҡаплап ята, ҡайһы урында үзбәк түбәтәйенең нағышы һымаҡ ҡына.

Бындағы халыҡ, бер ҡасан да бындай ҡар булғаны юҡ ине, тиҙәр.

Ысынлап та, ҡар ҡалын. Ҡар ҙа ҡарағура, ҡар ҙа ҡарағура.

Ирекһеҙҙән Аҡһаҡ Тимерҙең үлгән ҡышы иҫкә төшә. Ғәскәрен Даръя буйында туҡтатып, аслыҡтан, һыуыҡтан ғәскәр эсендә ризаһыҙлыҡ киткәс, Аҡһаҡ Тимер, был мығырҙаныуҙы баҫыр өсөн, ыжғыр һыуыҡта билдән сисенеп ташлап, сәсен ҡырҙырта башлай. Шунда бик ҡаты һыуыҡ үткәрә. Ҡайнаған шарап эсерһәләр ҙә йылына алмай, ҡулынан кәсәһе төшөп китеп, ҡан түгелгән һымаҡ, шарап түгелеп ята. Шул ятыуҙан Аҡһаҡ Тимер аяғына баҫа алмай. Олуғбәк (улының улы) шул мәлдә тыуа булһа кәрәк.

* * *

Юлда мине ҡаршы алды дөйә генә —
Ҡарағура һабаҡтарын төйә генә.
Шулай итеп, Ҡараҡомда ҡар ятҡанда,
Килеп сыҡтым төрөкмәндәр төйәгенә.

* * *

Биш тәңкәмде биш ҡат ҡыҫып
биш тамаҡҡа.
Биш ил үтеп, килеп төштөм
Ашхабадҡа.
Дошман ғына ҡарар, тиҙәр,
аяғыңа,
Дуҫтар көтһә, булыр әле
Башҡа баҡҡан.

* * *

Ҡайҙа баҡма, үҫә әрем, ҡарағура,
Уларҙы тик дала еле — ҡараҡ ура.

Күпме баҡма, күрмәҫһең һис ҡайындарҙы,
Барған һайын үҙ илкәйең йырағыраҡ.

30.1.

Дүшәк станцияһында ярты сәғәттән ашыу туҡтап торҙоҡ. Был станция тураһында үҙенсә бер һүҙе лә бар икән:

Станцияһы — Дүшәк,
Начальнигы — ишәк,
Урынбаҫары — дөйәләр,
Поезд шуға — һөйрәлер.

Дөрөҫөрәге: «Станция Душак,
Начальник станции — ишак,
Зам. начальника — верблюд,
Поезд стоит тридцать пять минут».

Станцияла пограничниктар посы. Разводящий сержант часовойҙы алыштырырға йөрөй. Ил сиге бында яҡын ғына икән. Бер йәш төркмән менән ҙур папаха кейгән ҡарт төркмән инеп ултырҙы. Бер-береһен белмәһәләр ҙә, һин дә мин һөйләшеп киттеләр. Мин үҙемдең Башҡортостандан икәнемде әйткәс, йәш төркмән ҡартына:

— Мостай Кәримдәрҙән, — тине. — Сәсе бынау папаха кеүек, — тип, ҡулы менән башынан уратып күрһәтте.

— Сик бында яҡынмы? — тигәс:

— Тимер юл аръяғында ғына, әллә ул яҡҡа сыҡҡың киләме? — тип көлөп ҡуйҙы.

— Ул яҡта Иранмы? — тигәс:

— Эйе, ҡыҙыл баштар, — тине.

Иран менән Туран араһында борон шундай дошманлыҡ йәшәп килгән. Мәхтүмҡолой ҙа, Сәғди ҙә, башҡа шағирҙары ла ошо хаҡта яҙған. Ә Сәғди үҙе ҡыҙыл баштарҙа әсирлектә, Иранда үлгән, тиҙәр. Зәидигә яҙған шиғри хаты ошо ҡаршылыҡтар хаҡында бит.

Ҡуйҙарҙы төркөм-төркөм ҡар өҫтөндә көтөп йөрөйҙәр. Дөйәләр өйөрө лә күҙгә салынып ҡалды. Ни ашайҙар инде ул бахырҙар был һыуыҡта? Тирә яҡта әрем дә ҡарағура ғына бит. Туран һылыуҙарының Хәйәм яҙған сәс төломдары шулдыр инде. Әйткәндәй, төркмән һылыуҙары бик сибәр күренә. Үҙ кейемдәрен

кейеп, төҫлө яулыҡ ябынып, беләҙек-алҡаларын тағып, боронғоса йөрөйҙәр.

Силәк аҫҡан көйәнтәләре төп-төҙ таяҡ кеүек.

Вагонда килеүселәр ҙә байтаҡ. Бик наҙан күренәләр, бер ҙә китап тотоп ултырғандары юҡ.

От Порт-Артура до Парижа, начиная от Черной Курицы кончая Наполеоном и Кутузовым.

Йырсымын тип кем әйтмәй?
Туй килгәндә өнө юҡ.
Батырмын тип кем әйтмәй —
Яу килгәндә ғәме юҡ.
(Салауат).

Сәләм!

Саади родился, когда 22-летний Пугачевский бригадир Салават Юлаев всю Башкирию поднял на великое восстание, на предпоследнее восстание башкир за свободу из 76 восстаний башкир. Поэтому в песне поется:

Салауаттың йәшен һораһағыҙ,
Ирек өсөн көрәш йәшендә.

Воин — поэт. Яугир — шағир. 30 лет. 25 лет в заточении.

Есть общее в судьбе. Есть общее и в судьбе наших народов— воинов и поэтов.

Башкиры, начиная с Минина и Пожарского, участвовали во всех освободительных войнах России. 28 полков. «Северные Амуры». Царские генералы вели и на походы Азии. Но башкиры отказались от братоубийственной войны.

9.II. Баймаҡ

«Ҡыҙыл сәсле кеше»гә:

Ҡыҙым минең ҡыҙыл сәстәремде сүпләй,
Ҡыҙым өсөн сал сәс — ҡыҙыл сәс.
Нишләйем һуң?
Сәстәр айырырға
Дүрт йәшлек бер
Минең ҡыҙ белгәс...

«Беләҙек»кә
(Нефертити)

Аһтарымдан мине аралауға
Бер иҫтәлек булһын беләҙек.
Беләгеңә һинең бик килешә (боронғоса),
Ҡара ҡашҡа,
Ҡара сәскә,
Ҡара күҙгә
Килешкәндәй бил нәҙек.
Бил нәҙектән бигерәк
Күңелкәйең һинең бик нәҙек.
Бүләкме һуң ҡиммәт?
Йөрәк ҡиммәт!..
Беләгеңә оҡшап торһа торһон,
Йөрәгеңде ҡоршап тормаһын.
Ирекле бул бөтә түбәнлектән,
Йөрәкле бул бөтә ирҙәрҙән,
Ҡайғыларым уртаҡ ҡайғы булһа,
Мин ҡайтырмын бер көн гүрҙәрҙән...
Хәйәмдең Нефертити төшкән беләҙеге.

10.II.

Мин кешеләр өсөн йәшәйем — кешеләр мине аңламаны. Хәҙер мин үҙем генә, үҙем өсөн йәшәргә тырышам. Ләкин бының ни кәрәге бар? Бәлки, бөтөнләй яңы, икенсе ҡиәфәттә кешеләргә кире ҡайтыр өсөндөр?..

11.II.

Иртәгә миңә — 45. Өфө аэропортында миңә шул тиклем ғәзиз тауыш исемемде атап ҡысҡыра: Надя.

Беҙ инде бөтөнләй ят кешеләр тиерлек. Ләкин үтелгән ғүмер, ғүмеремдең үткән 21 йылы 21 хәйәр булып йөрәккә ҡаҙала.

Тағы ла мин киткәндәгесә мәғәнәһеҙ һөйләшеү. Йөрәк өҙгөс әрнеү!..

12.II.

Тыуған көнөм. Ҡырҡ бишем тулды, ҡырҡ бишем.

45-тә күргән төшөм

Мөхәббәтем!
Һине төштә күрҙем,
Күрмәһәм дә һине өнөмдә:
Тылсымлы бер көҙгө бирҙең,
Һаҡлаһын, тип,
Ҡыйын көнөңдә...

Иҙәндәре ҡубып-һыпып бөткән
Иҫке өйҙә, имеш, мин тағы.
Әсәйем дә
(Күпме ваҡыт үткән!..).
Сәйен яһап, һыйлай ҡунағын.

Дуҫым килгән, имеш,
Уртаҡ дуҫ ул —
Йәшлек юлын бергә бүлешкән.
Тик юлыбыҙ
Күптән аймылышып,
Күптән уның менән дә
Юҡ күрешкән...

Һәм бына һиңә!..
Элеккесә һылыу,
Элеккесә көләс йөҙлөһөң.
Тик күҙеңдә
Әйтеп бөтмәҫ һағыш...
Һин аҡылдан яҙған
күҙлеһең!..

Өс балаңды йыйып алғанһың да
Ҡайтып төштөң Ташкент яғынан.
— Ниңә ҡайттың
Йөрәк әрнетергә? — тигәс:
Бер һүҙ әйттең:
— Һағынам!
Һәм ҡысҡырып көлөп ебәрҙең дә,
Тотондоң һин үкһеп иларға.
(Эй ҡатын-ҡыҙ!..

Һәр саҡ күҙ йәштәре —
Ни әйтәһең инде уларға!..).
Мин онотоп биргән вәғәҙәмде,
Ҡосағыма алдым,
Иркәләнем һине, йыуаттым,
Элеккесә ебәк толомоңдо һүттем, үрҙем...
Һәм ҡапылда
Һине юғалттым...
Кескәй генә
Көҙгөң ҡалған уста,
Ҡап-уртаға сатнап ярылған.
Ә артына ярты латин менән:
«Мөхәббәтең» тиеп яҙылған.
Һаҡлар, имеш,
Ҡыйын көндәреңдә!..
Һаҡлаһасы ул көс үҙеңде.
Ниңә икән теүәл егерме биш
Йыл элек
Һонманың һин ул көҙгөндө?..

12.II.

Төн. Азамат та, Гөлнара ла йоҡларға ятты.

Тойғоларын артыҡ күрһәтмәйсә, яттылар. Үҙҙәренсә, кисерҙеләр, әлбиттә. Мин 7 һум 50 тинлек быяла тапшырып, уларға бәләкәй генә байрам яһарға тырыштым. Һөт, ҡатыҡ, кефир, сливки, шәкәр менән лимон, тауыҡ бешереп, һурпаһы менән туҡмас, итенә тауыҡ эсендә бешкән бәрәңге (тоҙло, боросло, һуған, лавр япраҡлы, әлбиттә) ҡушып, духовкала ҡыҙҙырып үҙемсә бер аш яһарға тырыштым. Тәмле булды, буғай. Аҙаҡ мәтрүшкәле, төрлө үлән ҡушылған ҡуйы һөтлө сәй эстек. Үҙем сәй менән бергә бер «Экстра»ның ярты һынан күберәген эстем, мөңрәнем, бөтә үткән ғүмерҙе йөрәгемдән үткәрҙем.

Көндөҙгө, Салауаттар биргән концерт тәьҫире менән ғорурланып, маҡтанып, бер үҙем үлем сигендәге күңелде йыуаттым. Ерем-һыуым, Ҡаратауым, Йүрүҙәнем, ил тарихы мине һәр саҡ ҡотҡарып ҡала. Салауатым, һине уйланым. Ярты ғүмерең

буйынса илһеҙ-телһеҙ түҙә алырлыҡ ғәйрәт барын белә тороп, ниңә әле ҡул-аяҡлы көйө миңә түҙмәҫкә?

Әсмә апай скрипкала «Уйыл»ды уйнағанда, әлбиттә, түҙмәнем — алҡымыма бөтә үткәндәрҙең күҙ йәше килеп тығылды — Гөлнарым уҡырға киткәндә ап-айыҡ көйө балауыҙ һығып ултырҙым. Етмәһә, бынау күңелде ҡот осҡос болоҡһотҡан төш тә килеп ҡушылды.

Тыуған көндө, шулай итеп, тәүге ҡабат бер үҙем, япа-яңғыҙ, балалар менән генә, үткәрҙем. Сафуандан ғына — дуҫ-иштәрҙән — телеграмма килде. Ҡалғандары — барыһы ла үҙемдең туғандарҙан — Урал менән Мәршиҙәнән, кейәүҙән, Фәниәнән, иң ҡиммәтлеһе улымдан — Салауат менән килендән ине.

Ул баланы мин бик ныҡ рәнйеттем. Мамаһына ҡарап. Ә уның үҙ башы бар ине бит. Имен-аман, иҫән-һау ғына йәшәһендәр инде. Ҡалғанын, аҡылы булһа, саҡ ҡына ҡаным йөрөһә, үҙе белер әле... Шул тиклем хисле малай, башы менән булмаһа ла, йөрәге менән аҡылға ултырыр әле. Боҙолоп өлгөрмәне — тормошҡа сумды. Тормош — барыбер бөйөк уҡытыусы, күңелем уныһы өсөн тыныс: бисәһенең хәйләһе уны минең бер ҡатлылыҡтан барыбер ҡотҡарасаҡ.

Ә Азаматы... хәс үҙем!.. Иң күңелде әрнеткәне. Ах, был сафлыҡ — донъяның шул тиклем дә әшәкелеген күргәс, ни хәл итеп кенә ҡабул итә алыр икән уны?..

Гөлнарым күтәрер уны — ул үҙен тыуҙырған затҡа оҡшаш: әрһеҙ, үткер, тиндең ни икәнен белә. Шулай ҙа хисе үтә минекенсә, тәбиғи. Был донъяла минең һымаҡ эске донъяһын һаҡлап ҡала алырмы — минең һымаҡ рух түҙемлеге етерме? Бигерәк ғәрсел, тиҙ ҡабыныусан, ләкин үҙ һүҙен ахырғаса еткереүсән түгел. Тиҙ онота. Әсәһенең тәбиғәте нығыраҡ һеңгән. Үҙе менән күберәк һоҡлана.

Ә минең иң теләгәнем — ахырғаса балаларҙа ихтыяр көсө һаҡлау. Ниндәй генә нескә күңелле булма, иң мөһиме — ихтыяр көсө! Мине йәшәткән нәмә, — бөтәһен дә бер уҫҡа йомарлағаны, — шул көстә! Бәләкәс ғазаптарға тыбырсынһам да, ололарына түҙерлек оло көс бар буғай миндә. Мине һындырыу әлегә мөмкин түгел!..

19.II.

Февраль бураны

Ышанмағыҙ февраль буранына,
Бер яуыз уй юҡтыр уйында...
Күпме генә шашып дуламаһын,
Яҙ һылыуы уның ҡуйынында.

Был донъяла булыр
барыһы ла,
Һинең менән бары
мин булмам.
Бына ниндәй үкенестәр
бар бит —
Ҡалай үлмәк кәрәк,
күҙ алмам...
Түҙәлмам мин ләкин,
түҙалмам...

Рецензиялар



«Эҙләп тапҡан бәхет — иң татлы!..»

(Әсхәл Әхмәтҡужин шиғырҙары)

Һуңғы йылдар эсендә генә поэзиябыҙҙа бер-береһенә һис тә оҡшамаған күпме тауыштар яңғырай.

Рәшит Назаров, Мөхәммәт Илбаев, Венер Йәнбәков, Нур Хәбиров, Тимер Йосопов, Ирек Кинйәбулатов, Самат Ғәбиҙуллин, Әнисә Таһирова, Вафа Әхмәҙиев, Зөлфәт Шаһбазов, Рим Идиәтуллин, Хәсән Назаров... Өмөт менән һөйөндөргән йәштәр күп, бик күп улар. Ошо исемдәр араһында Әбйәлил егете Әсхәл Әхмәтҡужин да бар.

Үҙенең юғары шиғыр культураһы, көр һәм баҙыҡ тауышы, донъяға актив мөнәсәбәте, киң ҡоласлы булыуы һәм тынғыһыҙ эҙләнеүҙәре менән Әсхәл Әхмәтҡужин иң ҡыйыуҙарҙың береһе, һәм шуның менән бергә йәш поэзиябыҙҙың ҡайһы бер етди кәмселектәрен дә асыҡ сағылдырған шағирҙарҙың береһе ул.

Эйе, икеләнмәйенсә әйтергә була: Әсхәл — бөтә тәбиғәте менән шағир. Был һүҙҙе беҙ ҡайһы саҡта поэзияла бик ошараҡлы кешеләргә лә, шиғыр китаптары сығарып та, бөтөнләй шағир булмағандарға ла әйтеп ҡуябыҙ. Ләкин Әсхәлгә килгәндә, был һүҙҙе уға иң ҙур баһа итеп әйтергә мин һис тә тартынмайым.

Әсхәл һис шикһеҙ талантлы, шуның өҫтәүенә ғәжәп тырыш һәм егәрле егет. Уның шиғырҙарында йәшлеккә хас бөтә сифаттарҙы: тынғыһыҙ рухты ла, оло хыялдар менән йәшәүҙе лә, халҡы өсөн әллә ниндәй подвигтарға барырға әҙер тороуҙы ла, романтика ҡоласын да — бөтәһен дә тойорға мөмкин. Әсхәл хаҡында уйлағанда, ирекһеҙҙән Сәләм тәбиғәтен, Сәләм пафосын һәм Сәләмдең:

Ун ғүмергә бөтмәҫ йәшәү дәртен
Йөрөтәм мин йөрәк түрендә! —

тигән юлдарын иҫкә төшөрәһең.

Рәшит Назаров шиғырҙарын тәү башлап ишеткәндән һуң мин әле бындай ашҡыныулы йөрәк ҡағышын ишеткәнем юҡ ине. Әсхәл ярһыу күңелле, киң ҡоласлы, трибун шағир булырға вәғәҙә итә.

Шулай уҡ ул халҡының үткәненә — героик тарихына ла ентекләп ҡарарға ымһынып ҡарай. Ләкин был эшкә ул һуңыраҡ, бер аҙ тарихи материалдар менән ентекләберәк танышҡас, халыҡ яҙмышы хаҡында төптәнерәк уйланғандан һуң, ҙурыраҡ тәжрибә туплағас тотонор тип уйлайым.

Хәҙергә әле уның тарихи төшөнсәләре дөйөм хәҡиҡәттәргә генә ҡайтып ҡала. Быға уның ҡабаланыуы, хатта сәбәләнеүе, бер атҡанда ике-өс ҡуянды атып йығырға ашығыуы ҡамасаулай.

Был ашығыуҙан уның башҡа етешһеҙлектәре лә килеп сыға. Ул үҙе күп уйланып, йөрөмәйенсә, ҡапыл ғына килеп тыуған хис тулҡынында үҙенә тиклем асылған ҡапҡаларҙы тибеп «асып» ебәрә, һәм бик йыш ҡына бер ни ҙә асмай ҡуя. Был бигерәк тә үҙе яратҡан шағирҙарҙы ҡабатлауға, улар тапҡанды үҙ «поэтик трансформаторы» аша үткәреүгә ҡайтып ҡала. Шунлыҡтан Әсхәлдең ҡайһы бер иң яҡшы шиғырҙары ла («Юлға сыҡтым», «Ҡайтыу») үҙ аллы булып бөтмәй. Шиғри интонацияһында ла Таҡташ, Сәләм тауыштары һиҙелеп ҡала. Был, әлбиттә, үҫеш, эҙләнеү сире, ашығыу бәләһе. Пушкинса әйткәндә, ул «и жить торопиться, и чувствовать спешит...»

Был әле студентлыҡ ғәҙәте: үҙеңдең костюмың булмаһа, һабаҡташыңдың костюмын кейәһең дә йүгерәһең! Студентҡа ул ярай, әлбиттә. Ләкин поэзияла «Кеше аты тирсән, кеше кейеме керсән» тигән мәҡәлде оноторға ярамай. Был хәлде, бер Әсхәл генә түгел, барыбыҙ ҙа кисергәнбеҙ. Шуның өсөн үҙеңдең оло быуындың хатаһын ҡабатлау мотлаҡ түгел.

Мин Әсхәлдең ижадына айырыуса бер талап менән киләм, сөнки талантына ҡарап талабы! Ул быны күтәрә алыр тип уйлайым.

Әсхәл Әхмәтҡужиндың әле асылмаған мөмкинлектәре бик киң, уның күҙәтеүсән, күпте күрә торған үткер күҙе, бай һәм тапҡыр теле, ә иң мөһиме — шағирҙың үҙе, донъяға әйтер һүҙе бар.

Арғымағың арымаһын, Әсхәл! Уны төрлө әҙәби тышауҙарҙан тиҙерәк сисергә һәм, әлбиттә, тормош даръяһын кисергә кәрәк.

16 декабрь 1965 йыл.

Ҡәләмдәштәр төҫө

(Тимер Йосопов шиғырҙары)

Тимер Йосопов минең күҙ алдымда үҫкән, күптән күҙәтеп килгән шағирым, яҡташым һәм ҡәләмдәшем.

Тимерҙең үҙенә генә хас тауышы бар, мине айырыуса уның һуңғы шиғырҙары ҡыуандырҙы. Юҡһа ул аҙ эшләй, аҡрыныраҡ үҫә, вағыраҡ нәмәләр менән мауыға һымаҡ ине. Баҡһаң, ул аҫтыртын ғына байтаҡ нәмәләр хаҡында уйлап йөрөгән икән. Күптән түгел уның йәш яҙыусылар семинарында тикшерелгән шиғырҙар йыйынтығы ошо хаҡта һөйләй.

Тормоштоң әсе-сөсөһөн байтаҡ татыған Тимер. Шуға күрә ул тормош, йәшәү мәғәнәһе хаҡында ла, хатта үлем хаҡында ла ныҡлап уйлап ҡараған. Мәҫәлән, тормош хаҡында ул шундай фекергә килгән:

Әй ҡыҙыҡ был тормош:
Йә йомарт, йә ҡормош.
Һул ҡулға — боҙ һона,
Уң ҡулға — ҡуҙ һона.
Тормош ул ғәләмәт һүҙ икән,
Ни тимә, күңелгә үҙ икән!

Был ирҙәрсә күркәм, тормошсан һәм тимерсә ныҡ! Ул тимер һымаҡ ябай һәм ҡойоп ҡуйылған. Артыҡ бер генә һүҙ ҙә юҡ буғай бында. Һүҙгә һаран, мәғәнәгә йомарт юлдар был. Йәш шағирҙың һүҙ бәҫен, тел ҡәҙерен белеүе был шиғырҙа айырыуса күҙгә ташлана; һәм интонацияһы ла нәҡ тимерсә, үҙ тауышы менән яңғырай, күҙен-тешен ялтыратып көлөп тә тора. Ғөмүмән, Тимерҙең үҙенә генә хас бер юморға ла «пропускы»һы бар. Юмор донъяһына уға ҡыйыуыраҡ атларға ла булыр ине. Әле ул бер аҙ тартыныбыраҡ һөйләшә, буғай.

Йәш булһа ла, әйткәнемсә, күпте күргән Тимер. Етем үҫкән. Аттарҙан да тибелгән. Бәлки, кешеләрҙән дә байтаҡ тибелгәндер. Һатҡы заводтарында цемент саңын да, сүкеш сыңын да, кирбес онон да йотҡан ул. Хәҙер килеп, «студент өйрәһен» дә ихлас ауыҙ итеп йөрөй. Бына шулай бөтәһен дә үҙ елкәһендә татыған, донъя ауырлығын шиғырындағыса «Йөксө» булып күтәргән һәм апай-еңгәләренең һуғыштан һуңғы хәтәр яҙмышын ер битенә салғы менән яҙған Тимерҙең үлем хаҡында етди уйланыуҙан

тыуған «Ашығыс ярҙам» тигән шиғырын уҡығас, мин һис тә ғәжәпләнмәнем. Сөнки ул бик тәбиғи, бик тормошсан һәм ирҙәрсә үлем күҙенә тура ҡарап әйтелгән һүҙ. Шиғыр ритмик яҡтан саҡ ҡына ҡытыршыраҡ булһа ла, кеше йөрәгенең тибешен һәм кешелеклек хисен бик яҡшы тояһың унан.

«Ашығыс ярҙам» машинаһының үҙәкте өҙөп ҡысҡырып үтеп киткәнен күбебеҙҙең шулай ҡарап ҡалғаны барҙыр. Ләкин ошо хаҡта бындай уйсан шиғыр яҙғаныбыҙ юҡ әле. Бының өсөн бик һиҙгер йөрәк, бик зирәк зиһен кәрәк.

Тимерҙең шиғырҙарынан уның ғәжәп кеше йәнле, кешегә бик эҫе кеше икәнлеген тояһың. Бындай күңел хаҡында Хәсән Туфан һүҙҙәре менән: «Металл хисле Баттал что ли!..» тип әйтеп буламы һуң?! Ә бит арабыҙҙа шиғыр шымартыусыларҙың металл хислеһе лә була. Ә Тимер бик туған йәнле. Мин уның апаһы менән йырлашып ултырған бер мәлен күргәнем бар.

Тимергә әсәй урынына ла, атай урынына ла ҡалған, уның үҙе кеүек һаман да Һатҡы заводында ҡара эшсе булып эшләгән Фәниә апаһы ғәжәп шиғри күңелле кеше.

«Каруанһарай» йырының ике юлын ғына үҙгәртеп, апаһына арнап яҙған бер шиғырын мин, мәҫәлән, һис тә тыныс ҡына уҡый алманым.

Йүгерә-йүгерә кирбес ташыйһың һин,
Талмай микән, апай, беләгең?
Ҡосаҡлайһың утлы кирбестәрҙе,
Янмай микән һинең йөрәгең?..

Бәлки, ҡайһы бер юлдар үтә ябай ҙа яңғырайҙыр. Ләкин был юлдарҙан һиңә ысын тормош үҙе ҡарай һымаҡ. Мин унда эшсе башҡорт ҡыҙының тотош бер яҙмышын күрәм. Ғөмүмән, ябай кешенең оло хеҙмәтен күреү, хеҙмәтте шиғрилаштырыу тимер поэзияһының бик яҡшы бер сифаты, тиер инем мин.

Тағы ла бер бик мөһим нәмә. Ғәҙәттә, беҙ милли колоритты тышҡы биҙәктәрҙә йәки ауыл тормошонан булған картиналарҙа ғына күрергә күнеккәнбеҙ. Ә Тимер уны эшсе ҡыҙ образында ла күрһәтә алған. Был Тимерҙең башҡорт халыҡ ижадына, бигерәк тә уның йыр, ҡобайырҙарына яҡын булыуынандыр. Милли колорит бит ниндәйҙер милли кейемдәрҙә — селтәр, ҡашмауҙарҙа, беләҙек, сулпыларҙа, төлкө бүрек, ҡамалы тундарҙа түгел, ә халыҡтың рухында, эске

донъяһында. Ә был рухты иң элек уның ауыҙ-тел ижадында күрмәй, ҡайҙа күрмәк кәрәк? Был рухты Тимерҙең байтаҡ шиғырҙарынан тоҫмалларға була.

Тик был тәңгәлдә халыҡ ижадына туранан-тура эйәреп, стилизация яһауҙан һаҡ булырға кәрәк. Реаль тормошто үтә әкиәтләштереп, бөгөнгө заман кешеһен мифик Алпамыша итеп ебәрергә лә ярамай. Милли колорит «Әбйәлил» әкиәтендәге хандың һыңар мөгөҙө һымаҡ бик һерәйеп тә тормаһын. Бында, әлбиттә, сама тойғоһо кәрәк. Бының архаикаға, анахронизмға илтеүе лә бар.

Ә дөйөм алғанда, Тимер Йосопов бик тәбиғи үҫә торған, лириканан эпик киңлектәргә юл тотҡан, инде үҙ тауышын тапҡан шағир. Үҙе әйтмешләй, «тишек кәмәләргә» ултыртмаҫ ул беҙҙе.

2 февраль 1966 йыл,
«Совет Башҡортостаны»

Йыр дауам итер

(Композитор Рафиҡ Сәлмәновҡа —50 йәш)

Рафиҡ ағай менән бер аҙ пианино эргәһендә һөйләшеп ултырҙыҡ та урманға сығып киттек.

— Әйҙәле, беҙҙең баҡсаға барып ҡайтайыҡ, — тине Рафиҡ ағай, — Рауза еңгәң трамвай менән, ә беҙ һинең менән атлап ҡына барырбыҙ.

Трамвай туҡталышынан уҡ урман башлана. Йомарт йәй ахыры менән сыуаҡ көҙ башы. Япраҡтарҙы ара-тирә тимгел-тимгел һары алған. Ни тиһәң дә, көҙ үҙенекен итә!.. Ана, Рафиҡ ағайҙың да сикә сәстәрен ҡырау ялмап алған бит. Уның бөтә ҡиәфәтендә тәбиғәттең ошо миҙгеле менән ниндәйҙер оҡшашлыҡ бар. Ул да бит йомарт йәйен оҙатып, сыуаҡ көҙөн ҡаршылай: ғүмеренең илленсе көҙөн!

Алма баҡсаһына килеп етеп, уттай янып бешкән алмаларға һоҡланып торҙоҡ. Ергә тыпылдап алмалар өҙөлөп төшә. Тып-туп, тып-туп, тып-туп!..

— Алма ағасында тәмле була ул, — тип Рафиҡ ағай бер янып торған алма өҙөп бирҙе. Шундай тәмле — теленде йоторлоҡ — ерҙең бөтә һутын, ҡояштың бөтә нурын һеңдергән алма! Әлбиттә, баҡсасының тоҙло тире таммайынса ла булмағандыр.

Халыҡ күңеленең төпкөлөнән һирпеп алған моң шишмәһе лә бит ул, иң ҡояшлы нурҙары менән ҡушылған хәлдә лә, тиркөс түкмәйенсә, ысын ижад емеше булып өлгөрә алмай. Ғалимдың фәнни асышы менән шағирҙың яңы шиғыры кеүек үк, композиторҙың күңел емеше булған яңы көй ҙә бына ошо өлгөрөп еткән алма булып, үҙенән-үҙе өҙөлөп төшкәнсе, күпме ижад ғазабы кисерергә кәрәк!

Өҙөлөп төшкән бына ошо ябай ғына алмаға ла кем нисек ҡарай бит? Ньютон ошо өҙөлөп төшкән алмаға ҡарап, үҙенең оҙаҡ йылдар баш ватҡан бөйөк асышын — Ерҙең тартыу көсөн асҡан. Хәҡиҡәт ғәҙәп ябай ҙа була шул. Әле тын ҡалып үҙенең йөрәген тыңлағандай, алма тыпылдауын тыңлап торған композиторға ла, бәлки, алма тауышы ғына түгел, ә фортепьяно телдәре өҫтөнә төшкән бармаҡтары аҫтынан үҙенең иң ҙур симфонияһының — әйтәйек, кеше ғүмере хаҡындағы «Алтын көҙ» поэмаһының — әле нотаға төшмәгән тәүге аккордтары ишетеләлер?..

— Бына шулай итеп иллегә лә аяҡ баҫылды, малай, — тип ҡуйҙы Рафиҡ ағай.

Эйе, был илле йыллыҡ ғүмер юлын байҡап ҡарағанда, уның һәр ҡарышын тормоштоң бөткөһөҙ ҡаршылыҡтары һәм нур ҡанатлы моң оҙатып барғанлығын күреү ҡыйын түгел.

Рафиҡ ағайҙың һәр саҡ алсаҡ, көләс йөҙөнә ҡарап, тормош баҫҡан билдәләрҙе күрмәһәң дә, композитор Сәлмәнов булып танылғансы уға тормош михнәттәрен аяуһыҙ күп татырға тура килә.

Урал аръяғындағы Әбйәлил районының Асҡар ауылында ул тыуған йылды донъяның аҫтын-өҫкә килтергән Бөйөк Октябрь революцияһы ашлана. Унан — инә ҡыҙҙы, ата улды белмәгән утлы өйөрмәләр заманы — граждандар һуғышы. Унан — ярты ауылды һыпырып алып киткән йотлоҡ йылы. Унан — мир башына төшкән бәлә өҫтөнә ир башына төшкән бәлә: йәш ярымлыҡ Рафиҡтың әсәһе үлеп, атаһы Вафа ағай ишле бала менән тороп ҡала. Байҙың ҡатыны үлһә, түшәк яңыра ла ул, ярлыныҡы үлһә, ҡайғыһы ғына яңыра шул. Рафиҡ етем менән шығырым тулы өйҙә әсә наҙын күрмәй үҫә. Тишек ҡайҙа — ел шунда, етем ҡайҙа — һүҙ шунда. Ул да булмай, өҙөп-йолҡоп ете класты бөткәндән һуң, Өфө педтехникумында уҡый башлағас ҡына, атаһынан да яҙып ҡала: уны Билән ҡайын яланында кулак бандиттары үлтереп китәләр. Апай-һеңлеләренә атай ҙа, әсәй

ҙә булып ҡалған Рафиҡ техникумды ташлап ҡайтып китергә һәм бик йәшләй генә эш ҡамытын кейергә мәжбүр була. Ниндәй эштәрҙә генә эшләргә тура килмәй уға: иҫәпсе лә, управдел да, инструктор ҙа, комсомол райкомының пионерҙар бүлеге мөдире лә, агитбригада етәксеһе лә, артист та... Унан «Ишембайҙа тынлы оркестрҙа кларнетист, художестволы үҙешмәкәр түңәрәк етәксеһе. Унан — армия, Алыҫ Көнсығыш, сопкалар араһындағы хәрби тормош, унан — Бөйөк Ватан һуғышы — эшелондарҙа үткән ғүмер...

Ярай әле, бөтә юлдарҙа йыр-моң юлдаш булған. Әллә бөтә юлдарҙан йыр-моң үҙе йөрөтәме икән? Тәүҙә — ауылда сәкта — ағай-эне һыҙғырған ҡурай моңдары, ялан-йәйләүҙәрҙә, арба-санала, туй-табында ишеткән йырҙар: тауҙарҙан тауҙарға, мәңгелектән мәңгелеккә яңғыраған мөһабәт «Урал» көйө, сикһеҙ билдәһеҙлеккә талпынған серле «Сыңрау торна» моңо, Урал арҡаһын уя баҫып үткән «Ҡуңыр буға» һамағы, «Тыуған илкәйемә лә ҡайтыр инем, аяҡҡайым талһа, имгәклəп» тип үкһегән Ғилмияза зары, йәнә —«Етем ҡыҙ меҫкен Хәтирə», Себер киткән «Шаһибəрəк», ҡанлы-данлы «Саңдыүҙәк», ғүмер буйы батша һалдатынан ирек көтөп ала алмаған əбей-ҙең «Орсоҡ» йырҙары... — улар бихисап! Əбйəлил яғы — бына шундай бөткөһөҙ аҫыл көйҙəр иле. Ошо ил моңо кескəйҙəн үк моңло бала булып үҫкəн Рафиҡтың тəүге күңел йыуаныстары була.

Булыр бала биләүҙән тигəндəй, ул үҙе лə сəхнəгə сығып, тальянда уйнап ебəрə, тап əбйəлилдəрсə күңел елкендереп бейеп төшə, тағы моңло ғына итеп йырлап ала, ахырҙа тағы сығып, Таҡташтың «Ғасырҙар һəм минуттар» поэмаһын яттан уҡып, ауыл халҡын таң ҡалдыра... Ҡыҫҡаһы, Рафиҡ утыҙынсы йылдар ауылының үҙешмəкəрлек күтəрелешендə йəн атып йөрөгəн «артист егет» булып үҫə.

Ярай əле, донъя яҡшы кешеләргə ярлы түгел. Рафиҡты бер мəл шулай башҡорттоң атаҡлы йырсыһы, халыҡ артисы Ғəзиз Əлмөхəмəтов күреп ҡала һəм уға уҡырға кəңəш бирə.

Уҡыу тигəндəн, был уның үҙенең дə иң ҙур хыялы була ла бит, тик йəш тə арыу уҡ булып киткəн: ун алтыға барып баҫҡан шул. Бала сəктан уҡ музыка мəктəбендə уҡып, бармаҡтарың рояль телдəре өҫтөнəн елберҙəп йөрөмəгəс ни... Бындай бəхет беҙҙең тəүге башҡорт композиторҙарының өлөшөнə төшмəгəн. Улар был ҡоралға бик һуңлап тотондолар.

1933 йылда Асҡар мәктәбенә килтерелгән тәүге пианиноның асҡысын уҡытыусы Мөхәмәтнур ағай Бикташев шулай ҙа Рафиҡҡа ышанып тапшыра. Был уға ысын бәхет асҡысы була. Уның менән ул үҙе өсөн яңы бер донъяның — ҙур музыка донъяһының ишеген аса. Пианино мәктәп ансамблендә ул өргән торба ише генә түгел икән шул. Рафиҡ Ишембайҙағы нефтселәр клубына пианист булып эшкә инә, ә тынлы оркестр дирижеры И. Ғайтанов уны нота танырға өйрәтә. Был инде уның икенсе бәхет асҡысы була. Ә армияла ете йыл уйнаған хәрби оркестр уның өсөн ысын тормош консерваторияһына әйләнә.

Һуғыштан һуң ул туп-тура үҙенең йәшлек ҡалаһы Ишембайға ҡайтып элекке эшенә — үҙешмәкәр түңәрәк менән етәкселек итергә тотона, һәм әлеге моң «Таң йыры» булып атылып сыға. Унан – «Еңеүселәр маршы». Был марш уның үҙенең дә ижади еңеү маршы булып яңғырай.

Башҡорт композиторҙары Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов һәм Рәүеф Мортазин Сәлмәновтың тәүге әҫәрҙәрен тыңлап, уны консерваторияға китергә димләйҙәр.

Инде утыҙ йәше артылған булыуына ҡарамаҫтан, Рафиҡ Сәлмәнов П. И. Чайковский исемендәге Мәскәү консерваторияһының милли бүлегенә уҡырға инә.

— Хатта ҡулдарға массаж эшләтеп уйнарға тура килә торғайны, — ти Рафиҡ ағай көлөп.— «Ҡартайып ҡатҡас быуындар», шулай ул. Бына шунда уҡып йөрөгәндә таныш-ҡайныҡ бит әле беҙ һинең менән. Ҡалған яғын һин үҙең дә беләһең.

Эйе, композитор Рафиҡ Сәлмәновтың артабанғы тормошо йырмоң һөйөүселәргә яҡшы таныш. Ул тормош — уның бай һәм күп ҡырлы ижады — көн һайын радионан йәки концерт залдарынан, үҙешмәкәр хор түңәрәктәренең сығыштарынан, грампластинкаларҙан ишетелгән тиҫтәләгән йырҙар, романстар, марштар, инструменталь пьесалар, «Алтын дала» кеүек кантата, симфоник оркестр өсөн яҙылған увертюра. Ул ижад — партия хаҡындағы һәм Тыуған ил хаҡындағы тантаналы-патриотик йырҙар булып та, бөгөнгө заман кешеһенең ижади хеҙмәтен данлаусы «Хеҙмәт йыры» һәм «Төҙөүселәр йыры» булып та, «Колхозсылар маршы» һәм «Нефтселәр маршы» булып та яңғырай. Ул — яҡты «Таң йыры» ла һәм һағышлы «Киске йыр» ҙа. Ул — дәртле «Студенттар вальсы» ла һәм талғын «Бишек йыры» ла. Ул — «Тәүге мөхәббәт» тә, «Хушлашыу» ҙа; яҙғы «Сирень сәскәһе» лә, яңғыҙ япраҡ ғына тороп ҡалған көҙгө «Саған» да; «Онотмайым»

да, «Көнләмә» лә; «Аҡҡошом» да, «Ҡарасәс» тә; күктәге, хыялдағы «Минең йондоҙом» да, ерҙәге, реаль «Күрше ҡыҙы» ла...

Тағы әллә күпме халыҡ көйҙәре темаларына яҙылған «Салауат» һәм «Ҡара юрға» кеүек фортепьяно пьесалары, вариациялар, халыҡ көйҙәрен эшкәртеүҙәр, баян һәм аккордеон өсөн яҙылған әҫәрҙәр музыка мәктәптәренең эстрада концерттары репертуарын байытып тора.

Төрлө жанрҙағы йөҙҙән ашыу әҫәрҙең авторы Рафиҡ Сәлмәнов ижадына ентекле баһа биреү, әлбиттә, музыка белгестәренең эше. Мин тик уның ошо ижадҡа килгән юлын ғына төҫмөрләп, уға ҡарата үҙ мөнәсәбәтемде генә белдермәк булдым, сөнки миңә уның менән байтаҡ ҡына йырҙар яҙырға һәм Башҡортостан китап нәшриәтендә бергәләп эшләргә тура килде.

Ашаған белмәй, тураған белә, ти боронғо мәҡәл. Нәшриәттә музыкаль редактор булып эшләгән сағында уның башҡорт халыҡ йырҙарын һәм композиторҙарының вокаль әҫәрҙәрен редакторлап баҫтырып сығарыу эшенә ни тиклем ҙур көс һалғанлығын, уның еңел ҡулы менән башланған был эштең ни тиклем әһәмиәтле булыуын миңә үҙ күҙҙәрем менән күрергә тура килде.

— Әйҙә, сәйгә инегеҙ, — тип өйгә саҡыра беҙҙе Рауза еңгәм. Ул, баҡһаң, беҙҙе иркенләп һөйләшһендәр тип, күптән көтөп торған икән. Рафиҡ ағай үҙенең ижад баҫҡаһының мул емештәре менән, моғайын, еңгәмә лә бик бурыслылыр, тип уйлайым мин. Сөнки тормоштоң ниндәй генә ауыр мәлдәре булмаһын, Рауза еңгә иң элек уның хаҡында хәстәрлек күреп, уның ижады өсөн янып йәшәне бит!.. Яҡты йөҙө, йылы һүҙе, хәстәрлеге менән ижад кешеһенең яҙмышын уртаҡлашҡан бындай ҡатындар күберәк булһа икән!..

Улар һаман да егет менән ҡыҙ кеүек бит. Күңелгә бер шифыр юлы килә:

Мөхәббәт ул яҡшы йырға оҡшаш,
Еңел түгел йырҙы сығарыу.

— «Башҡорт ҡыҙына» тигән бер йыр яҙмайһығыҙ, исмаһам, — тип еңгәм беҙгә бер ижади заказ да биргәйне. Яҙмай булмаҫ, ахыры. Рафиҡ ағай күп көс һалған опереттаһын яҙып бөтөү менән йырға тотонорбоҙ әле. Йыр дауам итер...

15 сентябрь 1967 йыл,
«Совет Башҡортостаны»

Юлдағыларҙан берәү

(Нур Хәбировтың шиғырҙар йыйынтығы хаҡында бер-ике һүҙ)

Үткән юлға боролоп ҡараным да, ултырып уйға ҡалдым. Ниндәй ауыр юл был, шиғриәт юлы — асылмаған донъяны яулау юлы!.. Әле бер кем әйтмәгән яңы һүҙҙе әйтеү, үҙеңде, үҙ тауышыңды эҙләү һәм уны табыу ифрат ҡыйын икән шул. Үҙ тауышыңды тапҡан тәҡдирҙә лә, уны һаҡлап ҡалыу, үҫтереү, әҙәбиәттә үҙеңдең ныҡлы урыныңды биләү тағын да ҡыйыныраҡ, күрәһең.

Нур Хәбировтың тормош юлы һәм ижад яҙмышы ирекһеҙҙән ошо борсоулы уйҙарға һала, күңелдә әллә күпме үкенесле тойғолар уята.

Халыҡ үҙ йырында «Йөрәк баштарына ҡан һауҙырған, йөрәк ярып сыҡҡан бала икән» тип йырлаһа, был йырҙың зәһәрле аһын шиғырға ҡарата ла туранан-тура күсерергә булыр ине.

Күҙ асып күҙ йомғансы йылдар үтә лә китә. Йылдар һинең йәшлегеңде лә аяп тормай. Ә һәр кешегә бер генә ғүмер бирелгән. Шунан артығын алып булмай. Тәгәрәп ятып илаһаң да, ғүмерҙең бушҡа үткәрелгән көндәре кире әйләнеп ҡайтмай...

Былар бөтәһе лә күптән билдәле хәҡиҡәттәр. Ләкин бер яҡын ҡәләмдәшеңдең ауыр яҙмышы хаҡында етди уйланғанда, бөтә был хәҡиҡәттәрҙе үтә ҡырҡыу итеп яңынан кисереп сығаһың.

Нур Хәбировтың исеме бынан ун йылдар элек әҙәбиәтебеҙгә эркелешеп килеүсе бер төркөм йәштәр араһында иң сағыу, иң өмөтлө, иң бәхетле исемдәрҙең береһе ине. Уның матбуғатта тәү ҡат күренгән «Илемә», «Ғүмерлеккә ҡалған ҡайғым бар», «Ҡулдарым да эшкә бармай торҙо» һәм «Йырсы ҡыҙға» кеүек шиғырҙары ысын поэзияны аңлай белгән һәр кеше өсөн үҙе бер байрам булды. Шундай тәбиғи, үҙенсәлекле һәм тормошсан был тауыш поэзиябыҙға ысын талант эйәһе килеүен хәбәр итте. Баязит Бикбай ағай «Шатлыҡлы тауыштар» тигән бер мәҡәләһендә был талантҡа үҙенең атайҙарса фатихаһын да биреп сыҡты. Шулай уҡ йәштәрҙән мин дә «Юлдағылар» тигән мәҡәләмдә «поэзия юлындағыларҙың иң йәше булыуға ҡарамаҫтан, иң үҙенсәлекле ҡәләмдәштәрҙең береһе — Нур Хәбиров» тигән белдереү яһап, һүҙемде шағирҙың ижади үҙенсәлеген төҫмөрләү менән тамамлағайным.

«... был үҙенсәлек, уның кешелек сифаттары шиғырҙарынан айырылғыһыҙ, үҙе менән һүҙенең бер бөтөн һәм тәбиғи булыуында. Нур Хәбиров күңеленә үҙ еренең уйсан моңон һеңдергән. Был моң уның «Тыуған илемә» тигән шиғырында, тик үҙенә генә хас бер көй булып, ҡурайҙан сыҡҡан кеүек, урғылып сыға:

Тыуған илем һине һөймәһәм,
Һинең өсөн янып-көймәһәм,
Һинең өсөн йәлләп йөрәкте,
Һыҙғанмаһам эшкә беләкте, —
Ни ҡыйыулыҡ менән, арыным тип,
Үләнеңә килеп ятырмын?
Ниндәй выждан менән һыуһаным, тип,
Һыуҙарыңдан тәмен татырмын?
Оялырмын сәскә-гөлөңдән,
Иркәләүсе талғын елеңдән...
Айырылһам тыуған илемдән,
Эскән һыуым, үҫкән еремдән, —
Ниндәй илдәр миңә ил булыр,
Тормошомдо ҡорор ер булыр?!

Нур Хәбиров һүҙҙең урынын, ҡәҙерен белә торған, уның көсөн тоя торған шағир.

Ә шағирҙың бурысы ла шунда; ул һүҙгә йән кертә, һүҙгә үҙенең әүәлге сафлығын ҡайтара, һәм һүҙ, үҙенең ысын мәғәнәһен алып, терелә, йәшәй, көрәшә башлай. Шул саҡта ғына шиғыр уйландыра, тойғо уята һәм тормошоңа юлдаш булып китә...»

Ысынлап та, Нур Хәбировтың үҙенән-үҙе хәтергә һеңеп, күңелгә яғылып ҡалған «Илемә» тигән был шиғыры нисәмә йылдар күңел түрендә яҡты бер нур булып йөрөй. Шулай уҡ уның Ленин үлеменә арнап яҙылған шиғырын да «иң кешелекле кешене» юҡһынған һайын иҫкә төшөрәһең:

Ғүмерлеккә ҡалған ҡайғым бар,
Онотолмай торған ҡайғым бар,
Минең менән бергә йөрөргә,
Йөрәгемдәй булып ғүмергә,
Килгән миңә ошо бер ҡайғы,

Онотолмай торған бер ҡайғы.
Ғүмерлеккә ҡалған ҡайғым бар.
Ҡалғандары — шундай ҡайғылар:
Былтырғыһын — быйыл онотам,
Быйылғыһын — бөгөн онотам.
Тик береһе генә ғүмерлек,
Ғүмер буйы бергә йөрөрлөк.
Ғүмерлеккә ҡалған ҡайғым бар,
Онотолмай торған ҡайғым бар —
Үҙем тыумаҫ элек туҡтаған
Даһи йөрәк өсөн ҡайғым бар.

Шишмә һыуы төҫлө саф, ҡурай моңо һымаҡ кешелекле һәм хәкиҡәттең үҙе кеүек ябай был шиғырҙар күңелгә ниндәйҙер таңғы йыр булып бәреп инде лә, унда тәрән тойғолар уятып, шағирҙың киләсәгенә оло өмөттәр вәғәҙә итеп, һөйөндөрҙө.

Ысындан да, шағир үҙе «Йырсы ҡыҙға» тигән шиғырында әйткәнсә:

Тик йөрәктән сыҡҡан йырҙар ғына
Йырлата бит башҡа күңелде.

Аҙаҡ Нур Хәбиров, армияға киткәс, ошондай «йөрәктән сыҡҡан» бер нисә шиғыр шәлкеме ебәрҙе лә, шиғыр тематикаһының, шиғри күҙ күременең киңәйә барыуын күрһәтеп тә өлгөрмәне, ҡапыл бер урында тапана, үҙ-үҙен ҡабатлай һәм һүҙ моңо менән генә әүрәй башланы.

Архангель районының Тирәкле ауылынан Нур Хәбиров яҙған шиғырҙар «Аҡиҙел» журналына ла, «Совет Башҡортостаны» газетаһына ла килә торҙо, ваҡыты-ваҡыты менән, шиғырҙарын күтәреп, ул үҙе лә килгеләп сыҡты, ижади семинарҙарҙа, әҙәби кисәләрҙә, дуҫтарса һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашты, ләкин шиғырҙарында инде тәүҙә вәғәҙә иткән бураҙналар аҡтарырҙай ғәйрәт тә, ил киңлеген иңләрҙәй киң ҡолас та, заман һулышы менән йәшәрҙәй һулыш та юҡ ине инде. Ул армияға тиклем йөрөткән трактарын да ташланы, уҡырға ла инмәне, бөтә көсөн һалып эшләрҙәй берәй ныҡлы ғына эшкә лә тотонманы. Ә шиғырҙарында тик тәбиғәт һәм тәүге мөхәббәт һағышы менән әүрәп, үтә интим тойғолар стихияһына бирелеп, тар һуҡмаҡтар буйлап китте һәм «йыр, моң, нур, сәскә, йондоҙ, ысыҡ, таң,

күңел, йөрәк, хис, тойғо, шәфәк, япраҡ» кеүек һәм башҡа шуның ише «шиғри» һүҙҙәр шырлығына барып юлыҡты, тик әҙәбиәттән алған, башҡа шағирҙарҙы уҡып алған тәьҫирҙәр иҫәбенә генә йәшәй башланы. Ә шағир йөрәген ярып үтергә тейеш булған донъя шаңдауы, бөгөнгө ҡатмарлы тормош ҡаршылыҡтары, үҙен уратып алған кешеләр яҙмышы Нур Хәбировты, утрауҙы уратып аҡҡан һыу һымаҡ, уратып үтте.

Ә ғүмер тигәнең, уны үҙең эйәрләп алмаһаң, үтә ҡырыҫ тәбиғәтле шул. Быны Нур Хәбиров үҙе лә бик яҡшы тоя.

Үтә ләһә ғүмер, үтә ләһә —
Туҡтатырға һис бер әмәл юҡ;
Йәшен ташы һымаҡ, тотҡарлыҡһыҙ
Үтеп китер микән шулай уҡ?
Эйе, ғүмер тигән нәмә аяуһыҙ:
Үтә генә бирә, күңелеңә,
Кемлегеңә һинең ҡарамай.
Юҡ, ышанып булмай ғүмергә, —
Ауасағың ҡасан? — билгеһеҙ;
Тауҙай эшең ҡалыу бик ихтимал,
Шуны уйлау — үтә күңелһеҙ.
Эштәреңде ҡыҙыуларға кәрәк,
Үҙ-үҙеңде хатта аямай.
Ғүмер үтә... уға ел-яуын юҡ,
Уның өсөн ҡояш байымай.

Әгәр шағир быны үҙе аңлаған икән, уға өгөт-нәсихәт уҡып тороу файҙаһыҙ. Тимәк, уға етди бер ҡарарға килергә һәм, һүҙҙәр шырлығынан сығып, яңынан үҙенең тәү башлап сыҡҡан юлына төшөргә, теше-тырнағы менән тормошҡа ташланып, актив рәүештә йәшәй, ижад итә башларға, уҡырға һәм үҫергә кәрәк. Әҙәбиәт ағасыбыҙҙың бер матур тәлгәше күләгәлә тороп ҡалырға тейеш түгел. Шағир, үҙе әйтмешләй, «ҡайындың да йәме, шауы кәмей, бер тәлгәше генә һынһа ла».

Ә һынырға уның хаҡы юҡ. Был йыйынтыҡҡа ингән бөтә шиғырҙар ҙа тип әйтерлек ошо хаҡта һөйләй. Йыйынтыҡты һис кисектергеһеҙ сығарырға кәрәк. Нур Хәбиров — шағир. Ул шиғырһыҙ йәшәй алмай, тимәк, ул да яҙырға тейеш!

27 октябрь 1967 йыл.

Шағирға бер һүҙ

(Вафа Әхмәҙиевтың тәүге йыйынтығы хаҡында)

Һүҙҙе йәш шағир менән бәхәстән башлағы килә. Был һүҙ юҡтан һүҙ булһын өсөн түгел. Сөнки һүҙ шиғриәттең йәмғиәт тормошонда тотҡан урыны, әһәмиәте һәм бурысы хаҡында бара.

Шиғриәт үҙе барлыҡҡа килгәндән бирле уның хаҡында үҙ фекерен әйтмәй ҡалған, уға үҙ мөнәсәбәтен белдермәгән йәки үҙенең ижад маҡсатын билдәләмәгән бер генә шағир ҙа юҡтыр, моғайын. Әлбиттә, донъяла күпме шағир бар, уларҙың һәр береһе уны үҙенсә аңлатырға тырышҡан. Ләкин, нисек кенә булмаһын, әгәр ҙә һүҙ ысын шиғриәт тураһында бара икән, уның асылы, нигеҙҙә, бер нәмәгә ҡайтып ҡала. Юғиһә, ул башҡаса йәшәй ҙә алмаҫ ине. Кеше тормошонда икмәктең әһәмиәтен аңлатыуҙа әллә ниндәй яңылыҡ әйтеп булмаған кеүек, шиғриәттең әһәмиәте тураһында ла берәй яңылыҡ әйтеү ҡыйындыр. Ләкин һәр шағир уға үҙ мөнәсәбәтен белдерергә хаҡлы, әлбиттә. Шулай уҡ быға йәш шағир Вафа Әхмәҙиев та хаҡлы.

Йыйынтыҡты асып ебәргән «Уҡыусыға бер һүҙ» тигән шиғырында ул, мәҫәлән, былай тип һүҙ башлай:

Күңелендә байрам булған саҡта,
Йырлап торған мәлдә бар донъя,
Һин тотонма шиғыр китабына,
Шиғыр юлдарына табынма.
Байрамдарҙа, шау-шыу мәжлестәрҙә,
Һөйгән йәрең барҙа ҡосаҡта,
Шиғри күҙҙәр һиңә баҡҡан саҡта,
Аҙыҡ эҙләү — яҙыҡ китаптан.

Был раҫлау менән, әлбиттә, һис кенә лә килешеп булмай. Йыр-шиғыр, кешенең ҡайғыһында юлдаш кеүек, уның шатлығында ла юлдаш. Нисек инде ул «күңелендә байрам булған саҡта»» шиғыр юлдарына табынма», имеш? Ни өсөн «шиғри күҙҙәр һиңә баҡҡан саҡта, аҙыҡ эҙләү — яҙыҡ китаптан»? Авторҙың раҫлауынса, ғашиҡтар ҡосаҡлашып ултырып, шиғыр ҙа уҡымаҫҡа тейеш булалар. Был язаға шағир үҙе үк риза булмаҫ ине, әлбиттә. Был — бер.

Икенсенән, шифриәттең асылын был рәүешле аңлатыу уны бөтөнләй бер яҡлы, тимәк, хата аңлатыуға килтерә, уның сиктәрен күрәләтә тороп тарайта, уның кеше рухының бай донъяһын танып белеүҙәге сикһеҙ мөмкинлектәрен тик ҡайғы, моң-һағыш тойғоһо менән генә сикләй. Ә бит донъяла, икенсе бер оло шағир әйтмешләй, ҡайғы менән шатлыҡ икеһе бергә ҡосаҡлашып йәшәй. Унан һуң, донъя поэзияһында «донъя ҡайғыһының быуаттар буйы йырланғанлығы, поэзияның кеше шатлығын, уның ижади хеҙмәт, тәбиғәттә еңеү, оло һөйөү шатлығын йырлауға мохтаж икәнлеге, шулай уҡ беҙҙең поэзияның тормошто раҫлаусы һуғышсан поэзия булыуы Вафа Әхмәҙиев кеүек ҙур әҙәби әҙерлеге, киң эрудицияһы булған йәш авторға көн кеүек асыҡ таһа!..

Бындай бер ҡатлы раҫлауға, үҙенең бөтә ижады менән үҙе үк кире ҡаҡҡан был буш фәлсәфәгә ул нисек итеп килгәндер — быныһы бик сәйер.

Поэзияға ҡарата бындай уйлап еткерелмәгән еңел-елпе раҫлауға тукталып та тормаҫҡа булыр ине. Ләкин һуңғы ваҡытта, үҙҙәрен әле әҙәбиәттә йүнләп танытып та өлгөрмәҫтән, матбуғатта бер биш-алты шиғырын баҫтырыу менән үк, үҙ ижадтарына ниндәйҙер һөҙөмтә яһап, үҙҙәренә «ҡулдан килмәҫ» Пушкин «һәйкәл»ен һалырға ашығыусыларҙың ишәйеп китеүе һағайта төшә. Улар араһында, донъяға яңы фекер әйтәйем әле тип, поэзияны хатта тутығып бөткән иҫке йоҙаҡҡа сағыштырыусылар ҙа юҡ түгел. Әйтерһең, шағир йоҙаҡ ватып асыусы йәки биленә бер бәйләм асҡыс тағып йөрөүсе Плюшкин!.. Бындай плюшкиндарҙан поэзияны хоҙай үҙе һаҡлаһын инде!

Бәхеткә күрә, Вафа Әхмәҙиев ундай йоҙаҡ ватыусыларҙан түгел. Уның кешеләргә асып бирерлек үҙ донъяһы, әйтер һүҙе, был һүҙҙе башҡаларға еткерерлек үҙенә хас моңо — «Тауҙар моңо» — бар. Ул «тауҙарға йырҙар» вәғәҙә иткән. Уның ошо тауҙарға «ҡайтырға ашҡындырып» торған «торналар биргән ҡанаты» ла ышаныслы, ныҡлы ҡанат. Ул тормош тауына менеүҙең хозурлығын да, унан «түбән тәгәрләүҙең аяныс» хурлығын да белә. Шуға күрә уны ғүмер юлында быуаттар аша килгән соғоллоҡ — «Ата аҡылы» оҙатып бара, һәм ул, «нығыраҡ тот йүгәнеңде» тип, үҙен ваҡытында ҡулға алырға ла булдыра.

Эй, ир заты! Аҙарынма,
Нығыраҡ тот йүгәнеңде!

Һис онотма тай атланып
Ҡарт донъяла елгәнеңде.
Юлың оҙон, атың арып,
Ерле юҡҡа бышлыҡмаһын,
Өркөп-нитеп яртылыҡта,
Саң эсенә ырғытмаһын.

Был егеттә инде «Имән» ныҡлығы ла бар. Был ныҡлыҡты ул «имән кеүек ирҙәрҙән» мираҫ итеп алған.

Күргәнегеҙ бармы йөҙ йәшәгән
Ҡарт имәндең геүләп янғанын;
Һис иҫе лә китмәй аяҡ үрә
Ут эсендә баҙлап торғанын?..
... Имән яна, баҙлап ҡуҙ ҡала,
Ир хаҡында яҡшы һүҙ ҡала.

Был имәндең тамырҙары тәрәнгә — үҙ халҡының данлы тарихына — «Уҡлы ҡая»ға — ереккән.

Ямғыр булып уҡтар яуған.
Дошман ауған. Ҡая торған.
Ир-егеттәр яуҙы борған,
Ҡалҡан булып ҡая торған.
Ҡая торған! Уҡтарын да,
Туптарын да ҡаҡҡан кире,
Торған уға ғәйрәт биреп,
Ут эсендә ятҡан ере,
Үҙе тамыр тартҡан ере...

Мин, әлбиттә, шиғырҙарҙан тик өҙөктәр генә килтерәм. Ләкин шул өҙөктәрҙән дә шағирҙың эске ғәйрәтен, һүҙ менән эш итә белеүен, шиғыр юлдарын ҡойоп ҡуйыуын яҡшы тойорға була.

Уҙған йәштәр семинарында Вафаның шиғырҙары хаҡында улар күберәк аҡыл шиғырҙары, тигән һымағыраҡ фекер ишетелеп ҡалғайны. Был тәү ҡарашта ғына шулай. Сөнки уның шиғырҙарында төрлө «аһ-ваһ»тар юҡ, ә ысын ирҙәргә хас тойғо бар, һәм ул тойғоһон йүгәнләп тота белә, шуға күрә улар тәрәндәрәк ята. Ә тәрән йылға, Дауыт Юлтый әйтмешләй, тауышһыҙ

аға. Һуңғы ваҡытта шиғырҙа аҡыл һәм тойғо нисбәте хаҡында ҡыҙыу-ҡыҙыу бәхәстәр бара. Күптәр «интеллект яғында». Әйтерһең, быға тиклем поэзия, әйтәйек, Пушкиндан башлап Блокка тиклем, интеллектһыҙ булған! Ә бит поэзия аҡылһыҙ ҙа, тойғоһоҙ ҙа йәшәй алмай. Улар уның ике ҡанаты. Тик тойғо — аҡыллы, аҡыл тойғоло булһын ғына.

Вафа Әхмәҙиев шиғырҙарында мин ошо аҡыллы тойғоно һәм тойғоло аҡылды күрәм. Был урында уның күпселек шиғырҙарына асҡыс булырлыҡ «Көндәштәр» тигән шиғырын телгә алыр инем.

Күңелемдә ике көндәш йәшәй,
Икеһе лә сәмле, тынғыһыҙ:
Береһе уның аҡыл, икенсеһе —
Тойғоларым, тотоп тыйғыһыҙ, —

ти шағир һәм, был ике «көндәштең» үҙ-ара ыҙғышын һүрәтләп, кеше күңеленең диалектикаһын асып бирә, ахыр сиктә улар икеһе лә бик гармониялы рәүештә «татыулаша»:

Күңелемдәге ике көндәштең
Береһен дә яҡлап өндәшмәм:
Ыҙғышһындар әйҙә талғансы,
Татыулашмай, үҙем ауғансы.

Һәм был «ыҙғыш» бик тәбиғи: кеше күңеле шунһыҙ йәшәй ҙә, үҫә лә алмай. Диалектиканың законы ла шул: үҫеш — ҡапма-ҡаршылыктар көрәше. Был көрәште Вафа икенсе бер шиғырында тағы ла ҡырҡыуыраҡ итеп, контрастар менән бик оҫта һүрәтләгән:

Яртым яна, яртым туңа,
Яртымда — боҙ, яртым — ут,
Яртым бында, яртым унда,
Яртым ярһыу, яртым шуҡ.
Яртым — ҡояш, яртым — болот,
Яртым шат, яртым бойоҡ.
Яртым — ағыу, яртым — дарыу,
Яртым — ҡалҡан, яртым — уҡ.
Яртым ярҙа, ярһыу һыуҙар

Яртымдан ярып үтә;
Яртым ерҙә, яртым күктә,
Яртымды яртым тетә!..

Бабичтың яҡшы йоғонтоһонда яҙылған был виртуоз шиғырға һоҡланмай мөмкин түгел. Бәлки, һүҙ уйнатыу менән автор үтә мауығып та киткәндер, ләкин һүҙ уйнатыу оло сәнғәт юғарылығына күтәрелгән икән, ул да поэзия күренеше.

Поэзия үрнәктәре булырҙай шиғырҙар рәтенә тағы «Ямғыр хаҡындағы йыр»ҙы, «Исмәғил йыры»н, «Үлем хаҡында уйланыу», «Ҡош телендәй генә хәбәр көтәм», «Аҡ сәскәлә ине был йүкәләр», «Аҡ сәскәләр», «Ҡыҙыма» кеүек шиғырҙарҙы индереп булыр ине.

Уларҙан яҡшы йыйынтыҡ төҙөп була. Иң мөһиме — китап кәштәһенә бер яңы китап ҡына өҫтәлмәй, ә үҫеп килеүсе шағирҙар сафына өмөтлө яңы бер шағир өҫтәлә.

Шуның өсөн йомшаҡ йәки үтә томанлы булған өйрәнсек шиғырҙарҙан: «Һүҙҙәрем елдән дә көсһеҙ», «Тыуған еремә», «Әллә нисек инде беҙҙең һөйөү», «Йөрәгем түрендә», «Мин йәшлекте шуға оҡшатам», «Һалдат таңы», «Ауылымда яна ул ут», «Ҡар бөртөгө», «Йәшлегемдең таңы атҡан мәлдә», «Аяҙ көндәй кәйеф яҡшы саҡта», «Тик яҙмаһын берүк», «Бәхет», «Ихласлыҡ», «Ваҡыт икән ғүмер үлсәме» кеүектәрен йыйынтыҡҡа индермәгәндә яҡшыраҡ булыр ине.

Һуңғы өс шиғырҙы ғына алайыҡ.

«Бәхет» — фекере яғынан яңы түгел, дөйөм хәҡиҡәткә ҡоролған. «Ихласлыҡ»ҡа, нисек кенә сәйер булмаһын, ихласлыҡ етеңкерәмәй, бөтә шиғыр өгөт-нәсихәттән тора. Ә «Ваҡыт икән ғүмер үлсәме» — үтә абстракт һәм дөйөм. Унан һуң ваҡытҡа ҡарата нисек инде:

Ишәк һымаҡ һис тә ишелеп,
Сама белмәй туҡтап тормай ул, —

тип әйтергә мөмкин? Ишәк ишелеп торорға, ҡом-тупраҡ затынан түгел дә?!

Бында сама тойғоһо авторға ла етеңкерәмәй. Унан һуң:

Әйтерһең ул гүзәл ерҙәрҙә
Хаким була бөтә донъяға.

Мәғрур ул, хыял уға — тормош,
Ә хыялдан уға нур аға, —

кеүек бөҙрә юлдар ҙа һүҙ ҡәҙерен белгән авторға бик ҡулай түгел.

Ҡайһы бер яҡшы тигән шиғырҙарҙа ла бер үк һүҙҙе күп ҡабатлауҙан тавтологияға күсеп киткән урындар, күп һүҙлелек, кәрәкһеҙгә шиғырҙы һуҙыу, ритмды боҙоу («Заманалар аҡҡан һыу икән»), «күңел», «йыр» һүҙҙәренең йыш ҡулланылыуы, «умырзая сәскә төрөнгән» кеүек килбәтһеҙ һүҙбәйләнештәр, «нурының — тауының» ише зәғиф рифмалар ҡулланыу күренештәре китаптан алған яҡшы тәьҫирҙе боҙоп ҡуя.

Былар, әлбиттә, ентекләп ҡарап сыҡҡанда, еңел төҙәтә торған кәмселектәр. Уларҙы мин һәр шиғырҙа күрһәтә барҙым.

Йомғаҡлап, йәнә һүҙҙең башына урап ҡайтам. «Уҡыусыға бер һүҙ» шиғырын ҡайтанан ҡарап сығырға кәрәк. Вафа Әхмәҙиев һынлы яҡшы шағир шиғриәт хаҡында хата фекерҙә ҡалырға тейеш түгел.

Шағирға әйтер һүҙем шул ине.

Аҫылғужа Баһумановтың «Күк томанлы иртәләр» йыйынтығы хаҡында бер-ике һүҙ

Һуңғы ун-ун биш йыл эсендә әҙәбиәтебеҙ, бигерәк тә шиғриәтебеҙ, дәррәү үҫеш дәүерен кисерә. Был үҫеш һан яғынан да, сифат яғынан да, тормоштоң сағылышы яғынан да тоҫмаллана. Тимәк, әҙәбиәтебеҙ бөгөнгө көндә киңлеккә лә, тәрәнлеккә лә, бейеклеккә лә үҫә тигән һүҙ. Бигерәк тә уға йылдан-йыл быуын-быуын йәш көстәр өҫтәлеп тороуы һөйөнөслө. Тағын да шуныһы ҡыуандыра: егеттәр менән бергә, уларҙан һис тә ҡалышмай, шиғриәт бәйгеһенә бик ҡыйыу рәүештә ҡыҙҙар ҙа ҡатнаша башланы. «Башҡортостан ҡыҙы» журналында ғына ла хәҙер йөҙҙән ашыу ҡатын-ҡыҙ авторыбыҙ ҡатнаша, һәм уларҙың бик көслөләре, бик һәләтлеләре бар...

Һандуғасҡа ҡунып һайрар өсөн тал кәрәк булған кеүек, тимәк, ҡыҙҙарыбыҙға ла үҙҙәренең баҫма органы булған «Башҡортостан ҡыҙы» журналы мотлаҡ кәрәк булған икән.

Ҡыҙҙарҙың шулай күпләп әҙәбиәткә ынтылыуы, берҙән, халҡыбыҙҙың культура һәм үҙаң кимәленең ниндәй дәрәжәгә күтәрелеүен күрһәтһә, икенсе яҡтан, әҙәбиәттә бығаса төп ижади көс булып килгән ир-ат хаҡында бик нык уйланырға ла мәжбүр итә. Сөнки, кемгә нисектер, миңә ҡалһа, әҙәбиәткә килеүсе йәштәр араһында ҡыҙҙар егеттәргә ҡарағанда ҡыйыуыраҡ, дәррәүерәк килгән кеүек. Ә бынан бер 5—6 йыл ҙур өмөт баҒлаған егеттәребеҙ нилектәндер һүлпәнәйеп, баҙап ҡалған кеүектәр, хатта ижади яҡтан ниндәйҙер бер торғонлоҡ кисергән кеүектәр. Был хәл күңелде һағайта төшә. Тормошто актив ҡабул итеү һәләтлеге, шиғри тәьҫирләнеү ижади түлдең (отдачаның) кәмей төшөүе бик нык уйланырға мәжбүр итә.

Шуның өсөн ижад бәйгеһенә килгән һәр бер яңы ир-ат исеменә бығаса күрелмәгән һаҡлыҡ менән, хатта ниндәйҙер бер шик менән ҡарайһың. Күңел нисектер һуңғы ваҡытта ир-ат тауышына һыуһаған, был һыуһын ҡанмаҫ тип эстән генә шомланып та ҡуяһың. Сөнки һуңғы ваҡытта беҙҙең ир-ат та ҡатын-ҡыҙҙарса яҙа башлаған төҫлө. Лирикала беҙ үтә «нескәләнеп», хатта сөсөләнеп киттек, буғай. Ысык-сәскәләр, нур-йондоҙҙар, йыр-моңдар, эңер-таңдар үтә күбәйеп, ҡылыс сыңдарын, бөркөт саңҡыуҙарын, айғырҙар кешнәүен, бурандауылдарҙы баҫып, томалап ҡалған һымаҡ.

Лирика тигән һүҙгә төрөнөп төрлө шыңшыу, илау-һыҡтау, күҙ йәштәре урынына ысын ир һүҙен ишетке килә.

Һәм бына Урал аръяғында, Ирәндек буйҙарында Ватан һуғышы бөткән йылда тыуып, Темәс интернат-мәктәбен тамамлап, 8 йыллыҡ мәктәптә уҡытып, унан һуң өс йыл һалдат хеҙмәтен үтәп, хәҙер инде 4-се йыл студент өйрәһен татып йөрөгән Баһуманов Аҫылғужа тигән егеттең «Күк томанлы иртәләр» тигән шиғырҙар йыйынтығы менән танышып сыҡҡас, ошо күптән көткән тауышты шәйләп ҡалғандай булдым.

Традицион бәйге образына ҡоролған «Ваҡыт етте. Бәйгеләргә сығам» тигән тәүге шиғырҙы уҡығас та, ҡолаҡҡа баҙыҡ, сәңгел, ғәйрәтле, хатта сая бер тауыш яңғырап китте.

Ваҡыт етте. Сығам бәйгеләргә.
Кирелеп тә тороп еләйем,
Елеүҙәрҙең тәмен беләйем.
Иң беренсе килеп, теҙгенемде
Бәхет ҡаҙығына әләйем! —

тигән егет ҡәһәтләнеүе бар был тауышта. Бәлки, һауалыраҡтыр ҙа? Ләкин шундай ниәт булыуы насар түгел. Маршал булырға дәрт итмәгән һалдат һалдатмы ни ул!

Эй, еремдең нурға сумған
Күк томанлы иртәләре!
Ысығында тәгәрәтеп,
Ҡосағында иркәләүе!

Ысыҡ, әлбиттә, бында ла бар. Ләкин был уҫка һалып тәсбих әйтеп, бышылдап ултыра торған ысыҡ түгел, ә үҙең тәгәрәп ятып аунай торған кешесә ысыҡ. Һандуғастар һыу тип эсә торған тәбиғи ысыҡ.

Далаларҙың, һай, шул киңлеге —
Күкрәк киреп толпар сапмаға!
Саҡрымдарҙы аҙым итер ирҙәр
Юл сығалар бәхет тапмаға.
Таң һарынан ҡара кискәсә
Татырлы ла ерҙе шаңғытып,
Һыбайлылар елә, бар донъяға
Тир еҫе һәм ғәйрәт аңҡытып.
Ә һуң бәхет ҡошо табылғанмы,
Үтәлгәнме ирҙәр теләге? —
Мәгәр сос һыбайҙың ҡороғона
Ҡояш үҙе ҡайта эләгеп!..

Тир еҫе, бәлки, эститек яҡтан бик зауыҡлы уҡ түгелдер, ләкин был ғәжәп ҡояшлы һәм кешесә, ирҙәрсә шифыр. Исмаһам, ғәйрәт, ныҡлыҡ, киңлек тояһың унан. Йыйынтыҡта бындай тормошто, йәшәүҙе, ҡаһарманлыҡты раҫлаусы, Аҫылғужаның үҙенсәлекле тауышын билдәләүсе, мускуллы шифырҙар байтаҡ. Уларҙы мин айырыуса «Бер взвод һалдат яланда...» «Ялған булды бер саҡ һүҙем», «Дала иңләп», «Күләгәлә ҡымыҙ эсәбеҙ», «Ҡайғы ауырлығы ни сама», «Ауылым эргәһендә ҡара урман», «Көҙгө аҡлан», «Башҡортостан», «Салауат нисә йәшендә», «Ҡурайға йыр», «Ҡояшты тиңләп тәңрегә», «Яңы йыл тураһында һүҙ» тигән шифырҙарҙы күрһәтер инем. Тартылған кереш кеүек юлдар уларҙа!

Һуңғы шифырҙа мин хатта Лонгфеллоның «Гайавата хаҡындағы йыр» киңлеген тойғандай булдым.

Был шиғырҙар поэзия яралғандан бирле үҙләштерелгән традицион темаларға ҡоролған булһалар ҙа, уларҙың һәр береһендә был темалар яңыса яңғыраш ала. Уларҙа йәш шағирҙың шиғри образ менән, һүҙ материалы менән эш итә белеүен, ыҡсымлыҡҡа эйә булыуын күрәһең. Шулай уҡ эске динамика, фекер ағышының көтөлмәгәнсә яңы төҫ алыуы, афористик һаранлыҡ, сама тойғоһо — былар бөтәһе лә йәш авторҙың шиғыр культураһына ярайһы уҡ күтәрелеүен раҫлай. Унан һуң Аҫылғужа тәбиғәт донъяһына бик үҙенсә ҡарай белә: бер-ике штрих, бер-ике һыҙат менән сағыу, гравюра һымаҡ асыҡ картиналарҙы күҙ алдына килтереп баҫтыра.

Мәҫәлән, «Ауылым эргәһендә ҡара урман» шиғырындағы:

Бал ҡорттары һәр бер ағасына
Тәпән-тәпән итеп бал аҫҡан;
Муйылдарҙың көн көйҙөргән тәнен
Ҡомалаҡтар алған уратып, —

кеүек юлдар йәки «Көҙгө аҡлан» шиғырындағы:

Көҙгө аҡлан. Бер ситендә
Хужаһыҙ ҡалған ҡыуыш.
Күптән һүнгән торонбаштар.
Япраҡ ҡойолған тауыш.
Сеү! Мин аттар бышҡырыуын
Ишетәм түгелме шул?
Ишетәм дә ҡурпы еҫенә
Иҫерәм түгелме шул, —

кеүек строфалар ҙа ошо хаҡта һөйләй. Бында күҙ ҙә, ҡолаҡ та, еҫ тойоу органы ла — бөтәһе лә теүәл эшләй. Мин дә автор менән бергә:

Күргәндәймен күк томанда
Һырғый ҡарағайҙарҙы,
Усаҡ тирәләй ултырған
Терпе баш малайҙарҙы.

Аҫылғужа донъяға, тәбиғәткә, кешеләргә ниндәйҙер тәбиғи, алсаҡ, сәләмәт мөнәсәбәттә, ул бөтә нәмәгә көр күңел

менән ҡарай белә, аҡ һырма кейгән урманда, ҡар ҡаплаған кәбәндә лә йәй йомартлығын, йәй хозурлығын, күңел көрлөгөн тоя.

«Салауат нисә йәшендә?»
Хаҡлыҡ өсөн көрәш йәшендә,
Бәхет өсөн көрәш йәшендә!» —

был ҙур табыш, эпиклыҡҡа юл.

«Яңы йыл тураһында һүҙ»ҙә Аҫылғужа эпик киңлектәргә әйҙәй төҫлө. Тәүҙә уны баллада, легенда кеүек эпик башланғыстар көтә кеүек.

Ләкин уға яҙылғаны менән генә ҡәнәғәт булмайынса, яҙасаҡтары менән йәшәргә кәрәк. Ҡаянан ҡубып төшкән таш ҡына етмәй, ҡаяның үҙен ҡуптарырға ине. Аҫылғужала был ғәйрәт етерлек. Уға бөркөттәр киңлеге кәрәк. Ә ҡанаттар тик осҡанда нығый. Ирлек, егетлек, ҡаһарманлыҡ ылығыр тигән өмөт нығый.

Аҫылғужаның ижад биографияһы әле башлана ғына. Шиғырға үҙеңдең бөтә яҙмышыңды, барлығыңды ышанып тапшырғанда ғына, ул һиңә ышана ала.

Етешһеҙлектәр: ҡабатлау, форма бер төрлөлөгө, өйрәнсеклек, ритм-рифмаға талапсан булмау, диалектизмдар, натурализм күренештәре. Быларҙы хәл итергә була.

Йыйынтыҡ бар. Иң мөһиме — шағир бар.

Павел Васильев тибындағы шағир килә!

25 февраль 1971 йыл.

Бөркөттәр төйәге

Хәсән Назаровтың тәүге шиғырҙарын әле ул Совет Армияһында хеҙмәт иткән сағында уҡ уҡығайным. Башта уның менән хаттары аша танышып, һуңынан үҙен күреп белеп, яңы яҙған һәр бер шиғырын уҡып, уның үҙ-үҙенә ғәжәп талапсан, тормош һәм шиғриәт хаҡында етди уйланыусан, әҙәби һүҙ сәнғәтенә табынып йәшәгән йәш шағирҙы күреп ҡыуандым. Сөнки йәш ҡәләмдең әле яҙғандарынан бигерәк яҙасаҡтары, бөгөнгөһөнән бигерәк иртәгәһе — әле тубырсыҡ эсендә йәшеренеп ятҡан ҡарағайҙан киләсәктә ҡоластарын йәйеп шаулар ҡарағай ҡәҙерлерәк.

Әҙәбиәткә кисә балҡып килеп инеп тә, бөгөн әйтер һүҙҙәрен әйтеп бөткән йәштәр ҙә аҙ булманы, шуның өсөн йәш кешенең потенциаль мөмкинлектәре — киргәненән кирер ҡоласы бик мөһим нәмә.

Йәшлек — үҙе үк шифриәт, тиҙәр, ә бына йәшлекте ғүмер буйына һаҡлап алып ҡалыу һәләтлеге — был инде шағирҙың бәхете! Шағирлыҡ ул донъяға ғүмер буйы бала күҙе менән бағып, уның бөтә ҡайғы-хәсрәттәрен, бәхет-ҡыуаныстарын үҙ күреп ҡабул итерҙәй һиҙгер йәш йөрәк, ярһыу күңел аша үткәреп, уның хаҡында аҡһаҡалдар соғоллоғо менән сәсәндәрсә фекер йөрөтә белеүҙәлер. Был ҡәбилиәт һәр кемгә теймәй. Быныҡ өсөн, тәбиғи һәләтлектән тыш, аяуһыҙ хеҙмәт менән бергә ошо һәләтлегеңде халҡың рухы өсөн бер маҡсатҡа тупларҙай ғүмерлек ихтыяр ҙа кәрәк.

Хәсән Назаров йөҙөндә мин бына ошо, егет йөрәгендә ятыр эйәрле-йүгәнле ат ише, аҫыл хазиналарҙың башланғысын күреп ҡыуанғайным. Хәҙер инде ул хазиналарҙың күҙгә күренеп асыла барыуына һөйөнәм. Ул һәр саҡ үҙ-үҙенән ҡәнәғәтһеҙ булып, һәр яҙған шифырына бөгөнгө ҡаҙаныштар бейеклегенән ҡарап, ныҡышмалы рәүештә үҙ тауышын эҙләй. Һәм был тауыш — яңы шағир тауышы — уның үҙенә лә һиҙелмәҫтән, ярайһы уҡ төҫмөрләнеп тә килә. Бишектәге бала бишкә төрләнгәндәй, был тауыш та, әлбиттә, төрлө моңдар менән байығыр, заман тауышына аһәңдәш булып, яңы ауаздар менән тулыланыр, тормош һәм күңел тәжрибәһе менән ҡушылып, үҙенең көсҡеүәтен нығытыр; әммә уның төп моңо, асылы инде төҫмөрләнеп еткән, быуынға ултырған һәм Хәсәндең үҙ быуындаштарының тауышы булып яңғыраҙай тип әйтергә була. Уның «Бөркөттәр төйәге» тигән тәүге китабы асыҡ раҫлай быны.

Һәр сағыштырыу аҡһай, тиһәләр ҙә, һәр күренештә сағыуыраҡ күреү өсөн, уны башҡа күренештәр менән сағыштырып ҡарамай ҙа булмай.

Хәсән Назаров хаҡында һөйләгәндә, ирекһеҙҙән уның ҡәләмдәшен, шул уҡ һалдат юлын үткән Рәшит Назаровты иҫкә төшөрәһең. Фамилиялары менән аҙаш булһалар ҙа, бер-береһенән улар бөтөнләй айырылып торған икеһе ике характер. Хатта уларҙы шифриәттәге бер-береһенә ҡапма-ҡаршы торған антиподтар итеп ҡарарға ла булыр ине.

Әйтәйек, тегеһе — Рәшите — ярһыу, ә быныһы сабырыраҡ тәбиғәтле. Тегеһе киң ҡоласлы образдар менән уйлаһа, быныһы

тормош һәм тәбиғәттең бик ваҡ деталдәренә лә ентекләп ҡарай белә. Әйтерһең, береһенең ҡулында — телескоп, икенсеһенекендә — микроскоп. Тегеһе бер аҙ ҡырыҫыраҡ булһа, бынығы баҫалҡыраҡ. Рәшит ярһыу тойғоло, хатта космик образлы романтик булһа, Хәсән эске кисерештәр менән тулы сабыр моң шағиры — нескә лирик. Тәүгеһе шиғыр структураһын ҡороуҙа эре, сағыу мозаика менән эш итһә, баҙлап торған төҫтәр яратһа, икенсеһе йомшаҡ, яғымлы акварель менән эш итә, ярым күләгәле, береһенән икенсеһенә талғын ғына, һиҙҙермәй генә күскән төҫтәрҙе үҙ итә. Бөтә шиғыр туҡымаһында Рәшиттәге мажор урынына бынығында минор ноталары өҫтөнлөк ала. Быларҙың ҡайһыһы яҡшыраҡ һуң? Минеңсә, икеһе лә яҡшы — имәне лә, ҡайыны ла!.. Сөнки һәр рәссам, һәр музыкант үҙенең эске донъяһына, үҙ тәбиғәтенә, үҙ тауышына тоғро булырға тейеш. Шулай булмаһа, улар үҙҙәренә хыянат итер, береһе Левитан, береһе Врубель булайым йәки береһе Маяковский, береһе Есенин булайым тип, эклектикаға бирелер ине; ундайҙар эҙләнеүсән булмай, эйәреүсе генә булып ҡала. Стиль, почерк бит, Жюль Ренар әйтмешләй, кешенең үҙе, уның йөҙө, һүҙе. Ғәриплектән башҡа, донъяла һәр кем үҙен эҙләһен, шунда ғына ул әҙер әҙәби ҡалыптарҙан ҡотолоп, эклектикаға бирелмәйенсә, үҙенең шиғри һүҙен табасаҡ...

Хәсән Назаровтың тәүге шиғырҙарынан алып һуңғы ваҡытта яҙғандарына — «Бөркөттәр төйәге» китабына тиклем уның үҙ тауышын эҙләүҙә дөрөҫ юлдан барғанын, ул тауышты үҙ ерлегенән тапҡанын һәм уны үҙенсә нығыта барғанын асыҡ күргә була.

Бына уның үҙ ғүмерендә һәр шағир яҙған тыуған ауыл һәм изгеләрҙең-изгеһе булған әсә хаҡындағы тәүге шиғырҙары.

«Ҡырҙарын бишек итеп», бүләккә моңдарын алған тыуған ауыл!..

Саң-саң иткән салғы сыңын
Тыңлай сауҡалыҡтары.
Уйнай шунда аҡланында
Сапсан ҡолонсаҡтары.
Һәр кем, ҡан-ҡәрҙәше күреп,
Йөрәк дарыуы бирә.
Татлы һүҙ, асыҡ йөҙ менән
Эс-бауырыңа керә.

Шул юлдарҙан уҡ йәш шағирҙың тел ҡәҙерен, һүҙ бәҫен яҡшы тойоуын, тыуған ергә, уның эшсән кешеләренә мөнәсәбәтен, уның үҙенең дә «сүкетеп, ер һиңкетеп», менгегә тайҙар өйрәтеп, ер улы булып үҫеүен, шуға күрә уның «һәр ҡыуаҡлыҡ, таллыҡта һайрар ҡош» булыуын күрәһең. Шифыр юлдарындағы хатта өндәр яңғырашына ла һоҡланмай булдыра алмайһың. Улар бик тәбиғи һәм тәбиғәттең үҙ өндәре булып яңғырай.

Иңбашыңда көйәнтәләп ташып,
Шишмәләрҙең тәмен татытҡан.
Миңә һаман йылы бирер өсөн
Тормошта ул аҙмы ут йотҡан...

«Әсәйем» шифырындағы был юлдар ҙа тик әсәгә оло мөхәббәт мөлдөрәмә тулы күңелдән генә түгелергә мөмкин. Ғөмүмән, Хәсәндең әсәгә арналған байтаҡ юлдарында был мөхәббәт тыуған ергә булған һөйөү дәрәжәһенә күтәрелә. Мәҫәлән, «Һалдатҡа оҙата ауыл» шифырында әсә образы аша улын һалдатҡа оҙатҡан ил образы күҙ алдына баҫа. Беҙҙең күптәребеҙҙең яу яландарынан әйләнеп ҡайта алмаған атайҙарыбыҙҙы оҙатҡан әсәйҙәребеҙ инде улдарын ил сиктәренә осороп ебәргәндә, ил күңелен, ил сабырлығын һынландырған тере һәйкәл түгелме һуң?

Һәр кем ашыға әйтергә
Йылы һүҙ, изге кәңәш.
... Әсәкәйем баҫып тора
Сабырлыҡ менән йәнәш...

«Юл кейеме өҫкә кейелгән» тигән иң яҡшы шифырҙарҙың береһендә лә әсә образы тыуған ил образы менән йәнәшә тора.

Юҡ, туҡтатма, әсәй, улыңды,
Минең өсөн кем һуң юл ярһын?
Өмөттәрем еккән аттарҙы
Бәхеттәрем генә туғарһын!

Шундай улына ил-әсә ҡалай инде үҙ фатихаһын бирмәҫ тә ҡалай итеп үҙ яҙмышын уның ҡулына ышанып тапшырмаҫ? Сөнки уның улы донъяның бөтә матурлыҡтарына ғашиҡ йөрәкле,

уның бөтә йән эйәләренә шәфҡәт һәм миһырбанлыҡ менән тулы бәғерле. Бер кем эргәһенән дә ғәмһеҙ үтеп китә алмай ул.

«Ҡояш-өләсәй ҡунаҡтан әле ҡайтмаған төҫлө» болотло, һалҡын көҙгө көндә « әллә ни ҙур эш итеп» япраҡтар йыйып йөрөгән бер сабыйҙы ла:

Аңлап уны, һөйөп үтәм
Ҡәҙерле моңдаш итеп, —

ти ул. Сөнки ошо япраҡ йыйған сабыйҙа ла ул үҙенең ҡәрҙәшен, моңдашын күрә.

Был донъяға һөйөп-һағынып килдем,
Һағыныуым ҡалыр киткәс тә...

Минеңсә, был юлдар Хәсән Назаровтың бөтә шиғырҙарына асҡыс булырлыҡ.

«Ир-атҡа төйәк, терәк булып күкрәп тыуған, сафлығын да һалҡын шишмә итеп эсергән» тауҙарҙа ла кешеләрҙең ҡәрҙәшен күргән шағирҙың был тәүге йыйынтығын бер һүҙ менән «Ҡәрҙәшлек» тип атарға ла булыр ине. Эйе, был шиғырҙар туған тәбиғәткә, тыуған ер-һыуға, тыуған тауҙарға, шул тауҙарҙы төйәк иткән бөркөт йөрәкле кешеләргә, шул тау-таштарға данлы тарих яҙған ҡаһарман халҡыбыҙға оло һөйөү, йөрәктән һыҙылып сыҡҡан ҡәрҙәшлек тойғоһо менән тулы. Был тойғо — кешеләрҙең ҡайғы-хәсрәтенә, уй-хыялдарына һәм уларҙың бөтә булмышына, яҡты киләсәгенә ҡәрҙәшлек тойғоһо. Был тойғоно йәш шағир үҙенсә баҙыҡ образдар, ихлас йөрәк һүҙе һәм философик фекерләүҙәр аша бирергә тырыша. Был ынтылыш шиғырҙан шиғырға киңәйә, тәрәнәйә, камиллаша бара. «Бөрйәндә», «Ир ҡанаты», «Атым, затым, заманым», «Туғайҙа», «Үҙе түгел, аты абынһа ла...», «Иҫеңдәме, күгүләндәр кисеп...», «Усаҡ яна...» ише шиғырҙарҙа — Хәсән Назаров шиғриәтенең төҫө, моңо, бөтә булмышы.

Әлбиттә, йәш шағирҙың был үҫеш юлында үҫеш сирҙәре лә юҡ түгел. Әйтәйек, телде нескә тойоу, һүҙ байлығына ынтылыу ҡайһы саҡта бик етди шиғырҙа ла үҙенең кире күренештәренә — саманы онотоп ебәреүгә алып килгеләй.

Хәсән Назаровҡа асылда теүәл һәм бай рифмалар эҙләү, яңы рифмалар ҡулланырға тырышыу хас. Әммә был тәңгәлдә

матурлыкты тоя белеү ҙә ҡайһы саҡта мауығыуға әйләнеп киткеләй.

Ә былай, тотош алғанда, һүҙ туҡымаһы, тел нескәлеге, буяуҙар баҙыҡлығы яғынан Хәсәндең был «Бөркөттәр төйәге» китабындағы шиғырҙары йәш шағир өсөн, йәштәр ижады өсөн күптәр күңеленә тик ҡыуаныс ҡына өҫтәр.

Буяуҙар баҙыҡлығы, образлылыҡ һәм һүҙ моңо тигәндән, уларҙың ерҙең, тормоштоң үҙенән үҫеп сығыуы, уҡыусы күңеленә һиҙҙермәҫтән инеүе ҡиммәт. «Туғайҙа» шиғырында, мәҫәлән, автор былай ти:

Салғым уйнай ҡулдарымда,
Бәреп йөҙгә ер тынын.
Оса ҡыйып, оса ҡайып,
Берсә йырлап, бер тынып.
Бакуй үрелә толомдай,
Сыжлап үткән ыңғайҙа.
Ә ни тора салҡан ятып
Ял итеүе туғайҙа!
Шул саҡ ҡапыл йәшен ялтлап,
Уйҙарҙы һүтеп китә,
Талда элеүле салғымды
Сыңлатып сүкеп китә.

Ер-күгебеҙгә ауаздаш был имен хеҙмәт картинаһын тик тәбиғәт балаһы ғына шулай күрә һәм кисерә алалыр.

Хәсән шулай уҡ афоризм булырҙай ҡанатлы һүҙҙәр ярата. Был йәһәттән уның иң яҡшы шиғырҙарынан «Уҡ» тигәнен үрнәк итеп алырға мөмкин:

Уҡ баһаһы — атылғандан һуң,
Һүҙ баһаһы — әйтелгәндән һуң.
Мәрәйлектә — мәргәнлек ирке,
Мәргәнлектә — егетлек күрке.
Уҡ ҡөҙрәте — ян керешендә,
Ир ғәйрәте — ил кәңәшендә.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны ғына әйткем килә: Хәсән Назаровтың был моң-хискә бай, бик тә кешелекле һәм талантлы йыйынтығы үҙ-үҙенә лә, башҡаларға ла талапсан йәш шағирға

ҡарата ҙур өмөттәр уята. Ә шағир юлы, уйлаһаң, башлана ғына әле. Авторға аҡ юл теләп, ахырҙа ул Рәсүл Ғамзатовтан бик матур тәржемә иткән «Йәш шағирға» тигән шиғри кәңәште генә ҡабатлайһы килә:

Ҡайғы, шатлыҡтарҙы тик үҙенсә
Тоя, күрә белһен йөрәгең.
Бер үк энә менән тегәләр бит
Аҡ кәфенде һәм туй күлдәген.
Бәхет хаҡында яҙ, бәхетһеҙҙе
Урап үтмә, уйың тар итмә,
Көмөш шишмәне бит һалҡын ҡар һәм
Яҙ йылыһы бергә бар итә.
Мөхәббәтте йырла илһам менән,
Тик тағы ла шуны онотма:
Ысын һалдат ниндәй осраҡта ла
Нәфрәт хисен һис бер онотмай...

1972 йыл,
«Ағизел» журналы

Илле шиғыр хаҡында

(Мәүлит Ямалетдиновтың «Аттар саба» китабына)

Шағирҙың донъяһын йөҙләгән шиғырынан да белеп бөтөү мөмкин түгел. Ләкин уның шағирмы, түгелме икәнен бер генә шиғырынан да тоҫмалларға булалыр.

Мәүлит Ямалетдиновтың «Аттар саба» тигән тәүге шиғырҙар китабын уҡып сыҡҡас, башҡорт поэзияһына яңы бер исем өҫтәлеүенә һөйөнөп, мин ошо хаҡта байтаҡ уйланып йөрөнөм.

Сөнки һуңғы йылдарҙа шиғриәткә килеүсе йәштәр араһында яңы исемдәрҙең бик һирәк күренеүе, күренгәндәренең дә дөйөм һүҙ ағымы эсендә юғалып ҡалыуы, ә инде бер-ике китап сығарғандарының, бик маһайып китеп, ижади яҡтан үҫмәйенсә, бер урында тапанып тороуҙары бик хәүефләндерә.

Был күренештә, әлбиттә, бөтәбеҙҙең дә ғәйеп барҙыр. Ҡайһы бер йәштәрҙе гражданлыҡ һәм ижади яҡтан етлекмәгән көйө

ашығып Союзға алыу ҙа, нәшриәт һәм редакцияларҙа профессиональ талапсанлыҡтың етешмәүе лә һәм ысын поэзияны ялғандан айыра барырға тейеш булған әҙәби тәнҡиттең ғәмһеҙ булыуы ла ижади торғонлоҡҡа килтерә торғандыр.

Ә ижад булмағанда, һүҙ генә күбәйә.

Быны бигерәк тә шиғыр кисәләрендә ныҡ тояһың. Ҡайһы берәүҙәрҙең шиғыр тигәнен тыңлайһың да, ни хаҡында булды әле был, тип аптырайһың.

Һүҙҙәр, һүҙҙәр, һүҙҙәр!.. Ә күңелдә был һүҙҙәр шарламаһынан бер-ике ынйы бөртөгөнән башҡа бер ни ҙә тороп ҡалмай. Уларын да әле ҡасандыр, кемдеңдер китабынан уҡыған булғанға ғына ҡолаҡҡа элеп ҡалаһың.

Әлбиттә, былай һүҙ менән уйнаш итеүҙең шиғриәт менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ. Ә был һүҙҙәр йыйылмаһы китап булып сыға икән, был бары һүҙ менән кәсеп итеү генә. Аныһат кәсеп, әлбиттә! Ә шиғриәткә бынан күпме зыян!.. Кәсепселәр бит һүҙҙең бәҫен ебәреп кенә ҡалмайҙар, ә үҙҙәренә саҡлым әйтелгән шиғри фекерҙәрҙең дә, башҡалар тапҡан шиғри табыштарҙың да тәүге сафлығын, күркен, йәмен мәсхәрә итәләр, уҡыусының күңелен биҙҙерәләр. Ундайҙар тик әҙергә хәҙер генә булып йәшәй. Әҙер темалар, әҙер формалар, әҙер образдар менән эш итәләр. Уларҙың кешеләргә әйтер һүҙҙәре лә, башҡаларҙан айырылып торған йөҙҙәре лә, үҙ донъялары ла юҡ. Ҡыҫҡаһы, үҙ шәхестәре юҡ. Ундайҙар үҙе ҡүрҡа, үҙе йолҡа тигәндәй, башта ҡыйыуһыҙыраҡ булһалар ҙа, үҙҙәренә һүҙ әйтеүсе-нитеүсе булмағанын күреп, тора-бара хатта көпә-көндөҙ, күҙгә ҡарап ҡараҡлыҡ ҡыла башлайҙар. Башҡаларҙың рухи милкенә законлы хужа булып алалар.

Ә ҡарауылсы — тәнҡит бабай — һөрән һалаһы урынға, үҙенең кандидатлыҡ толобона төрөнөп, докторлыҡ төштәрен күреп, йоҡлай бирә. Йоҡоһонан уянған хәлдә лә күрер нәмәне күрмәй үтә, ә күрмәҫтәйен ҡапшап таба, хатта тешһеҙ урты менән һурып сығара...

Ләкин тере фекер, ысын шиғриәт уның әҙер кәштәләренә, һүҙ-төшөнсәләр ҡыҫаһына ҡарап тормай, әлбиттә. Ул үҙ законы менән йәшәй, эҙләнә, таба. Ҡаулан балаҫты ярып сыҡҡан үлән кеүек, ҡалҡынып, яңы һүҙ әйтә. Яңы исемдәр шулай килә...

Шулай ҙа, бер ауыҙың бешкәс, һалҡын һыуҙы ла өрөп эсәһең. Һәр яңы исемгә инде ниндәйҙер һынсыл һағайыу менән ҡарайһың,

уның һәр яҙған юлына ҡаҙалыусанираҡ булаһың һәм төрлө яҡтан төпсөп уҡырға тырышаһың. Ләкин бер-ике шиғырҙы уҡығас та, күңелде ҡыҫып торған был тойғо юҡҡа сыға. Үҙеңде әллә күпме шырлыҡтарҙы ярып үткәндән һуң сәскәләрҙең хуш еҫтәре аңҡып торған ҡояшлы иркен аҡланға килеп сыҡҡан кеүек хис итәһең.

Мәүлит Ямалетдиновтың «Аттар саба» китабын уҡый башлағас та, күңелде ошо сафлыҡ, яҡтылыҡ, иркенлек тойғоһо биләп ала. Әҙәбиәткә шундай үҙенсәлекле, үҙенең әйтер һүҙе һәм ҙурмы-бәләкәйме үҙ донъяһы булған яңы шағир килеүен күреү бик тә ҡыуаныслы, әлбиттә.

Илле шиғырҙан торған был китапты мин бер тында уҡып сыҡтым. Минең алда төрлө ваҡытта яҙылған төрлө шиғырҙар тупланған ғәҙәти бер йыйынтыҡ түгел, ә талантлы шағирҙың эске һиҙемләүе менән бик ентекләп һайланған, билдәле бер маҡсат ҡуйып, үҙенсә бер композицияға ҡоролған шиғырҙар ята ине. Бындай әҙерлек үткән тәүге китаптар һирәк була, әлбиттә.

Мәүлит Ямалетдиновтың шиғырҙары бынан бер йыл элек шағирҙар секцияһында тикшерелгәйне инде. Унда бөтәбеҙ ҙә авторҙың үҙенсәлекле һәм өмөтлө булыуын билдәләп, кәмселектәрен күрһәтеп, байтаҡ кәңәштәр ҙә биргәйнек.

Был һөйләшеү бушҡа китмәгән икән. Ошо ваҡыт эсендә ул үҙ ижады хаҡында күп уйланған, үҙ өҫтөндә күп эшләгән һәм бына килеп әҙер китап менән сығыш яһай.

Китапта өйрәнсек йәки күнекмә шиғырҙар юҡ дәрәжәһендә. Күпселек шиғырҙары шағирҙың үҙ тауышы, үҙ мине, үҙ холҡо барлығын әйтеп тора. Үҙенсәлекле шағирҙың кәмселектәре лә үҙенсә. Улар ижад процесында иҫкермәй ҡалған, еңел төҙәтерлек кәмселектәр (мин уларҙы текста күрһәтә барҙым). Иң мөһиме — шағир үҙе бар, эйе, шағир һәм талантлы шағир, тип мин икеләнмәй әйтә алам.

Шиғриәткә үҙенең бөтә тәбиғәте менән, уй-фекер йөрөтөү үҙенсәлеге менән башҡорт халыҡ ижадының бай хазинаһына ереккән, донъяны танып-белеү ҡеүәһе менән зирәк аҡыллы сәсәндәр традицияһына яҡын торған «һүҙгә һаран, фекергә йомарт» шағир килә.

«Тыуған яғым гүзәл яҡ булды» тигән тәүге шиғырҙан килтерелгән ике юл тәүге бүлеккә исем дә, эпиграф та булып тора:

Халҡым күңеле аҫыл таш булды,
Рухым аҙығына тат булды.

Был юлдар, шағирҙың ижад сығанаҡтарын асыҡлап, шиғырҙарҙың тәбиғәте менән халыҡ ижадына, халыҡ тарихына һәм халыҡ тормошона яҡынлығын да билдәләй. «Ҡайтыу» шиғырында әйтелгәнсә, авторҙы:

Һәр әкиәт үҙенсәләй
Балалыҡҡа алып ҡайта.
Сәйәхәттәр бушҡа түгел —
Ай үҫһен көндә үҫеп,
Бөгөнгөгә байып ҡайта.

Халыҡ ижадына хас булғанса, шағирға афористик тел, тапҡырлыҡ һәм ябайлыҡ хас. Мәҫәлән, һигеҙ юллыҡ шиғырҙа ғына күпме мәғәнә ята:

Йәшлек бит ул — йүгәнһеҙ ат,
Алдын бирмәй ҙә ҡуя.
Шул дәүер була бер ҡабат,
Үтһә — килмәй ҙә ҡуя.
Ҡартлыҡ — ҡарт ат, туйҙа елмәй,
Елһә — үтмәй ҙә ҡуя.
Ҡартлыҡ һинән һорап килмәй,
Килһә — китмәй ҙә ҡуя.

Йәки ғәрәп-фарсы шиғриәтенән килеп ингән робағи формаһын ҡулланып яҙылған «Йәйғор» шиғырын ғына алайыҡ:

Күк күкрәне, йәшен йәшнәне,
Һарайҙағы айғыр кешнәне,
Күктән яман күкрәп, ерҙе сапсып,
Ауыҙлығын өҙә тешләне.
Менеп ошо ярһыу айғырға,
Ҡаршы саптым килгән ямғырға.
Бар ниәтем — алдан барып етеү
Ямғырҙан һуң ҡалҡыр йәйғорға.

Елдәй елəм йəйғор артынан,
Һыуҙар кисеп, тауҙар артылам.
Сапҡан һайын ара алыҫайып,
Аҡ күбеккə батты атҡынам.
Күл, йылғалар ташты ямғырҙан,
Йыуашланды аҫау айғыр ҙа.
Ат атланып шып-шып ҡайтып индем,
Өмөтөмдө өҙөп йəйғорҙан...
... Күк күкрəне, йəшен йəшнəне,
Һарайҙағы айғыр кешнəне.
Хыял ҡыуған малай иҫкə төшөп,
Иренемде ҡырҡа тешлəнем.

Йөкмəткенең байлығы хаҡында əйтеп тораһы ла юҡ: тотош бер тормош. Ниндəй генə аяныслы булмаһын, балалыҡ хыялдарының ҡырыҫ ысынбарлыҡ менəн тəүге ҡаршылыҡтары тыйнаҡ һəм яҡты бер йылмайыу менəн иҫкə алына. Ләкин йəйғор ҡыуған малай характерында эпос батырҙарына хас булған киң ҡолас, сая егетлек күрəһең. Уның əле был доньянан киткəнгəсə йəйғор ҡыуасағына ышанаһың. Тик инде ул уны башҡасараҡ ҡыуасаҡ!

Һүрəтлəнгəн трагик хəлгə ҡарата халыҡсан күңел күтəренкелеге, киләсəккə өмөт менəн ҡарау шифырҙың формаһында ла күренеп тора. Боронғо робағи формаһы үҙенсə бер яңы төҫ алып, халыҡ ижадындағы йəйғор төҫлө сағыу образдар менəн ҡаймаланып, бик тəбиғи үрелеп бара. Йəш шағир ижадының иң сағыу үҙенсəлектəренең береһе — сəсəнлек ҡеүəһе — айырыуса уның «Йомаҡ» тигəн шифырында ярылып ята. Аҡмырҙа сəсəн менəн Ҡобағош сəсəн əйтешен хəтерləткəн был əҫəрҙе мин, əлбиттə, «Əйтеш» тип атар инем. Бында сəсəндəрҙең əйтеш традицияһы бик уңышлы файҙаланылған. Һəр һорауға ҡайтарып бирелгəн яуап тапҡыр һəм тəбиғи (əйтеште тулыһынса килтерəм):

Ирəмəлдең ҡан тамыры
Нимə булыр икəн ул?
Бер кителһə, ялғап булмай, —
Ул ни булыр икəн ул?
Ирəмəлдең ҡан тамыры
Иҙел булмай, ни булһын!

Бер кителһә, ялғап булмай, —
Күңел булмай ни булһын!
Үҙе бөтһә, эҙе ҡалыр, —
Белһәң ине, ни икән?
Ташһа, аҡыл тыя алмаҫ,
Күрһәң ине, ни икән?
Үҙе бөтһә, эҙе ҡалыр, —
Йәшлек көсө түгелме?
Ташһа, аҡыл тыя алмаҫ —
Һөйөү хисе түгелме?
Илатҡан да, йыуатҡан да
Нимә булыр икән ул?
Һиңә дуҫ һәм дошман тапҡан —
Ул ни булыр икән ул?
Илатҡан да, йыуатҡан да
Йыр-моң булмай, ни булһын?
Һиңә дуҫ һәм дошман тапҡан —
Холҡоң булмай, ни булһын!

Күрәһегеҙ: автор телдең мәғәнәүи нескәлектәренә бик һиҙгер, һүҙҙең тослоғон, бәҫен белеп эш итә. Әгәр тәүге һәм һуңғы строфала ҡәтғи раҫлау бик тәбиғи булһа, уртансы строфала ул бик урынлы булып бөтмәҫ ине. Бында бик әҙәпле һорау-яуап бирелгән. Ниндәйҙер эске бер такт бында үҙенән-үҙе икенсерәк, йомшағыраҡ интонацияны талап иткән.

Белмәйем, бындай үҙенсәлектәрҙе башҡа телдә биреп булыр инеме икән — әйтеүе ҡыйын. Был урында беҙ һәр халыҡтың бик нескә психологик үҙенсәлеге, күңел ҡоролошоноң милли айырымлыҡтары менән эш итәбеҙ. Бәлки, бына ошо нескәлектәр милли колорит тигән төшөнсәне билдәләйҙер ҙә инде. Гоголь әйткәнсә, милли колорит халыҡтың кеймендә түгел, күңелендә. Ә күңелендәге — телендә. Телгә халыҡтың бөтә тарихы, бөтә характеры, көйө-моңо һеңгән. Шағир бына ошо нескәлектәрҙе тоймаһа, «Аттар саба» кеүек шиғыр ҙа тыумаҫ ине.

Аттар саба, аттар саба,
Эй, сабалар!

Әллә ҡайҙан шул аттарға
Көй табалар...

Башҡорт халыҡ йырҙарында йырланған Ҡаһым түрә менгән һор юрға ла, Салауат менгән Кир ат та, ҡыҙ алып ҡайтҡан Ҡара юрға ла, илдән киткән Һыбай ҡашҡа ла яусан-даусан тотош халыҡ образын күҙ алдына килтереп баҫтыра. Милли колорит бында үҙенән-үҙе, үҙ ерлегендә ярылып сыҡҡан. Күңелде һағайтып ҡуйырҙай стилизация ла юҡ бында, бөтәһе лә тәбиғи.

Шулай уҡ автор үҙен уратып алған донъяға: был донъяның Ирәмәл кеүек тауына ла, пыр-пыр килеп осоп йөрөгән сәпсегенә лә халыҡтың осҡор күҙе менән ҡарай, йор һүҙе менән өндәшә белә:

Осҡан булһа, сәпсек уйлай ти бит,
Бөтәһенән бейек осам, тип;
Күҙ иңләмәҫ бейеклеккә етеп,
Зәңгәр болоттарҙы ҡосам, тип.
Күренәме ер тип аҫҡа баҡһа,
Урап оса ҡыйыҡ өҫтөн, ти;
Бахырҡайҙың болот тигәндәре
Мөрйәләрҙән сыҡҡан төтөн, ти.

Был еңелсә юмор һәм телдәге мәғәнә оттеноктарына һиҙгерлек тә шиғырҙы халыҡ ижадына яҡын итә. Төрлө-төрлө ҡабатлау алымдары, оҡшаш өндәр яңғырашынан торған аллитерациялар ҙа — эске, үтә һәм сатраш рифмалар ҙа — былар бөтәһе лә халыҡ ижадынан — йыр һәм ҡобайырҙарҙан, мәҡәл һәм әйтемдәрҙән килә:

Мин — Ирәмәл, ил бейеге,
Илгә әйтер һүҙем бар.
Мин — Ирәмәл, ир төйәге,
Иргә әйтер һүҙем бар.

Йәки:

Мүк ҡаплаған ҡая ташым
Батырға түшәк булды.

Ҡаҡ муйылым дошман башын
Ватырға күҫәк булды.

Йәки:

Теле һуңлап сығыр сабыйҡайҙы
Кәмһетмәгеҙ һаҡау бала, тип.
Шул баланан ил сәсәне сыҡһа,
Күпһенмәгеҙ даны ҡала, тип.

Традиция артабан дауам ителеп, үҫеп, яңырып тормаһа, ул традиция ла булмаҫ ине. Халыҡ ижадының боронғо формалары яңы йөкмәткене менән байытылмаһа, бөгөнгө көндә улар анахронизм ғына булып ҡалыр ине. Был хәҡиҡәт бөтә донъя әҙәбиәтенең тарихы менән дә, башҡорт поэзияһының Салауат Юлаевтан алып Р. Бикбаевҡа саҡлы булған үҙ тәжрибәһе менән дә раҫланған. Һәр яңы быуын, һәр яңы әҙип, иҫке һуҡмаҡтан юл башлап, үҙе үтер яңы юл яра, үҙ фекерен әйтер яңы саралар эҙләй. Шиғриәт юлына сыҡҡан Мәүлит Ямалетдинов кеүек йәш шағирға ла был юлда абайлыҡ, ныҡышмалыҡ һәм ҡыйыулыҡ юлдаш булһын. Был юлда инде ул ҡыйыу ғына тәүге аҙымдарын яһай. Китаптың тәүге бүлегендәге өс шиғырҙан торған «Уттар» циклы уның үҙе өсөн ысынлап та ҙур ҡыйыулыҡ тиер инем мин. Бында ул һөйөү утын, үткән һуғыш утын һәм, ут менән уйнаусыларға ирек ҡуйғанда, бөтә тереклекте һәләк итәсәк атом утын һүрәтләп, утты философик яҡтан барлап-фекерләп ҡарауға ынтылыш яһаған.

Сабыйлыҡтан донъя уҙған инде,
Уйынсыҡ тип утты белергә.
Тәүге кеше, беләм, уйламаған
Үҙе тапҡан уттан үлергә.
Ай, Хиросима! Вай, Нагасаки!

Һәр строфа ахырында ҡабатланып килгән «Ай, Хиросима! Вай, Нагасаки!» рефрены донъя тарихында тәүге атом утын татыған ике ҡаланың, ысынлап та, ҡан-йәш ҡойоп илауы булып ишетелә.

Әлбиттә, ут күп яҡлы. Ут алла ла булған.

Икенсе бүлектәге һигеҙ юллыҡтарҙа тәүге бүлектә билдәләнгән темалар үҫтерелә. Улар үҙҙәренең формаһы менән ғенә айырылып тора. Бында төрлө философик, лирик-интим характерҙағы һәм тәбиғәт күренештәрен һүрәтләгән шиғырҙар тупланған. Асылда улар тәүге бүлектең тәрәнәйә барған дауамы. Был һигеҙ юллыҡтарҙың күбеһе һүҙгә һаран, фекергә йомарт ижад өлгөһө булырлыҡ.

Имсәк бала ҡулы ни тотһа ла,
Ауыҙына ала.
Урта йәштә кеше сәй тапһа ла,
Кеҫәһенә һала.
Аҡһаҡалға инде ете яттыр
Һанһыҙ донъя малы:
Таш күрһә лә ҡарай (бәлки, һуңғы ҡаттыр)
Устарына һалып.

Һәр шағир бындай ынйыларҙы үҙ усына һалыуҙан тартынмаҫ ине. Йәки бына был да ынйы бөртөгө түгелме?

Айһыҙ төн, аяҙ төн күгендә
Хисапһыҙ йондоҙҙар күренә.
Ай тыуып ун бише тулғанда,
Шуларҙың яртыһы һүрелә.
Асылда ошо бер ҡанунда
Ерҙәге күренеш сағыла:
Бер һылыу янында башҡалар,
Әйтерһең, бөркәнсек ябына.

Ә бына бындай күҙәтеүсәнлек көн һайын тауға баҡҡан тау балаһында ғына булырға мөкин:

— Таң яҡтырған саҡтарҙа тау сүккән һымаҡ ниңә?
— Ҡояш сыға тиҙҙән, эшең башла, — ти ул һиңә.
— Көн кисләгәс, тау тағы бер сүгә төҫлө ниңә?
— Ҡояш байыу ҡайҙа әле, эшлә, — ти ул һиңә.

Бына шундай һынсыл күҙ менән тотоп алынған күҙәтеүҙәр, шулай уҡ бик тәбиғи психологик деталдәр, тапҡыр фекерҙәр

был һигеҙ юллыҡтарҙың йөҙөк ҡашы булып тора. Тик улар шиғырҙың тотош туҡымаһы менән бер бөтөн.

Китаптың өсөнсө бүлеге — «Дала моңдары»нда ҡаҙаҡ далаһында яҙылған хәл-күренештәр урын ала. Башҡа ерҙәр күркен данлау шатлығы («Дала моңдары»), ҡан-ҡәрҙәш халыҡтар менән дуҫлыҡ («Думбра»), һөйгән йәр һәм тыуған ерҙе һағыныу хистәре («Хат» һәм «Торналар»), ҡаҙаҡ аҡыны менән башҡорт сәсәненең халыҡ аңында тотҡан урыны («Булған боронда») мәңгелектең ярһыу бер мәлендә («Далалағы тәүге ямғыр») шағирҙың үҙ яҙмышы һәм кеше ғүмеренең мәғәнәһе хаҡындағы шиғри уйҙар әле генә фекер тәрәнлеге менән һөйөндөргән икенсе бүлектең географик яҡтан да киңәйә барған дауамы булып ҡабул ителә.

Дала, дала! Төштәремдә ҡалдың,
Ә төштәрем ҡалды үҙеңдә.

«Торналар» шиғырында ҡабатланған мотивтар ишетелһә лә, ул тотош бер тормош фәлсәфәһен үҙ эсенә алып, яңыса яңғырай. Бында боронғо башҡорттарҙың торнаға тотемистик табыныу замандарынан уҡ тороп ҡалған төрлө ырым-юрауҙары, торналарҙың сабый балаларға «аяҡ ташлап китеүҙәре» лә, «тел алып килеүҙәре» лә ғәжәп тәбиғи итеп һүрәтләнә:

Тел-аяҡтар тейәп, һорнай уйнап,
Яҙлы-көҙлө күккә үрләгеҙ.
Әй, кешеләр! Әсәләрҙең изге өмөтөнә —
Торналарға тейә күрмәгеҙ!

Һәм шағирҙың икенсе көҙ ситтә торналарҙың сыңрауына күмелеп ҡалыуы үҙенән-үҙе бала саҡ илен һағыныу хистәренә сумдыра:

Ҡарап ҡалдым оҙаҡ: берәйһенең
Ҡауырһыны төшөп ҡалмаҫмы?
Ергә төшкән ҡаурый араһында
Беҙҙә үҫкән үлән булмаҫмы?

Был, әлбиттә, йөрәкте өзөп ала торған художество деталь. Автор уларҙы аңлы рәүештә һайлаймы, һиҙемләү аша киләме ул быға — ҡалай ғына булһа ла яҡшы. Уҡ сәпкә тейә. Ысынлап та, Паустовский әйткәнсә, уңышлы табылған деталь үҙе бер образға торошло... Майковтың «Емшән» хикәйәте бит тотошо менән ошо бер усма дала үләненә ҡоролған.

Ә замана — йыр башлауын көткән
Талапсан һәм ҡатҡыл дирижер.

Заман хаҡында уйланып, бәлки, үҙ ижадында заман һыҙаттарының етешеүен һиҙепме, автор был ике юлды китабының дүртенсе бүлегенә эпиграф итеп алған.

Эйе, заман — талапсан дирижер. Уның алдында йырсы-быҙҙың ниәттәре лә бик яҡшы: ялған өн сығармайынса йырлау. Быныҡ өсөн, әлбиттә, тәбиғәт биргән тауышың ғына етмәй, ул тауышты тәрбиәләргә лә, уның өҫтөндә бик яҡшы оҫталар менән эшләргә, ә иң мөһиме — заман-дирижер һәм бөтә тормош оркестры менән бер һулышта булырға кәрәктер. Мәүлит Ямалетдинов шиғырҙарында бына ошо заман һулышының иркенерәк булыуын, бөгөнгө тормош һыҙаттарының сағыуыраҡ һәм мулыраҡ булыуын күрге килә.

Әлбиттә, китаптың был һуңғы бүлегендә лә «Тимерсе», «Ҡарҙарҙа сағылған зәңгәр нур», «Донъялыҡтың байтаҡ шартын үтәп», «Сәңгелдәк йыры», «Әсәйемә», «Иң аҡыллы кеше булмағандай», «Ҡарабаш турғай» кеүек табыштарға бай, тапҡыр, бик кешелекле һәм күңелдә ҡалырҙай шиғырҙар бар. Был бүлектәге шиғырҙарҙа үткәндәр ҙә, бөгөнгө лә, киләсәк тә бергә төйнәлеп, авторҙың заман хаҡындағы борсоулы һәм һағышлы, көр һәм хөр уй-тойғолары менән үрелгән, уның тормошҡа ғәмле мөнәсәбәтен билдәләйҙәр. Уларҙан шағирҙың яңы тематик киңлектәргә ынтылышын, яңы поэтик һикерештәргә әҙерлеген тоҫмаллайһың.

Шулай ҙа традиция инерцияһы был һикерештәрҙе уға тотҡарлыҡ яһамаһа ине, тигән һағайыу ҙа кәрәк. Был тәңгәлдә уға, әлбиттә, ҡыйыуыраҡ та, тәүәккәлерәк тә булырға тура килер. Үҙ милли ерлегендә нығ торған хәлдә, уға үҙ туған әҙәбиәтенең иң яҡшы өлгөләренән башҡа, рус классикаһынан да, донъя

әҙәбиәтенең Уитмен, Назым Хикмәт кеүек гиганттарынан да һабаҡ алырға кәрәк булыр. Сөнки тынғыһыҙ йәшлек бер урында тапаныуҙы яратмай.

Мәүлит Ямалетдинов шиғыр техникаһына тамам эйә булған шағир тиһәм дә яңылышмамдыр.

Шулай ҙа шиғыр камиллығының сиге юҡ. Шиғыр техникаһы өҫтөндә эшләү һәр саҡ мотлаҡ нәмә. Тик был бер ҡасан да үҙмаҡсат түгел, ә йөкмәткене мөмкин тиклем нескәрәк биреү, шиғырҙы ахыр сиккәсә һығылмалы итеү сараһы. Төп фекер, йөкмәткене өсөн төҙөктө хатта ватырға ла, ҡайһы бер ритмик быуынды алып ташларға ла мөмкин. Ләкин урынһыҙға шиғыр төҙөклөгөн емереү кәрәкмәйҙер. Мәҫәлән, дүрт юллыҡ бынау афористик шиғырҙа һуңғы юлдағы ике ижекте төшөрөп ҡалдырыу бер ни менән дә аҡланмай:

(12) Тауистарҙың күркәм төҫө бар барлығын,
(10) Тик эштәре ҡупшылыҡтан китмәй.
(12) Бөркөт ҡоштоң яурындары тар тарлығын,
(10) Ҡанаттарын йәйһә, ҡолас етмәй.

Был юл «Аҡиҙелкәйҙәргә таш ырғыттым, тып итеп ҡалды» тигән һымағыраҡ яңғырай, әлбиттә. «Думбыра» шиғырының тәүге һәм һуңғы строфаһындағы өсәр ижекле өс быуындан торған «Мин ҡаҙаҡ дуҫымдың өйөндә» тигән юлдан һуң «алдымда думбра» тип өҙә киҫеүҙең дә бер ниндәй кәрәге юҡ.

«В искусстве — чуть-чуть — все! тигән Лев Толстой. Йәғни сәнғәттә «саҡ-саҡ» бөтәһен дә хәл итә. Әгәр рәссам бер һылыуҙың һүрәтен яҙғанда күҙенә бәләкәй генә аҡ төшөрһә, ул йә ҡылый күҙгә, йә аҡ төшкән күҙгә әйләнеп, бөтә күҙ ҡарашы юҡҡа сығыр ине.

Бына ошо «саҡ-саҡ» тигән сәнғәт законын ҡулланып, саҡ-саҡ ҡына эшләгәндә, «Тимерсе» тигән шиғырға бөтөнләй икенсе мәғәнә бирергә булыр ине. Уралдағы тимерсе йола буйынса «үтә хөрмәтләнеүсе» кеше генә булып ҡалмайынса, был теманы үҫтерә төшкәндә, сүкеш тотҡан кеше — эшсе синыф-темаһына әүерелергә тора.

Шулай уҡ «Ҡышҡы төндәр» шиғырын трафарет эпитеттарҙан, шаблон сағыштырыуҙарҙан таҙартҡанда, бөгөнгө көндөң берәй

реаль детале менән алыштырғанда (һис юғында, ҡышҡы күк йөҙөнән берәй ер юлдашы үтеп китһә лә), бөтөнләй яңыса балҡытып ебәрергә булыр ине бит! Юҡһа уның бер ниндәй паспорты ла юҡ. Ғүмәр Хәйәм күҙәткән төнмө ул, әллә Мәүлит Ямали тигән бөгөнгө башҡорт шағирының төнөмө? Айырма юҡ. Ә бит төндәр ҙә үҙгәрҙе хәҙер... Бына ошо заман һыҙаттарына һиҙгерерәк булаһы ине. Тормошҡа активыраҡ үтеп инергә, кеше һәм донъя яҙмышы хаҡында ҡыйыуыраҡ уйланырға, заман хаҡында заман юғарылығынан тороп йырларға ине беҙгә! «Шағир — донъя шаңдауы ул» тигән һүҙҙе иҫтән сығармайыҡ, йәш ҡәләмдәш.

Аҡ юл һиңә!

Атың сапһын, йәйғор ҡыу!

22 декабрь, 1974 йыл.

публицистика



ҮЛЕМҺЕҘ ҠЫҘ

(Очерк)

Төн. Күк йөҙө һанһыҙ йондоҙҙар емелдәүе менән яҡтырған. Саңғыларым аҫтында ҡоро ҡар шығырлауы ғәҙәттәгесә түгел һымаҡ. Петрищевоға ашығам мин. Телефон сыбығы һуҙылған юлдың ике яғындағы мәғрүр ҡарағайҙар нисектер серле һәм тантаналы тауыш менән шаулашалар. Улар миңә үтелгән ҙур ваҡиғаларҙы һөйләгән кеүектәр. Тик урман эсенә бөтөнләй ингәс кенә улар бер аҙ тына төштөләр. Мәңге йәшел шыршыларҙың баш осонан йөҙгән тулы ай үҙенең һөт төҫлө нурҙарын ҡоя. Артымдан ҡалмай килгән күләгәмдән башҡа бер кем дә юҡ. Ләкин урманда бер кеше йөрөйҙөр һымаҡ. Бына ҡапыл ғына ҡуйы ағастар араһынан өҫтөнә йылы тун, ҡыҫҡа ғына ҡара сәстәре өҫтөнән ҡолаҡлы бүрек кейгән, янып торған күҙле, һылыу һынлы, ныҡ һәм көслө, бит алмалары һалҡындан алланып торған Зоя килеп сығыр төҫлө...

Һирәк-һаяҡ ҡына эттәр өргән тауыш ишетелә. Ана инде ауыл хыялый кеүек татлы йоҡо менән йоҡлай. Тик бер өйҙә генә ут яна.

Бына шундай төндә ҡыйыу партизанканы фашистар тотоп алғандар. Ҡыҙ үҙен уларға Таня тип исемләгән.

Йылдар үткәс, бына ул үҙенең һуңғы минуттарын уҙғарған өйҙөң ишеген шаҡыйым...

— Кем бар?

— Мин, студент. Мәскәүҙән...

* * *

Ворониналарға барғанда бик иртә ине әле. 77 йәшлек сал сәсле, тәрән йыйырсыҡтар менән ҡапланған йөҙлө әбей, Евдокия Петровна, үҙенең һүҙен нисектер ауырһыныу менән

башланы. Үҙе тамырҙары беленеп торған ярылып бөткән ҡулы менән ҡуйы итеп башҡортса сәй яһай һәм һөт менән һыйлай. Йомарт әбей. Ләкин һөйләгәндә, ул һүҙгә бик һаран кеүек. Әйтерһең, ул булып үткән ҡот осҡос ваҡиғаларҙы яңынан кисерә. Шулай ҙа үҙенең күргәндәрен кешеләргә һөйләгеһе килә.

— Беҙҙең өйҙә немецтар штабы урынлашҡан ине, — тип ул, минең тормош, хәл-әхүәл тураһында һорашыуымдан һуң, аҡрын ғына һөйләй башланы. — Кис шулай, ғәҙәттәгесә, мейескә яҡтым. Мөрйәне ябып, кухняға сыҡҡанда ишектән фашистар бер ҡыҙҙы индерҙеләр. Сисендергәндәр. Бер һалдат миңә «русь партизанин» тине һәм килбәтһеҙ бармағы менән ишара яһап, ҡыҙҙың 3 өйҙө яндырғанлығын әйтте. Тентей башланылар. Кеҫәһенән ике шаҡмаҡ шәкәрҙе һәм тоҙ семтемен иҙәнгә ырғыттылар. Ә беҙҙе мейес башына ҡыуҙылар. Шул саҡ офицер килде. Үгеҙ кеүек һимеҙ. Ерән сәсле. Бүлмә ишеген нығытып яптылар.

Ҡыҙҙан партизандар тураһында һораштылар. Ул һәр бер һорауға «юҡ», «белмәйем» тип яуап ҡайтарҙы, йә өндәшмәне. Бынан һуң уны ҡайыш менән һуҡтыра башланылар. Мин тәүҙә иҫәпләнем: дүрт ҡайыш менән 30 тапҡыр һуҡтырҙылар. Ул өндәшмәне, тик ҡайыштар ғына һыҙғырышты. Дүртенсе ҡабат һуҡтырғанда ғына ул:

— Туҡмамағыҙ мине, барыбер бер ни ҙә әйтмәйәсәкмен! — тип ҡысҡырҙы. Ҡулын артҡа ҡайырып бәйләгән килеш, уны кухняға алып сыҡтылар. Унан бер һалдат ҡулындағы бауынан тотоп, ҡыҙҙы ишеккә төртөп ебәрҙе. Сәғәт иртәнге 9-ға тиклем уның тураһында бер ни белмәнек, йоҡлай ҙа алманыҡ. Иртән дар ағасы янына ҡыуып йөрөнөләр. Мин барманым. Тик тәҙрәнән генә дар ағасын һырып алған ғәскәрҙе, кешеләрҙе, яланғас ҡылыс менән һыбай йөрөгән һалдаттарҙы күрҙек. Ай ярым беҙгә ҡот осҡос булды. Зояның кәүҙәһен алманылар. Яңы йылға ҡаршы төндә миндәге һалдаттар иҫерек көйөнсә, дар ағасы янына барып, хәйләрҙәре менән уның туңған тәнен телгеләп, көлөштөләр...

Әбейҙең күҙҙәре шул саҡ бер аҙ ҡыҫыла төштөләр һәм уларҙа осҡондар күренеп китте. Уның йөҙөндәге йыйырсыҡтарға яңылары өҫтәлгәндәй булды.

Бит әле лә ул, дошман, күпме йәш ҡыҙҙарҙы шулай ғазаплай, мыҫҡыл итә, балаларҙы һәм әсәләрҙе тереләй ергә күмә. Беренсе ҡат ҡояш күргән һис бер ғәйепһеҙ сабыйҙарҙың яҡты йылмайыуын да тартып ала ул. Уларҙы өйһеҙ һәм әсәһеҙ итә.

— Йә хоҙай, — ти әбей, — инде был көндәрҙе күрергә яҙмаһын...

Эйе, һыу, һауа һәм ҡояш яҡтыһындай, тыныслыҡ кәрәк беҙгә.

* * *

Зоя Космодемьянскаянан партизандарҙың ҡайҙа икәнлеген, үҙенең нимә эшләүен күрһәткән мәғлүмәттәр ала алмағас, уны штабтан, Евдокия Петровналарҙан, ҡаршы урамдағы Просковья Куликтарҙың өйөнә алып китәләр. Зоя бында ҡыҫҡа ғына ғүмеренең аҡтыҡ сәғәттәрен үткәрә.

Урта йәштәрҙәге асыҡ йөҙлө белорус ҡатыны Просковья Кулик былай һөйләй:

— Миңә Зояны Ворониналарҙан килтергәндә, беҙ әле уның ҡораллы һәм аттар торған һарайҙы яндырырға йыйынған саҡта тотолоуы тураһында бер ни ҙә белмәй инек. Аҙыраҡ торғас:

— Эсергә бирегеҙ әле, — тине ул аҡрын ғына. Ләкин мин ҡуҙғалыу менән үк, һалдат мине этеп ебәрҙе һәм аяғы менән тибеп ҡысҡырынды. Мин ҡурҡып Зояға ҡараным. Әйтерһең, уға был минутта һыуҙан башҡа бер ни ҙә кәрәкмәй ине. Йөрәгем ҡыҫылып әрнене. Ә шул саҡ теге немец һалдаты төтөнләп янып ултырған һуҡыр шәмдең утын уның ирененә килтереп терәне... Ләкин Зоя, исмаһам, ҡыбырламаны ла. Тик һалдатҡа шундай итеп ҡараны — ул, Зояның ҡарашына сыҙамайынса, шәмде ҡалтыранған ҡулдары менән өҫтәлгә ултыртты, ығы-зығы ҡупты. Шунан файҙаланып, мин эсергә бирҙем. Ул йотлоғоп-йотлоғоп эсте һәм аҡрын ғына: «Рәхмәт», — тине. Шул саҡ берәүһе килеп, уның ҡулдарына бәйләнгән бауҙы кинәт тартып, Зояны яланғас аяҡ һәм ҡыҫҡа ғына эске күлдәктән көйөнсә ҡарға алып сыҡты. Ишектәр бәҫләнеп, асҡан саҡта сыйылдап торалар. Һалдат Зояны 20—30 минутлап урамда ҡарҙа йөрөттө һәм, үҙе арығас, кире индереп йылынырға кереште. Башҡалары йоҡлай. Һалдат йылынып алғас, тағы ла уны штыгы менән төрткөләп ҡарҙа йөрөттө. Һалҡын һәм аяҙ төндә барыһы ла күренеп тора. Төндә был йөрөтөү биш-алты тапҡыр ҡабатланды. Зоянан бер һүҙ ҙә ала алманылар. Фашисҡа уны ҡарҙа йөрөтөү ялыҡтырҙы: ул уның ҡулдарын ишек тотҡаһына бау менән бәйләне лә, үҙ урынына икенсеһен ултыртып, йоҡларға ятты. Ваҡыт-ваҡыт Зоя иҫен юғалтып алға табан йығыла, һәм шул саҡта ишек тотҡаһына бәйләнгән бау

тартылып, уның ҡулдарын киҫә башлай. Ауыртыуҙан ул ҡапыл һиҫкәнеп китә һәм яңынан тирмә... Төнгө сәғәт 3-тәрҙә уның ҡулдарын системаларҙан. Бынан һуң ул иртәнгә тиклем һис бер хәрәкәтһеҙ һәм ыңғырашыуһыҙ ятты. Йоҡлағандырмы ул, белмәйем.

«Бәлки, уны һуңынан эҙләүселәр булыр», тип мин уның кем икәнлеген белергә тырыштым. Таң атҡас янына килеп:

— Ҡайҙан һуң һин үҙең? — тип һораным. Ул миңә оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо ла, аҡрын ғына:

— Мәскәүҙән, — тине.

— Ә нисек бында эләктең һуң?

— Мин фашистарҙы юҡ итер өсөн задание буйынса килдем.

— Ә кисә беҙҙәге өс өйҙө кем яндырҙы?

— Мин, — тине ул һәм бик етди итеп һораны, — ә ҡорбандар бармы?

— Ҡоралдар һәм 20 ат янған, — тинем мин.

— Ҡыҙғаныс, — тип үкенде ул асыу менән һәм бер аҙ уйланып, өндәшмәй торғандан һуң: — Мин беләм — мине йә атасаҡтар, йә аҫасаҡтар, тик мин ҡурҡмайым, беҙ бик күп — аҫып бөтә алмаҫтар, — тине. Бер аҙ туҡтап торғандан һуң, ул ҡапыл ғына һөйләшергә теләп: — Минең өсөн үс алырҙар, — тип башын аҫҡа эйҙе. Мин бер һүҙ ҙә әйтергә өлгөрмәнем, ул әрнеү менән:

— Ә һеҙ ниңә бында ҡалдығыҙ? — тип һораны. — Китергә, китергә кәрәк ине һеҙгә! Бит...

Шул саҡ уның янына теге, төндә уны төрткөләп йөрөткән һалдат килеп, итеге менән тибеп ебәрҙе.

— Йә, Сталин ҡайҙа? Уралдамы? — тине ул. Зоя етеҙ һәм асыҡ итеп:

— Сталин үҙенең посында! — тигәс, һалдат бар көсөнә киҙәнеп, уның яңағына һуҡты һәм торорға ҡушып ҡысҡырҙы. Ләкин Зояны туңған аяҡтары тота алманылар, ул тубыҡтарына сүкте. Ә ауыртыныуҙан өнөн дә сығарманы. «Ҡайҙан бындай көс?» — тип аптыраным мин һәм уны ҡотҡарғым килде. Беҙҙе ҡыуып сығарҙылар ҙа, ике офицер һәм бер тәржемәсе уға һуңғы допрос үткәреп, «юҡ» һүҙен дә ишетә алмағас, беҙ ингәндә инде уға ниндәйҙер бер еүеш салбар кейергә биргәйнеләр. Ләкин уны ул асыу менән ситкә ырғытты: «МИН — КЕШЕ!» — тип ҡысҡырҙы. Уға салбарҙы көсләп кейҙерҙеләр. Аяғына ойоҡ-баштарын кейҙерергә мин ярҙамлаштым. Уны ҡултыҡлап, муйынына «Поджигатель» тип яҙылған таҡта аҫып, урамдағы

ҡаршыла ғына торған дарға алып барғанда, ике яҡтан килгән һалдаттарҙы ул ике яҡҡа төртөп ебәрҙе лә, алға үҙе атланы...

* * *

Йәш инең әле һин, Зоя! Бик йәш инең. Күпме ине әле уҡыйһы китаптар! Күпме ине әле күрәһе кешеләр! Күпме йөрөйһө ерҙәр, йырлайһы йырҙар, ултыртаһы ағастар!.. Һин бит әле үҙеңдең йөрәгеңдә сәскә атҡан иң саф, ҙур һәм гүзәл мөхәббәтеңде лә уртаҡлашырға өлгөрмәгәйнең, Зоя! Һинең әле күпме эшләйһе эштәрең бар ине! Күпме әле матур яҙҙарға, башта ҡурҡыныс булып тойолған, ләкин һуңынан әйтеп бөтмәҫлек шатлыҡ килтерә торған экзамендарға ашҡына инең һин. Әсәйеңде ҡыуандыра торған күпме хыялдарың бар ине! Үҙең дә матур әсә булып, аҡыллы балалар үҫтереү тураһында уйлағанһыңдыр һин...

Кешенең иң ҙур матурлығы — үҙ яҙмышын халҡының ҙур яҙмышына айырылмаҫлыҡ итеп бәйләүҙә, уның бәхете өсөн көрәшеүҙә. Кешенең иң ҙур көс бирә торған һөйөүе — ул халыҡҡа булған һөйөү. Был һөйөү үҙенә булған яуапты таба ала. Сөнки халыҡ хәтере — мәңгелек, һәм уның һөйөүе иң ҙур бәхет. Кеше бәхетле булып йәшәргә тейеш. Бит тормошта кешеләр бер-береһе өсөн бәхет булып йәшәүгә ашығалар. Намыҫлы йәшәргә кәрәк!..

Әле мәктәп парталарында саҡта уҡ шулай уйланың һин, Зоя. Һәм ҡыҫҡа ғына ғүмерең эсендә лә шулай йәшәргә өлгөрҙөң һин.

Уҡыған мәктәбең эргәһендә башҡа бик күп йүкә ағастары араһында һин ултыртҡан йүкә хәҙер инде бик ҙур үҫкән. Ҡасандыр һин уны уңған ҡулдарың менән һөйөнә-һөйөнә ултыртып йөрөгәндә ул бейек, ҡуйы япраҡлы булып күҙ алдыңа килгәндер. Баҡсалағы алмағасың да хәҙер яртылаш ҡарға күмелеп, яҙын ап-аҡ сәскәгә төрөнгәндәй, һалҡындан бәҫләнеп, көмөшләнеп ултыра. Пионерҙар уны айырыуса хөрмәт итәләр. Улар ҙа һинең кеүек йәшәргә теләйҙәр, йәшеллек һөйәләр. Алдынғы баҡсасы булған өсөн улар өсөнсө йыл инде күсмә ҡыҙыл байраҡты үҙҙәренән ебәрмәйҙәр. Пионерҙар менән Башҡортостан детдомында үҫкән өлкән пионервожатый Анна Ефремовна Каменская етәкселек итә.

— Зояның алмағасы быйыл ҙур уңыш бирҙе, — ти ул.

Тик был уңышты Зоя үҙе генә күрә алмай. Ләкин ул бөтәһенең дә йөрәгендә. Зоя үҙ класында суҡлы күлдәген кейеп,

стенанан бөтәһенә лә мөләйем ҡарап тора. Зоя ултырған партала уҡыу отличниктары ултыра. VIII «Г» һәм X «В» класы һәр саҡ алдынғы булыу өсөн ярыша. Төшкә тиклем Зоя партаһында Нина Часовникова һәм Валя Артемьева, ә төштән һуң Валя Литвинова һәм Галя Монахова ултыра.

Мәктәпкә Ер шарының һәм Советтар Союзының бөтә мөйөшөнән төрлө телдәрҙә хаттар килә. Ҡытай һәм Кореянан килгән хаттарҙы тиҙ генә уҡып та булмай. Ләкин улар аңлашыла — донъяла мөхәббәт теле бөрәү. Был телде бөтә яҡшы ниәтле, тыныслыҡ һәм ирек һөйөүсе кешеләр совет халҡының үлемһеҙ ҡыҙы менән һөйләшәләр. Немец пионерҙары, Артектан ҡайтышлай, дуҫлыҡ билдәһе итеп, үҙҙәренең байрағын пионер бүлмәһенә ҡалдырғандар. Унда Зоя исеменә яҙылған башҡа бик күп бүләктәр килгән.

Мәскәү тарихының бай музейында Зояның кейемдәре менән бергә уның конькиҙары ла һаҡлана. Бына Зоя килеп инер ҙә, уларҙы алып, Горький паркына йәки Сокольникиға катокка сығып китер һымаҡ тойола. Бөтә кешеләр йөрәгендә ул һәр саҡ 18 йәшлек үлемһеҙ ҡыҙ булып ҡалған...

Петрищевоның киң урамы уртаһында, Ленин–Сталин эшенә, Ватанына, халҡына тоғро булып, Зоя үҙенең һуңғы секундтарын үткәргән урында, мәрмәр таштан һәйкәл ҡалҡҡан. Уны кешеләрҙең ҙур ихтирамы биҙәй.

Бына Мәскәүҙән үҙенең мәктәбендә уҡыған пионерҙар ауыл китапханаһына бик күп китаптар йыйып килтергәндәр.

Һәйкәлдән тирә-яҡҡа һуҡмаҡтар, саңғы эҙҙәре таралған. Мәрмәргә уйып яҙылған Зояның һуңғы һүҙҙәре, әйтерһең дә, ҡолағыңа ысын тауыш булып ишетелә:

— Үлеү миңә ҡурҡыныс түгел, иптәштәр! Үҙ халҡың өсөн үлеү — бәхет ул! Хушығыҙ, иптәштәр! Беҙҙең менән Сталин! Сталин килер!..

Беҙҙең комсомолка Зоя үҙенең һоҡландырғыс был тормош юлы менән кешелек бәхете өсөн көрәшкән бөтә кешеләрҙең йөрәгендә йәшәй. Ул Корея ҡыҙы булып, Ҡытай ҡыҙы булып тыныслыҡ өсөн көрәшеүсе партизан отрядтарында, окоптарҙа, дошман тылында уттар кисеп йөрөй. Яралы батырҙарҙы үҙ арҡаһында йөкмәп ут эсенән алып сыға...

Йәшәй, көрәшә һәм үлемһеҙ ул беҙҙең Зоя.

15 март 1953 йыл,
«Совет Башҡортостаны»

Тәүге ҡарлуғас

— Марс Сиражев ҡайҙа? — тигәс, мәктәптән ҡайтыусы балалар магазин эргәһендә бәләкәй генә бер өйҙө күрһәттеләр.

«Күреп сыҡмай булмай, мин әйтәм, ниндәй икән һуң ул Сиражев тигәндәре?»

Ҡапҡанан кереүгә ҡыҙыҡ ҡына бер күренеш күҙгә ташланды: бәләкәй генә бер ҡара һыйыр эргәһендә донъяһын онотоп йәш кенә бер егет баҫып тора. Хатта малай тиһәң дә яҙыҡ булмаҫ. Башына ҡолаҡтары ҡарпайып торған бүрек эләктереп, аяҡтарына калуш ҡына ҡатып алған да, һыйырының арҡаһынан һөйәһыйпай, ниндәйҙер уйға батҡан. Йөҙө ниңәлер моңһоу күренә, хатта борсоулы һымаҡ. Ул күҙ төбәп торған яҡта былай борсолорлоҡ бер ни ҙә юҡ: яңы яуған ҡырпаҡ ҡарҙан ауыл осондағы ферма яғына һалам эҫкерте һөйрәтеп трактор ғына китеп бара... Ә арыраҡ тәүге ҡар аралаш ҡыҙырым сауҡа менән ҡапланған тулҡын-тулҡын Әлкә тауҙары, ә уларға ҡапланып торған зәп-зәңгәр күк көмбәҙендә төшлөккә еткән ҡышҡы ҡояш... Уның инде һүрән нурҙарын тойһа тик бер ҡара һыйыр ғына тоялыр — шул һаран ғына йылылыҡҡа ла рәхәтләнеп, ойоп китеп үҙенең һағыҙын көйшәй малҡайың...

— Марс Сиражев шунда торамы? — тиеүгә егет һиҫкәнеп китте. Ҡулын тиҙ генә һыйыр арҡаһынан ала һалып:

— Шунда, — тине ул, ғәйепле кеше һымаҡ.

— Өйҙәме һуң үҙе?

— Өйҙә... мин булам инде...

Ул, юғалып ҡалған килеш, ҡыйыуһыҙ ғына ҡулын һондо. Ҡыҙҙар кеүек оялсан, баҫалҡы был егетте Марс Сиражев шул икән тип уйламаҫһың да! Уның менән тәүге күрешеүҙә үк нисектер шаярып ҡына һөйләшәһе килә — башҡаса мөмкин дә түгел, ауыҙынан һүҙен дә ала алмаҫһың кеүек...

— Әйҙә, инәйек — һиңә ҡунаҡҡа килдем бит, — тигәс кенә ул, батырланып китеп:

— Әйҙә, керәйек, — тигән булды.

Өй эсендә ҡулдан яһалған китап кәштәһе, фотоһүрәттәр теҙелгән рам һәм стенаға кнопкалар менән ҡаҙаҡлап ҡуйылған маҡтау ҡағыҙынан башҡа күҙгә ташланырҙай артыҡ бер ни ҙә юҡ ине.

Октябрь революцияһының ҡырҡ дүрт йыллығы айҡанлы яңы ғына бирелгән был маҡтау ҡағыҙына: «... Малсылыҡ өлкәһендә

юғары күрһәткестәргә өлгәшкәне өсөн Салауат исемендәге колхоз идараһы Сиражев Марсты ошо мактау ҡағыҙы менән бүләкләй» тигән ғәҙәти һүҙҙәр яҙылған.

Ләкин Марс эшләгән эш ғәҙәтиме һуң? Бик ғәҙәти ҙә түгел шул уның эше: беҙҙең Салауат районында тәү башлап һыйыр һауған егет ул, Марс Сиражев, тәүге ҡарлуғас!..

Шундай оялсан ғына был егеттең быға тиклем ғүмер буйы ҡатын-ҡыҙҙар эше булып килгән эшкә баҙнат итеп тотоноуы үҙе бер егетлек булһа, был эшкә уның районда беренсе булып тәүәккәллек итеүе икеләтә батырлыҡ түгелме?! Эштә башлаусы ғына булһын, ҡушлаусылар табыла. Улар беҙҙә хәҙер аҙ түгел инде.

Ләкин туң ҡарҙа, көрт ярып, юл башлап ебәреүе бик еңелдән түгел ине. Мактау һүҙҙәре менән бергә Марсҡа ауыҙ йырып көлөү ҡараштарын күргә лә, сәнскеле мыҫҡыл һүҙҙәрен ишетергә лә тура килде. Хатта бергә эшләгән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа уға башта ышанмайыраҡ көлөп ҡаранылар.

— Егет кешенең йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр ятһа, былай итеп һыйыр аҫтына кереп йөрөү эш түгел инде!

— Ҡатын-ҡыҙ эшенә ҡыҫылып йөрөгән ир ир була тиһеңме! Ташҡа үлсәйем инде ирлеген — торғаны бер әҙәм мәсхәрәһе...

— Булмаҫ, булмаҫ! Бына күр ҙә тор — бер-ике аҙна тарт-ҡыслар ҙа, һыйырҙарҙы боҙоп ҡасыр әле.

— Уларҙың елкәһе йоҡа була ул, түҙмәҫ малайың, — тиештеләр.

Ләкин малайың ундай-бындайҙарҙан түгел ине шул. Бик үҙ һүҙле, ныҡыш, уңған егет булып сыҡты Марс. Әйҙә, көлһәгеҙ көлә бирегеҙ, тип төрлө йор һүҙҙәрҙе ҡолағына ла элмәй, шым ғына эшләй бирҙе ул.

«Һыйырҙың һөтө — телендә, һауынсының ҡулында. Тәрбиәләһәң генә мал мал була». Был ҡағиҙәне ул яҡшы аңлап эшләне. Ваҡытында ашатты, эсерҙе, ихлас күңелдән тәрбиә итте малдарын. Күп тә үтмәй, байтаҡ ҡатын-ҡыҙҙың танауына сиртеп, уларҙы уҙып та китте. Фермалағы ҡыйын шарттарға ҡарамаҫтан, уҙған йылда ул һәр һыйырҙан 1788-әр литр һөт һауып, беренсе урынды алды.

— Былтыр шулай ине лә, быйыл бер ай эшләмәй тороп, мин военкоматтан курсҡа китәм тип йөрөгәндә, бер ҡыҙ арттараҡ ҡалдырып ҡуйҙы шул, — тине Марс һәм үҙҙәренең ферма хәлдәренә көйөнөп алды. — Быйыл фураж да булманы, булмаҫ

та тип торалар әле. Көҙ бер әҙерәк биреп алдылар ҙа туҡтаттылар. Һыйырҙарҙың хәҙер болғау күргәндәре лә юҡ. Йә, исмаһам, бесәне менән ялсытмайҙар, өҙөк-йолоҡ ҡына ашатабыҙ. Һалам менән силос бар ярай. Ҡышҡа насар керҙек инде. Йылынып сығыр урын да юҡ бит. Ҡарауылсыбыҙ ҙа база эсендә кормушка араһында ятып йөрөй. Элек көндәлек һөт яҙып барыла торғайны, хәҙер үҙең бармаһаң, көндәлек һауымды ла белеп булмай. Беҙгә иғтибар иткәндәре юҡ инде ул, тейешле шарттары булғанда, былай ғына эшләмәҫ инек тә беҙ... Эшләһәң, эш ҡарышмай бит?

Ә эшләргә ул бәләкәйҙән яратты. Атаһы өйҙәге алты баланы ярты етем итеп ташлап киткәс, ишле балалар бер әсә ҡулында ҡалып, бәләкәйҙән эшләп үҫтеләр. Марсҡа ары уҡырға ла тура килмәне. Тәүҙә фермала апаһына ярҙам итешеп йөрөнө лә аҙаҡ, ете класты бөткәс үк, фермаға үҙе килде. Партия ҡайҙа саҡырһа, комсомол шунда бара бит.

Бына әле муйынына ҡыҙыл галстук таҡҡан иң бәләкәй Марат та аҙ һүҙле ағаһына оҡшарға итә, ахыры: баяғынан бирле китаптан баш та ҡалҡытмай, һабағын әҙерләй.

— Донъя көтөү мин ҡайтҡансы уға ҡала, миңә армияға китергә повестка бар, кисә эште тапшырып ҡайттым, — тип ҡуйҙы Марс.

— Күңелһеҙерәкме әллә?

— Эйе лә, бөгөн әллә ҡалай эс бошоп тора...

Марс өҫтәл өҫтөндә ниндәйҙер бер төйөрҙө бармағы менән тәгәрәтеп ултыра. Күрәһең, тик торорға күнекмәгән уның ҡулдары. Мин уның ярғыланып бөткән ҡулдарына ҡарап: «Һары таңдан ҡара төнгә тиклем алһыҙ-ялһыҙ эшләгән был ҡулдар хәрби хеҙмәттә лә һынатмаҫ, матур киләсәкте төҙөшкән миллион ҡулдар менән бергә әле бик күп эштәр эшләр», — тип уйланым. Шундай уңған аҡыллы ҡулдар ғына киләсәкте яҡынайта бит.

— Йә, башҡаса күрешмәһәк, хәҙергә хуш булып тор, Марс. Тик ҡара унда: дошман йоҡламағанда, уяу тор! Ил сигендә лә үҙеңдең Салауат егете икәненеңде онотма, — тип мин уның ярғыланып бөткән ҡулын ҡыҫам. — Хәйерле юл һиңә, дуҫҡай!

«Октябрь юлы»

«Урал» — маяҡ

1. Аҡһаҡалдар ни һөйләй?

Май сүлмәге тышынан билдәле, тиҙәр. Был мәҡәл менән бәхәсләшергә лә мөмкин, әлбиттә. Күп нәмәнең тыштан ялтырап, эстән ҡалтырап торғаны ла бар бит?..

Әммә «Урал» колхозының нилектән бер Салауат районында ғына түгел, ә бөтә Әй—Йүрүҙән буйында дан тотоп килеүен уның Малаяҙ бригадаһындағы ырҙын табағынан да күргә була.

... Теңкәгә тейгән ямғыр баҫылып, күк йөҙө бер аҙ асылғандай булды. Көн кискә һарҡып, ҡояш та байырға йыйына ине.

Оло юл өҫтөндәге ырҙын табағы тынып ҡалған. Тирәһе таҡта ҡойма менән уратылып, башы шифер менән ябылған ҙур яҫма аҫтындағы бойҙай өйөмө лә, уның янында, оҙон муйынын һуҙып, аптырап ҡалған торна кеүек, иген тейәгес тә, киптергес тә, елгәргестәр ҙә үҙ-ара: «Эй, эшләнек тә һуң бөгөн, ай-һай эшләнек!» — тип һөйләшкән һымаҡ. Әле тире ҡатып та, туҙаны ултырып та өлгөрмәгән бөтә нәмә бында ҡотороноп-янып, дәрт менән дәррәү эшләгәндән һуң ғына килә торған рәхәт бер тынлыҡҡа сумған.

Тик ҡулына селек һепертке тотҡан ап-аҡ һаҡаллы бер бабайҙың ғына эше бөтмәгән икән. Бындай көҙгө бысраҡта, рәхәтләнеп мейес башында ғына ятмай, һаман эшләп йөрөргә ни ҡалған икән уға?

Башына кейеҙ эшләпә, өҫтөнә бишмәт кейеп, аяҡтарына калуш ҡына эләктереп алған да, бил дә яҙмай, бойҙай көшөлө өҫтөнән ул балсыҡ киҫәктәрен, ҡый-кәбәктәрен һепереп йөрөй, балсыҡтарын сүплəп алып ситкә ырғыта. Һәр бер хәрәкәте шул тиклем ихлас, шул саҡлым таҫыллы, һаҡ уның — әйтерһең, ул һепертке менән түгел, ә сәғәт оҫтаһы кеүек, бик нескә ҡорал менән эш итә! Ә ҡый-кәбәктәр был тылсымлы һеперткегә үҙҙәре эйәреп сыға кеүек. Байып барған ҡояш нурын ҡыҙарып ятҡан бойҙай тауы эргәһендә ул, ысынлап та, ниндәйҙер бер мөғжизәле әкиәт ҡартына оҡшаған.

— Нихәл, бабай? — тиеүгә ул, һиҫкәнеп китеп, башын ҡалҡытты ла, уңайһыҙланғаң, ләкин бик мөләйем сырай менән килеп күреште. Ғүмер буйы эш эшләп, тубырсыҡ һымаҡ, һөйәлләнеп бөткән ҡаты, ныҡ игенсе ҡулы ине был.

Ҡарт ырҙын ҡарауылсыһы Сафин Шакирьян бабай булып сыҡты. Ул кемделер шелтәләгән һәм нимәнәндер аҡланған һымаҡ итеп:

— Һикһән йәш миңә — бына эшлә! Эшләмәһәм, йән түҙмәй! — тип һөйләп алып китте. — Ашлыҡты исраф итәләр бит, ат тиҙәге урынына ла күрмәй бәғзе кеше. Күҙ-ҡолаҡ булып йөрөйөм тим, исмаһам...

— Ҡартайырға ваҡыт та юҡ инде улай булғас, бабай?

— Ҡартайып була ла ул. Тик бына рәхәтен күреп булмаҫы. Хәҙер тыуһаң ине бына. Ашарына бар, эсәренә бар, кейеренә бар. Беҙ бит киндер ыштан кейеп, сыра яндырып, аслы-туҡлы ғүмер иттек... Биҙа бит, улым, биҙа хәҙер тормош! Хәҙер әнә әйтмәйерәк торһаң, теге транспуртына (транспортерҙы әйтә инде бабай) аяғын тибеп кенә ята бит! Беҙ һыҙғырып көрәк менән генә елгәрә торғайныҡ. Бындай машиналарҙы беҙ хатта диствительный хеҙмәттә лә күрмәнек. Бындай тормошта һикереп-һикереп эшләргә кәрәк ине лә, юҡ, бик һикереп китмәй хәҙерге бәғзе бер йәштәр. Етмәһә, ҡайһы береһе әйтә — имеш, коммунизмда бараһың да теләһә ниндәй күлдәк кейәһең. Мин әйтәм, юҡ товарищтар, коммунизм ул шутһыҙ булмаҫ. Унда ла эшләгәнеңә ҡарарҙар. Ҡалай көтөп ятмаҡсы булалар, ҡырын ятып ҡына икмәк үҫәме ул?..

Шакирьян бабай, үҙе һөйләгәндәргә үҙе лә ғәжәп итеп, кеткелдәп көлөп ҡуйҙы. Ғәжәп тә шул. Бер кешенең ғүмер юлында ғына күпме үҙгәреш! Ошо ерҙә тыуып, бөтә ғүмерен, көсөн, мөхәббәтен ошо ергә биргән был намыҫлы ҡарт игенсенең һүҙҙәренә бөтөн бер тарих һыйған бит?

— Эшләнем мин! — ти Шакирьян бабай, һәм уның был һүҙҙәрендә күпме ғорурлыҡ бар!..

— Бына бит, шөкөрәнә, әйтһәң, тау булып ята, — тип ул бойҙай өйөмөнә күрһәтә. — Бөгөн ямғыр яумаһа, әллә нисә тау булыр әле, иртәнге сәғәт алтыға урғандар бит кисә...

Будканан шул саҡ Сафин Йәғәфәр ағай килеп сыҡты. Ул — ырҙын табағының мөдире. Үҙе весовщик та, механик та, электрик та, агитатор ҙа. Ураҡ башында уҡ колхоз идараһы был тынғыһыҙ коммунисты үҙәк ырҙын табағына беркетеп ҡуйҙы.

Йәғәфәр ағайҙың йонсоған, бер аҙ һурылып киткән йөҙөнән эштең бик еңелдән булмағаны күренеп тора. Ләкин ул шат: үҙенә тапшырылған бурысты ул намыҫ менән, коммунистарса үтәп сыҡты.

— Бригадир ҡыр эшендә эшләй алмаған балалы 6—7 ҡатынды биреп ҡуйҙы ла, бына шулар менән һаман да эшләп

йөрөгән көнөбөҙ, — ти Йәғәфәр ағай. — Һүҙ әйтерлек түгел, яҡшы эшләнеләр. Бигерәк тә Сәлимә Садиҡйәнова, Тәлиғә Халиҡова, Йөҙөм, Миңнегөл, Бибинур Садиҡовалар тырышты. Ашлыҡ ҡыҙып, боҙолоп ятырлыҡ булманы. 7—8 комбайн урғанда ла, өлгөрөп торҙолар. Эш бик тығыҙ булып киткәндә, Өфөнән килгән эшсе ҡыҙҙар ярҙам итте.

Йәғәфәр ағай Өфө (АТК № 1222) автоколоннаһынан килгән шоферҙар: Мөнир Хәмәдиев, Иван Савельев, Миндеяр Килдейәровтарҙы ла маҡтап һөйләй.

— Уларҙың ярҙамы ҙур булды, маладис инде ул шуфирҙарға, — тип ҡуйҙы Шакирьян бабай ҙа.

Ғөмүмән, ырҙын табағында эштең бик яҡшы ойоштороланлығы күренеп тора. Иген киптергестәрҙән башҡа бөтә машиналар ҙа электр менән эшләй. Бөтә нәмәлә тәртип, ысын хужа ҡулы булғанын тояһың.

Күп тә үтмәй ырҙын табағында таяғына таянып:

— Йөкләмә үтәлгән бит, егеттәр! Арттырып үтәлгән хатта. 103 мең бот иген тапшырғанбыҙ, әй! — тип, колхоздың икенсе бер аҡһаҡалы Фәйзуллин Йосоп бабай ҙа килеп етте.

Боронғо ҡарт һалдаттар, ҡыуанышып, шаяра-көлә постарын алмаштырҙылар:

— Тәүәккәллек итһең, йөкләмә лә йөк нәмә түгел икән ул,— тиештеләр ҡарттар.

2. Йөкләмә — йөк нәмә түгел

— Эйе, өҫтән тау төшкән кеүек булды инде, — ти председатель Яруллин Барый ағай ҙа. — Пожалуй, тәмәкене лә ташларға тура килер хәҙер. Юҡһа, был уборка тип, бик ҡаты тарта башлағайным.

Йөҙ миллион бот Башҡортостан игене өсөн быйылғы тәбиғәт менән көрәш хатта кешеләрҙең тәбиғәтенә лә үҙгәреш индергән, күрәһең. Хатта Шакирьян бабайға тиклем тәмәке тарта башлаған:

— Ҡайҙа, улым, күстәнәсеңдән ауыҙ итәйек, — тип ултыра. Эйе, быйылғы ураҡта күптәрҙең йоҡоһо йоҡо, ашы аш түгел. Тәбиғәт әле үҙенекен итә, кешегә буйһоноп бөтмәй.

Әллә күктең төбө төштөмө? — тип комбайнерҙар ҙа, шоферҙар ҙа, агроном Степан Дмитриевич Милюков та, парторг Вәлиев Мөғәллим ағай ҙа, комсорг Рәүф Зарипов та, председатель

Барый аҕай ҙа — бөтәһе лә күккә ҡарай. Ләкин күктә — болот та болот, ямғыр ҙа ямғыр!.. Әгәр райком секретары Әнүәр Миһранов инде телефондан:

— Иртәгә яҡшы көн буласаҡ, егеттәр, — тип хәбәр итһә, бынан да шатлыҡлы хәбәр юҡ. Был инде тәүлектең 24 сәғәтен дә ҡайырып алырға әҙер булығыҙ, тигән һүҙ.

Һәм бөтәһе лә, атакаға ташланырға торғандай, быға әҙер тора: комбайндар төҙөк, майланған, көйләнгән. Яғылыҡ ташыусы Хәйретдинов Хыялетдин, Ниғмәтов Хөжжәт менән Воробьев Егор ҡарттар ҙа, комсомолец Халиҡов Рәис тә машиналарҙы яғылыҡһыҙ ултыртмаясаҡ. Комбайн-фәләп ватыла ҡалғанда, колхоздың Ғимранов Зәғәфуран, Сафин Имай, Сәфиғуллин Әҕҙәм кеүек оҫта тимерселәре бар.

Комбайндар бер ерҙә төркөмләп эшләй — был яҡтан да бик уңайлы. Шунлыҡтан, Франгиз Зиннуров, Иван Гусев, Павел Губин, Вәис Сәйфуллин, Зауыр Солтанов кеүек колхоздың уңған шоферҙары бер нисә комбайнды хеҙмәтләндереп, көндөҙ ырҙын табаҡтарына ашлыҡ ташыһалар, иртәле-кисле 30 километр алыҫлыҡтағы Кропачево элеваторына елдерәләр. Шулай итеп, колхоздың үҙ машиналары ла дәүләткә иген ташыуҙа яҡшы файҙаланыла, комбайнерҙар ҙа ер башында һыҙғырышып ултырмай.

Унан һуң һәр бер механизаторҙың үҙ эшенә яуаплы ҡарауы, эште еренә еткереп, намыҫ менән эшләүе алған йөкләмәне үтәүҙә хәл иткес роль уйнаны. Был тәңгәлдә бигерәк тә колхоздың Павел Милюков, Вәрис Ғибадуллин, Латифьян Хәсәнов, Фәрүәз Сәлихов, Рәүф Халиҡов, Ишхужа Баймурзин, Риф Янмурзин, Рәшит Әхмәтйәнов кеүек намыҫлы комбайнерҙары үҙ-үҙҙәрен аямай эшләй. Улар ямғырһыҙ ваҡыттың һәр сәғәтен файҙаланып ҡалырға тырыша. Аяҙ көндәрҙә һәр бер комбайнер 18—20-шәр гектарҙың игенен урып һуға.

«Урал» колхозының районда йөкләмәне, ә Салауат районының бөтә Төньяҡ-көнсығыш идаралығында планды беренсе булып үтәүендә был механизаторҙарҙың ҙур хеҙмәте бар. Оло йәштәге ҡарттарҙан алып бала-сағаға тиклем бөтә кеше тырышып эшләне.

Был — бер булһа, икенсенән, «Урал» колхозы районда ерҙе рациональ файҙалана белеүе, иген игеүҙең юғары культураһына эйә булыуы менән дә дан тотоп килә. «Урал» баҫыуҙарында ҡый үләндәрҙе күрмәҫһең, игенде бында гөлдәй итеп үҫтерәләр.

Ә түбән уңышлы культуралар һәм үлән сәсеү менән мауығыу «Урал» колхозында электән үк юҡ ине.

Шуның өсөн дә колхоз йылдың-йылы яҡшы, тороҡло уңыш алып килә. Мәҫәлән, быйыл 824 гектар арыш уртаса 19,7-шәр центнер бирҙе. Ә Малаяҙ менән Гусевка бригадаларында ул 25—30-ар центнерға барып баҫты. Шулай уҡ, йыл ауырға ҡарамаҫтан, 180 гектар борсаҡтан да арыу ғына — 17-шәр центнер уңыш алынды. Борсаҡты сабыуҙа колхозға район үҙәгенең хеҙмәтсәндәре бик ҙур ярҙам итте. Йыйып һуҡҡанда комбайнерҙар, көн асылғанын көтөп, борсаҡ төбөнән китмәй, «дежурҙа ултырҙылар». Шул тырышлыҡ менән колхоз дәүләткә алты мең боттан ашыу борсаҡ тапшырып, үҙенә лә бына тигән етерлек орлоҡ һалып ҡалдырҙы. Шулай уҡ бойҙай ҙа яҡшы уңыш бирә. 1311 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан әлегә уртаса 12-шәр центнер уңыш алына. Хәҙер уның һуңғы гектарҙары өсөн алыш бара.

Бөтә был уңыштарҙа колхоздың арыу-талыуҙы белмәҫ, тынғыһыҙ, ныҡыш, ерҙе йәне-тәне менән, уның ысын хужаһы булып һөйгән агрономы Степан Дмитриевич Милюковтың хеҙмәтен дә күргә кәрәк, әлбиттә. Ул — ысын мәғәнәһендә ерҙә тәртип урынлаштырыусы агроном.

— Беҙҙең Степан Дмитриевич үҙ эшен яратып, намыҫ менән эшләй торған белгес ул, — ти председатель Барый ағай.

Председатель уның менән хаҡлы ғорурлана. Степан Дмитриевич уйлап табыусы, эҙләнеүсән, ғалим агроном да ул. Шакирьян бабай кеүек ҡарт игенселәрҙең ергә булған мөхәббәтен ул фән менән дә ҡуша белгән ижад кешеһе.

Ул уйлап сығарған загон урғысын файҙаланып ҡына ла колхоз 3600 бот игенде юғалтыуҙан һаҡлап алып ҡалған.

Бына шундай ер хужалары, бына шундай намыҫлы кешеләр булыу, колхоз идараһының партия һәм комсомол ойошмаларының эште дөрөҫ ойоштороуы, ерҙе, техниканы хужаларса файҙалана белеүе арҡаһында «Урал» колхозы үҙ йөкләмәһен беренсе булып үтәне лә инде.

— Әле эшләйһе эштәр бик күп, тынысланырға урын юҡ, — ти Степан Дмитриевич. — Тир түгеп үҫтерелгән бөтә игенде юғалтмай йыйып алырға, яҡшы сифатлы орлоҡ туплап, ерҙе таҙартып, туңға һөрөп бөтөрөргә, киләһе йыл өсөн хәстәрлек күргә, ҡышҡа әҙерләнергә кәрәк. Бөтәһе лә ал да гөл түгел әле...

Эйе, колхозда эш бөтмәй. Уны бөтә яңтан да етеш, ныҡ хужалыҡ итер өсөн, бик күпте эшләргә кәрәк әле. «Урал»дан да бейек маяҡтар бар. Уларға тиңләшһе бар. Ир намыҫы — ат бәҫе менән бер, ти бит. Тиңләшелер. Быға ышаныс ҙур.

Сөнки «Урал» колхозы аша үткән оло юл буйлап барғанда, бер рәткә теҙеп, ыҡсым итеп, тәҫемләп һалынған алтын эҫкерттәргә, ҡара бәрхәт кеүек күпертеп һөрөлгән ерҙәргә, күҙҙең яуын алып ятҡан келәм кеүек уттай йәшел ужым баҫыуҙарына, шул баҫыуҙарҙағы кешеләргә ҡарайһың да бөтә күңелдән ҡыуанаһың:

— Бына ҡайҙа, исмаһам, ерҙең ысын аҫабалары! Һынатмаҫ ул салауаттар! — тиһең.

1962 йыл,
«Совет Башҡортостаны»

Күтәрелгән сиҙәм

Урау булһа ла юл яҡшы, тигән боронғолар. Бик үк яҡшы булып етмәһә лә, Урал артылып, Силәбе, Магниттар аша үтеп, тап өс көн тигәндә — яңынан Башҡортостан еренә килеп төшәһең.

Ә Сибайҙан тағы ла илле саҡрымдан да ашыуыраҡ ерҙе бындай сатнап торған һыуыҡта, көрт йырып та юл ярып барырға кәрәк. Юлсыға янсыҡ та ауыр тип, толоп-быйма ла алмай сыҡһаң, юл йөрөү хәтәрерәк был яҡта!..

Күңелде тик бер генә нәмә йылытып тора. Ул да булһа — сиҙәм ер! Телдән төшмәй был һүҙ хәҙер. Ер түгел был — ә ниндәйҙер сер. Мин бына тап шул ергә, Башҡортостандың иң алдынғы — быйыл ике миллион ярым боттан да ашыу иген тапшырған Йылайыр совхозына барам.

Уң яҡтан күм-күк булып Ирәндек һуҙыла. Һулда — икһеҙ-сикһеҙ ҡар далаһы йәйелеп ята. Күҙ күреме еткән был ап-аҡ киңлектә ҡарға сумған эҫкерттәренән башҡа бер ни ҙә күрмәҫһең. Тик ҡояш нурына ялтырап, диңгеҙ тулҡындары кеүек алҡаланып ятҡан ҡар балаҫы ғына беҙ барған ыңғайға күҙҙе сағылдырып эйәреп килә. Осо-ҡырыйы юҡ был ерҙең! Күпме сиҙәм күтәрелгән!.. Иртә яҙҙан алып ҡара көҙгә тиклем эшләп арыған ер, ҡалын ҡар юрғанын ябынып, иҙерәп йоҡлай хәҙер, хәл йыя...

Тик кешеләр генә йоҡламай. Совхозға барып ингәндә ут алғайнылар инде. Һәр бер өйҙә электр балҡый. Урамда радио һөйләп тора. Йәштәр көләшә-һөйләшә клубҡа ашыға. Ҡайҙандыр гармун тауышы килә. Танауға яңы ғына бешкән икмәк еҫе килеп һуғыла. Бөтә йәнең-тәнең менән йылынып китҡән кеүек һеҙ. Күңелгә рәхәт.

Ҡайһы өйгә инергә тип торғанда, ҡапыл автомашиналар колоннаһы араһынан ишетелгән таныш тауышҡа һиҫкәнеп киттем. Мине өс егет уратып алды. Беренсе мәктәптәшем Салауат Монасипов булып сыҡты.

— Ниндәй ел ташланы былай?

— Ә һин нисек бында?

— Мин ни — уҡытам инде был совхозда... Бына әле ҡоҙа булышып йөрөйбеҙ.

— Нисек, өйләндеңме әллә?

— Юҡсы! Бына кейәү үҙе. Таныш булығыҙ — Яхия Яҡупов булыр...

Салауат быйыл ғына пединститутты тамамлап эшкә килгән икән. Әле генә бер мәктәптә уҡып йөрөгән башҡорт егете инде рус, украин, татар балаларына немец теле уҡыта! Йәйен сиҙәм совхозында төҙөүселәр бригадаһында эшләгән дә был яҡта уҡытырға тороп ҡалған. Ә Яхия совхоздың маҡтаулы тракторисы булып сыҡты. Тракторын ремонтлап бөткән дә кәләш йәрәшеп йөрөй. Килен кеше — Йылайыр мәктәбенең интернат тәрбиәсеһе Фәрихә Идрисова. Иҫке йылдың иҫтәлеге итеп яңы йыл алдынан яңы ғаилә ҡорорға булғандар. Күрәһең, был иҫке йылдың онотолмаҫ иҫтәлектәре бер сиҙәм күтәреүҙә генә түгел икән шул...

— Маҡтап килгәнһең икән, әйҙә, маҡтап та кит, —тигәндәй, егеттәр мине туйға саҡырҙылар. Шулай итеп, сиҙәм туйында булырға ла яҙған икән...

Туйға егет яғынан совхозға терәлеп кенә ултырған «Яңы тормош» колхозсыларын саҡырғандар. Былар Куйбышев өлкәһенән күсеп килгән Ырғыҙ буйы башҡорттары, тиҙҙән баҫылып сығасаҡ «Ырғыҙ» романын яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшинаның туғандары, Рәшит Ниғмәтиҙең «Дауылдар тыуҙырған ғүмер» поэмаһында һүрәтләнгән геройҙарҙың яҡташтары. Яңы тормош ҡорған яҡташтар үҙҙәренең яҙыусы һәм шағирҙары, сиҙәм күтәргән Яхия кеүек уңған улдары менән ғорурланалар. Һәм хаҡлы ғорурланалар.

Йыйылып бөткән ҡунаҡтар тик бер кешене генә — баш ҡоҙаны ғына көтәләр: «Ҡоҙа эште боҙа бит». Был — Хәким ағай Байназаров, мәктәптең иң өлкән уҡытыусыһы, халыҡ-ара хәл тураһында Венгрия мәсьәләһе буйынса совхоз эшселәренә лекция уҡып, һуңлабыраҡ килеп инде. Тәүге һүҙ уныҡы, әлбиттә. Ул туйҙа ла быйылғы уңыштар тураһында бәләкәй генә бер лекция уҡып ташланы. Йәшкә инде оло ғына булһа ла, Хәким ағайҙа әле элекке комсомол ялҡыны һүнмәгән.

Мәжлес күркәм. Сиҙәм күтәргән кешеләрҙең күңелдәре лә көр. Йырҙы ла улар берҙәм күтәреп ебәрҙеләр...

— Халыҡ хәҙер мул йәшәй ҙә ул!..

— Иген аҡтарылып уңды быйыл, аллаға шөкөр!

— Бындай йылдың ғүмерҙә булғаны юҡ ине, — тип шаулаша ҡарттар...

Бының сере ниҙә һуң?

— Бының сереме — халыҡтың үҙендә, — ти совхоздың партия ойошмаһы секретары Андрей Родионович. — Егерменсе съезд ҡуҙғатып ебәрҙе халыҡты. Ә халыҡ ҡуҙғалғас, ер ҡуҙғалмай булмай...

Дөрөҫ әйтә иптәш Кузнецов. Ер кешене күтәрә, кеше ерҙе күтәрә. Мөғжизәләр эшләй халыҡ ҡулы.

Йылайырлылар ең һыҙғанып эш эшләнеләр быйыл. Көҙөн бөтә ер туңға һөрөп ҡалдырылғайны. Ҡыш буйы баҫыуҙарҙа трактор менән һөрөп ҡар тоттолар. Ә яҙ етеү менән мең кеше бер кешеләй булып үҙ ваҡытында сәсеүгә төштө. Ерҙе ашлауҙа самолеттар ярҙамға килде. Шулай итеп, ямғыр ерҙән сығып яуҙы, ә ерҙе күктән эшкәрттеләр. Яҡшы орлоҡтар яҡшы эшкәртелгән дымлы ергә төшөү менән үк шытып сығып, күкрәп үҫеп китте. Шул иген менән бергә яңы ғына институт бөтөрөп килгән агроном ҡыҙ Тамара Орехова үҙе лә үҫте.

— Эште яратып эшләһәң, эш һине лә ярата икән шул, —ти Тамара быйылғы эштәренең емештәре менән ғорурланып. — Мин ысын институтты тик бына шул совхозда ғына үттем...

Тамара кеүек кешеләрҙе үҫтереү иген игеүҙән байтаҡ ауырыраҡ һәм ҡатмарлыраҡ. Һәр бер кешенең үҙ тәбиғәте, үҙ донъяһы, үҙ холҡо бар. Һәр кешенең яҡшы һәм кире яҡтары бар. Кешегә ғәжәп ҙур бер иғтибар һәм һаҡлыҡ менән килә белергә, уның нәҡ ана шул яҡшы яҡтарын күрә белергә кәрәк. Ә насарҙы кем дә күрә уны! Орлоҡто аҙ ғына һелкетеп ҡараһаң да уның сүп-сарҙары өҫкә ҡалҡып сығырға ғына тора. Бына

ысын, тос орлоҡ — аҫтараҡ. Шундайҙарҙы табып алыу тураһында Андрей Родионовичҡа ла совхоздың тәжрибәле директоры Әғләм ағай Нәҡиевҡа ла байтаҡ төндәрҙе йоҡламай үткәрергә, уйланырға, эҙләнергә тура килде. Совхоздағы эш шарттарын үҙгәртеп ҡороу кәрәк ине. Ә унда элекке ғәҙәттәрҙе һаҡлап килеүсе «ҙур һаҡалдар» ҙа бар. Уларҙа авторитет та бәләкәй түгел. Һаҡалдарын улар совхоздың төрлө тармаҡтарына ла бик тәрән ебәргәндәр. Уларҙы йолҡоп алыу ҙур ихтыяр көсө талап итте.

— Мәҫәлән, шундай бер хәл килеп сыҡты, — тип һөйләй Андрей Родионович. — Сиҙәм совхозында үҙ аллы бүлексәләр кәрәкме, әллә бригадалар ғынамы? «Ҙур һаҡалдар» бригада яғында. Бындай система норма артынан ҡыуыуҙы килтереп сығара ине. Ә сифатҡа зыян килә. Ғәйепте лә бер кем үҙ өҫтөнә алырға теләмәй: бригадир — механикка, механик агрономға һылтана. Эшкә яуаплылыҡ етешмәй. Беҙ был «системаны» бөтөрҙөк. Бүлексәләр хәҙер үҙ аллы, һәм уның менән управляющий етәкселек итә. Был, яуаплылыҡты ныҡытып, эшкә яҡыныраҡ булыу мөмкинлеген бирҙе. Норма артынан ҡыуыу бөтөп, сифат та күтәрелде. Техникаға ла хужаларса ҡарай башланылар. Шулай итеп, эш тә ырап китте: управляющий ашыҡтыра, агроном сифатты һаҡлай, ә механик машиналарҙы ҡарай. Хәҙер эште артабан яҡшыртыу өсөн бүлексәләр менән етәкселек эшенә белгестәр ебәргә кәрәк. Был эш менән ҡыйын беҙҙә. Етмәһә, беҙҙең управляющийҙарҙы специалист итеп башҡа райондарға ебәрәләр ҙә ҡуялар. Һеҙ үҙегеҙ үҫтерерһегеҙ әле, тиҙәр совхоздар управлениеһынан...

— Унан һуң вуздарға ерҙе, ер эшен, ауыл хужалығын белгән йәштәрҙе алырға кәрәк. Юҡһа, ҡаланан килгән агроном кишерҙе сөгөлдөр менән бутамаҫ өсөн генә ул! — тип ҡулын һелтәп ҡуйҙы секретарь.

— Бик киҫкен әйтелһә лә, был һүҙҙәрҙә ҙур дөрөҫлөк бар. Сөнки Башҡортостан ауыл хужалығы институтына бик осраҡлы кешеләр ҙә килеп инә. Ә ауылда үҫеп, ауыл эшендә ҡайнаған йәштәрҙең яртыһы тиерлек институтҡа инә алмай, кире ҡайтып китә. Мәҫәлән, быйыл агрономия факультеты менән шулай булды. Был факультетҡа килгән йәштәр араһында хатта техникум бөтөп бер нисә йыл эшләгән агрономдар ҙа бар ине!

Ә бына совхозда эште белгән, юғары белемле специалистар етешмәй. Йылайыр совхозының бары Покровка бүлексәһендә генә бер специалист бар.

Совхозда әле «күтәрелмәгән сиҙәмдәр» ҙә күп. Был бигерәк тә малсылыҡ эшендә күҙгә бәрелеп тора. Уңыштарҙан баш әйләнеп тынысланмау өсөн был хаҡта әйтмәү мөмкин түгел. Совхоз хужалығының үҫеше бер яҡлы икәнлеген хатта малдар үҙҙәре үк әйтеп тора.

Бына һыйырҙарҙы Уртаҙымға һыу эсергә төшөрҙөләр. Улар араһында һөт бирә торған эре һыйырҙарҙы күреү бик ҡыйын. Бөтәһе лә тиерлек ғүмер-ғүмергә «һауһалар — бер аҙ һөт бирермен, һуйһалар — бер аҙ ит бирермен» тип кенә йөрөгән иҫәпкә бар, һанға юҡ малҡайҙар. Улар араһында, һауынсылар үҙҙәре әйткәнсә, елендәре лә күренмәгән кәзә-һыйырҙар ҙа, көйшәргә тештәре лә төшөп бөткән йөҙйәшәр ҡарт һыйырҙар ҙа бар.

— Шуларҙан ниндәй һөт алаһың инде! — ти управляющий апай. — Ә бит уларға ла план бирәләр... Шул планды үтәйем тип күҙең сыға. Һауһаң ине, исмаһам, һыйыр! Ә быларға бит ғүмерең генә әрәм!..

Ысынлап та — шул малдарҙы ҡарап күпме көс түгелә, күпме кеше эшләй, күпме эш хаҡы түләнә! Ә һөҙөмтәлә — совхоз тик быйыл ғына уларҙан миллион ярым һумға зыян күргән. Был тик иген менән генә ҡаплана. Әгәр ҙә шул зыян булмаһа, совхоздың бөтә тармаҡтан алған 18 миллион һумлыҡ килеменән саф көйөнсә генә 5 миллион аҡсаһы ҡалған булыр ине. Тимәк, хужалыҡты планлаштырыу планһыҙ йәки һуҡыр план менән алып барыла. Был хәлгә түҙеп тороу мөмкин түгел. Быныҡ иң юғары типтағы ауыл хужалығы менән — совхоз менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ. Малдарҙың тоҡомон яҡшыртыу эшенә ең һыҙғанып тотонорға кәрәк. Быныҡ өсөн совхоздың экономик мөмкинлеге бар.

— Һыйырҙың һөтө теләндә, ашатһаң, һөт бирә инде һыйыр, — ти һауынсы Асия Хәйбуллина. Ләкин совхоз етәкселәре был хәҡиҡәтте күреп етмәйҙәр әле. Мал аҙығы ташып ҡуйылмаған. Шунлыҡтан бөтә бүлексәләрҙә лә, бигерәк тә Күлтабан бүлексәһендә, мал аҙығына өҙөкләктәр була. Малдарға тамыраҙыҡтар бөтөнләй әҙәрләнмәгән. Унан һуң мал торлаҡтарына бер ниндәй механизаторҙың да ҡулы теймәгән. Бөтә эш ҡул көсө менән эшләнә. Һауынсылар хатта силосты ла итәктәренә һалып ташыйҙар... Совхоз механизаторҙары улар алдында бик-

бик бурыслы. Яңы йылда былай боронғоса эшләү бөтөр тип ышанаһы килә.

Сөнки йылайырлылар ошо үткән йылда үҙҙәренең ниндәй мөғжизәләр тыуҙырырға булдыҡлы икәнлектәрен күрһәттеләр инде.

Быйыл да һынатмаҫтар улар!

Совхоз менән хушлашҡанда, уның сиҙәм батырҙарын Яңы йыл менән ҡотлап, уларҙың уңышына ҡыуанып, етешһеҙлегенә көйөнөп, киләһе йылдарҙа Йылайырҙы бөтә яҡтан да етешле, юғары культуралы итеп, баҡсалар эсендә ултырған яңы мәктәбе, яңы стадион һәм яңы өйҙәре булған совхоз итеп күрәһе килә.

Был — халыҡтың үҙ теләге, үҙ хыялы һәм ул баҫҡанда ут сығарып эшләй ҙә белә, мең-мең йылдар буйы йыйырсыҡланып ятҡан сиҙәмдәр ҙә күтәрә. Сөнки эш өҫтөндә кешеләр үҙҙәре күтәрелә!

Баймаҡ районы

Яҡтылыҡ

(Очерк)

Бөтәһе лә бала саҡтан башлана: яҡшыһы ла, яманы ла. Тик балалыҡ үҙе, бөтәһенән элек, яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа ынтылыусан. Кеше, үҙенең йәйғор төҫлө сағыу балалыҡ иленә ҡайтып, ниндәйҙер мөғжизәләр, яңы асыштар яһарға хыялланыуҙарын хәтерләгәндә, үҙе лә һиҙмәҫтән, шағирға әйләнә. Ә күңелендә ошо ҡабатланмаҫ балалыҡ хистәрен ғүмергә һаҡлай алған кеше, бер генә юл шиғыр яҙмаған хәлдә лә, һәр саҡ шағир булып ҡала. Ундайҙар менән йәшәүе лә рәхәт, эшләүе лә күңелле, хатта танышып-һөйләшеп китеүе лә еңел...

Бына шундай йөҙө-күңеле яҡты кешеләрҙең береһе ул. Исеме лә есеменә тура килеп тора бит әле: Светлана! Сөндөковтар ғаиләһендә был яҡтылыҡ донъяға килгәс тә, Фатима апай менән Ғилман ағай, ҡыҙҙарының яҡты киләсәген юрап, уға шундай замана исемен ҡушҡандыр ҙа инде.

Тик Ғилман ағайға ҡыҙының үҫеп етеп, уҡып, ҙур ғалимә булып китеүен күрергә яҙманы. Ошо яҡты киләсәк, ил именлеге, халыҡ бәхете өсөн ғәзиз ғүмерен биреп, бик күптәребеҙҙең атайҙары һымаҡ, ул да Бөйөк Ватан һуғышынан әйләнеп ҡайта алманы. Атаһы яуға киткәндә, Светланаға әле биш йәш тә

тулмағайны. Уны ул күберәк һүрәттәре буйынса ғына төҫмөрләй. Ләкин Фатима апай ҡыҙын атаһының яҡты иҫтәлегенә тоғро, кешеләргә игелекле, алсаҡ күңелле итеп үҫтерҙе, нисек тә уҡытырға тырышты.

Света үҙе лә бәләкәйҙән үк яҡтылыҡҡа, белемгә ынтылды, бөтә фәндәрҙән дә яҡшы уҡыны, һәр саҡ йәмәғәт эштәрендә ҡатнашып йөрөнө. Мәктәптә бер ниндәй кисәләр ҙә уның ҡатнашлығынан башҡа үтмәй торғайны. Әҙәбиәт һәм сәнғәт менән дә, теүәл фәндәр менән дә ул берҙәй мауыҡты.

Фатима апай ҡыҙын, моғайын, үҙ юлынан китер, үҙенә алмаш врач булыр, тип уйлағайны. Ләкин ҡыҙҙың үҙ хыялы, бөтә күңелен биләгән үҙ донъяһы бар ине инде. Мәктәптә уҡығанда уҡ уны «Фән һәм фән өсөн ғазап сиккән кешеләр» тигән китап тетрәтте. Ә боронғо рим шағиры Кар Лукрецийҙың атомдар ҡоролошо тураһында яҙған «Есемдәр тәбиғәте» тигән ҙур поэма-трактаты уны тылсымлы химия донъяһына алып инде, һәм ул «Гүзәл кешеләрҙең тормошо» серияһында сыҡҡан Ломоносов, Пастер, Менделеев һәм башҡа күренекле ғалимдар хаҡындағы китаптарҙы йотлоғоп уҡырға тотондо. Үҙенең иң яратҡан уҡытыусыһы Дора Ароновна Ройтр Светаның, химлабораториянан сыҡмай, төрлө реакциялар, дәрестән тыш тәжрибәләр менән мауығыуын күреп:

— Беләһеңме, Света, һин мотлаҡ химик буласаҡһың. Ә Башҡортостан — оло химия республикаһы. Шуның өсөн һиңә Зинин, Клаус, Бутлеров кеүек ғалимдары менән даны сыҡҡан Ҡазанда уҡып ҡайтырға кәрәк, — тип, уға Ҡазан университеты нигеҙендә асылған химия-технология институтына китергә кәңәш бирә.

Өфөнөң 12-се (хәҙерге 62-се) мәктәбен тамамлау менән, Светлана Сөндөкова ошо институттың технологик факультетына уҡырға инә һәм бәләкәйҙән үк хыялланған тылсым донъяһына сума.

— Иң һағынып иҫкә ала торған саҡ бит ул студент йылдары! — тип хәтерләй ул был йылдарҙы. Рус органик химияһының бишеге булған Ҡазан химия мәктәбенең данлы традицияларын дауам иткән күренекле ғалимдарҙың, бигерәк тә профессор Г. Х. Камай лекцияларын тыңлау уға үҙе бер ғүмер була. Профессор Камай уға, институтты бөткәс, аспирантураға ҡалырға тәҡдим итә. Ләкин үҙ һүҙле, үҙ көсөн бөтә нәмәлә лә һынап ҡарарға яратҡан, ут бөрсәһе һымаҡ теремек, ныҡышмалы, бөтмәҫ-төкәнмәҫ ғәйрәт йөрөткән ҡыҙ башта үҙ белемен практик эштә һынап ҡарарға

теләй һәм, 1959 йылда Өфөгә ҡайтып, ике йыл синтезспирт заводында смена начальнигы булып эшләй. Унан 1964—1967 йылдарҙа Башнефтехим производствоһы ғилми-тикшеренеү институтында аспирантурала уҡып, шунда уҡ катализаторҙар бүлегенә фәнни эшкә ҡалдырыла.

— Ә ниндәй темаға диссертация яҡланығыҙ һуң? — тип һорағас, Светлана Ғилмановна көлөп ебәрҙе:

— Хәҙер тулыһынса үҙем дә хәтерләмәйем инде. Теленде һындырырлыҡ исем.

— Ә шулай ҙа?

— Улайһа русса ғына әйтәйем инде: «Влияние металлов на коксообразование при каталитическом крекинге и регенерацию алюмоселикатных катализаторов». Хәтәрме?

— Хәтәр икән шул. Ысынлап та тел һындырырлыҡ!

Ләкин уның ҡарауы диссертацияның эшкә файҙаһы ла хәтәр икән шул: ундағы тәҡдимдәрҙе Өфө нефть эшкәртеү заводында ҡуллана башлағас, улар 600 мең һумлыҡ экономия биргән!

— Әлбиттә, был бер минең эшем генә түгел, бөтә завод эшселәренең, инженер-технологтарҙың ҡаҙанышы. Бигерәк тә мин үҙемдең етәкселәрем Ричард Иванович Черкасовҡа (ана уның портреты, аварияға эләгеп һәләк булды), унан һуң Рәфғәт Мәжитович Мәсәғутовҡа бурыслы. Хәҙер ул — институттың директоры, техник фәндәр докторы. Әле лә коллективтың ярҙамы ҙур миңә, — тип Светлана Ғилмановна үҙ коллегаларының ғилми эштәре хаҡында ғорурланып һөйләй.

Эйе, институт ғалимдары ҙур ижади тормош менән йәшәй. Химия промышленосы алдына партиябыҙҙың XXV съезы ҡуйған бурыстар, «химик реакцияларҙы байтаҡҡа тиҙләтерҙәй юғары эффектлы каталитик системалы яңы химик процестар булдырырға, күпселектә йомоҡ циклдарҙы файҙалана торған ғилми технология нигеҙҙәрен эшләргә» тигән күрһәтмә туранан-тура ошо институтҡа ҡағыла.

Мәктәп химияһынан белеүебеҙсә, катализатор реакцияларҙы тиҙләтеүсе тигән һүҙ. Беҙҙең хәҙерге тиҙлек заманында бөтә эштә лә ошондай тиҙләткестәр кәрәк. Бөйөк баҡсасы әйткәнсә, беҙҙең бурыс — тәбиғәттән шәфҡәт көтмәй, унан бөтә нәмәне ҡайырып алыу бит. Светлана Ғилмановнаның ғилми эҙләнеүҙәре бына ошо мәсьәләне хәл итеүгә арналған да инде. Уның ҡатнашлығында никель катализаторын эҙерләү технологияһы камиллаштырылып, Өфө нефть эшкәртеү заводында бер йыл

инде хәҙер ошо технология ҡулланыла. Ново-Куйбышев нефтехимкомбинатында ла, Стәрлетамаҡ синтетик каучук заводында ла ҡулланалар уны.

Ә был яңылыҡ нимә бирә һуң?

Был яңылыҡ хеҙмәт етештереүсәнлеген өс мәртәбәгә тиерлек күтәргән, продукцияның сифаты ла яҡшыра төшкән. Элекке ике операция урынына хәҙер бер генә операция башҡарыла.

Һеҙ магазиндан алған маргаринда ла Светлананың ҡыҫылышы бар. Эйе, эйе, һәр бер хужабикә ҡулланған был маргаринды ул тәҡдим иткән никель катализаторы ярҙамында алалар бит. Был катализатор, элеккеһенә ҡарағанда, активыраҡ та, оҙағыраҡ та ҡулланыла. Уны хәҙер Советтар Союзының 15 ҡалаһындағы төрлө май заводтарында — Мәскәүҙә, Ленинградта, Куйбышевта, Свердловскийҙа, Гомельда, Тбилисиҙа, Хабаровскийҙа һәм башҡа урындарҙа файҙаланалар.

Светлана Ғилмановна мине институт директоры Рәфғәт Мәжитовичҡа алып ингәс, ул коллективтың эше тураһында ентекләберәк һөйләп бирҙе. Әле улар тағы ла активыраҡ, эффектлыраҡ катализатор алыу өҫтөндә эшләйҙәр икән. Был баҡыр-хром-бари катализаторы аҙыҡ промышленносында — төрлө ҡушылмалары аҙыраҡ булған майҙар, нефть промышленносында синтетик каучук алыуҙа ҡулланыласаҡ.

Әлегә төрлө эске яныу двигателдәренә киткән яғыулыҡтар составында миркаптан тигән ҡатнашма бар икән. Бына шуны мөмкин тиклем кәметерҙәй яңы катализатор әҙерләйҙәр. Өфө нефть эшкәртеү заводында нефтте парафиндан таҙартыу буйынса ла, синтезспирт заводында фенол-ацетон яһауҙа ла институт ҙур эш алып бара. Завод хәҙер фенолды отлично билдәһе менән генә сығара.

Бөтә яңы технологик процестарҙы әҙерләүҙә институт төрлө завод коллективтары менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Туғыҙынсы бишйыллыҡта был бәйләнешкә ныҡлы нигеҙ һалынһа, унынсы бишйыллыҡта инде ул тағы ла нығый төшәсәк. Яңы технологик процестарҙы производствоға индереү бер һум тотоноу иҫәбенә дүрт һумдан артыраҡ экономик эффект бирә. Бөгөнгө көндә институтта 36 фән кандидаты бар. Светлана Ғилмановна бына шуларҙың береһе генә түгел, ә ошо ҙур коллективтың етәксеһе лә. Уны былтыр көҙ институт партия ойошмаһының секретары итеп һайлағандар. Ул үҙе лә хәҙер институт тормошоноң тиҙләткесе — катализаторы тиергә була.

... Беҙ яҡты, ҙур лабораторияға инәбеҙ. Был үҙе бер бәләкәй генә завод. Бында ғәҙәти көнбағыш майынан әле әйткән кизигурлы никель катализаторы ярҙамында юғары сифатлы маргарин алыу реакцияһы бара. Эсәк һымаҡ ҡырҡа бөгөрләнгән ҡыуыу аппараттары. Температура — 400°. Шунан арттырырға ла, кәметергә лә ярамай. Бөтә был заводтың эшенә ике лаборант ҡыҙ күҙәтеү алып бара.

Светлана Ғилмановна был реакцияның формулаһын яҙып күрһәтә. Химиянан алыҫ кешегә был, әлбиттә, һаҡалтай кәзәнең афиша уҡып тороуы менән бер!.. Шулай ҙа йөҙөңә белдекле ҡиәфәт сығарып, ҡараған булаһың. Водород тигән һүҙҙе ишетеп, «шартлап китһә, көлөң күккә оса инде», тигән уй тәнде сымырҙатып ҡуя... Ләкин шөрләүең бушҡа: бында иң тыныс хеҙмәт кешеләре эшләй. Ни бары һәр хужабикә табаға һалып шыжлата торған маргарин яһайҙар! Шулай ҙа уның да үҙ теле бар икән. Светлана Ғилмановна үҙенең лаборант ҡыҙҙары Инна Кузнецова, Наташа Клименко менән дә, бүлек мөдире Борис Федорович Морозов менән дә ошо телдә һөйләшә. Миңә ҡалһа, ул бер сихыр, магия теле кеүек...

Һәр бер яңылыҡ производствоға индерелгәнсе әллә күпме көндәр, айҙар, хатта йылдар буйы иң элек бына ошо сырмалсыҡ эсәктәргә, пробирка һәм колбаларҙа ентекләп тикшерелә, әллә күпме формулалар яҙыла, әллә күпме иҫәпләүҙәр яһала. Күпме тырышлыҡ, түҙем һәм мөхәббәт кәрәк бының өсөн. Светлана Ғилмановна бына шундай үҙ эшенең шағиры булған ғалимә лә инде. Һәр кем уны маҡтап, хөрмәтләп телгә ала.

— Ут!..

— Ғәйрәтле!

— Тынғыһыҙ!

— Кеше йәнле, кешелекле!..— тиҙәр уның хаҡында.

Бөтәһенә лә өлгөрә ул: театрға ла, концертҡа ла, китап уҡырға ла; улы Рөстәм менән спорт хаҡында һөйләшергә лә... Рөстәм инде VIII класта уҡый. Йөҙөү буйынса республика чемпионы. Ә атаһы Владимир Виниаминович Тихановский — элекке хәрби летчик — хәҙер Өфө аэропортында штурман булып эшләй. Ул да йәмәғәт эшмәкәре — цехком председателе. Бәлки, уларҙы ошо тынғыһыҙлыҡ, тиҙлек ҡауыштырғандыр ҙа. Ул Татарстандың Аҡтаныш районында тыуып, Минзәлә балалар йортонда тәрбиәләнеп үҫкән. Ә яҙмыш уны башҡорт кейәүе итеп ҡуйған.

— Беҙҙең Тихановскийҙар ғаиләһе шундай интернационал инде, — ти Светлана Ғилмановна — ул минән телде яҡшыраҡ белә. Башҡорт-татар йырҙарын яратып йырлай. Миңә лә хәҙер, олоғайған һайын, туған тел яҡыныраҡ була бара. Әсәйем менән туйғансы һөйләшеп алабыҙ. Бигерәк тә миңә үҙебеҙҙең башҡорт театры оҡшай. Тик шуныһы йәл: алыҫыраҡ булғас, Черниковканан бик йыш йөрөп булмай. Ҡала уртаһына һалманылар бит шуны...

— Ә тағы нәмә яратаһығыҙ? — тигәс, уның ҙур һоро күҙҙәре сабыйҙарса балҡып китте.

— «Тәлаз» ҡушаматлы этебеҙ бар беҙҙең! Бына ҡайҙа ғалим, исмаһам! Торғаны бер философ инде. Тик һөйләшмәй генә. Күҙҙәре мөлдөрәп кенә тора. Хәҙер берәй афоризм әйтеп һалыр һымаҡ. Уның менән баҡсаға сығып, ял итеп йөрөүе үҙе бер тамаша. Ғөмүмән, тәбиғәттә яратам мин.

— Ә яҙыусыларҙан кемде яратаһығыҙ?

Шунда ул китап кәштәһенә күҙ һирпеп алды. Унда Шолоховтың 2-се томы ята ине. Яңынан уҡый, күрәһең.

— Яҙыусыларым күп минең. Әле 200 һумлыҡ китапҡа яҙылдым. Яңыраҡ Георгий Марковтың «Себер» трилогияһын уҡып сыҡтым. Бик оҡшаны. Унан Виль Липатов оҡшай. Ләкин мине иң ғәжәпләндергәне — шиғырҙар. Нисек яҙалар икән шулай? Мин, исмаһам, берәй юл ғына яҙһам икән!..

— Ә беҙҙең журнал уҡыусыларға, бигерәк тә унынсы класты бөтөрөүсе ҡыҙҙарға ниндәй теләк әйтер инегеҙ?

Светлана Ғилмановна, етдиләнеп, бер аҙ уйлап алғас, былай тине:

— Нимә әйтер инем? Профессия һайлағанда, тик үҙҙәре яратҡан һөнәрҙе генә һайлаһындар ине. Ғүмер буйы уға тоғро ҡалырлыҡ булһын. Минең, мәҫәлән, үҙ эшем — иң ҙур бәхетем. Өйҙә мин оҙаҡ ултыра алмайым. Ялҡа башлайым. Тиҙерәк эшкә, институтҡа йүгерәм. Беҙҙең коллектив бик яҡшы. Унан йәмәғәт эшен дә артыҡ йөк итеп күрергә ярамай. Унһыҙ тормош барыбер тулы булмаҫ ине. Тағы бер теләгем бар: беҙҙең ҡыҙҙар тормош юлында, бигерәк тә фәнгә ынтылғанда ҡыйыуыраҡ булһындар. Юҡһа, беҙҙең халыҡта ниндәйҙер тартыныу бар. Шуның арҡаһында бик күп таланттар юғалып ҡала. Яратаһың икән — ҡыйыу бул!

Әйе, был һүҙҙәрҙә ҙур хаҡлыҡ бар. Был һүҙҙәр ысын күңелдән әйтелгән, замандашымдың кешелек яҡтылығы балҡып

торған һүҙҙәр бит. Күрәһең, һәр кем уның менән һөйләшеүҙән күңелендә йылы бер яҡтылыҡ алып китәлер.

Институттағы утыҙ кешенән, ә Өфөләге меңәрләгән кешеләрҙән Советтар Союзы гражданины тигән ғорур исемде раҫлаусы ураҡ-сүкешле яңы паспорттың иң башлап уға бирелеүе лә тикмәгә түгелдер. Ул бит киләсәккә ашыға, башҡаларҙы ла ашыҡтыра!..

13 май 1976 йыл

Бөрйән юлдары буйлап

(Юл яҙмалары)

I. Мөғжизәләр иле

Бөрйән...

Бөрйәнгә барып, Бөрйәнде күреп ҡайтҡан кеше үҙ тәьсирҙәрен бер һүҙ менән генә әйтә алыр инеме икән?

Юҡтыр, моғайын!..

Әммә бер ауыҙ һүҙ әйтмәй ҙә булдыра алмаҫ ине.

Үҙ ғүмерендә бер генә шиғыр юлы яҙмаған кешенең дә бында шиғыр яҙғыһы, бер генә һүрәт төшөрмәгән кешенең дә рәссам булғыһы, бер генә моңо булмаған кешенең дә йырлап ебәргеһе килер ине.

Беҙ әллә ҡайҙарҙағы Ҡафтау арттарына, әллә ҡайҙарҙағы Ҡырым, Балтик буйҙарына барып, матурлыҡ эҙләйбеҙ; төрлө музейҙарға инеп, ауыҙ асып йөрөйбөҙ; төрлө сиркәү-соборҙарҙың хор һәм орган моңдарына иҫебеҙ китә.

Ә, баҡһаң, ул матурлыҡ, ул һүрәттәр, ул моңдар үҙебеҙҙең аяҡ аҫтында ғына, үҙ Башҡортостанының ҡуйынында ғына ятҡан, самолет менән «һә» тигәнсе барып төшөрлөк Бөрйән илендә генә икән...

Эйе, матурлыҡ күрәйем тиһәгеҙ, Бөрйәнгә барығыҙ, дуҫтар! Донъялағы иң ҙур тулҡындарҙы күреп һоҡланырға теләһәгеҙ, бер ҙә әллә ҡайҙа, ете тау артындағы диңгеҙ ярҙарына путевка юллап, аҡса туҙҙырып, ғүмер уҙҙырып йөрөйһө юҡ — тотоғоҙ ҙа тулҡын-тулҡын булып, береһенә-береһе артылып ятҡан армыт-армыт Бөрйән тауҙарына, уның Мәсемхан, Атайсал, Ҡурыуҙы, Ыласынташ түбәләренә менегеҙ — күҙ алдығыҙҙа күк

монар ҡаплаған мөһабәт Урал ҡалҡыр; иң ҡеүәтле тулҡын шауын ишетәһегеҙ килһә, һырғай шыршы, ҡарағай, ҡарағас урмандарының шомло тауыш сығарып, диңгеҙҙән дә хәтәрерәк геүләгәнен ишетерһегеҙ; ебәк кеүек йомшаҡ, таң ысығы һымаҡ саф һыу менән ҡойоноп, алтын төҫлө ҡомда ятайым тиһәгеҙ, рәхим итегеҙ, ҡолонсағын көмөш биләү менән биләгән наҙлы әсә шикелле, Урал итәктәрен уратып-уратып аҡҡан тилбер Ағиҙел алҡаланып ятыр. Ағиҙелдең бында һис бер мал-фәләнгә, бысраҡ-маҙарға ҡатышмаған, иркә ҡолон һымаҡ уйнаҡлап-борғалап аҡҡан, быяла ише үтә күренеп ятҡан тәңгәле. Уға берәй уҫал уй уйлап, яман ниәт менән килмәһәгеҙ (ә бит уға төрлө шартлатҡыстар тейәп килеүселәр ҙә бар!), ул һеҙгә ашарға — балығын, эсергә — тәмле һыуын, һуларға — ҡымыҙҙай иҫерткес, хуш еҫле һауаһын, ҡуналҡаға — ямғыр үтмәҫ таллы-тирәкле йәшел сатырын, аҫҡа түшәргә — билдән үҫкән бүтәгәләй үләнен, ябынырға — һаныҡ йондоҙ менән ҡайылған күм-күк юрғанын бирер.

Ә инде емеш-еләгенән, шифалы үлән-көпшәләренән ауыҙ итәйем тиһәгеҙ, таныҡығың ҡанғанса аша әйҙә! Бында улар өсөн аҡса һорамайҙар, йомарт тәбиғәт көллөһөн дә гөлдәй итеп үҫтерә: арба юлына эйелеп, еләген өҙ; шишмә буйҙарындағы шырлыҡтарға инеп, ҡарағатын тир; үрелеп, муйылын һыпыр; күләгәлә ятһаң — бөрлөгәнен, бил яҙырға торһаң — ҡурай еләген һоғон; күнеленә ятһа — балтырғаны, монар көпшәһе менән һыйлан; сөсө булып китһә, әсе ҡуҙғалағын, йыуаһын, ҡымыҙлығын өҙөп ҡап!.. Барыһы ла бар бында!

Һунар ҡомарың ҡуҙғалһа, әйҙә, миҙгелен белеп кенә, ҡомһоҙланмай, тәбиғәттең дуҫы булып, һунарға сық, — ниндәй генә ҡош-ҡортҡа, йәнлектәргә ылыҡмаҫһың бында! — исемдәрен генә һанап китһәң дә, тотош бер һүҙлек төҙөргә мөмкин. Һунарсы хикәйәләрен тыңларға әүәҫ булһаң, айыу менән көрмәкләшеп һуғышҡан һунарсылар ҙа осрай (улар хаҡында һүҙ алдараҡ булыр әле).

Әгәр ҙә инде һин ысын мөғжизә күргең теләһәң, туп-тура Бөрйәнгә ос! Мысыр пирамидаларын, аҫылмалы Вавилон баҡсаларын, Эфестағы Артемида храмын, Зевс статуяһын, Галикарнасс кәшәнәһен, Родос утрауы Колосын һәм Александрия маяғын күргең өлгөрөрһөң әле. Улар хаҡында меңмең китаптар яҙылған. Донъялағы бына ошо ете мөғжизәгә әле яңы килеп өҫтәлгән һигеҙенсе мөғжизә ул — Бөрйәндәге

Шүлгәнташ мәмерйәһе. Күренекле рус шағиры Леонид Мартынов тәү башлап яҙған «Башҡорт мәмерйәһе» тигән шиғыр нәҡ шул Шүлгәнташ мәмерйәһе тураһында инде. Яңы ғына ике телдә — урыҫ һәм француз телдәрендә — баҫылып сыҡҡан О. Н. Бадерҙың «Каповая пещера» тигән китабы ла бөтә донъя ғалимдарының, сәнғәт белгестәренең иғтибарын яулап алған ошо мөғжизә хаҡында һөйләй бит. Шүлгәнташ мәмерйәһендәге тәүтормош кешеләре яһаған боронғо януар — мамонт, носорог, ҡыраҒай ат һүрәттәре хаҡында донъя ғалимдары пыр туҙҙырып бәхәс алып барған саҡта, ус төбөндә ятҡан ошо мәмерйәгә инеп, ундағы серле һүрәттәрҙе үҙ күҙҙәрең менән күрмәйенсә, ҡалай түҙеп ятмаҡ кәрәк?

Дөрөҫөн генә әйткәндә, Шүлгәнташ мәмерйәһенә инеп сыҡмай тороп, йәш кешегә йәш тип әйтергә лә, ә ололарға — пенсияға китергә лә ярамайҙыр. Ә инде был донъянан уны күрмәй китеүең үкенес кенә түгел, гонаһтыр...

Юҡ, был һис тә, Бөрйәнгә әҙәбиәт аҙналығына барып, Шүлгәнташ мәмерйәһенең тайҒаҡ һуҡмаҡтарында имгәклән, шыуышып йөрөп, мәҒәрә төпкөлөндә ятҡан күлдең һыуын уртлап сыҡҡан алты яҙыусының — Кәтибә Кинйәбулатова менән Фәрит Иҫәнғоловтың, Муса Ғәли менән Рафаэль Сафиндың йәки Әнүр Вахитов менән Рәми Ғариповтарҙың — шаштырыуы түгел, Бөрйән ҡыҙҙары бешкән ҡымыҙҙы эсеп, ҡыҙып китеүҙәренән дә түгел, шағир халҡының фантазия-гипербола яратыуынан да түгел.

Улай тиһәгеҙ, беҙҙең менән бергә бик айыҡ аҡыллы кеше, хатта поэзияға ҡапма-ҡаршы торған иҫәп-хисапты, теүәллекте яратҡан эштә эшләүсе — Башҡорт АССР-ының финанс министры урынбаҫары Латип ағай Бикбулатов та мәмерйәгә инеп сыҡты.

Сәстәре инде Мәсемтау ҡылғандары һымаҡ ағарған, таш ҡыуыштың ҡайһы бер тишектәренә ҡыйыныраҡ һыя торған олпат кәүҙәле был оло йәштәрҙәге кеше лә, йөрәге ауырыу булыуға ҡарамаҫтан, мәмерйәнән алтын тирәсле күҙлек кейгән етди финанс эшмәкәре булып түгел, ә һоҡланыуҙан ауыҙы ҡолағына етеп йылмайған шағир йәки күҙҙәрендә Шүлгән күленең саф зәңгәрлеге емелдәгән бер бала булып килеп сыҡты. Әйтерһең, ул ат башындай алтын тапҡан!.. Аҙаҡ, төнгә ҡалып, Кейекбай ауылында ҡунырға туҡталғас, ул хатта ҡымыҙ-фәлән эсмәйенсә лә, күңелендә йәшлек хәтирәләре булып ҡалған беҙ, шағирҙар, белмәгән шиғырҙарҙы уҡып ебәрҙе...

Бына ниндәй бит ул — Бөрйән мөғжизәһе — хатта кешенең министрлығын да оноттора!

Ә Бөрйәндең иң оло хазинаһы — ошо иҫ киткес тәбиғәт ҡосағында йәшәп, тәбиғәт менән бергә ҡушылып үҫкән шағир күңелле, сәсән телле, йыр-моң һөйөүсе, дәртле халҡылыр, моғайын. Сөнки бындай тәбиғәт ҡосағында йәшәп, шағир булмай булмайҙыр.

Матурлыҡ ғәрәптең сүлендә түгел, күңелендә, тиһәләр ҙә, матурлыҡты, талантты, ижад ҡеүәһен тәбиғәттән айырып алып булмаҫ. Һәр фантазияның, хатта иң ҡыйыу хыялдың да материаль нигеҙе бар.

Бай тәбиғәт серҙәрен асырға, үҙеңдең тирә-йүнеңдәге донъяны танып-белергә, аңларға, аңлатырға, уны үҙгәштерергә тырышыу теләге тәүтормош кешеһендә үк ижад фантазияһын уятҡан, уның ҡулына тылсымлы буяу тотторған һәм таш ҡыуыш ҡабырғаларына ул замандарҙа йәшәгән мамонт, ҡырағай ат һүрәттәрен төшөрөргә мәжбүр иткән. Кешенең һүҙ ҡеүәһе, һүҙ көсөнә изге ышанысы быуаттар буйынса төрлө мифтар, әкиәттәр, легендалар тыуҙырған, һәр халыҡтың бөйөк ижад ҡомартҡылары булған героик эпостарҙы барлыҡҡа килтергән.

Тимәк, сәнғәт һәм әҙәбиәт борон-борондан кешенең айырылғыһыҙ рухи юлдашы булған. Мәмерйәләге яҫы таштарға төшөрөлгән ҡырағай ат һүрәте менән башҡорт халыҡ фантазияһында ошо «кәрпек үтә йылмайған уҫал үгеҙҙәй һөҙөлөп, ҡамыш үтә ҡараған» Шүлгән күлен ярып сыҡҡан «Аҡбуҙат» ошо хаҡта һөйләй түгелме?

«Алтын-көмөш эйәрле, болғар тартҡы, айыллы, туҡымдары ынйылы, тибенгеһе сәмсәле, болан тире таралғы, өҙәңгеһе көмөштән, эйәр ҡашы алтындан, семәрләнгән аҡыҡтан; йылан ҡамсы ҡашында, ҡанъяғала ҡуржыны, ҡырпыуҙары сәхтиән; күмелдерек түшендә, арт һанында ҡойошҡан, ебәк сылбыр нуҡталы, ҡуш ауыҙлыҡ йүгәнле, теҙгенен ҡашҡа шаҡарған; ҡырас яллы, төк сәсә, суртан һыртлы, тар бөйөр, ҡубаға һебә, ҡуян бот, текә тояҡ, ас яңаҡ, ҡамыш ҡолаҡ, киң танау, ҡарсыға түш, баҡыр күҙ, әтәс муйын, ҡуш урай, суңҡа эйәк, ҡымты ирен Аҡбуҙ толпар янында»... «кәңәш бирәп егеткә, тап әҙәмдәй һүҙ һөйләй»...

Бына ниндәй бит ул әүлиә «Аҡбуҙат»!..

Башҡорт халҡының донъя мәҙәниәте мираҫына инерҙәй эпик ҡомартҡылары булған «Урал батыр», халҡыбыҙҙың мәңгелек

иреккә ынтылған ҡанатлы күңелен символлаштырған ошо «Аҡбуҙат» һәм был иреккә барыу юлында башҡорт ырыуҙарын бер ҡорға тупланырға, халыҡ булып ойошорға саҡырған «Күҫәкбей» эпостары ла бына ошо ерҙә — Урал, Ағиҙел, Мәсемтау, Шүлгән күле, Атайсал, Ҡурыуҙы тауҙары, Бапсаҡ ҡәбере менән сорналып тыуған бит. Был хаҡта алда ентекләберәк һөйләрбеҙ әле.

Бындағы һәр тау, һәр ҡая, һәр уба легенда һөйләй, йыр йырлай, тарих эшкәртә. Телдән телгә, быуындан быуынға күсеп, һаҡланып килгән был риүәйәттәрҙә, әкиәт ҡатыш хикәйәттәрҙә ҡасандыр булып үткән конкрет тормош, ырыу-ара низағтар, барымталар, ҡарымталар, халыҡтың ҡағыҙға яҙылмаған ҡанлы-данлы тарихы төҫмөрләнә.

Бөрйән юлдары буйлап уҙғанда, һабантуйҙарында, мәжлестәрҙә, аҡһаҡалдар менән осрашҡанда, йыр-моң тыңлағанда, был хаҡта онотма. Бөтәһен дә маңлай күҙең менән генә күрмәй, күңел күҙең менән күр...

Әйҙә, хәҙер тиҙерәк Бөрйәнгә осайыҡ!

2. Юҡ, был — айыу төйәге түгел!

— Ҡайҙа юл тоттоғоҙ? — тине аэропортта бер танышыбыҙ.

— Бөрйәнгә...

— Ай-һай-й, — тип, маңлайын йыйырып, елкәһен тырнаны ул. — Иҫән-һау ҡайта алырһығыҙмы икән?..

Беҙгә уйынлы-ысынлы был һүҙҙәрҙе ишетеү ғәжәп түгел ине. Сөнки күп йылдарҙан бирле инде Бөрйән хаҡында бер талай кешеләрҙә бигүк ыңғай булмаған бер ҡараш йәшәп килә. Өлкә гәзиттәрендә ай һайын айыуҙар хаҡында хәбәр ебәреп тороусыларҙың тырышлығы арҡаһындалырмы, Бөрйән хаҡында ҡайһы берәүҙәрҙең мейеһенә «Бөрйән ул — айыу төйәге» тигән төшөнсә ныҡ ҡына оялап алған да, өңөнән сыға алмаған ҡарт айыу һымаҡ, үлемен көтөп, һаман ята бирә.

Бәғзе берәүҙәрҙең, «Бөрйән» тигән һүҙҙе ишетеү менән, сәстәре үрә тора. Юғары уҡыу йорттарын тамамлаусы ҡайһы бер йәш егеткә, йәш ҡыҙға Бөрйәнгә эшкә китеү тәҡдим ителһә, ҡара ҡайғыға һабышыу хәлдәре лә һирәк түгел. Бындайҙар күберәген әле ул ерҙе барып-күреп белмәгән кешеләр араһынан икәне мәғлүм. Күрәһең, улар Бөрйәнгә эшкә барыуҙы ҡараңғы

бер тәрән соҡорға барып олағыу тип күҙ алдына килтерәләр. Әйтерһең, унда әле булһа бөгөнгө тормош яҡтылығы барып етмәгән, ә кешеләре ярым-ҡырағай хәлдә йәшәйҙәр. Имештер, унда көпә-көндөҙ урам араһында айыуҙар йөрөй!..

Беҙ яманаты сыҡҡан был айыуҙы, Бөрйәнгә барғанса уҡ «үлтереп» ҡайтырға булдыҡ. Башҡаса йөрөмәһен был «айыу» башты ҡатырып!..

Аэропортта осраған танышыбыҙға беҙ шулай тинек. Күрше ауылға атҡа ултырып барғандай, Бөрйәнгә, самолетҡа ултырып осоу ғына ла был «айыу»ҙың арып-алйып бөткәнлеген әйтмәйме һуң?.. Бөрйән халҡының теләген белдереп, КПСС район комитетының беҙҙе әҙәбиәт аҙналығына саҡырыуы, әҙәбиәт һәм сәнғәтте халыҡҡа яҡынайтыу, халыҡтың эстетик зауығын күтәреү өсөн яңы юлдар эҙләүе үҙе үк бер ҙә был «айыу» файҙаһына түгел буғай. Башҡортостан Яҙыусылар союзы һәм аҙналыҡҡа барыусы яҙыусылар — беҙ ҙә был саҡырыуҙы бик хуп күреп ҡаршы алдыҡ.

Юлыбыҙ баштан уҡ уң булырға оҡшап тора. Юлыбыҙға тулы күнәк тотҡан зат осраманы осрауын, әммә тәүге танышыбыҙҙан тыш, күңеле әҙәбиәткә, сәнғәткә ҡарата оло хөрмәт менән тулы, күҙҙәренән йылы нур бөркөлөп торған икенсе бер юлдаш дуҫыбыҙға тап булдыҡ. Ул — аэропорт начальнигының урынбаҫары Мостафин ине.

Икенсе көн инде, күкте болоттар ҡаплап алып, йәшнәп-күкрәп ямғыр яуғанлыҡтан, беҙҙең оса алмай йөрөгәнде күреп, көн саҡ ҡына асылыу менән, ул самолетты үҙе алып барырға булды.

... Һәм бына беҙ күктә, бигерәк тә — шундай әҙәбиәт һөйөүсе летчик дуҫыбыҙ булыу өсөн — күңелебеҙ күктә. Юлдағы был бәләкәй генә бер деталь беҙҙең әҙәбиәтебеҙ юлындағы ҙур бер нәмә хаҡында һөйләй ине.

Юҡһа бынан бер нисә йылдар элек кенә башҡорт әҙәбиәте хаҡында һүҙ сыҡҡанда, һеҙҙең уҡырлыҡ нәмәгеҙ бар инде, тигәндәй, теге ҡарт айыу ише ыңғырашып, «Урал батыр» кеүек философик эпостарҙан, бынан мең йыл элек ғәрәп тарихсыһы ибн-Фаҙлан ишетеп иҫе киткән «Сыңрау торна» йырынан башлап, Салауат Юлаев шиғырҙарына тиклем тыңлап туйғыһыҙ ғәжәп бай йөкмәткеле ярты меңдән ашыу йырҙарыбыҙҙы эсенә алған рухи хазинабыҙҙы һәм Салауаттан һуң Шәйехзада Бабич менән Мәжит Ғафуриға тиклем булған әҙәби ҡомартҡыларыбыҙҙы юҡҡа һанағаң һәм совет осоронда күкрәп сәскә атып,

инде хәҙер бөтә союз аренаһына сығып, донъяның байтаҡ телдәренә тәржемә ителгән әҙәбиәтебеҙгә ҡул һелтәп ҡараған әҙәмдәрҙе лә осратырға була ине... Хәҙер бындай хәлдәр артта, аҫта ҡалды.

Ә беҙҙең көмөш ҡошобоҙ, ҡара болоттарҙы йырып, өҫкәрәк, ҡояшҡа яҡыныраҡ күтәрелеп, ғорур оса. Ә аҫта — һутлы тупраҡлы, яңы мул емеш бирергә әҙерләнеп, дәррәү сәскә атҡан, уңған әсәбеҙ ҡунаҡ көткәндәгеләй йыйыштырып ҡуйған йәм-йәшел һәм мәңге йәшәр еребеҙ ята. Бынау ҡара болоттар асыла төшкәндә, ниндәй киңлек, иркенлек йәйрәп ята! Бабич әйтмешләй, Хоҙай үҙе көнләшерлек, бындай ерең барҙа нисек йәшәйһең килмәҫ тә, нисек ижад итәһең, йырлайһың килмәҫ!.. Аҫта — халҡыбыҙ аҡылы һымаҡ уйсан Урал тауҙары һәм уларға уралып-уралып аҡҡан шул уҡ халҡыбыҙ күңелендәй ап-аҡ алғыр Ағиҙел!.. Бейектән Ағиҙелдең тауҙар араһында бормаланып ятҡан бөгәлдәре ниндәйҙер әкиәт батырының дөлдөл толпарынан төшөп ҡалған көмөш дағалары һымаҡ ялтырап ята. Туҡта, был Урал батырҙың, Шүлгән күлен ярып, ер аҫты һарайҙарынан өҫтөнә икһеҙ-сикһеҙ байлыҡ, мал эйәртеп сыҡҡан мал тарпаны, мал ҡото булған, ил хыялын ҡанат иңдәренә һалған Аҡбуҙат дағалары түгелме һуң?

Даға тапһаҡ, бәхеткә юрайбыҙ. Күккә меңһәк тә, юғалтмайыҡ ул дағаларҙы, еребеҙҙә мәңге ятһын ул дағалар, мәңге аҡһын алғыр Ағиҙел!..

Бейеккә күтәрелгән һайын, күңелгә шундай ер образдары килә. Тимәк, Бөрйәнгә беҙ йыр-шиғырҙы үҙебеҙ генә илтмәй, унан да байтаҡ йыр-моң һеңдереп, әҙәби дағалар, ижад бәхете табып ҡайтырбыҙ!..

Бына, ҡайһы беребеҙ самолетта уҡ блокнотына ниҙер тимгетә лә башланы.

... Аҡбуҙатыбыҙ беҙҙе бейек тау өҫтөндәге аэродромға илтеп төшөрҙө. Иҫерткес хуш еҫе мейеләрҙе үтеп ингәндәй, ҡайҙа ҡарама — күҙҙең яуын алып торған сәскәләр, сәскәләр... Өҫтә — зәңгәр күк, ерҙә — зәңгәр күк кеүек асыҡ йөҙлө район етәкселәре, тирә-яҡта — урманлы тауҙар, беҙ үтәсәк бормалы-бормалы Бөрйән юлдары...

Машиналарға ултырышып, ялан юлдары буйлап киләбеҙ, һөйләшәбеҙ, көләбеҙ. Әйтерһең, һәр беребеҙ үҙебеҙҙең тыуып үҫкән ерҙәребеҙгә ҡайтып киләбеҙ. Тирә-яҡта ап-аҡ булып еләк сәскә атҡан. Баш ҡоҫҡан алһыу арыш тулҡынына ятып, июнь

еле иркәләнә яландарҙа, ә зәңгәр күк йөҙөнән ҡояш нурҙары менән бергә һабантурғайҙарының көмөш моңо түгелә. Аҡбуҙат шөңгөрҙәре сыңғырлай, ахырыһы...

Шофер саф башҡортса, хатта Бөрйән һөйләше менән көйләберәк һөйләшкән урыҫ егете Николай Быков булып сыҡты. Газигын елдереп килтерҙе килтерҙе лә, ҡапыл ғына тәрән упҡын ситендә туҡтатты. Аҫта, бик аҫта ятҡан Аҡиҙелде, уның буйында йәйрәп ятҡан оло ауылды күреп, йөрәк жыу итеп китте. Ҡапланып барып төшһәң, китәһең инде!.. Был әлеге аэродром урынлашҡан тауҙың иң бейек түбәһе — зыңҡыйы икән. Николайҙың баш әйләнгес бейеклектән үҙ ауылын күрһәтеп, ҡунаҡтар алдында әҙерәк маһайып, ғорурланып алғыһы килгәндер, күрәһең. Маһайырлыҡ та шул — Аҡиҙел аръяғында, ана, ниндәй мөһабәт ҡаялар баҫып тора. Район үҙәге — Иҫке Собханғол ауылы — шул ҡаяларҙы ҡаймалап ятҡан көмөш ҡәмәр билбау кеүек Аҡиҙелгә нағышланған төҫлө. Уға Аҡиҙел ҡәбәһе ялғанып китә. Икеһен бергә ҡушҡанда, уның ауыл тип ауыҙ асыуҙан хәтере ҡалыр һымаҡ. Ҙурлығы, төҙөклөгө менән ул ыҡсым ғына бер матур ҡаланы хәтерләтә.

Йөрәктәрҙе ус төбөндә тотоп ҡына, хәтәр текә тау юлынан шунда төшәбеҙ. Тауҙың биленә еткәс, Николай машинаһын алдағы газикка төкөтә яҙып туҡтатты ла, тәҙрәнән башын сығарып, саф Бөрйәнсә:

— Ништәп туҡраныҡ?! — тип һуҡранып алды.

— Юлға айыу сыҡҡанмы әллә? — тип шаяртты беребеҙ.

— Айыу! Уны табыр өсөн эҙҙәргә кәрәк әле. Һәр эҙҙәгән кешегә лә бик осрап бармай, — тине Николай.

Бына һиңә «айыу төйәге»! Юҡ, был «айыу төйәге» түгел бер ҙә. Мәҙәниәт, төҙөклөк йәһәтенән бик күп район үҙәктәренә Бөрйәнгә тиңләшәһе бар әле.

Хас ҡалалағыса. Ҡаласа биҙәлгән. Урамдары ла ҡалалағыса гөж килеп ята. Ҡалалағыса моданың өр-яңы һүҙе менән ҡупшы кейенешеп йөрөйҙәр. Ҡап урталағы мәҙәниәт һарайында беҙ әле Өфөлә бер нисә көн элек кенә күреп киткән өр-яңы фильм бара. Бынан өс көн элек кенә филармония бригадаһы ла булып киткән икән. Әле яҙыусылар менән осрашыуҙы белдергән ҡупшы афиша эленеп тора. Ә иртәгә — медицина хеҙмәткәрҙәренең юбилей байрамы.

Ҡала ҡыҙҙары көнләшерлек сибәр ҡыҙҙар ҡосаҡ-ҡосаҡ сәскә күтәреп, Аҡиҙел буйынан ҡайтып килә. Мәктәптә синыф тамам-

лаусыларҙың хушлашыу кисәһе була икән. Ә унынсылар бик етди ҡиәфәттә йөрөп яталар. Уларҙың әле тарихтан «ҡотолаһылары бар...»

Бына өлкән генә йәштәге өс апай район китапханаһынан сығып килә. Ниндәй китаптар уҡыйҙар икән, тип ҡыҙыҡһындыҡ, ҡулдарында — Шекспир, Шолохов, Маяковский, М. Кәрим томдары.

Ә был мәлдә райком бюроһында ауылдарҙы тағы ла төҙөкләндереү, мәҙәниәт усаҡтарын арттырыу юлдарын эҙләйҙәр.

Бөрйән юлдарынан алғараҡ китеп әйтергә кәрәк: беҙ булған Байназар, Нәби, Фәҙелгәрәй, Кейекбай һәм юл буйында үтеп киткән башҡа ауылдар үҙҙәренең төҙөклөктәре менән, ә кешеләре шаҡтай юғары аңлы мәҙәниәт эйәләре булып күҙгә ташланды.

Беҙ иң тәүҙә китап магазинына индек. Культмағтың оло яртыһында — бик матур һәм иркен итеп йыһазландырылған китап һатыу бүлеге. Яңы ғына сыҡҡан китаптар ҙа килеп еткән унда. Иҫкеләре бар, әлбиттә. Хәйер, был хаҡта алда айырым һүҙ булыр әле.

Башта китап уҡыусылар менән осрашайыҡ. Ә хәҙергә ял итеп алайыҡ, булмаһа.

Беҙҙе, ҡунаҡ йортонда ремонт булыу сәбәпле, интернатҡа урынлаштырҙылар. Шул уҡ ятаҡтың икенсе башында унынсылар һуңғы экзаменға әҙерләнә. Барыбыҙҙың да баштан үткән борсоулы, болоҡһоу ваҡыттың бик тығыҙ мәле.

Ә шулай ҙа ҡыҙҙар беҙ ҡайтыуға йыуынырға һыу, бүлмәләргә сәскәләр килтереп ҡуйырға ла өлгөргәндәр.

Күңелгә шундай яҡын ябай ялан сәскәләре!.. Баҡсаларҙа наҙлап, һыу һибеп үҫтергән ҡупшы ҡала сәскәләре һымаҡ, күҙгә кереп бармаһалар ҙа, уларҙы йүгерә-йүгерә йыйған ауыл ҡыҙҙары һымаҡ, был сәскәләр ниндәйҙер бер оялсан, тыйнаҡ һәм әҙәпле матурлыҡ менән арбай һине, ә үҙҙәренең иҫерткес хуш еҫе менән ғүмергә онотолмаҫ яҡты, йылы тойғолар уята. Сәскәләр шиңер, ләкин беҙҙе оҙатып ҡалғандағы кеүек һағыш сәскәләре лә, әле ҡаршы алған ҡыуаныс сәскәләре лә күңелдә шиңмәй ҡалыр. Сөнки был ялан, урман, тау сәскәләре инде йырға әйләнде.

Кешегә сәскә бүләк итеү — ниндәй яҡшы! Рәхмәт һеҙгә, Бөрйән ҡыҙҙары!

Әлс беҙ һеҙҙең менән күңелле һабантуйҙарында, хушлашыу кисәһенән һуң ҡыҙҙар тауында, төнгө усаҡ яҡтыһында, ә һу-

ңынан юғары уҡыу йорттарында, яҙыласаҡ китаптарҙа осрашасаҡбыҙ.

Иртәгә беҙҙе тағы юлдар көтә...

3. Бабсаҡ менән Күҫәк

Әкиәттәрҙәге юл сатлығы! Әкиәт батырҙары, ярып сыҡҡыһыҙ шырлыҡтарҙы йырып, көҙгөләй күл-һыуҙарҙы кисеп, бейек-бейек тауҙарҙы артылып, дөм-ҡараңғы тараҡ-урмандарҙы үтеп, серле йомғаҡ артынан өс көн, өс төн бара торғас, ошо юл сатлығына барып сыҡҡандар. Сыҡҡандар ҙа яңғыҙ ҡәбер ташы һымаҡ суҡайып торған, серле яҙыу яҙылған бер таш алдында, уйға ҡалып, туҡтап ҡалғандар. Ары китһәң — арыһың, уңға китһәң — уңыһың, һулға китһәң — һулыһың, имеш...

Ә батырҙар, нигә генә юлығыр булһалар ҙа, ауырыраҡ, хәтәрерәк юлды һайлар булғандар. Сөнки улар әллә нисә башлы аждаһалар, дейеү пәрейҙәре йәки һаҡалы мең ҡарыш, үҙе бер ҡарыш ер аҫты залимдары, йәки Шүлгән ише һыу аҫты батшалары урлап, йәшереп ятҡан халыҡ бәхетен — Йәншишмәләрҙе, Аҡбуҙаттарҙы даулап һуғышҡандар. Ә яҡтылыҡҡа, азатлыҡҡа, бәхеткә барыу юлы әкиәттәрҙә лә, тормошта ла бик ҡыйын һәм ураy-ураy булған.

Бөрйәндең ураy-ураy юлдары буйлап, Шүлгәнташ мәмерйәһенә китеп барышлай, беҙ тап бына ошондай әкиәти бер юл сатлығына килеп юлыҡтыҡ.

... Николай дуҫыбыҙ, машинаһын ҡыҙыра төшөп, беҙҙән алда елдереп китеп, бер батҡылға барып төкәлгән алдағы газикты ҡыуып етте лә, саф бөрйәнсә башҡортсалап:

— Нишләп һин, Рауил, туҡрамайһың? Шыйҙатып үтәһең дә китәһең, әй. Мында бит Бабсаҡ ҡәбере!.. Мынау үҙәктә генә. Яҙыусыларға шуны ла күрһәтмәгәс, килешәме инде? Бер ҙә ошондай исторический урындарға вниманье обращать итмәйһең, — тип, иптәшен ҡыҙҙырып та алды.

Беҙ бик теләп юлды һулға ҡайырҙыҡ. Ярты саҡрымдай ҙа барманыҡ, күҙ алдыбыҙҙа таллы-ҡыуаҡлы һаҙмат ҡына үҙәктә түбәтәйгә оҡшаш ҙур бер уба ҡалҡты. Убаның типһенендә генә, аумаҫ борон ҡайнар ҡояш нурын нығыраҡ һеңдереп ҡалайым тигәндәй, йәшел сасаҡтарын ергә тейҙерә яҙып, үтә ҡартайған бер тәлгәш ҡайын ойоп ултыра. Олоно, туң ергә ҡырпаҡ ҡар яуған һымаҡ, суғырмаҡланып, бешегеп, ташҡа әйләнеп бөткән

был уба һаҡсыһы беҙгә мең йәшәр бер әкиәтсе булып күренде. Ялтырап торған ҡарағуҫҡыл япраҡтары үҙәк еләҫенә ҡыштырлашып ҡуйғанда, ул сәсмәүҙәрендәге талир тәңкәләрен сылтыратып, серем иткән еренән һиҫкәнеп киткәндәй булды. Әйтерһең, «Әкиәт әбей» үҙе уянды...

— Бабсаҡ ҡәбере бына ошо була инде, — тине Николай, убаға үҙе башлап менеп. — Ҡарағыҙ бына, тупрағы ҡып-ҡыҙыл, археологтар Бабсаҡтың һөлдәһен ҡаҙып алғайны. Ә тирә-яғында ана ниндәй ҡап-ҡара тупраҡ. Ҡыҙыл тупраҡты ҡыпсаҡтар үҙ ерҙәренән ташып өйгән... Хәтәр бит — быны өйөргә хәҙер күпме самосвал кәрәк булыр ине!..

Ул үҙе ишеткән-белгән тиклем беҙҙең күбебеҙгә күптән таныш легенданан өҙөк-йолоҡ мәғлүмәттәр килтерҙе. Ә уба һаҡсыһы — тәлгәш ҡайын уны беҙгә түкмәй-сәсмәй тулыһынса һөйләгәндәй ине.

Беҙ, бөгөнгөнән бөтөнләй үткәндәргә китеп, боронғо хикәйәт донъяһына сумдыҡ.

... Имеш, бынан бик күп заман элек хәҙерге Мәсемтау тирәһендә Мәсем хан йәшәгән, бик күп ерҙәрҙе биләп, бөтә ырыуҙарҙы үҙ ҡулында тотҡан.

Мәсем хандың ҡырҡ улы менән һылыу бер ҡыҙы була.

Көндәрҙән бер көндө хандың ҡырҡ улы, ҡырҡ дөйәгә атланып, юлға сыҡҡан икән. Юлда уларға бер уҫал януар тап булып, ҡырҡ дөйәһе менән, хандың утыҙ биш улын ҡырып ташлай. Тик биш кенә егет был бәләнән ҡасып ҡотола алған. Былар аталарына хәбәр ебәрһә, хан быға аптырап ҡалған. Ат еткән ергә ат саптырып, хат еткән ергә хат ебәреп, бөтә ырыуға ла тарата. Быны ишетеп, батырҙар һөйәк һаплы һөңгөләрен, алмас ҡылыстарын, суҡмар-киҫтәндәрен алып, аттарына менәләр. Бөрйәндең ырыу башлығы Ҡарағоломбәт тә ике йөҙ илле батыры менән килгән. Тик иң алыҫ Ҡыпсаҡ ырыуының башлығы Бабсаҡ бей генә килеп етмәй. Уның яңыраҡ ҡына йәрәшкән Йәмилә исемле йәш кәләше, иренең юлға сығырын белеп, ебәрмәҫкә ялына башлай.

Йәмилә бик һылыу була. Бабсаҡ уны ҡырғыҙ яғынан алып ҡайтҡан икән. Кәләше бик инәлеп, күҙ йәше менән ялбара башлағас, Бабсаҡ уны янына ултырып өгөтләй башлай.

— Ҡайғырма, Йәмиләм, мин иҫән-һау әйләнеп ҡайтырмын,— ти. Йәмилә, ниҙер һиҙенеп, болоҡһой. Быны күргән Бабсаҡ:

— Өҙгөләнмә, илама, Йәмиләм, мин һине бер ваҡытта ла яңғыҙ ҡалдырмам. Әгәр мин ҡайталмаһам, һин бит яңғыҙ түгел, ҡарағыҙ, ҡарағыҙ, ҡарағыҙ

гел, тиҙҙән һин ир бала табырһың, ул һиңә ярҙамсың булыр,— ти ҙә, хушлашып, Мәсем ханға ҡарай юл тота.

Мәсем ханға етмәҫ элек өс көн алда Бабсаҡ менгән ат тояҡтарының тауышы ишетелә. Бөтәһе лә, уны көтөп, ҡаршы сыға. Атаһының тыйыуына ҡарамай, хан ҡыҙы ла юлға сығып тора.

Батырҙар бөтәһе лә йыйылып бөткәс, хан уларға ҡот осҡос януарҙың ҡырҡ дөйәле каруанды ҡырып, улдарын үлтереүен әйтеп, ошо януарҙы тотоп үлтерергә әмер бирә, януарҙы үлтергән кешегә ярты байлығы менән ҡыҙын бирергә вәғәҙә итә.

Батырҙар юлға сыға.

Бабсаҡ бер үҙе көйө, әллә күпме ер-һыу үтеп йөрөй торғас, бик бейек бер тауға килеп сыға. Уҡ-һаҙаҡтарын һалып, бер аҙ тын ала ла, тауҙың нәк зыңҡына менеп, тирә-яҡҡа күҙ йөртөп сыға. Ҙур яландың ҡап уртаһында күбә дәүмәлендәй бер нәмәнең ятҡанын күреп ҡала. Эҙләй торған януарҙың шул икәнен белгәс, аяҡ аҫтында ятҡан баш ҙур ташты алып, уятырға итеп, йоҡлап ятҡан януарға ырғыта. Таш, януар алдына барып төшөп, тау аҡтарып инеп китә. Януар, һиҫкәнеп, башын ҡалҡыта ла тора башлай. Шуны ғына көткән Бабсаҡ, уғын тоҫкап, керешен тартып ебәрә: уҡ януарҙың түшенә барып ҡаҙала. Януар ҡотороноп ерҙе тырнай, үҙәккә үткес итеп үкерә башлай. Тауышына тауҙар һелкенеп, урмандар шаулап ҡуя. Аҙаҡ хәлдән тайып йығыла.

Бабсаҡ тауҙан төшөп, януарҙың уң ҡолағын ҡырҡып ала— ҡолаҡ ҡанай. Уғын һурып алып, уртаға яра ла, яртыһын януарҙың ҡорһағына тығып ҡуя, яртыһын үҙе менән алып ҡайтып китә.

Кис булғас, януар янына Ҡарағоломбәт килеп сыға. Уҡ менән атһа, януар ҡыймылдамай ҙа икән. Яҡын килеп, һул ҡолаҡты ҡырҡып ала ла ҡайтып китә был. Тик ҡолаҡ ҡанамай. Ханға ҡайтып ҡолаҡты күрһәтә, үҙем үлтерҙем, ти. Хан батырҙы бик ныҡ ҡунаҡ итә, ҡыҙын бирәп, туй ҙа үткәрмәк була.

Туй ҡыҙған мәлдә Бабсаҡ хан эргәһенә бара ла:

— Туйҙы яңылыш үткәрәһең, ханым, януарҙы Ҡарағоломбәт үлтермәне, мин үлтерҙем, — тип, ҡырҡып алған ҡолаҡ менән ярыҡ уғын күрһәтә. — Бына уң ҡолағы, ҡырҡып алғанда йәне лә сығып етмәгәйне, ҡаны аҡты. Ә бына был уҡтың яртыһын эсенә тығып киттем, — ти.

Мәсем хан аптырап ҡала. Дөрөҫлөктө белергә тип, кешеләр ебәртә. Улары Бабсаҡтың әйткәнен раҫ тип ҡайталар, уҡты

ханға ҡоршап күрһәтәләр. Хан туйҙы хәҙер Бабсаҡҡа үткәреүҙе әйткәс, Ҡараҡоломбәт ғәрлегенән ташлап сығып китә. Кемдер шул саҡ, өйгә инеп, һамаҡлап ебәрә:

Бабсаҡ батыр аң торһон —
Ҡарағоломбәт күҙ һала,
Асыуынан, ғәрлегенән
Йөрәгендә ут яна.

Бабсаҡ аптырап ҡалмай, быға һамаҡлап яуап бирә:

Дошманымдан еңелгән —
Мин булмайым,
Унан ҡурҡып, муйынымды
Мин бормайым, — ти.

Быны ишеткән Ҡарағоломбәт ҡара янып килеп инә лә Бабсаҡты уғы менән ата.

— Ирлегең юҡ, ҡурҡаҡ йән, — тип көлә лә йығыла Бабсаҡ.

Ҡарағоломбәт ике йөҙ илле батыры менән ҡыпсаҡтарға яу сабырға әҙерләнә.

Бабсаҡ бейҙең кәүҙәһен үҙ кешеләре Ҡыпсаҡҡа алып ҡайтып күмергә итһәләр, Ҡарағоломбәт ҡаршы төшә. Үлгән ерендә күмергә ер ҙә бирҙертмәй.

Ҡыпсаҡ халҡы үҙ батырын ҡош-ҡортҡа ташларға ирек ҡуймай, Ҡыпсаҡҡа ҡайтып, үҙ ерҙәренән мәркеләр менән ер ташып, Бабсаҡты ҡәҙерләп күмәләр. Ҡәбер өҫтөндә ҙур тау үҫеп сыға. Ҡарағоломбәт, быға асыу итеп, Ҡыпсаҡ ырыуын ҡырып бөтөрөргә була, бөтә ғәскәре менән Ҡыпсаҡ еренә саба. Бабсаҡтың нәҫел-ырыуын ҡоротам тип, Йәмиләне лә үлтерергә килә. Йәмилә был саҡ өйҙә ултыра икән.

Ҡарағоломбәт Йәмиләнең һылыулығына таң ҡалып, ҡул һалырға баҙнат итмәй, үҙенә бисәлеккә алмаҡсы була.

Бөтә Ҡыпсаҡ ырыуын буйһондороп, Ҡарағоломбәт Йәмилә менән донъя көтә башлай. Үҙе күп ваҡытын һунарҙа үткәрә. Йәмилә яңғыҙы биктә ултыра. Ире Бабсаҡты уйлап, көн-төн ҡайғырып, һарыға һабышып бөтә, бер көнө лә илауһыҙ, күҙ йәшһеҙ үтмәй. Ҡарағоломбәттән ытырғанып, уны ек күрә.

Шулай, көндәрҙән бер көндө, киске эңер төшөп, күҙ бәйләнгәс, Ҡарағоломбәт, Йәмиләне аулаҡҡа алып, ҡыл арҡан менән

ҡорһағынан быуа башлай. «Бабсаҡ бейҙән бала ҡалғандыр», тип уйлай. Йәмилә, башҡаса түҙер әмәле ҡалмағас, ни булһа ла булыр, тип былай ти:

— Һин мине ыҙалатма юҡҡа, миндә Бабсаҡ ҡаны юҡ. Ышанмаһаң, бәхәс итәм: әгәр анау тана быуаҙ булһа — минең балам булыр, тыу булһа — бер нәмәм дә булмаҫ — тип, хәлдән тайып йығыла. Ҡарағоломбәт шунда уҡ ҡара тананы һуйырға ҡуша — ҡара тана тыу булып сыға. Ҡарағоломбәт Йәмиләнең һүҙҙәренә ышанырға була.

Шулай көндәр, айҙар үтә. Йәмилә уны: «Һинән ауырлымын», — тип ышандыра.

Тиҙҙән ир бала тыуа. Бала тыуғандан уҡ бик теремек, йор була. Ун көн тигәндә, Ҡарағоломбәт һунарҙан ҡайтып инә лә ир бала булыуға бик ҡыуана. Күрәйем тип бишек яныһа килһә, ни күҙе менән күрһен, ун көнлөк сабый Ҡарағоломбәттең кәзә һаҡалына йәбешеп, һелкетә тартып ала. Баланың бармаҡтарында эйәк ите менән аҡтарып алған һаҡал йолҡондоһо тороп ҡала.

Йәмилә, батыр иренең төҫө итеп, улына Күҫәкбей тип исем ҡуштыра. Күҫәкбей ай үҫәһен көн үҫеп, бер йәшенә еткәс, ун йәшлек малайҙар менән ҡатышып уйнай башлай. Үҙе ат башынан төшмәй, сапҡанда аттаң ҡолауҙы ла белмәй. Буйһынға ла ун йәшлектәй мыҡты, баҙыҡ, сос була. Малайҙарҙың ул йә аяғын һындырып, йә ҡулын ҡаймыҡтырып, йә башын тишеп ҡайтара. Барыһы ла аптырашта ҡала.

Көндәрҙең береһендә шулай, уйнап йөрөгәндә, бер ҡартайып бөткән сал сәсле әбей Күҫәкбейҙе саҡырып ала ла:

— Һин, улым, бик көслө булһаң, былай бала-саға имгәтеп йөрөгәнсе, атайыңдың ҡонон алыр инең. Ҡарағоломбәттән халыҡтың ҡанлы күҙ йәшен түктермәҫ инең — тип, сәстәренән һыйпап, яурынынан тапап һөйә.

— Минең атайым бит, нишләп уның ҡонон алайым? — тигән икән Күҫәкбей, әбей шунда уға:

— Юҡ, балаҡайым, һинең үҙ атайың бындай яуыз түгел ине, ил батыры ине ул. Ҡарағоломбәт башына етте уның, нахаҡтан ҡанын ҡойҙо. Үҙ атайың Ҡарағоломбәт түгел шул, балаҡайым, — тигән дә илап ебәргән, бөтә хәлде баштан-аяҡ һөйләп биргән, әсәһенән һорашырға ҡушҡан, ти.

— Әгәр әсәйең әйтмәһә, ҡурмас ҡыҙҙырт та, эҫе ҡурмасты усына ҡыҫып һора, ул һиңә дөрөҫөн әйтмәй булмаҫ — тигән, ти, әбей.

Күҫәкбей йүгереп ҡайта ла әсәһенән:

— Әсәй, әйт әле ысынын ғына — ҡайҙа минең атайым? — тип һораған икән, әсәһе ауыр көрһөнөп ҡуйған да:

— Ана бит атайың, тағы һиңә ниндәй атай кәрәк? — тигән.

Күпме генә инәлеп һораһа ла, Йәмилә улына бер ни ҙә әйтмәйенсә, бер үк һүҙен тылҡыған. Кис булғас, Күҫәкбей әсәһенең муйынына һарылып, иркәләнә лә:

— Әсәй, минең бик ҡурмас ашағым килде, ҡурмас ҡыҙҙырып бирсе, — тигән, ти.

Әсәһе улының һүҙен йыҡмай, сүлмәк табала ҡурмас ҡыҙҙыра һалған... Күҫәкбей, ҡурмастың һыуынғанын да көтмәйенсә:

— Әсәй, тиҙерәк алып бир ҡурмасты! — тип мыжыған була. Әсәһе ҡалаҡ менән ҡурмас һоҫоп бирһә, Күҫәкбей кире этәрә, туҫтаҡҡа һалып бирһә — алмай, үпкәләй башлай.

— Һин бит услап ҡына алып бирә торғайның! — ти, Йәмилә, уттай ҡурмасты усына алып, улына һоноуы була, Күҫәкбей әсәһенең усын йомдороп ала ла:

— Әсәй, әйт, минең үҙ атайым ҡайҙа? — тип ныҡыша. Әсәһе усының янып барыуына сыҙамай, дөрөҫтө әйтергә була.

Ошо көндән башлап, Күҫәкбей Ҡарағоломбәтте ҡан дошманы күрә башлай, атаһының ҡонон алырға йыйына. Бер нисә йыл үткәс, ҡунаҡҡа киткән еренән ғәйеп була ла ҡайтмай. Ун йәшенә еткәс, үҙенә иш булырҙай батырҙар һайлап, Ҡыпсаҡ ерен Ҡарағоломбәттән ҡотҡарырға йыйына. Был ваҡыт эсендә ул ир-егет булып етә, шулай ҙа әсәһен бик һағына, уны бик күргеһе килә. Иҫке-моҫко кейенеп ала ла бер көн әсәһенә килеп инә. Йәмилә инде ҡайғынан ҡартайып, һағыштан һарғайып, ҡаңғырып ултырған була. Күҫәкбей килеп инә лә әсәһенән хәйер һорай. Әсәһе ойотҡан ҡойоп бирә.

Күҫәкбей ҡаты ойотҡанды өскә киҫеп бүлә лә, ике өлөшөн ашап, бер өлөшөн ҡалдырып сығып китә. Йәмилә хәйерсе булып килгән улын танымай ҙа. Ҡарағоломбәт ҡайтҡас, бөтәһен дә һөйләп бирә. Ҡарағоломбәт туҫтаҡтағы аҡты күреп, шомлана башлай. «Был ойотҡан менән булған хәл яҡшыға түгел», — тип юрай.

Күҫәкбей, йөҙ илле батырҙан торған нөгәр-ғәскәр туплап, Ҡарағоломбәткә ҡаршы яу менән килә. «Ҡарағоломбәт нәҫеленән бер генә йәнде лә ҡалдырмай, ҡырып бөтөрәм», ти Күҫәкбей. Ахыр сиктә Ҡарағоломбәт яуҙы ҡайтара алмай, ҡасып

ҡотола. Күҫәкбей уның затынан булған бөтәһен дә ҡырып бөтөрөп, Ҡарағоломбәт йәйләүенә килә, дошманын эҙләп табырға, тере килеш тотоп килтерергә ҡуша.

Ауылдан алыҫ түгел бер ырҙында ун өс йәшлек бер ҡыҙ бала тап була быларға. Күҫәкбейҙән ҡурҡып, ул:

— Батыр, үлтермә мине, зинһар. Мин уның көтөүен генә көтәм, — ти.

— Минең Ҡарағоломбәт нәҫеленән бер генә йәнде лә ҡалдырмай, ҡырып бөтөрәм тигән һүҙем бар. Ярай, мин һиндәй етемеҫергә теймәйем. Тик һин миңә Ҡарағоломбәттең ҡайҙа ҡасҡанын әйтмәҫһеңме? — ти Күҫәкбей.

— Әйтәм, — тигән, ти, ҡыҙ, кинәнеп. — Ул, ана, анау ырҙын аҫтында боҫоп ята.

Күҫәкбей, ырҙынға барып:

— Ҡарағоломбәт, сыҡ! Хәҙер ырҙының-ниең менән үртәйем үҙеңде! — тип ҡысҡырған икән, ҡурҡыуынан ҡобараһы осҡан Ҡарағоломбәт килеп сыҡҡан. Батыр уны шыр яланғас ҡалдырған да, танауын тишеп бау үткәргәс, әлеге ҡара һыйырға арты менән атландырып, Ҡыпсаҡ ырыуына ҡарай юл тотҡан. Уны Ҡыпсаҡ ауылдарында мәсхәрәләп йөрөтә. Бер йылға буйында ҡара һыйыр үлеп ҡала. Шунан бирле ҡыпсаҡтар был йылғаны «Ҡара һыйыр үлгән йылға» тип йөрөтөр булалар.

Ҡара һыйырҙан һуң Күҫәкбей Ҡарағоломбәтте, ҡыҙыл һыйырға атландырып, һарағыға килтерә. Йәйләүҙәге көллө кеше күрһен тип, Өмбәткә алып бара, Өмбәттән Ағиҙел аша Байназар ҡаршыһындағы бейек тауға мендереп, Ҡарағоломбәтте ҡоро ҡаҙанға ҡуя. Ҡурылғанда сыҡҡан тоҙлоғон бармағы менән ялап ҡарай ҙа: «Ҡон алынды!» — тип һөрәнләй, ти.

Ҡарағоломбәт ҡаҙанда ҡара янып, күмергә әйләнә. Шуға күрә был тауҙы хәҙер Ҡурыуҙы тауы тип йөрөтәләр. Ҡурыуҙы тауының башындағы имәнлек араһында һаман да әле Күҫәкбей ҡаҙан ултыртҡан таштар ята, имеш. Ә Ҡарағоломбәттең хурлыҡҡа сыҙай алмай, ҡара һыйыр арҡаһында ултырған еренән Күҫәкбейгә атай тип өндәшеп: «Мине былай ыҙалатҡансы, атай, сал шул урында!» — тип ҡысҡырған арҡаны хәҙер Атайсал яланы, тип атайҙар.

Күҫәкбей Ҡарағоломбәтте ҡыйратып бөттөм тигәндә, уның бер улы ҡасып барғанын күреп ҡалған, тик уныһын артынан ҡыуып тормаған. Ҡулын ғына һелтәп ҡуйған да: «Ярай инде, ҡалһын әйҙә бер йән!» — тигән, ти. Ана шул «бер йән» теге

көтөүсе ҡыҙ менән урманға китеп, уларҙан шул хәҙерге бөрйән ырыуы таралған, ти, имеш!..

Бөрйән ырыуының барлыҡҡа килеүен хикәйәт бына шулай аңлата.

Үҙе бер легенда булып ултырған ҡарт ҡайынға ҡарап, уның япраҡтары ҡыштырлап ҡуйыуынан да боронғо тарих шауын ишетеп, Бабсаҡ ҡәберенә өйөлгән уба өҫтөндә беҙ оҙаҡ ҡына баҫып торҙоҡ.

Эйе, бындағы һәр тау, һәр ҡая, һәр уба үҙе бер легенда һөйләй шул. Тик уларҙы тыңлай бел генә. Бөгөнгөнөң матурлығын тойор өсөн, боронғо сәсәндәрҙең был хикмәтле һүҙҙәрен онотмаҫҡа, йыйырға, уларға бәйле урындарҙы ла һаҡлай белергә кәрәк ине беҙгә.

Убанан төшөп, ҡарт ҡайын менән хушлаштыҡ та, юл сатлығынан Шүлгәнташ мәмерйәһенә ҡарай ыңғайланыҡ. Беҙҙең менән бергә хәҙер ошо хикәйәт тә бара ине...

Стюардесса

Ҡоштарҙа — ҡул, беҙҙә ҡанат
Ниңә булмаған икән?..

Кем генә һуң был йырҙы хәтерләмәй?

Зәңгәр күккә осоу теләгеҙ, ғөмүмән, осоу сәмен, осоу ҡомарын татымаған бер кем дә юҡтыр ул? Беҙҙең ҡайһыбыҙ ғына төштәрендә оса-оса үҫмәгән дә, кемебеҙ генә өндәрендә, ҡулдарын ҡош ҡанаттары һымаҡ йәйеп, арбаҙ, келәт йәки кәбән баштарынан осоп төшмәгән!..

Йөрәгең жыу итеп ҡалырҙай ниндәй татлы, рәхәт тойғо был... Бала саҡта гел генә йүгерәһең, тауҙан тауға һикереп, сикһеҙ зәңгәрлеккә осоп китәһең генә килеп торғанын һәр берегеҙ хәтерләйҙер. Берәүҙәрҙән был тойғо, бәлки, иртәрәк тә китәлер, ә ҡайһы берәүҙәрҙә ул ғүмер буйы һаҡлана.

Донъя зәңгәр, донъя шундай зәңгәр —
Ҡанатһыҙ ҙа осоп китерлек!
Был юлдарын тик бер үтер өсөн
Ғүмерҙәрең буйы көтөрлөк.

Был тойғо кешене шиғыр яҙырға, көйҙәр сығарырға, һүрәттәр яһарға мәжбүр итә. Мәҫәлән, мәшһүр композитор Скрябин үҙенең йүгереп барып күккә осоп китеренә ғүмер баҡый ышанған, тиҙәр. Шуға ла уның музыкаһы зәңгәр һауа, рәшә кеүек еңеллек һәм ҡанатлы хистәр менән тулы бит.

Ҡалай ғына булмаһын, кешелек донъяһы, үҙҙәренә ҡанат ҡуйып, Крит утрауынан Сицилияға осҡан аталы-уллы Дедал менән Икарҙан башлап, ерҙән күккә, сикһеҙ ғәләм киңлегенә, алыҫ йондоҙҙарға, икенсе планеталарға осоу хаҡында әллә күпме әкиәттәр, мифтар, йыр һәм легендалар ижад иткән... Батырҙы үҙ ҡанаттарында тыуған еренә алып ҡайтып еткергән сәмрә-ғоштар, ҡанатлы толпарҙар — Бораҡтар һәм Аҡбуҙаттар хаҡындағы ундай хикәйәттәр беҙҙә лә етерлек.

Йәмле Дим буйҙарындағы башҡорт ауылдарының береһендә (Әлшәй районының Ҡыпсаҡ ауылында) тыуып, ошо әкиәттәрҙе тыңлап, йәки «осоп барып күрер инем, йәнем күбәләк түгел», тип йырлап үҫкән Розаға ла ошо «осоу ене» ҡағылмай булмағандыр. Сөнки уға ун йәш тулғанда инде — 1957 йылдың 4 октябрь иртәһендә — беренсе Ер юлдашын ғәләм киңлегенә осорған совет ракетаһы, ҡаҙаҡ далаһынан айырылып китеп, бөтә донъяны таң ҡалдырҙы, һәм кешелектең ғәләмгә осоуҙар осоро башланды. Ә инде 1961 йылдың 12 апрелендә планетабыҙҙың беренсе космонавы Юрий Гагарин ғәләмгә осто. Унан — Титов, Николаев. Унан — беренсе ҡатын-ҡыҙ Валентина Терешкова... Унан — һауа пираттары менән алышҡан ябай бортпроводница Надежда Гурченконың батырлығы...

Был хәлдән һуң «Стюардесса» тигән һүҙ ҡыҙҙарҙың башын әйләндереп бөтә күңелен биләп алды. Редакцияларға «Минең стюардесса булғым килә» тигән күпме хаттар яуҙы! Хатта «Стюардесса» тигән сигареттар ҙа сыға башланы бит... Шуның төтөнө генә лә был сит ил һүҙен йәшлеккә хас романтика менән солғап алды.

Әлбиттә, һәр эштең үҙ романтикаһы бар. М. Горький әйтмешләй, батырлыҡҡа һәр ҡайҙа урын етерлек. Моғайын, Роза Хәйретдинованы ла ошо романтика алып килгәндер авиацияға. Раевкала урта мәктәпте бөткәс, Өфө медицина училищеһына инһә лә, ярты йыл да уҡымай, ул үҙенең күңеле тартҡан һөнәрҙе һайлай. Куйбышев ҡалаһында УТО-ла (уҡыу-күнегеү отрядында) курс үткәндән һуң, ул Өфө аэропортында стюардесса булып эшләй башлай.

Өфө аэропорты илебеҙҙәге иң ҙур аэропорттарҙан иҫәпләнә. Көнө-төнө моторҙар күкрәүе тынмай бында. Тәүлек әйләнәһенә йөҙәрләгән һауа лайнерҙары күккә күтәрелә һәм ергә төшә. Аэропорт аша тәүлегенә меңәрләгән пассажир һәм меңәрләгән тонна йөк үтә. Бөтә был пассажирҙарҙы дүрт группаға бүленгән йөҙгә яҡын кеше хеҙмәтләндерә. Роза Хәйретдинова бына шуларҙың иң алдынғыларының, иң уңғандарының береһе. Ул коммунистик хеҙмәт ударнигы ла, аэропорттың партбюро ағзаһы ла һәм хеҙмәтсәндәрҙең Өфө ҡала Советы депутаты ла. Авиаотряд командиры Фуат Шәрипович Үтәшев та, йөк ташыу бүлеге начальнигы Фәндит Ирғалиевич Арсланов та, политбүлек начальнигы Владимир Николаевич Лебедев та Розаның эшенән бик ҡәнәғәт. Уның менән бергә эшләгән иптәштәре Валя Чачина, Тамара Ишморатова, Нәжиә Йәғәфәрова, Валя Маркова, Рәсимә Сабанчиналар ҙа Розаның кешелекле, ярҙамсыл, иғтибарлы булыуын маҡтап һөйләй. Әйткәндәй, шуныһы ҡыҙыҡлы: Нәжиә лә, Рәсимә лә Әлшәй районынан, Розаның яҡташтары икән.

Розаның үҙе менән мин бер ярты сәғәттәй генә һөйләшеп өлгөрҙөм. Ул Ленинград маршруты менән рейсҡа сығырға әҙерләнә ине.

— Күптәргә был эш башта романтика ғына булып күренһә лә, бик еңелдән түгел. Ул күҙгә күренмәй торған бик ваҡайлы, ғәҙәти хеҙмәттән тора, — тип һөйләй Роза. — Рейстар бик алыҫ маршрутлы. Ленинград менән Мәскәүгә лә, Сочи менән Семфирополгә лә, көнсығышҡа ла осорға тура килә. Йылына 500 сәғәттән ашыу осорға кәрәк. Тәүлек нагрузка — 8 сәғәт. Алыҫ маршруттарға ТУ-134, ә Башҡортостан буйынса АН-24 самолеттарында осабыҙ. Халыҡ ифрат күп йөрөй. Пассажирҙарҙың ниндәйе генә тура килмәй... Төрлө кешенең күңелен күргергә кәрәк. Бөтәһе лә Мостай Кәрим ағай һымаҡ йылмайып ҡына тормай бит...

— Ә Мостай ағай менән йыш осорға тура киләме?

— Бик йыш Мәскәүгә илтеп, Мәскәүҙән алып ҡайтабыҙ үҙен, — ти Роза йылмайып. Күрәһең, уға ла Мостай ағайҙың йылмайыуы йоғоп ҡалғандыр инде.

Эйе, Станиславский әйткәнсә, театр кейем элә торған буҫағанан башланһа, самолетта осоу стюардессаның бына ошо йылмайыуынан башланалыр. Кешеләр самолет креслоларына ниндәй генә кәйеф менән килеп ултырмай ҙа уларҙы ниндәй генә хәлдәр көтмәй. Берәүҙәр, ашығыс телеграмма алып, юлға

сыға. Бына шундай саҡта яҡшы һүҙ — йән аҙығы. Кешене тыныслandырырҙай һүҙ әйтеү, уның кәйефен күтәрерҙәй яғымлылыҡ ҡанатлы өй хужабикәһенә иң кәрәкле сифаттыр әле.

Һин самолеттың курсын, экипаж составын, һауа температураһын, сәғәтенә 800—850 км тиҙлек менән 10—11 км бейеклектә осҡанын әйтеп, ундағы тәртип-ҡағиҙәләр менән таныштырғас та, кеше үҙен өйҙәге һымаҡ тойһон, һин өләш-кән «ҡуян күстәнәсен» кинәнеп ауыҙ итһен, һин килтергән һыйҙы таңһыҡ аш итеп ашаһын, бараһы еренә яҡшы кәйеф менән барып етһен, ә кире әйләнеп ҡайтҡанда, һине үҙ иленең бер төҫө, юлсәфәренең күрке, йәне итеп күрһен. Шуның өсөн дә һин үҙ илендең әҙәп-холҡо, күңел күрке кимәлендә, үҙ Уралыңдың юғарылығында булырға тейешһең. Яратҡан шағирың Мостай ағай яҙғанса, һинең тыуған ерең — Башҡортостаның ниндәй оло, күркәм ил бит:

Ҡанат йәйгән самаһыҙ ҙур
Ҡошҡа оҡшай Урал тауы.
Ә Европа һәм Азия
Уның талмаҫ ҡанаттары!
Һис ни менән үлсәнелмәҫ
Мөһабәт ҡош үткән ара,
Сөнки ул бит мәңгелектән
Мәңгелеккә осоп бара...

Эйе, кешеләрҙең күңел байлығы ла, күңел күрке лә «Һис ни менән үлсәнелмәҫ» хазина. Уны бер ниндәй процеттар менән дә, бер ниндәй бизмәндәр менән дә үлсәп булмай. Уны тик тойорға мөмкин. Самолет иллюминаторы аша күренгән экиәттәге кеүек ал шәфәҡ нурында ҡойонған болот тауҙарына ҡарап, уларҙың беренсеһенән икенсеһенә һикереп, осоп китәһе килгән кеүек, был матурлыҡты ла бары тик тойорға ғына була.

Һин дә үҙ эшеңдең мәғәнәһен тойоп, ғорур ос, һылыуҡай. Һин быға хаҡлыһың. Һин инде Ҡарлуғас апайыңдар ише: «Ҡыҙ бала булғансы, булһам ирекле ҡош, тотҡон булмаҫ инем донъяла», — тип зарланмайһың. Һин яҙмышың менән дә, эшең менән дә бик бәхетле. Ана ниндәй гүзәл аҡҡош алып китте һине «Аврора»лы Ленин ҡалаһына... Иҫән-һау йөрөп ҡайт сәфәреңдән! Был теләктә әсәйең Рәйсә апай ҙа, ирең Ренат та, ҡыҙың Света ла һәм беҙ ҙә теләйбеҙ һиңә. Ҡанаттар осҡанда нығый, тиҙәр. Хәйерле юл һиңә!

Тегенселәр

Туймазы тегеү фабрикаһының ятағына шиғыр кисәһе үткәрергә барғанда, яҡташым Рита Низаеваны осраттым.

— Ни хәл, ҡоҙаса? Тегенсе булып буламы? Ал киҫәме, гөл киҫәме тегенсе ҡайсылары? — тип һорағас, ул уңайһыҙланыбыраҡ:

— Бик «ал да гөл» түгел әле, ағай. Тегенсе урынына бына игенсе итеп ҡуйҙылар. Элеваторҙа эшләп йөрөйбөҙ, — тине.

— Бынығы таныҡ эш кенә бит һеҙгә! Тыуған яҡтарҙы, ауылды һағынғанда, иген еҫен еҫкәп алыу ҙа бик килешә. Бындай иген уңған йылда ауылға ярҙам итешмәй ҙә булмай инде.

— Шулайын шулай ҙа ул, эш ҡала бит әле...

— Ҡалмаҫ, иң элек әпәкәй булһын илдә, — тигәс кенә, ҡоҙасам ризалашҡандай булды.

Ҡара һин уны — әле генә Йүрүҙән буйының Бишәүҙәр ауылында «бишташ» уйнатып ултырған ҡыҙыҡай ҡалайыраҡ һөйләшә?! Ни арала үҫеп еткән дә ни арала тегенсе булып киткән! Бөтөнләй эшсе синыф бит...

Хәҙер йәштәр төрлө СПТУ-ГПТУ-ларында уҡып сығалар ҙа теләгән бер һөнәргә эйә булып та алалар шул. Заманаһы шундай: ғүмер баҡый мал бағып, иген иккән ауыл балаһы бөгөн инде бына эшсе синыф вәкиле, шундай ҙур фабриканың тегенсе-мотористкаһы!..

... Неон яҡтылығы менән балҡып торған бейек, иркен залда урынлашҡан тегеү цехы үҙе бер аэродромды хәтерләтә. Моторҙарҙың тоноҡ ҡына геүләүе аша мин бала саҡта ҡолаҡҡа һеңеп ҡолған боронғо «Зингер» машинаһының зеңгерҙәүен шәйләгәндәй булам: «Зеңгер-зеңгер, зеңгер-зеңгер...» Миңә ул, әлбиттә, сабый саҡтың тылсымлы бер зәңгәрлеге булып тоҫмаллана. Хатта мин уның үҙенә генә хас еҫен дә тоям! Һәм алыҫтағы зәңгәр томан аша бөләңгерт кенә күренгән бер шәүләне төҫмөрләйем: сал башына ап-аҡ яулығын артҡа ҡайтарып бәйләгән, уны тегәр еп ҡолаҡсыны менән быуып, күҙлек кейгән Шәкүрә ҡәртәйем кемгәлер кейем тегә... Уны, 110 йәшкә етеп, тегенеп ултырған ерендә, энәһеҙ һаплап үлгән, ти торғайнылар.

Ә инде шул уҡ ҡиәфәттәге Нәғимә дәүинәйҙе асығыраҡ хәтерләйем. Ғүмер баҡый кешеләргә кейем тегеп, уларҙың меҙ рәхмәтенә бер генә һүҙ ҡайтарып әйтер ине ул: «Нәйәт булды, йылы тәнеңдә туҙһын!» Күҙҙәре инде йәшкәҙәп бөтһә лә: «Ярлы

яманып ҡыуаныр», тип, төрлө иҫке-моҫҡоларҙан беҙгә һаман күлдәк-ыштан, көпө-бишмәт тегер ине.

Ә көҙөн, ҡаҙ өмәләренән һуң, ҡул эшенә Мәүзифа кендекәйем дә килеп ҡушылғас, ҡышҡы оҙон төндәрҙә етеле шәм яҡтыһында юрған һырырға керешерҙәр ине. Мәүзифа кендекәй, аллы-гөллө төйөнсөгөн сисеп: «Итек, ситек, энә, беҙ, йөҙ!» — тип, төрлө кәрәк-яраҡтарын барлар ҙа, төргәгенән йөҙ шәкелдәге үрнәк-өлгөләрен сығарып, юрған йөҙлөгөнә аҡбур менән донъяла булмаған әллә ниндәй әүернә-сәскәләр, һөлөк-ҡусҡарҙар, әкәмәт кәкерсәктәр төшөрөр, унан, уймаҡ-энәһен алып, эшкә керешкәс, бихисап әкиәттәр, хикәйәттәр һөйләр, «Саҡ менән Суҡ», «Аҡмулла» бәйеттәрен, мөнәжәттәрен әйтер. «Хан ҡыҙы» ише ят йырҙар йырлап, ахырҙа сеңләп тә ебәрер ине: «Кейәүе кейәү икән дә муйыны оҙон икән...»

Мәүзифа кендекәй өйҙән өйгә, ауылдан ауылға бик күп йөрөгәс, йөрөгән аяҡҡа йүрмә элгәс, тигәндәй, күпте белә шул: им-томға ла оҫта, аяҡ-ҡулың ҡаймыҡһа, быуынға ла ултырта, кәрәк икән, кендек әбей ҙә була. Ә инде ҡайыу-сигеүҙә, юрғанһырма һырыуҙа, балаҫ-келәм һуғыуҙа уға тиң кеше лә юҡ. Был бик ваҡайлы, йөҙәткес, тәфсирле эш булғанлыҡтан, уның уйын-көлкөләре, хикмәтле һүҙҙәре лә бик кәрәк булғандыр ине, күрәһең... Ул үҙенең күңел бөтөнлөгө, алсаҡлығы, сәсәнлеге менән ире-йәре, ағай-энене һуғышта йөрөгән бөтә бисә-сәсәнең күңелен күреп, олоһон да, кесеһен дә албырғатып, дәртләндереп ултыра. Кәрәк ерендә йәш-елкенсәккә: «Атанан күргән уҡ юныр, инәнән күргән тун бесер», «Аҫас күрке — япраҡ, әҙәм күрке — сепрәк», «Ете ҡабат үлсәп, бер ҡабат киҫ», — тигән хикмәтле һүҙҙәрен дә әйтеп ташлар. Уның менән ҡул эше эшләп, кис ултырыу етем-есергә үҙе бер йыуаныс...

Әҙәм балаһының үҙе һымаҡ боронғо был тегенсе һөнәрен үҙ иткән ҡоҙасамдың, уның дуҫ-иштәренең, эхирәттәренең бөгөн-гө эше, яҙмышы хаҡында уйлағанда, мин ирекһеҙҙән ошо бала саҡтың «аҡ әбейҙәрен» күҙ алдыма килтерҙем. Уларҙың яҙмышы менән бөгөнгө йәштәр — Риталар быуынының яҙмышы араһында ниндәй ҙур айырма ята! Был айырманы белһә бары оло быуын кешеләре, теген эшенә ауыр һуғыш йылдарында килгән оҫталарҙың береһе Заһира апай кеүектәр генә белә инде.

Хәҙер фабриканың партком секретары урынбаҫары булып эшләгән Заһира апай Чамбарисова, ул йылдарҙы хәтерләп:

— Ул сағта күргәндәрҙе йәштәр башҡаса күрмәһендәр инде, — тип үҙҙәренең тәүге аҙымдары тураһында һөйләп китә.

Фабрика Бөйөк Ватан һуғышының тәүге йылында ойоштороlған бәләкәй генә тегеү мастерскойы нигеҙендә үҫеп сыға. Мастерской эшелоны-эшелоны менән һуғышҡа киткән ҡыҙыл-армеецтарға кейем тегеп, ашығыс хәрби заказдар үтәй. Ул бер барак һымаҡ ҡына йортта урынлашҡан була. Йыһаз-дары ла ике тиҫтә ҡул һәм бер нисә аяҡ машинаһынан ғына тора. Туҡымаларҙы ҡәҙимге ҡул ҡайсыһы менән генә бесәләр. Яҡтылыҡ нефтселәрҙең бәләкәй генә электростанцияһынан алына. Энергия етешмәй. Аслы-туҡлы тегенселәр ҡараңғы, һыуыҡ баракка Туймазының бер осонан икенсе осона йәйәү йөрөп эшләйҙәр. Көҙгө ямғырҙа ла, ҡышҡы ыҙғыр буранда ла, үҙәккә үткес сасҡау һыуыҡта ла элеге шул «пешком турат».

Кадрҙар мәсьәләһе лә бик ҡыйын хәлдә була. Бер ҡайҙа ла уҡымаған ҡыҙ-ҡырҡын килә лә эшкә башлай. Хәҙерге ише ул ваҡытта профтехучилищеларҙа уҡытып тормайҙар шул.

Шуға ҡарамаҫтан тегенселәр алды-ялды белмәй, берҙәм һәм дәррәү эшләй. Хатта ял көндәре менән дә иҫәпләшеп тормайҙар. Эшкә һуңлап килеү йәки прогул яһауҙың әҫәре лә булмай. Бөтә ихтыяр, бөтә дәрт-көс тик бер нәмәгә йүнәлтелгән:

— Бөтәһе лә фронт өсөн!

— Тиҙерәк дошманды еңеп ҡайтығыҙ!

— Кейгәнегеҙ йылы тәнегеҙҙә туҙһын!

Тегенсе ҡатын-ҡыҙҙар шулай, аҡ теләктәр теләп, төндө көнгә, көндө төнгә ялғап, яугирҙарға кейем тектеләр. Һәр береһе үҙенең машина энәһе һалған еп нағышына күҙен теклəп, Аҡ диңгеҙҙән алып Ҡара диңгеҙгәсә һуҙылған окоптар сылбырын күҙ алдына килтерҙе. Һәр береһе үҙенең ғәзиз кешеһе — ире йә һөйгән йәре, ағаһы йә ҡустыһы, атаһы йә бабаһы тураһында уйланы. Һәр нағышта — үҙ ҡайғыһы, үҙ һағышы. Был һағышҡа түҙмәйенсә, йөрәк аһын тышҡа атып, кемдер шунда йырлап ебәрә:

Ҡара ғына ебәк күлдәгемә
Кәйтән тектем ҡыҙыл ебәктән.
Иптәшемдең «хуш бул!» тигән һүҙе
Һис тә китмәй минең йөрәктән.

Ә икенсеһе уны күтәреп ала:

Итек кенә кейгән, шинель кейгән,
Һары ҡайыштары биләнде;
Аҫыл һөйәккәйе ситтә ҡалды,
Ҡайтып торһа ине иләндә.

Уларға тағы өсөнсөһө ҡушыла:

Яурындарына артып алған
Окоп ҡаҙа торған көрәген.
Дошман пулялары килеп тейгәс,
Баҫып ҡарағандыр йөрәген.

Һәр береһендә уртаҡ ҡайғы — ил ҡайғыһы:

Урал тауҙарына менер инем,
Урал тауҡайҙары бик бейек;
Йән-тәндәрен биреп ҡорбан итте,
Тыныс йәшәһен дә ил, тиеп...

Яу яландарында ятып ҡалған егерме миллион ҡорбандың һәр өйгә ҡағылған йөрәк аһы ине был йырҙар. Фронттан көткән өс мөйөшлө һалдат хаттары урынына көн һайын усты көйҙөргөс ҡара ҡағыҙҙар яуып ҡына торҙо. Күптәрҙең: «Йылы тәнегеҙҙә туҙһын» тигән иң изге теләктәре лә ҡабул булманы. Гимнастерка түштәрен орден-миҙалдар менән тултырып, яуҙан ҡайтып килгәндәрҙең дә йә буш еңе, йә һыңар балағы елгә елберҙәгәнен асыҡ хәтерләй Заһира апай... Эйе,

«Туй күлдәге менән кәфенде лә
Бер үк энә менән тегәләр», —

тигән әсе хәкиҡәтте яҡшы белә тегенсе. Егерме миллион ҡорбан яу яландарында ятып ҡалһа, шуға бәрәбәр күпме тол ҡатын, күпме етем-еҫер ҡалғанын да самалай ул. Был быуындың яҙмышына ниндәй хәтәр өлөш төшкәнен хәҙерге быуындар һис кенә лә оноторға тейеш түгел. Мәүзифа кендекәй сеңләп йырлаған кейәү ҙә насип булманы уларҙың күбеһенә...

Булмағанға һөйөр егеттәре
Күҙ йәштәре тамды тоҙ булып —
Ниңә тыуған улар ҡыҙ булып?..

Ләкин үлгән артынан үлеп булмай. Тормош үҙенекен итә. Һуғыш йылдарында девон ҡатламдарын айҡаған нефтселәр ҡасабаһы ла бөтә илгә даны таралған ҡала булып китте. Ҡала менән бергә тегеү мастерскойы ла үҫте. Тора-бара ул күҙҙең яуын алып торған 1-се һанлы тегеү фабрикаһына әйләнде. Уның хәҙер фабрика булып эшләй башлауына ла ун һигеҙенсе йыл инде. Был үҙе бер быуындың ғүмере!

Был быуын тегенселәренең эше һәм тормошо тураһында фабриканың партком секретары Татьяна Ивановна Кузнецова ла, цех начальнигы Клавдия Петровна Егорова ла ғорурланып һөйләйҙәр.

Фабрикала бөтәһе 1180 кеше эшләй. Шул иҫәптән 66-һы инженер-техник персонал, 25-е хеҙмәткәр,1089-ы ябай тегенсе. Сығарылған бөтә продукцияның йыллыҡ күләме — 6 миллион 562 мең һумлыҡ. Биш тегеү цехы минутына биш мең әйләнеш яһай торған юғары етештереүсәнле 350 универсаль машина менән йыһазландырылған. Уларҙың етештереүсәнлеге элекке машиналарҙыҡынан ике мәртәбәгә артыҡ. Ә махсус операция (йомғаҡ уратыу, төймә баҫыу, элмәк һалыу) машиналары йөҙҙән ашыу. Кейем бесеү цехында ғына ла егерме машина ҡулланыла. Бынан тыш эксперименталь-тәжрибә һәм әҙерлек цехтары бар әле. Кейем бесеү цехындағы бөтә операциялар ҙа механикалаштырылған. Туҡымалар электр машиналары менән беселә. Контроль нөктәләр төшөрөү өсөн дә махсус ҡулайлама эшләй.

1960 йылдан алып фабрика ҡатын-ҡыҙ һәм бала-саға кейемдәре тегеүгә махсуслаштырылған. Ә хәҙерге ваҡытта тегелгән әйберҙәрҙең төрө буйынса цехтарҙы һәм ағымдарҙы махсуслаштырыу эше алып барыла. Был эш производствоны ойоштороуҙы артабан камиллаштырырға, тегелгән әйберҙәрҙең сифатын күтәрергә һәм бөтә йыһаз-ҡорамалдарҙы яҡшыраҡ файҙаланырға мөмкинлек бирә.

Заһира апай Чамбарисова:

— Беҙҙең фабрика рекламацияһыҙ эшләй, — тигәс, мин быныҡ мәғәнәһен асыҡлабыраҡ биреүҙәрен һораным.

Рекламацияһыҙ эшләү, тимәк, ведомствонан тыш контроль юҡ, йәғни бөтә эш беҙҙең үҙебеҙгә ышанып тапшырылған, тигән һүҙ.

— Ә бынан һәр эшсенең шәхси яуаплылығы ла артырға тейештер бит инде?

— Эйе, был — хәҙерге замандың иң мөһим талабы. Эштең сифатына һәм хеҙмәт етештереүсәнлегенә — эшсе гарантияһы,

тигән һүҙ был. Беҙ шундай девиз менән эшләйбеҙ ҙә инде, — ти Заһира Сәлиғәскәровна. — Тимәк, эштең сифаты өсөн һәр эшсе, тотош коллектив яуаплы. Әгәр ҙә эшебеҙҙән берәй хилафлыҡ тапһалар, һатып алыусылар беҙгә туранан-тура үҙҙәре мөрәжәғәт итә ала. Шуның өсөн дә беҙ заказ биреүсе ойошмаларҙың теләктәҡдимдәрен иң элек производство бүлегендә тикшерәбеҙ, ә бында хәл ителгәнде эксперименталь цех ғәмәлгә ашыра. Бөтә өлгөләр энәһенән-ебенә тиклем ошо цехта хәл ителә. «Ете ҡабат үлсәп, бер ҡабат киҫеү» бына шул була инде. Унан һүң әҙер өлгөләр кейем бесеү цехына оҙатыла.

— Ә моделдәрҙе ҡайҙан алаһығыҙ һуң?

— Моделдәр беҙгә бөтә техник документацияһы менән Өфө моделдәр йортонан килә. Улар башта күргәҙмә йәрминкәһендә күрһәтелә. Һатып алыусы ойошмалар уларҙы һайлап алып, беҙгә заказ бирәләр һәм уның срогын билдәләйҙәр. Беҙ шул заказдарҙы ваҡытында үтәп сығырға тырышабыҙ.

— Ә бөгөнгө көндә фабрикала барлығы күпме модель тегелә?

— Барлығы Дәүләт сифат билдәһе алған 34 модель тегелә. Әлбиттә, һатып алыусыларҙың ихтыяжы ҙур. Беҙҙең фабрикаға Советтар Союзының төрлө мөйөштәренән бик күп хаттар килә. Күрәһең, беҙҙең моделдәр бик күптәргә оҡшай. Улар художество яғынан зауыҡлы итеп биҙәлгән, төрлө йәштәге ҡатын-ҡыҙҙың тәненә ултырып торорлоҡ, килешле итеп тегелгән була. Фасондары ла төрлө-төрлө, фурнитураһы ла (биҙәлеше) төҫкә-башҡа килеп тора.

— Шуның өсөн дә беҙҙең фабрикаға 1974 йылдың йомғаҡтары буйынса юғары производство предприятиеһы тигән исем бирелде, — тип өҫтәй Татьяна Ивановна. — Был исем 1975 йылда ла нығытылды. Әле лә беҙ был исемде һаҡлап киләбеҙ. Август айында беҙҙең фабрикаға производствоның сифаты һәм эффектлылығы өсөн партияның ҡала комитеты һәм ҡала советының ҡыҙыл байрағы тапшырылды.

Шулай итеп, 1-се Туймазы тегеү фабрикаһы ҡалала беренсе булып продукцияны Дәүләт сифат билдәһе менән сығара башлай. Уның Серафимовкалағы филиалы ла беренселәрҙән булып был юғары билдәгә лайыҡ була.

Әлбиттә, был үҙенән-үҙе генә килмәй. Уның нигеҙендә фабриканың партия, профсоюз һәм комсомол ойошмаларының ныҡышмалы көндәлек эше ята. Бракка ҡаршы көрәшеү һәм эштең сифатын күтәреү буйынса бригада һәм цехтарҙа халыҡ

контроле группалары билдәләнгән. Уларға иң алдынғы эшсе ҡатын-ҡыҙҙар һайлап ҡуйылған. Мәҫәлән, 1-се цехта «Почет билдәһе» ордены кавалеры Таися Агеева, Мария Старцева, Фәрзәнә Имамова, 2-се цехта Рәзидә Райманова, Фәниә Сәғәҙиева бына шундайҙарҙан. Улар әхирәттәренең эш сифатын, хеҙмәт тәртибен, аҙна һайын рейд үткәреп, тикшереп торалар, эш шарттарын яҡшыртыу буйынса хәстәрлек күрәләр. Һәр кемгә уларҙың һүҙе үтә — сөнки һүҙҙәре эштән айырылмай. Улар шулай уҡ биш йыллыҡты өс йылда үтәү инициаторҙары ла.

Был тәңгәлдә йәш эшселәр советы ла, кәңәшсе-тәрбиәселәр өгөтө лә, шулай уҡ «иң яҡшы тегенсе» исеменә үткәрелеп торған конкурстар ҙа булышлыҡ итә.

Комсомол йәштәр бригадалары араһында үткәрелгән был бәйгеләрҙә беренсе урынды алып килгән Людмила Агапова, мәҫәлән, агрегат-ағым ысулы менән эшләп, продукцияһын «тәүге талаптан уҡ бер ниндәй дефектһыҙ» тик яҡшы билдәһе менән генә бирep килә. Йәштәрҙән 47 кеше бына шундай «Биш йыллыҡҡа — эшсе гарантияһы» тигән девиз менән эшләй. Уларға ВЛКСМ Үҙәк комитетының вымпелдары бирелгән.

Клавдия Петровна Егорова етәкселек иткән 1-се цех хаҡында айырыуса әйтеп китке килә. Күсмә ҡыҙыл байраҡ 300 кеше эшләгән ошо цех ҡулында. Ә цехтың мастеры Фазина Хафизова етәкселек иткән 3-сө агрегаты өс квартал буйынса ла «Юғары сифат бригадаһы» исемен раҫлаған. Агрегат тегенселәре фабрикала беренсе булып мәскәүлеләр башланғысын күтәреп сыҡҡан. Уларҙың девизы — «Бригадаларға — экономик иҫәп-хисап һәм инженерлыҡ ярҙамы!» Тимәк, бөтә экономик иҫәп-хисап алдан яһалып, инженер-техник персонал ошо иҫәп-хисапҡа нигеҙләнгән йөкләмәне үтәп сығыуҙа бөтә яҡлап ярҙам итә, тигән һүҙ. Бындай йөкләмәне тегенселәрҙән иң беренсе булып Анна Евгеньевна Кузьмина ҡабул иткән һәм ул үҙ йөкләмәһен байтаҡҡа арттырып үтәгән. Ул үҙе кәңәшсе-тәрбиәсе лә. Уның өлгөһөндә бригаданың бөтә ағзалары ла нормаларын 100 процентҡа һәм унан да арттырып үтәйҙәр. Фазина Хафизовна агрегатында артта ҡалыусылар юҡ. Һәр кемгә һәләтлеге еткән эш һайлап бирелә. Әйтәйек, берәү тегеүгә өлгөрмәй икән, ул кейем үтекләүгә, төймә баҫыуға йәки башҡа эшкә ярай.

Цехтағы биш тегенсе 10-сы биш йыллыҡ заданиеһын өс йылда үтәргә иң юғары йөкләмә алған. Уларҙан Дьяконова Ираида һәм Васильева Вера Петровналар — бер туғандар.

(Әйткәндәй, уларҙың ҡыҙҙары Надя Дьяконова менән Люда Васильева ла, урта мәктәпте бөткәс, әсәләренең һөнәрен һайлап, теген эшенә килгән). Ә Фәүзиә Зорина, Мария Максимова һәм Рәйфә Гәрәева кеүек йәш тегенселәр «9-сы биш йыллыҡтың йәш гвардиясылары» тигән көмөш миҙал менән бүләкләнеп, 10-сы биш йыллыҡты 3 йылда үтәү өсөн дәртлә-неп эшләй. Был цехта бөтә кейемдәр тик сифат билдәһе менән тегелә. Балалар кейемен мастеры Фәниә Ризуанова булған 3-сө агрегат тегә. Шулай уҡ Любовь Ситникова, Анна Козяева бригадалары ла сифат билдәһе менән генә эшләй.

Фабриканың бөтә тегенселәре үҙҙәренең бына шундай егәрле әхирәттәре менән хаҡлы ғорурлана һәм эштә улар менән тигеҙләшергә тырыша.

... Яҡташым Рита Низаева ла шундай күркәм хеҙмәт йолалары булған, татыу, берҙәм коллективҡа эшкә килеүе, эшсе синыфының яңы бер вәкиле булыуы менән бик бәхетле.

Әсәй-өләсәйҙәрҙән ҡалған был боронғо һәм мәңге йәш һөнәрҙе һайлап, бик дөрөҫ иткәнһең, Рита! Һынатма, яҡташ! Үҙеңдең Салауат тоҡомонан икәнеңде лә, әле мин телгә алған «аҡ әбейҙәреңдең» әнәһен дә онотма. Улар кеүек ете үлсәп, бер киҫ! Улар кеүек үк һәр саҡ изге теләктә бул. Ал да киҫһен, гөл дә киҫһен тегенсе ҡайсыларың! Ә яҙмышың яҡты булыр һинең!..

Шиғыр кисәһендә һеҙҙең ҡыҙҙар бүләк иткән сәскәләрҙе, тегенсе булыуың менән ҡотлап, мин һиңә ҡалдырҙым. Һин теккән кейемдәрҙе киләсәк быуын гөлдәй итеп кейеп йөрөһөн әйҙә.

... Ҡолаҡта — зеңгер-зеңгер машина тауышы. Тик заман башҡа — заң башҡа. Ә күк йөҙө зәп-зәңгәр. Ана, теге реактив самолет та, алтын энә һымаҡ, бер һаплам көмөш ебе менән, замандарҙы замандарға ялғап, күктең зәңгәр ситсаһын тегә...

10 октябрь, 1976 йыл

Әбей батша заманының ҡомартҡыһы

Былтыр «Вокруг света» журналының 8-се һанында геология-минералогия фәндәре докторы А. А. Малаховтың «Малахит йылъяҙма?» тигән бик ҡыҙыҡлы мәҡәләһе баҫылып сыҡҡайны.

Унда Екатерина II заманында яһалған малахит ҡумта ҡапҡасындағы серле һүрәттәр хаҡында һүҙ бара.

Авторҙың раҫлауынса, улар араһында Пугачев етәкселегендәге крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыусы башҡорттарҙың да һүрәттәре бар. Мәҡәләлә Салауат Юлаев исеме лә телгә алынғанлыҡтан, уны беҙ «Башҡортостан ҡыҙы» журналында баҫырға әҙерләгән саҡта, Свердловскийға шылтыратып, авторҙың үҙе менән дә һөйләштек.

«Пугачевсылар араһында Салауат Юлаевтың да һүрәте бар, тиҙәр. Шул хәбәр дөрөҫмө?» — тигән һорауға Анатолий Алексеевич яңғына «Юлаев» тип яҙылған башҡорттоң барлығын әйтте һәм тиҙ көндәрҙә уның микроһүрәтен, ҙурайтып, «Башҡортостан ҡыҙы»на ебәргә, уның хаҡында айырым мәҡәлә яҙырға вәғәҙә бирҙе. Беҙ, әлбиттә, был уникаль һүрәтте һәм был хаҡтағы ентекле һүҙҙе түҙемһеҙлек менән көтөп, уҡыусыларыбыҙ иғтибарына хәҙергә ошо мәҡәләне тәҡдим итергә булдыҡ.

Рәми Ғарипов.

Малахит йылъяҙма?

Минең был әле һөйләр һүҙем һеҙгә бер ғилми-фантастик мажара булып күренер. Шулай ҙа алдан уҡ әйтеп ҡуям: бында һөйләгәндәрҙең бөтәһе лә баштан-аяҡ ысын. Шик-шөбһәгеҙ булһа, һәр берегеҙгә мин телəһə ҡайһы ваҡытта ҡулыма килеп эләккән ғәжәйеп бер документты сығарып күрһәтә алам.

Бындай хәлдәр ғүмерҙә бер генә булалыр. Бөтөнләй осраҡлы бер хәл мине уйламаған-көтмәгән асыштың эҙенә килтереп төшөрҙө.

Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ әле: бөгөн килеп минең ҡулда бынан ике йөҙ йыл элек йәшәгән ике йөҙҙән ашыу кешенең һүрәттәре булһансы! Шулай итеп, мин көтмәгәндә генә хаҡы-баһаһы бихисап хазинаның эйәһенә эйләндем дә ҡуйҙым. Минең ҡулдағы был һүрәттәрҙә Әбей батша заманандағы йәғни Екатерина II батшалыҡ иткән саҡтағы ваҡиғалар кәүҙәләнә. Уларҙа, моғайын, XVIII быуаттағы крәҫтиән һуғыштарында ҡатнашыусыларҙың, шул иҫәптән, ихтимал, Пугачевтың да байтаҡ көрәштәренең йөҙө-төҫө һаҡланалыр.

Ҡайһы ваҡытта миңә шулай тойола: әйтерһең, мин, ҡулыма фотоаппарат тотоп, үткән заманға үтеп ингәнмен дә XVIII быуаттың алтмышынсы-етмешенсе йылдарында Уралда булып үткән ваҡиғалар хаҡында фоторепортаж яһап ҡайтҡан һымаҡмын!

Был «фотоаппарат» тигәнем төҫкә былай һис тә иҫ китерҙәй ере булмаған бер малахит таҡта киҫәге ине. Ҡасандыр ул кескәй генә малахит ҡумтаның ҡапҡасы булған. Иҫкә алып ҡуйығыҙ: уның иңе — 13,5, буйы 19,7 сантиметрлыҡ ҡына. Ошо ус битендәй генә ҡапҡастың шымартылған йөҙөнә Урал Оҫтаһы бығаса күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән алым менән һүрәт һәм панноларын төшөргән. Иң элек ошо ҡапҡаҫҡа күҙ һирпеп алыу менән тәү ҡарашҡа уның урта тәңгәлендә ғәжәйеп бер таш сәскә күҙгә салына. Был сәскә нимәһе менәндер сихри баҡсала үҫеп ултырған ҡыҙыл гөлдө хәтерләтә. Ләкин һүрәттә иң мөһиме был да түгел. Был ҡапҡас ниндәйҙер бер тылсымлы картина һымаҡ: рәссам-йылъяҙмасының бик оҫта ҡорамалап төшөргән йәшерен һүрәттәрен күрер өсөн, төрлө һыҙат һәм таптарҙың биҙәктәренән күҙеңде алмай, ҡулыңдағы ҡапҡасты төрлө яҡҡа борғолап ҡарарға кәрәк.

Фәҙәттә беҙ, Урал оҫталары һүрәттәрҙе биҙәкле йәшел таш киҫәктәрен йәбештереп эшләй белгәндәр, тип иҫәпләргә күнеккәнбеҙ. Шулай уҡ малахит һырҙары буйынса юллап алынған нескә таҫмаларҙың ҡорамалап эшләнгән төрлө-төрлө дүңгәләктәр шәкеленә лә, кәкере-бөкөрө юлаҡтар төрлөләгенә лә күнегеп бөткәнбеҙ инде.

Бында ла асылда шул уҡ малахит нағышы. Әммә бында йәбештерелгән таштарға рәссам тарафынан кеше һүрәттәре һәм үҙ заманының хәл-ваҡиғалар күренештәре төшөрөлгән булып сыҡты! Юҡ, мине яңылыш әйтә тип улай күрмәгеҙ: ысынлап та, төшөрөлгән шул!

Үкенескә күрә, бындай һүрәттәрҙе эшләү сере һаҡланып ҡалмаған. Хәҙерге малахит эшкәртеү оҫталарынан бер кемдең дә бындай ысул хаҡында ишеткәне юҡ әле. Боронғо оҫта уны нисек итеп эшләне икән һуң? Бәлки, ул уны шпатель менән малахит саңын елемгә буяп йәбештергәндер. Күрәһең, был эш ҡыҙыу ут аҫтында башҡарылған булырға кәрәк. Мин, үҙемсә,

бындай һүрәттәрҙе эшләү оҫталығының эҙенә кире төшөргә булалыр, тип уйлайым.

Шулай ҙа бының менән генә эш бөттө тигән һүҙ түгел әле. Бында шуныһы ғәжәп: рәссам йәшерен һүрәттәр төшөрөргә кәрәк булған ерҙә тағы ла серлерәк алым ҡулланған: «йәшерен» персонаждарҙың ҡиәфәтен ул малахит валсығы менән саңына елем ҡушып һынландырған. Уларҙың һынланышы ла шулай уҡ ғәҙәттәгесә түгел. Ул һүрәттәрҙе бары тик микроскоп ярҙамында йәки бик ныҡ зурайтып фотоға төшөргәндә генә төҫмөрләп була. Был бик кескәй һүрәттәр төшөрөү сәнғәте (микроживопись)!

Билдәһеҙ рәссам төшөргән был энә күҙендәй микроһүрәттәр үҙҙәренең ғәжәп «портретлы» булыуҙарына ҡарамаҫтан, ҡапҡас майҙанында бик тығыҙ урынлаштырылған. Улар миллиметрҙың унынсы, хатта йөҙөнсө өлөштәренә тиклем кесерәйтеп эшләнгән! Ошондай «йәшерен» һүрәттәр төркөмө, булавка башындай ғына урын алып тороуға ҡарамаҫтан, утыҙҙан ашыу кеше башын һыйҙырған!

Мин бөтә был портрет һәм панноларҙы үҙемдең байтаҡ ҡына дуҫ-иштәремә күрһәтеп ҡараным. Уларҙың төрлөһө төрлө тәьҫирҙә ҡалды. Шулай ҙа күбеһе шундай уҡ рәссам төшөргән һүрәттәр барлығын төҫмөрләй алды. Ә ҡайһы берҙәре хатта мин үҙем күрмәгән бик мөһим нәмәләргә лә иғтибар итте.

Уларҙан һәр нәмәгә шикләнеп ҡараусы ҡайһы берәүҙәре, ғәҙәттә, миңә тиҫтәләгән «сетерекле» һорауҙар биреп ҡараны. Бына ул һорауҙарҙың ҡайһыларын һәм уларға минең яуаптарымды ла тыңлап ҡарайыҡ әле.

— Ай-һай, былар тик һинең хыял емештәрең генә түгелме икән? Төрлө пейзаж таштары ла бар бит әле. Уларға тәбиғәт үҙ ҡулы менән төрлө ҡәлғә ҡоролмаларын, диңгеҙҙәрҙе лә, тауҙарҙы ла, хатта кеше һындарын да төшөрөп ҡуйған була. Ундай тәбиғәт күренештәрен төрлө төҫкә ингән ҡара болоттар шәкелендә лә, йыйылып ятҡан күләүектә лә сырамытып ҡуябыҙ ҙа инде. Бында шул берәй пейзаж малахитына юлыҡманыҡмы икән?

— Эйе, ундай таштар ҙа осрай. Минең үҙемдең дә йәшмә таштарындағы һүрәттәр хаҡында күп яҙғаным бар. Бер мәл шундай родонит та тапҡайным. Унда урман сите менән шунда

ултырған бер аласыҡ та, хатта уға килеп туҡтаған юл да бик асыҡ күренә ине. Шуға ла мин тәүҙә малахит ҡапҡастағы был һүрәттәрҙе тәбиғәт уйынылыр тип уйлағайным. Тик был «пейзаждар» бик үҙенсәлекле булып сыҡты шул. Юҡ, был юлы беҙ бөтөнләй икенсе, бығаса бер кем, бер ҡасан да күрмәгән хәлгә юлыҡтыҡ. Бында бит йөҙәрләгән кеше менән төрлө хайуан һүрәттәре, бер-береһенә үҙ-ара бәйләнгән рәүештә, билдәле бер төркөмдәргә һайлап алынған булып сыҡты. Ә иң мөһиме шунда: быларҙың бит яҙыуҙары бар! Малахит ҡапҡастағы һүрәттәргә бик оҫта үреп яҙылған йөҙәрләгән һүҙҙәр барлығы асылды. Һүрәттәр тәбиғи — малахит һүрәттәре һымаҡ булһа ла, бығаса әле бер ҡайҙа ла, бер ниндәй ташта ла бындай яҙыуҙар осрағаны юҡ тип ышандыра алам, — тигәс тә шикләнеүселәрҙең күңеле урынына ултырманы.

— Ярай, — тинеләр улар. — Ә һуң һүрәттәрҙең, айырым малахит төрҙәренән нағышланмайынса, ҡулдан яһалған икәнлеген нимә менән раҫлай алаһығыҙ?

Был урында инде мин, ғәҙәттә, үҙ күҙҙәрем менән күргәнде раҫларға тырышып, нисек итеп үҙемдең криминалистарға барғанлығымды һөйләп бирәм. Мин уларҙан, ҡапҡасты ҡарап, уны инфраҡыҙыл һәм ультрафиолет нурҙар ярҙамында фотоға төшөрөп биреүҙәрен һорағайным. Ультрафиолет нурында төшөрөлгән фотоһүрәттәр хайран ҡалырлыҡ булып сыҡты. Был фотоларҙа өҫкө ҡатламдағы һүрәттәргә бөтөнләй оҡшамаған икенсе бер күренеш (һәм шундағы яҙыуҙар ҙа) асылды. Ультрафиолет нурҙарында ғына күҙгә күренә торған был һүрәттәрҙең ҡоролошо хаҡында мин һуңынан ентекләберәк һөйләрмен. Әле шуны ғына әйтеп ҡуям: ультрафиолет нурҙар ярҙамында күҙгә күренеп торған өҫкө ҡатламдан саҡ ҡына аҫтараҡ ятҡан нәмәләрҙе күрергә була икән. Баҡһаң, бөтә өҫкө һүрәттәр аҫтағыларына һуңынан ғына һалынған булып сыҡты.

Ә электрон микроскоп ярҙамында төшөрөлгән фотоһүрәттәр ҡапҡас йөҙөнөң микроструктураһы менән малахиттың үҙ структураһы араһында бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ юҡ икәнлеген күрһәтте. Тимәк, малахит нигеҙҙең өҫтө лак йәки эмаль кеүек нәмә менән буятылған да шуға һүрәттәр төшөрөлгән.

Ҡыҫҡа ғына бер мәҡәлә был табышты бөтә яҡтан тасуир итеп булмағанлыҡтан, мин тик уның ҡайһы бер өлөштәренә генә туҡталмаҡсымын.

Тик башта был малахит ҡапҡастың минең ҡулға нисек килеп эләгеүе хаҡында бер-ике һүҙ әйтеп китәйем.

Бынан ун биш йыл элек мин Урал малахитсыларының береһенән ҡара һауыты яһар өсөн берәй малахит киҫәге таоып биреүен һорағайным. Күп тә үтмәй, ул минең ҡулға килеп тә керҙе... Ул элек Петербургта боронғо әйберҙәр магазины тотҡан бер ханымда һаҡланып ҡалған икән. 20-се йылдарҙа уҡ магазины дәүләт ҡарамағына бирелгән был ханым, Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, Свердловск ҡалаһына күсерелгән булған. Бына шунда ул теге малахит ҡапҡасты һатҡан да инде.

Шулай ҙа миңә ҡара һауытын эшләргә тура килмәне. Ә ҡапҡас мин йыйған башҡа таштар менән бергә ятҡан ерендә һаман ята бирҙе.

Бер мәл дуҫтарымдың береһе уны ҡараштырған ваҡытта ғәжәп бер нәмәгә иғтибар итеп ҡуйҙы. Ҡапҡасты төрлө яҡҡа борғолап ҡарағанда, уның йөҙөндә бик сәйер кеше һәм хайуан һыҙаттарын төҫмөрләп була икән.

Һүрәттәрҙе өйрәнеү шунан башланып китте лә инде. Аҡрын-аҡрын деталдәр артынан деталдәр асыла башланы. Малахит ҡумтаны яһаусы оҫта бына тигән психолог та булған, күрәһең. Төп һүрәттәрҙе ул бик оҫта итеп йәшерә белгән.

Шулай оҫта итеп йәшерә белеү сере мажаралы әҙәбиәттә йөҙ йылдан һуң ныҡ таралған күренеш. Эдгар По тигән яҙыусының бер хикәйәһендә иң яҡшы тикшеренеүселәрҙең бер документты эҙләп хәлдән тайыуҙары һүрәтләнә. Аҫтындағын алты ай эҙләгән, тигәндәй, эҙләнгән әйбер күҙ алдарында ғына ятҡан була. Күҙгә терәлеп ятҡанды тикшереп ҡарау бер кемдең дә башына килмәй.

Малахит ҡапҡастың сере лә нәҡ шуның шикелле булды. Ундағы сәскә һүрәте күҙҙе бәйләгәндәй. Бер арбалған күҙ уның аҫтында ни ятҡанын да абайламай. Ә бында инде «Һунарсының эте ҡайҙа булған?» тигән табышмаҡлы һүрәттәрҙәге ише киң таралған бер алым ҡулланылған. Ундай һүрәттәр бөтәгеҙгә лә билдәле, әлбиттә. Буталсыҡ һыҙаттар менән яһалған бындай

һүрәттең үҙен күрер өсөн, байтаҡ баш ватырға, уны тегеләй ҙә былай әйләндереп ҡарарға кәрәк. Ә һуңынан һүрәтте ҡапыл күреп ҡалғас, бығаса күҙең сыҡҡан инеме әллә! — тип аптырарға ғына тура килә.

Билдәһеҙ рәссамдың да был алымды шундай камиллыҡҡа еткереүенә таң ҡалаһың. Хатта бөтә ғүмерен малахит нағыштары йыйып үткәргән тәжрибәле оҫтаның да күҙе арбалған: үҙәктәге сәскәнән башҡа ул бер ниҙе лә күрмәй ҡалған.

Рәссам объекттарҙы йәшереп һүрәтләүҙең икенсе алымы күҙҙең оҫкорлоғона бәйләгән. Фәҙәттә, беҙҙең тәбиғи күҙҙәр бер минутта бер мөйөш аҫтында ятҡан ике нөктәне генә күрә ала. Әммә көндөҙ йондоҙ күреүҙәй фәҙәттән тыш үткер күҙле кешеләр ҙә бар бит. Һүрәттәрҙең иң серлеләре ошо кешеләргә иҫәп тотоп эшләнгән дә инде. Һүрәттең айырым деталдәре бер секундта, хатта секундтың бер өлөшөндә ҡарала!

Хәҙер инде бик тәбиғи бер һорауға яуап бирәйек. Малахит ҡумта үҙе ҡасан, ҡайһы осорҙа эшләнгән һуң?

Малахит оҫтаһы миңә ҡумтаның ҡапҡасын биргәндә, малахиттың бында металға түгел, ә мәрмәргә йәбештерелгән булыуын әйтте. Былай итеп ҡумталарҙы тик XVIII быуатта ғына эшләгәндәр. Тимәк, был ҡапҡастың эшләнеүенә инде ике йөҙ йыл самаһы ваҡыт үткән!

Һуңынан уның йәшен билдәләй торған туранан-тура дәлилдәр ҙә табылды, тик уға тиклем айҙар буйы байтаҡ серҙәр сисергә тура килде. Был тәңгәлдә миңә Свердловскийҙағы иң яҡшы һәүәҫкәр фотографтарҙың береһе урта мәктәп уҡытыусыһы Михаил Филатов ярҙам итте. Ҡапҡасты һәм уның айырым өлөштәрен ул ҡайһы саҡта микроскоп та кәрәкмәҫлек итеп фотоға төшөрҙө. Ә икенсе бер ярҙамсым, Георгий Мельничук тигән бер студент, ҡапҡас менән уның фотоһүрәттәрен өйрәнгән саҡта «асыла» килгәндәрҙең бөтәһен дә ҡағыҙға сыймаҡлай барҙы.

Ҡапҡастың эшләнеү ваҡытын асыҡларға тырыша торғас, беҙ башта төп персонаждарҙың береһе булған адмирал мундирындағы кешенең түшендә бер вензель барлығын күреп ҡалдыҡ. Адмирал һыны сәскәнең түбәнге өлөшөнә ҡушып эшләнгән һәм ҙур ғына урынды алып тора. Вензелле һүрәттә ап-асыҡ булып «Е», «К», «Т», «Р», «Н» хәрефтәре һәм «П» индексы күренә.

«Екатерина Икенсе»! — Әбей батша — бына кем заманы икән бында! Был инде рәссамдың бынан ике йөҙ элек булған хәл-ваҡиғаларҙың шаһиты булғанлығына шик ҡалдырмай! Тимәк, рәссамдың хатта Пугачев етәкселегендәге крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашҡан булыуы ла бик ихтимал. Һәм, ысынлап та, бер нисә мәртәбә ҡумта ҡапҡасында Пугачевтың иң яҡын ярҙамсыларының береһе булған Салауат батырҙың фамилияһы — «ЮЛАЕВЪ» ҡабатлана!!!

Ҡапҡастың айырым өлөштәрендә рәссам ғәскәргә килеп ҡушылған кешеләр сафтарын да, урмандарҙа йәшеренеп ятҡан яңғыҙаҡ-партизандарҙы ла, тирә-яҡтан дошман яуын ҡағырға күтәрелгән ҡурғаусыларҙы ла һүрәтләгән. Һәм ул дошман яғыныҡыларҙы ла һүрәтләргә онотмаған. Улар араһында беҙ кивер һәм өсмөйөшлө кәпәс кейгән гренадер һалдаттарҙы ла, офицерҙарҙы ла, дворяндарҙы ла һәм, хатта, һәр төрлө дин әһелдәрен, шул иҫәптән, католик динендәгеләрен дә, күрәбеҙ.

Ҡапҡастың бер өлөшөндәге һүрәттә крепостной крәҫтиәнде һуҡтырыу күренеше лә бар. Был яза сәхнәһе үҙенең мәғәнәле һаранлығы менән йәнде тетрәткес. Һүрәттә йөҙтүбән ятҡан кешене язалайҙар. Ҡамсы тотҡан ҡатил-палач һыны бирелгән. Ғазап сигеүсе бисараның аяҡ осонда офицер баҫып тора. Ә баш осонда дәү һаҡалтай, күрәһең, старосталыр инде. Стенаға өс изгенең һүрәте эленгән. Ә күктә — был вәхшәттән ытырғанып башын ситкә борған Алла инәһенең һыны. Бында ул заман кешеһенең ҡотолғоһоҙ һәләкәткә дусар ителгәнлеге үҙенән-үҙе аңлашылып тора: тимәк, ерҙә лә, күктә лә ғәҙеллек юҡ...

Бөтәһенән дә бигерәк атҡа атланып, дөйә һәм ишәккә менеп, караван һымаҡ теҙелеп барған кешеләр төркөмө ҡатмарлы һүрәтләнгән. Алдан юл күрһәтеүсе бара. Ә уларға ҡапма-ҡаршы һалдаттар сығып баҫҡан. Каруансыларҙың береһенең башында (ул үҙе ҡаптырма башы хәтле генә!) тағы утыҙҙан ашыу кешенең башы төшөрөлгән!

Уларҙы күреүе һүрәтте 50 мәртәбә ҙурайтып ҡарағас ҡына мөмкин булды. Был портреттарҙың байтағын тарихи шәхестәрҙең билдәле портреттары менән сағыштырып ҡарау — киләсәк эше. Әммә, миңә ҡалһа, улар араһында Пугачев һәм уның иң яҡын ярҙамсыларының портреттары ла табылыр һымаҡ. Минең ҡулға

ысын-ысындан «үткән замандар китабы» булған малахит йылъяҙма килеп эләкте!

Йәшерен һүрәттәрҙең күбеһе микрофотографияларҙы барлап сыҡҡанда табылды. Улар төрлө шәкелдәге малахит йәшеллеге ҡаплап торған серҙәрҙе асырға ярҙам итте. Фотографиялар төрлө-төрлө төҫтәрҙе уртаҡ бер төҫкә килтерҙе һәм шул арҡала уҡып булмай торған яҙыуҙарҙы уҡырға ла мөмкинлек тыуҙы. Ҡапҡастағы яҙыуҙарҙы беҙ тик шул юл менән генә уҡый алдыҡ. Ул яҙыуҙарҙың ҡайһы берҙәре бормалы-һырмалы вензель стиле менән яҙылған; хәрефтәр күп ҡабатланғанлыҡтан, айырым һүҙҙәрҙе уҡыуы ла ҡыйын; етмәһә был бик ваҡ яҙыуҙарҙы бары микроскоп ярҙамында ғына уҡып була. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре.

«Ермолай ирод» («әҙәм аҡтығы Ермолай») тигән һүҙҙәр генералдың эшләпәһенә яҙылған, ә «Скареда» («ҡарун») тигән һүҙ уның яңағына сыймаҡлап ҡуйылған. Һүрәттәрҙең береһенә һәйкәл дә төшөрөлгән. Һәйкәлдә «замана авторы» тигән яҙыуҙы ла уҡырға була. Шунда уҡ бөләңгерт кенә күренгән һандар ҙа күҙгә салына. Уларҙың береһе — «1784». Һәйкәлдә ғәйрәтле бер кеше профиле лә бар. Уның аҫтында китап һүрәте төшөрөлгән һәм уға «Воль...» тигән һүҙ яҙылған. Ни икән һуң был? «Азатлыҡ» («Вольность») одаһы өсөн был һәйкәл Радищевҡамы әллә? Улай тиһәң, Радищев 1802 йылда вафат булған, ә уның «Азатлыҡ» одаһы 1783 йылда ижад ителгән. Был һүрәтте рәссамдың Радищев тере саҡта уҡ әле уның хеҙмәттәренә юғары баһа биреүе тип аңларға мөмкин.

Мәскәүҙә Тарих тыҡырығындағы Тарих музейына ҡаршы ғына йортта Радищевтың стенаға ырып эшләнгән барельефы тора. Был барельеф менән малахит ҡапҡастағы һүрәт араһында оҡшашлыҡ бик ҙур. Шуның өсөн дә был һүрәттең бик ныҡ йәшереп төшөрөлөүе тикмәгә түгел, әлбиттә. Әгәр ҙә быны һиҙеп ҡалғанда, был һүрәт өсөн рәссамдың башынан һыйпамаҫтар ине...

Беҙ таный алған яҙыуҙар әле күп түгел. Улар бөтә яҙыуҙарҙың ике процентынан да артмай. Әлегә малахит ҡапҡастағы бөтә һүрәттәрҙең ни һөйләүе хаҡында төҙөк кенә бер фекергә лә киленмәгән, шулай ҙа мин айырым фамилияларҙың һәм даталарҙың айышына ярайһы уҡ төшөнә башланым.

Унда кеше һүрәттәре генә түгел, ә тотош бер хайуандар «зоопаркы» менән әкиәт персонаждары ла бар икәнлеге асыҡланды. Шулай уҡ ен-пәрейҙәр донъяһы ла ҙур урын алған унда. Әкиәт ҡара көстәренән, иң беренсе урынды, әлбиттә, шайтан алып тора. Шайтан бында бер нисә урында, белгәнебеҙсә, үҙенә хас бөтә ҡойроҡ-мөгөҙҙәре, томшоғо-тояҡтары һәм башҡа имәнес ҡиәфәттәре менән һүрәтләнгән. Бер урында ул хатта таж кейгән дәрәжәле түрә менән дә ултыра...

Ә ультрафиолет нурҙар яҡтылығында төшөрөлгән махсус фотографияларҙа бына нәмәләр күреп булды. Уларҙы төшөрөүҙә миңә криминалист-эксперт В. В. Патрушев ярҙам итте. Тәүҙә алған фотоһүрәттәрҙә бер ҙә иҫ китерлек нәмәләр күренмәне. Уларҙа тик малахит киҫәктәренең бергә йәбештерелгән ектәре генә айырым-асыҡ күренә ине. Бынан шул асыҡланды: тимәк, яҡтыртып тороусы төп матдә булып ҡапҡастың үҙ материалы түгел (малахит үҙенән-үҙе баҙламай), ә малахит менән мәрмәр нигеҙ араһындағы ультрафиолет нурҙар яҡтыһында аҡһыл-йәшел төҫ менән баҙлап тороусы матдә ҡатышҡан йәймә хеҙмәт итә икән. Был йәймәнең берәй төрлө органик ҡушымталарҙан әҙерләнгән булыуы ла ихтимал.

Бары фотоһүрәттәрҙе махсус контраст ҡағыҙҙарға төшөргәс кенә, малахит ҡапҡас телгә килде. Ул бынан ике йөҙ йыл элек Уралда булып үткән фажиғәләр хаҡында һөйләп бирҙе. Бөтәһенән элек был фотоһүрәттәрҙә көн яҡтыһында күреп булмай торған бөтөнләй икенсе күренештәр асылды. Шундай уҡ юл менән реставрация мастерскойҙарында өҫтөнә һуңғы замандарҙа өҫтәлгән йәки үҙгәртелгән ҡатламдар аҫтынан элек эшләнгән боронғо һүрәттәрҙе килтереп сығаралар бит.

Бынан һуң, һис шикһеҙ, шул мәғлүм булды: малахиттағы ике ҡатлы һүрәт икенсе ике заманда — аҫтағыһы — (уныһын боронғоһо тип атайыҡ) элегерәк, өҫтәгенсе һуңынаныраҡ төшөрөлгән. Боронғоһонда хәл-ваҡиғаларҙың ваҡыты ла, урыны ла асығыраҡ бирелгән.

Ваҡиғаның урынын асыҡлау ҡыйын булманы. Ҡапҡастың аҫҡы ҡатында, композицияның урта тәңгәлендә тиерлек, ҙур бер баҙ төшөрөлгән. Баҙҙың өҫтөнән бейек манара күтәрелгән. Манара бер яҡҡа яҡтайып — «ауа яҙып» тора. Ә «ауа яҙып»

торған манараларҙың Уралда берәү генә булғанлығы билдәле. Ул манара, Невьянскиҙа булып, 1725 йылда Демидов бойороғо менән төҙөлгән. Тәүге мәлдәрҙә ул тирә-яҡты күҙәтеп тороу өсөн хеҙмәт иткән. Ямананы сыҡҡан был манара хаҡында ҡолаҡтан ҡолаҡҡа халыҡ араһында, имеш, Демидов бында ялған аҡса һуғыусы ҡаскандарҙы йәшереп ятҡыра икән, тигән төрлө хәбәрҙәр йөрөгән. Был аҡсаларҙы һуғыу өсөн алтын-көмөштө, имеш, Себерҙә сығарылған рудаларҙан алғандар.

Екатерина II Демидовтың был мутлыҡтары хаҡында ишеткәс, Уралға үҙенең ышаныслы кешеһен — князь Александр Алексеевич Вяземскийҙы ебәргән һәм уға ни ҡылһа ла сикһеҙ ирек ҡуйған, тиҙәр, тик Демидов, үҙенең енәйәт эҙҙәрен юйыр өсөн, был манараның баҙҙарын һыуға батырған. Был хәл, ысынлап та, 1763 йылда була.

Боронғо һүрәттә, моғайын, был фажиғәнең һуңғы күренеше. Невьян манараһының баҙындағы кешеләрҙең һыу аҫтында тонсоғоп үлеүҙәре күрһәтелгән булғандыр.

Эшселәрҙең шулай һәләк булыуына ике йөҙ йылдан ашыу ғүмер үтә. Демидовтың был йәшерен эше асылмай ҡала. Хәҙер килеп, ультрафиолет нурҙары ошо фажиғәнең нисек булғанын һөйләүсе художестволы документты асып бирмәйме һуң?!

Тәүге фрагменттарҙа беҙ ер аҫтындағы янып торған металл иретеүсе усаҡты күрәбеҙ. Иретмә көтөүсе кешеләр, әле бер ниндәй һәләкәт булырын да белмәй, вайымһыҙ ғына тора. Алғы планда ла шулай уҡ һәләкәттең яҡынлап килгәне тойолмай. Бында бары пар ҡаҙандары менән машиналар ғына күренә. Рәссам хатта һүрәтләгән нәмәләренең мәғәнәһен асыҡлау өсөн «Ф. Ф. К. Ҡаҙандары» тип яҙып та ҡуйған. Ҙур бер маховиктың өҫтөнә «1753 й.» тип уның эшләнеү ваҡыты ла күрһәтелгән. Ләкин И. И. Ползунов үҙенең тәүге машинаһын 1765 йылда эшләгән бит! Ул машина ун ике йыл алданыраҡ эшләнгәнме, әллә рәссам уның датаһын бутап ҡуйғанмы икән?

Бына панноның яңы бер фрагменты. Асыҡ шлюздар аша һыу ташҡыны шаулап килә. Һәләкәткә дусар булғандарҙың ҡото осҡан: көтмәгәндә уларҙы һыу баҫып килә... Эшселәрҙең береһе, күрәһең, ташҡын өҫтөнә йөҙөп сыға алған. Ул быуа ситендә торған тәкәббер хужаға йоҙороғо менән янай.

Ҡапҡастағы был боронғо һүрәттә «1763» тигән дата бер нисә мәртәбә ҡабатланған. Фажиғәнең көнө менән айы ғына танылып етмәй. Бер ҡарағанда «11/VI», икенсе ҡарағанда «15/III» һымаҡ күренә.

Һүҙ һәм хәрефтәрҙең яҙылышы урыны-урыны менән XVIII быуаттағы вензель сәйләнен хәтерләтә, бик ҡыйынлыҡ менән генә уҡыла. Шунлыҡтан был боронғо һүрәттә шулай уҡ уҡылмаған яҙыуҙар байтаҡ әле. Киләсәктә уларҙың байтағын, архив материалдары менән сағыштырып, ентекләп өйрәнеп сығаһы бар.

Был иҫке документ үҙенә күп серҙәр йәшергән. Ҡайһы саҡта мин үҙемде, ябыҡ камера менән күп күренештәрҙе төшөрөп тә, ҡасан ни нәмә төшөргәнен яҙып барырға онотҡан фотограф хәлендә һымаҡ тоям. «Фотографиялар»ҙы сағыштырып ҡарау, уларҙағы персонаждарҙы асыҡлау буйынса төрлө белгестәр алдында бик ҙур эштәр тора әле.

Һүҙ бит бында бик һирәк осрай торған художестволы әҫәр ижад иткән билдәһеҙ бер талант хаҡында бара. Шулай уҡ һүҙ XVIII быуат ахырындағы тетрәткес ваҡиғаларҙың художестволы йылъяҙмаһын уҡып сығыу хаҡында ла бара, әлбиттә.

Бынан тыш, бында һөйләгәндәрҙең бөтәһе лә артабанғы эҙләнеүҙәргә бер этәргес булыр тигән өмөт менән дә йыуанам мин. Шәхси йыйылмаларҙа байтаҡ малахит әйберҙәр һаҡланғанлығы мәғлүм: улар араһында шкатулкалар ҙа, өҫтәл йәймәләре лә, вазалар ҙа, ҡара һауыттары ла, тәмәке ҡумталары ла бар. Бәлки, ҡайһы берҙәрегеҙгә ошондай әйберҙәр тап булып ҡуйыуы мөмкин. Иҫкәртеп ҡуям: малахит әйберҙәрҙең боронғолоғон шунда уҡ танып алырға мөмкин — уларҙа малахит баҡыр йәки тимер нигеҙгә түгел, ә мәрмәрҙән юнылған ташҡа йәбештерелгән булыр.

XVIII быуатта яһалған әйберҙәрҙең мәрмәр нигеҙе нык булмаған, шуға күрә лә боронғо оҫталарҙың күпселек әйберҙәре йә ватылған, йә юҡҡа сыҡҡан, йә юғында икенсе әҫәрҙәр итеп эшләнә торған булған.

Шулай ҙа был серле XVIII быуат оҫтаһының башҡа әҫәрҙәре һаҡланып ҡалманымы икән? Был ҙур талант эйәһе, күрәһең, хәтәр яҙмышлы кеше булғандыр. Кем булды икән һуң ул?

Ошондай сая һәм серле эшкә ул ниндәй ниәт менән тотондо икән?

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, минең ҡулға килеп эләккән малахит ҡапҡас был хаҡта бер ни ҙә әйтмәй. Бәлки, ул әле башҡа серҙәрҙе лә һаҡлайҙыр? Бөтәһе лә асыҡлап бөтөлмәгән бит әле. Был хазина тағы ниҙер хаҡында һөйләр икән?

А. А. Малахов,
геология минералогия фәндәре докторы.
Салауат һәм Рәми Ғариповтар тәржемәһе.
1971.

* * *

Бабич

Башҡорт халҡының атаҡлы шағиры Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 70 йыл тулды. Шағирҙың яҡты исемен күңел түрендә һаҡлаған халҡыбыҙ уның ижадын бөгөн оло хөрмәт менән иҫкә ала.

Бабичтың ғүмер һәм ижад юлы иҫ киткес ҡыҫҡа, ҡатмарлы һәм фажиғәле булды. Ул 1895 йылдың (иҫкесә) 2 ғинуарында Өфө губернаһының Бөрө өйәҙендәге Әсән ауылында тыуа. Башланғыс белемде атаһы Мөхәммәтзакир уҡытҡан ауыл мәҙрәсәһендә ала. Ун биш йәшендә ҡазаҡ далаларында мулдәкә булып йөрөй, унан, 1911—1916 йылдарҙа Өфөләге «Ғәлиә» мәҙрәсәһендә уҡығандан һуң, Троицкиҙа уҡыта һәм матбуғат эшенә сумып китә. 1917 йылда Ырымбурҙа сыҡҡан «Ҡармаҡ» журналының секретары булып эшләй. Шунан һуңғы яҙмышы Башҡорт Автономиялы Совет республикаһының тыуыу тарихындағы иң драматик ваҡиғаларға бәйләнеп китә һәм, 1919 йылдың 28 мартында Башревкомдың типографияһын Темәстән Мораҡҡа күсереп алып килгән ваҡытта, революцияның яуыз енәйәтселәре ҡулынан һәләк була.

Ләкин 24 йәшлек революция шағирының 9 йыл эсендә яҙып өлгөргән ижад өлгөләрен йылдар ҙа, шәхес культы ла халыҡ күңеленән юя алманы. Сөнки ул халыҡ өсөн янды һәм халыҡ та үҙенең йондоҙло улы менән хаҡлы ғорурлана.

Етмешең менән, үлемһеҙ Бабич!

Хаммар



Шағирҙың замандаштарына төрлө йылдарҙа яҙған ҡайһы бер хат-сәләмдәре

Мәрйәм апа!

Хатығыҙ өсөн бик ҙур рәхмәт. Мин ауылға ҡайтҡас уҡ һеҙҙән хат көтә инем.

Бына мин урманға һал ағыҙырға барып ҡайтыу менән, ҡустылар:

— Мәрйәм апанан хат килде, — тинеләр.

— Ниндәй Мәрйәм апа?

— Өфөләге.

Әйтерһең, беҙҙең семья кешеһенән!

Бик күңелле булды.

Ауылға ҡайтыу менән режимды һаҡларға тырыштым. Иртән, торғас уҡ, Йүрүҙәнгә һыу инергә йүгерәм. Рәхәт һәм күңелле, әйтерһең дә, бында ҡайтҡас, ҙур баҫымлы диңгеҙ аҫтынан атылып килеп сыҡҡан кеше кеүекмен.

Ҡайтыу менән «хужаның ишәгенә» әйләндем (ҡунаҡ). Ауыл халҡы бөтөнләй ҡыҙыҡ тойола. Мин уны әле ни тиклем белмәгәнмен! Һәр бер кешегә, уның һүҙенә ҡомһоҙланып бөтә иғтибарҙы бирәм. Кешеләр, быяла аша күренгән һыу кеүек, асыҡтар һәм ябайҙар. Уларҙың бөтә эске донъяһын рәхәтләнеп уҡып сығаһың. Горькийҙың кешеләрҙе ни тиклем нык өйрәнгәнлеген мин көндән-көн асығыраҡ күрә барам. Минеңсә, яҙыусыға барыһынан элек кәрәклеһе: тормошто күҙәтә белеү һәләтлеге.

Философия етте.

Ике ҡабат Ҡаратауға һалға барып ҡайтыу минең өсөн М. Кәримдең шиғырҙарын уҡығандағы кеүек тәьҫир итте.

Был эштә лә мин ни тиклем һуҡыр булғанмын! Һалдың бөтә өлөштәренә тиклем төпсөшәм. Был ағайҙарға ҡыҙыҡ тойола. Улар белмәгәнде үҙемсә атайым. Һалды таралмаҫҡа бәйләп

рифмалаштыралар. «Сөнки рифма фекерҙе бер-береһенә бәйләй. Рифмаһыҙ шиғыр тарҡала» (Маяковский).

Ҡояшта янып бешеүгә генә лә бында хаҡ түләрлек. Ә Йүрүҙән таң ҡалдырғыс бер ҡат күреүҙән! Урмандың төнөн, ундағы мәк кеүек алланып, таң атыуын, ҡояш сығып, бер-береһенә күңелле әкиәт һөйләшеп ултырған ҡарағайҙарҙы, «уҫаҡ-егеттәрҙе», «ҡайын-ҡыҙҙарҙы» ҡыҙыл күлдәк кейҙергән һәм иркәләгән көмөш ысыҡлы иртәләрен күҙәтеү — үҙе бер ғүмер. Әйтерһең, кешеләрҙе таң ҡалдырырлыҡ шиғыр яҙғандан һуң булған рәхәтлек!

Ҡыҙыл сәкмән кеүек йәйелеп ятҡан еләклек, ҡыҙыл муйыл, телеңде йоторлоҡ татлы сейә урмандары! Һулап туймаҫлыҡ саф һауала сәскәләрҙең хуш еҫтәре, сәскәләр араһында тәгәрәп, энә осондай ҙа болото булмаған зәңгәрһыу күккә ҡарап ятыу...

Юҡ, Мәрйәм апа, көнләшә башларһығыҙ. Яҙмайым.

Сәләмәтлек үпкәләрлек түгел. Баш бөтөнләй ауыртмай. Артыҡ яҙырға тура килмәй. Тик һуңғы көндәрҙә (экзамендарҙа) булып үткән ваҡиғаларҙы ғына «Йәшенле йәшлек»кә теркәй барам. Бында бер ҙә тыныс урын тапманым. Аҙаҡтан үҙемә бик оҡшаған «кабинет» эҙләп таптым: бөтөнләйгә «юғары этажға» — өй башына күсендем. Шунда уҡыйым, шунда әҙәбиәт яратҡан иптәштәр ҙә киләләр. Шунда уҡ «йоҡо бүлмәһе». Ҡайһы саҡта йоҡларға ла өлгөрөп булмай, ауылдың уҫал әтәстәре ҡысҡырыша башлайҙар. Тиҙерәк ятырға ашығам.

Иптәштәр миңә бөтөнләй икенсе төрлө кеше итеп ҡарайҙар. Мин уларға «Пилот яҙмалары»н уҡырға бирәм.

Минең һәр көндә була торған тормошом уларға әллә нисек тойола. Миңә уларҙың ғәжәпләнеүе бөтөнләй көлкө генә.

— Ысынлап та, оҫканһың бит! Нисек итеп осоп төшмәгәнһең!

— Ҡурҡыныстыр, әй?

— Нимәләр уҡыйһың?

«Абай»ҙы дауам итәм. Бик әкрен уҡыйым. Бөтә ваҡлыҡтарына тиклем ентекләп уҡып ҡарайһым килә. Унан һуң — Сталиндың тел белеме тураһындағы мәҡәләләре. Аңлашылмаған нәмәләр бик күп. Уларҙы миңә «Толковый словарь» менән уҡырға кәрәк ине. Ләкин бында «Русса-башҡортса» һүҙлек тә табыу мөмкин түгел. Газеталар ҙа бик һуңлап килә.

Миңә бөтөнләй ғәжәп:

«Күккә күтәрелгән Марр

Бөтөнләйгә тар-мар...»

Тел тураһында мин ҡайһы бер мәҡәләләр уҡыған инем: бына хәҙер үҙемдең дә «идеалист» булғанымды һиҙҙем.

Ярай, тағын мин икенсе яҡҡа шыуып барам. (Әйтерһең дә мин һеҙҙең менән һөйләшкәндәге кеүек.)

Мәрйәм апа, һеҙ был яңылыҡ тураһында ныҡлап ҡына белеп барһағыҙ, яҡшы булыр ине.

Айһылыу тураһында бер ни ҙә белмәйем. Тик уның тураһында хыялдар һәм хыялдар... һәм уның, бәхеткә ҡаршы, өс рәсеме... Урманға барғанда, мин уларҙы һыуға ла төшөрөп бөттөм. Ләкин улар иҫән әле.

«Өсөгөҙ ҙә миңә
бигерәк матур,
Әйт, ҡайһына,
иркәм, булайым?..

Мәрйәм апа, Пушкин һәм «Абай» өсөн мең-мең рәхмәт. Бигерәк тә Сафинға ла биреп яҡшы эшләнегеҙ. Мин быныҡ өсөн уның үҙенән дә күберәк шатландым. Бит был китаптан да ҡәҙерле, матур һәм ҙур, юғалмай торған ниндәй бүләк булырға мөмкин һуң?

Мәрйәм апа!

Уҡыусығыҙҙан күп сәләм!

Был хатты мин һеҙгә Волга буйындағы Горький өлкәһендәге бер ауылдан, Горькийҙың үҙе кеүек сәйәхәт итеп йөрөгән ерҙән яҙам.

Һаманға тиклем яҙмай тороуым өсөн ғәфү итегеҙ, Мәрйәм апа.

Мәскәүҙә ун көн йәшәнем. Ошо ун көн эсендә (һеҙгә, әлбиттә, маҡтанырға мөмкин) мин бөтә фәндәрҙән дә, немец теленән башҡа, экзамендарҙы отличноға тапшырҙым. Немец теле «4» булды. Экзамендар алты көн рәттән барҙы, әҙерләнергә мөмкинлек бирмәнеләр. Мин бик ныҡ ҡурҡҡан инем. Бигерәк тә әҙәбиәттән тапшырыр алдынан ғүмеремдә бер ҡасан да булмаған ғәҙәттән тыш тулҡынланыу менән яндым. Сөнки бында минең тормош юлым хәл ителәсәк ине. Бик ныҡ тикшерҙеләр. Ләкин мин нисек кенә булһа ла, Башҡортостан исеменә, үҙемде әҙәбиәттән уҡытҡан уҡытыусыларым исеменә тап төшөрмәҫкә

тырыштым һәм, әҙәбиәттән экзамен тапшырып, ғүмеремдә беренсе тапҡыр ҡәнәғәт булдым. Сөнки быға тиклем мин үҙемде нисектер алдашҡан кеше кеүек тоя инем. Ә үҙеңде шулай тойоу ни тиклем ауыр. Миңә хәҙер, быға тиклем бер ҡасан да яҙа алмаған шиғырҙы яҙғандан һуң булған рәхәтлек кеүек, нисектер күңелле ине. Был ун көн эсендә мин бик күп нәмәләрҙе күргә өлгөрҙөм. Болгарҙың да, карелдың да, молдовандың да, төркмәндең дә шиғырҙарын тыңланым.

Барған көндә үк мин бер Григорий исемле болгар менән бергә йоҡланым. Был минең өсөн онотолмаҫ төн ине. Сөнки, уйлап ҡарағыҙ, Мәрйәм апа, Уралдың бер башҡорто менән Карпат артының болгары бергә, бер туған кеүек, бер койкала йоҡлап яталар.

— Һыйырбыҙмы һуң? — тине болгар.

— Беҙҙә бер мәҡәл бар, — тинем мин уға, — күңел тар булмаһа, урын тар булмай.

— Яҡшы мәҡәл! — тине ул. Иртә менән, йыуынған саҡта, ул быны үҙе ҡабатланы.

14 августа Чайковский исемендәге консерваторияның Ҙур залында Корея яҙыусылары менән осрашыу булды. Фадеевтан башҡа мин бөтә яҙыусыларҙы хәҙер үҙ күҙем менән күреп, үҙ ҡолағым менән ишеттем. Һәм шул уҡ кисәлә Рамазановты осраттым! Ни тиклем ҙур байрам ине был көн минең өсөн. Башҡорт телендә рәхәтләнеп һөйләшеп ултырҙыҡ. Икенсе көндә ул минең «Йәшлек»те уҡыны һәм беҙ бик ныҡ дуҫлашып киттек.

Шул уҡ ун көн эсендә мин Островский музейын да ҡараным.

Шулай итеп, минең һәр бер көнөм онотолмаҫ көндәргә әйләнә башланы.

Һуңғы экзаменды биргәс, комиссияға саҡырҙылар. Ун икеләп кеше уртала торған башҡортто тишерҙәй итеп ҡарай.

— Отметкалары нисек? — ти директор секретарға.

— Беҙҙең отличник, — ти секретарь.

— Беҙҙә уҡырға бик теләйһеңме? — тине директор ентекләп. Мин оҙаҡларға теләмәнем.

— Башҡаса юл юҡ миңә, — тинем. Көлөштөләр.

— Хәҙер ҡайтаһыңмы?

— Юҡ, минең ҡайтырға аҡсам да юҡ, детдом да ябыҡ миңә. Берәй совхозға эшкә китәм.

Ләкин эш миңә бында ла таптылар. Маляр! Мин тамаҡ өсөн шатланып риза булдым.

Ә Мәскәүҙән 30 км. алыҫлыҡта булған, урман араһында булған Тренев дачаһына ҡайтҡас, мин, тик үҙемдең генә тороп ҡалыуҙы күреп, бик күңелһеҙләндем. Кистән үк йоҡларға ятып, икенсе кистә генә уянып киттем. Экзамендар, көнөнә бер генә ҡапҡылап, ураҙа тотоп йөрөүҙәр бөтөнләй миңә хыянат итергә теләгәндәр.

Ярай, мин был турала яҙырға яратмайым.

Һуңғы ваҡытта, теге вечерҙан һуң, Ю.М. мине бөтөнләй сит кеше күрҙе. «Уҡытыусы» һәм «Тәрбиәсе» шифырҙары өсөн ул бигерәк тә ҡырағайланды. Ләкин мин «Директор» шифырын яҙырға булдыра алмай инем. Мин ел өргәнгә хәрәкәт итеүсе болот түгел һәм тейешһеҙ урынға ул ямғыр ҙа яумай. Һәм мин 371 һум менән Мәскәүгә йәшәргә сығып киттем. Ул, әлбиттә, юлға етте...

Ә донъяла, Мәрйәм апа, ниндәй яҡшы кешеләр ҙә бар.

Йоҡлап торған кистә янға бер рус шағиры килде лә:

— Ниңә былай күңелһеҙ? — тине. Мин һөйләп бирҙем.

— Һин ҡурҡма, — тине ул, минең экзаменационный листы күреп. — Һин бит барыһын да яҡшы биргәнһең. Уҡырһың. Бына өҫтөңә пальто ла, башыңа бүрек тә алырбыҙ. Барыһы ла булыр. Бергәләп йәшәрбеҙ.

Был бер балаға әйтелгән кеүек булһа ла, миңә бөтөнләй рәхәт һәм ҡараңғы болотло көндә, ҡапыл ғына ҡояш сығып, яҡтырып киткән кеүек ине.

— Мин һине өс көн инде күҙәттем... — тине ул. — Әйҙә, сығып йөрөп керәбеҙ. Яратам мин яҡшы кешеләрҙе.

Беҙ урман араһындағы юл буйлап киттек. Төн ине инде. Ул үҙе бында 3-сө курста уҡый, әле Ҡырымдан ижади командировканан ҡайтып бара ине. Федор Сухов.

Ул минең менән бик ныҡ ҡыҙыҡһынды. Минән башҡортса шифырҙарымды уҡыуҙы һораны, бик ныҡ Горькийҙы яратыуымды ла белде. Уның хикәйәләрен яттан һөйләне.

— Әйҙә, мин һине Горькийҙың тыуған еренә алып ҡайтам. Горькийҙа музейҙарға, Каширин йортона барырбыҙ, — тине ул. — Уҡыу башланғансы, беҙҙең ауылда тороpһоң, — тине ул. — Яҙырға, уҡырға рәхәт унда. Алма ла күп беҙҙә!

Горькийҙың тыуған ере!

Мин бөтә йөрәктән шатланып риза булдым.

Киттек. Горькийҙа Владимир Половинкин тигән шағир менән таныштым.

Горький, Маяковский, Есенин, Блок тураһында Федор миңә бөтөнләй яңы нәмәләр һөйләне. Һәм мин үҙемдең әле ни тиклем һуҡыр икәнлегемде күрҙем. Һәм мин бындай кешеләр менән булған өсөн үҙемде ни тиклем бәхетле лә һиҙҙем.

Каширин өйө өсөн пароходтан тороп ҡалып, икенсе көндә Волга буйлап үҙем генә киттем.

Һәм бына мин Федорҙарҙың ауылында Владимир булып йөрөйөм.

«Йәшлек»те яңынан күсереп яҙҙым, күп кенә урындарын ҡыҫҡарттым, яңынан эшләнем.

Мәрйәм апа! Был хатымды мин һеҙгә Волга оҙонлоғо итеп яҙҙым. Көлмәгеҙ. Сөнки башҡаса миңә улай яҙырға тура килмәйәсәк, икенсенән, минең һеҙҙе шул тиклем күрәһе килә һәм һағындырҙы. Һеҙҙең һөйләгәндәрҙе яңынан ҡат-ҡат тыңлайным килә. Уҡытыусыларҙан миңә бер кем дә шулай яҡын булманы. Һеҙ миңә яратҡан уҡытыусым да, бөтә нәмә тураһында һөйләшә алырлыҡ дуҫ та һәм ниндәйҙер иң яҡын күргән бер туған апа ла инегеҙ. Һәм мин һеҙгә яҙмаҫҡа хаҡһыҙмын.

Мәрйәм апа, был хатты алғас та күп итеп хат яҙығыҙ.

Нисек ял иттегеҙ? Ниндәй китаптар уҡынығыҙ? Быйыл нисәнсе кластарҙы уҡытаһығыҙ? Ғәйбәт күпме?

Әгәр ҙә быйыл X «а» класты алһағыҙ, миңә был бик ҙур шатлыҡ булыр ине. Сөнки һеҙ Айһылыуға бик нык тәьҫир итә алған булыр инегеҙ. Унан уны яҡшылап өйрәнер ҙә, уның менән һөйләшә лә алған булыр инегеҙ.

Әҙәбиәттән дә Айһылыуҙы һеҙҙең уҡытыуығыҙ кәрәкле. Ни өсөн? Быны һеҙ минән яҡшы белəһегеҙ.

Юҡ, мин уның тураһында уйламайынса булдыра алмайым. Ул берәү генә һәм башҡаса булмаясаҡ. Уға булған тойғолар башҡаса бер ҡасан да кире ҡайтмаҫтар. Хатта мин ни тиклем ғазапланыуҙарҙы ла һағынам. Мин тик уның өсөн генә Өфөлә ҡалырға уйлаған инем. Ләкин мин уға ғына түгел. Ә тик ул ғына минең йөрәгемә тәрәндән тәрәнерәк инә бара. Ул мине ни тиклем көсһөҙ итһә, шул тиклем көслө лә итә. Минең бында инеүгә лә ул уҡ ярҙам итте.

Мәрйәм апа, «Сигнал» нисек тә сығып барһын ине, һәм уның оформлениеһын яҡшыртыуҙы талап итергә кәрәк (дирекциянан).

Мәрйәм апа, миңә Сәләмдең, М. Кәримдең, Р. Ниғмәтиҙең йыйынтыҡтары һулар һауа кеүек кәрәкле ине. Һеҙ уларҙы таба алмаҫһығыҙмы?

Ярай, хушығыҙ, Миҙхәт ағайға һәм Гүзәлгә күп сәләм. Эшегеҙҙә ҙур уңышлыҡтар теләп, һеҙҙең Рәми һәм Володя.

25/VIII—50.

* * *

Мәрйәм апа! Һеҙҙең хатығыҙҙы күптән көтә инем инде. Һәм уны алыу миңә байрам булды. Барыһын да яҙғаныҡыҙ өсөн бик ҙур рәхмәт. Ләкин мин һаман да яуап яҙырға ваҡыт таба алғаным юҡ. Үҙемдең тормош тураһында һеҙ үҙегеҙ ҙә белəһегеҙ. Сөнки студент тормошон һеҙ үҙегеҙ ҙә аҙ кисермәгəнһегеҙ. Тик өҫтәүенə шул: иртән торғас, поезға 2 километр йүгерергə кәрәк. Унан һуң поезда ҡалаға тиклем 30 километр һ. б.

Ләкин барыһынан да бигерәк йөрәк шуға әрней: ваҡыт наҡыҫ, аҙ уҡыйым. Был минең өсөн ғəҙəттән тыш ҡурҡыныс: бит мин бындағы иптəштəргə ҡарағанда ни тиклем аҙ белəм, ни тиклем һаймын, ни тиклем һуҡырмын əле. Һəм улар менəн һөйлəшеү өсөн ни тиклем ярлы минең телем. Бынан да ауыр ғазап юҡ.

Мәрйәм апа, быйыл ғына парталарҙан айырылып, бер үҙем был уҡыу йортона мин иртәрәк килеп ингәнмен кеүек. Бында уҡыр өсөн миңə пединституттың бер-ике курсын бөтөрөргə кəрəк булған. Ләкин һəр бер тыңлаған лекция миңə быға тиклем бөтə белгəндəрҙе — бер көндə генə бирə, һəм мин үҙемдең шатлығымды бер ҡайҙа ҡуйырға белмəйем. Яңыны һəм яңыны белеүең, быға тиклем һинең йөрəгеңдə ғазаплап килгəн һорауҙарға яуап табыуың бейек һəм текə таш ҡаялар кейенгəн тауға менеүең һəм үтелгəн юлыңа ҡарап, уның үкенескə үтелмəгəнен күреү — ни тиклем рəхəт йөрəгеңə. Тау бейек, менгəн һайын, ул тағы ла бейегерəк. Уның башына менеп бөтөү мөмкин түгел. Һəм юлдың сикһеҙ булыуы ни тиклем шатлыҡ...

Бына тел белеменəн профессор Реформатскийҙың лекцияһы. Минең өсөн иң ҡыҙыҡлы лекция. Мин уны, урынымдан ҡуҙғалмайынса, аҙналар буйы тыңлап ултырырға əҙер. Минең алдымда ниндəйҙер бөтөнлəй яңы донъя асылған кеүек. Мин уның ауыҙынан сыҡҡан һəр бер һүҙҙе, уның һəр бер хəрəкəтен йөрəгем менəн йотам. Профессор үҙенең төҫө, бөтə хəрəкəттəре менəн Ленинға оҡшаған (Ленинды мин Горькийса күрəм). Осло ғына ерəн һаҡаллы һəм ялтыр башлы, танауы һəм күҙҙəре нəҡ Ленин. Был баш миңə, əйтерһең дə, ҡояш һəм мин — көнбағыш.

Был «ҡояш» ниндәй хәрәкәт яһаһа, «көнбағыш» та уның артынан башын бора.

Лекциянан бөтөнләй яңырып, еңеләйеп һәм ҡайҙалыр осаһың, осаһың килеп сыға. Шул минутта һинән дә бәхетле кеше юҡ кеүек донъяла. Һиңә шундай хазиналарҙы биргән өсөн был кешеләргә ниндәйҙер матур, ғүмер буйына онотолмаҫлыҡ бер эш эшләйһең килә. Ләкин һиңә әле үҙеңде был эште башҡара алырлыҡ дәрәжәлә түгел итеп һиҙеү күңелһеҙ була.

Тел менән ҡыҙыҡһыныу тураһында, Мәрйәм апа, мин һеҙгә ауылдан да яҙған инем. Нәмә ул тел? Нисек һуң кешеләр һөйләшә башлағандар? Был турала күп кенә мәҡәләләрҙе, Энгельстың брошюраһын, Горькийҙың, А. Толстойҙың тел тураһында фекерҙәрен уҡыу миндә ғәҙәттән тыш ҡыҙыҡһыныу уятҡан ине.

Телде фәнни яҡтан белергә теләп, Маррҙы уҡырға әҙерләнгәндә, «Правда» Сталиндың бөтөнләй яңы һүҙҙәрен ишеттерҙе. Һәм бына мин тел белеменең яңы осоро башланған саҡта уҡый башланым.

Реформатский — электән үк Маррҙы танымаған һәм аракчеевсылыҡ режимы аҫтында ауыр осорҙо кисергән кеше. Хәҙерге вуздарҙа берҙән-бер ҡулланыла торған китап уныҡы. Һәм миңә шундай кешенең хеҙмәттәрен тыңлау — бәхет. Уны һәм уның уҡыусыһы Левинды Маррҙы танымаған өсөн институттан ҡыуырға һәм партиянан сығарырға иткәндәр һ. б.

Мәрйәм апа, мин тик бер профессор тураһында ғына яҙҙым. Бөтәһе лә уларҙың миңә шулай уҡ яҡын. Әҙәбиәт теорияһынан Поспелов (автор) үҙе лекция уҡый. Ләкин миңә Харис* та кәрәк әле. Кистәрен уның менән һөйләшәбеҙ.

Мәрйәм апа, минең әле ашҡыныр көндәр алда тора: тиҙҙән Фадеев, үҙенең тәжрибәләрен йәш яҙыусылар менән уртаҡлашып, спецкурс буйынса лекциялар уҡыясаҡ.

Мин поэзия бүлегендә. Ләкин проза ла, критика ла, балалар әҙәбиәте лә бик ныҡ ҡыҙыҡһындыра мине. Барыһына ла беҙҙең әҙәбиәт һыуһаған. Ә барыһына ла булып булмай. Тиҙерәк, тиҙерәк минең янға иптәштәр, ең һыҙғанып эшләргә ашҡынған иптәштәр килһен ине!

Мәрйәм апа, минең хәҙер иң ныҡ уйланған саҡ. Ҡайҙа һуң атларға, нәмәнән һуң башларға? Минең башта шиғыр менән яҙылған роман да йөрөй; проза менән яҙылған «Йәшенле йәшлек» тә ҡайнай? Дәүли һәм Сафин** музыкалары менән ҡушылған музыкаль драма ла күҙ алдында; Сәләм, Ниғмәти

һәм Кәрим ижадтарын тикшереү буйынса ҙур хеҙмәт тә; балалар өсөн яҙылған (туризм темаһына) «Дивизия эҙенән» повесы ла!..

Мәрйәм апа, бәлки, һеҙ, ниндәй тиле хыялсы беҙҙең был Рәми, тип көлөп тә бөтә алмаҫһығыҙ. Ләкин миңә был хыялдар ғына түгел — ғазап: уларҙың һәр бер геройҙары ҡайһы саҡта, төндәр буйы йоҡларға ирек бирмәйенсә, бөтөн бер тормошто үтеп сығалар. Улар мине, урамдан ашығып китеп барғанда, саҡ ҡына машина аҫтына илтеп тыҡмайҙар... Мин үҙемде алйот кеше кеүек итеп тоя башлайым. Әгәр ҙә мин уларҙы тыуҙыра алмаһам, ни тиклем ҡурҡыныс! Мин донъяға, әйтерһең дә, тик уларҙы тыуҙырыр өсөн генә тыуғанмын... Минән уларҙы күпме кешеләр һыуһап көтә төҫлө. Мин уларҙы тиҙерәк аҡсаһыҙ заманды яҡынайтыу өсөн эшкә егәһем килә...

Мәрйәм апа! Һеҙ «ҡәләм»дәге «телһеҙ аң» тураһында хаҡлыһығыҙ. «Һуҡыр» шифырҙағы фекерҙең дөрөҫлөгөн күрә. Ләкин минең беренсе һайлап алған һүҙҙәр үҙемә ғәҙәттән тыш яҡын булалар. Бит мин уларҙы фекерем менән генә түгел, ә йөрәгем менән дә һайлайым. Был бәләкәй генә «телһеҙ» һүҙен алыштырыу миңә, әйтерһең дә, беренсе мөхәббәте ниндәйҙер башҡа нәмәгә алыштырыу кеүек тойола. Әлбиттә, был закон түгел. Һәм мин уҡыусыларымдың дөрөҫ фекерен тыңларға тейешмен.

Беренсе мөхәббәт тә телгә алынды бит әле. Ни тиклем ул ғазаплы булғанда ла йөрәккә яҡын. Бер ваҡытта ла кире ҡайтмай һәм ҡабатланмай торған кисерештәр...

Мәрйәм апа, миңә «Абай»ҙы уҡығас, «Бабайҙы» тағын да нығыраҡ аңланым. «Абай» өсөн, апа, мин һеҙгә тағын да рәхмәт әйтәм.

Ни тиклем гүзәл китап! Һәм уның тураһындағы һеҙҙең фекерҙәрегеҙ ҙә — минеке. Ҡаҙаҡ халҡының иң дөрөҫ тарихы һәм энциклопедияһы! Һәм ниндәй гүзәллек менән яҙылған эпилог! Кеше аҡылының шундай еңеүен, таланттың шундай көсөн кисереүҙән минең шатлығымдан илағым килә. Мин «Абай»ҙы оҙаҡ уҡыным. Ләкин был уҡыу Маниловтың уҡыуы тип уйламаҫһығыҙ. Был уҡыу — ҙур уҡыу йортон бөтөрөү һәм ҡәләмеңә күп аҙыҡ биргән гүзәллек шишмәһе.

(Гүзәл һүҙе булғанда, Гүзәлгә лә, уның атаһына ла күп сәләм!). «Абай»ҙы уҡыу, миндә ҡаҙаҡ телен өйрәнеүгә бик ныҡ ҡыҙыҡһыныу уятты. Абайҙың шифырҙарын тәржемә иткәндә,

ни тиклем яҡшы булыр ине!.. Мин уның шиғырҙарын татарса уҡығаным бар. Айһылыу ҙа уны минән алып уҡыған ине.

Күп ваҡыт үтте инде уға.

Айһылыу! Мин уның беренсе хатын, беренсе һүҙҙәрен алып аҡылдан шашып шатландым. Һүҙҙәре менән ул рәсем дә ебәргән. Ләкин ул йөрәген дә ебәргәнме, юҡмы? — белмәйем. Шулай ҙа мин уның йөрәген алған кеүек булдым. Үҙенә бөтөн бер том яҙып ебәрҙем. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һеҙ уны уҡытмайһығыҙ икән.

Мәрйәм апа, бында мин институттан башҡа күп кенә Мәскәү халҡы менән таныштым. Әсғәттең* бында элек эвакуация ваҡытында Башҡортостанда торған таныш уҡытыусыһы бар — Нина Акимовна, ҡыҙы Галя (минең менән йәштәш). Ял һайын улар үҙҙәренә саҡыралар. Уларҙың таныштары — беҙҙең дә таныштар: Ева Абрамовналар, сығыштары яғынан еврей, үҙҙәре инглиз телендә һөйләшәләр. Сөнки еврей погромдары ваҡытында улар Америкаға эмиграцияға киткәндәр. Подпольный эш алып барғандар. Е. А. үҙе востоковед, уның иптәше Боря Персидский, Мәскәү фабрикаларының береһендә директор. Бик юғары белемле. Кешеләр һәм бик ныҡ искусствоны яраталар, уларға артистар ҙа килеп йөрөй (Пушкин театрынан). Галя минең йырҙарҙы роялдә уйнай (нота буйынса). Яңыраҡ ҡына күмәкләп Коломенскоелағы музейға барҙыҡ, Горкала булдыҡ. Уларға тағын да йәштәр килә: Рәм, Юра, Тамара һ. б. Ләкин миңә ҡыйын: улар араһында үҙемде мин ғәҙәттән тыш тупаҫ итеп тоям. Улар мине шағир, литинституттың студенты итеп күрәләр.

Мәрйәм апа, һеҙгә Мәскәүгә килгәс төшөлгән рәсемде ебәрәм.

Хушығыҙ! Күп итеп хатығыҙҙы көтөп, Рәми.

Мәскәү, 20/X —50

Мәрйәм апа!

Бына һеҙҙең переводты алдым.

Һәм донъяла һинең турала әсә кеүек ҡайғыртҡан кешенең барлығын тойоу, йөрәккә ни тиклем рәхәт! Ни тиклем күңелле!

Мәрйәм апа, мин аҡса өсөн түгел, ә бына шул сәғәттә бөтә йөрәгем менән ерҙә шундай яҡты күңелле кешеләрҙең барлығына шатланып бөтә алмайым. Рәхмәт. Аҡса миңә тормош күгендә ҡояш булып янмай. Һеҙ быны бөтә йөрәктән беләһегеҙ, апа.

Ә кешенең кешелеклегенән дә ҡиммәтле нәмә юҡ. Ул ҡағыҙҙарҙы мин бына хәҙер үк бер минутта юҡ итә алам. Ә һинең йөрәгеңдә ғүмер буйы һыуынмай торған йылы Уҡытыусы образының һәр ваҡыт һағынып иҫкә ала торған иҫтәлеген юҡ итеү мөмкин түгел.

Яңы ғына Айһылыуҙың хатын алып тиле кеүек шатландым. «Рәми! Ебәр һин миңә «Йәшенле йәшлек!»те» — тигән. Үҙенә бөтөн бер повесть яҙҙым. Ошо көндәрҙә Маршак, Твардовский, Асеев һәм Фадеевтар менән осрашыу булды. Һәм минең менән бергә Мәрйәм апаның, дуҫтарымдың бында булмауы ни тиклем үкенесле. Бөгөн Колонный залда тағын осрашабыҙ. Миңә парторганизациянан саҡырыу билеты бирҙеләр.

Үҙеңде һаҡла! Был һүҙҙәрҙең аҫтына кеше күңеленең йылылығы һыҙылған. Минең шатлығымдан күңелем тула...

Мәрйәм апа, кисәге (19 октябрь, 1950) минең тормошомдоң онотолмаҫ бер көнө булды. Мостай Кәрим менән беренсе мәртәбә осраштым, ғүмеремдең һуңғы көнөндә лә онотмай торған Кешене таптым!

Һеҙ, әлбиттә, 19 октябрҙең минең өсөн нәмә икәнлеген аңларһығыҙ.

Осрашыу «Европа» гостиницаһының 307-се номерында булды. Һәм мин уның ни өсөн Мостай Кәрим икәнлеген аңланым.

Ул минең шиғырҙарҙы ҡат-ҡат уҡыны. Ниндәй иғтибар, ниндәй йылылыҡ, ниндәй һөйөү был Кешенең йөрәгендә!..

Минең бик күп етешһеҙ яҡтар күрһәтелде. Был бөтә йөрәктән (искренно) һөйләшеүҙе мин беренсе мәртәбә осраттым. Һәм көнләштем уға.

Мәрйәм апа, минең рәхмәтем генә аҙ уға. Күп рәхмәт әйтегеҙ һәм ҡулын ҡыҫығыҙ уның. «Ниндәй гүзәл бер көн булғанда ла кеше булып ерҙә йәшәүең!..»

Һеҙҙең Рәми.

* * *

Мәрйәм апа!

Хатығыҙҙы алып, шатланып бөтә алманым. Әлбиттә, һеҙ миңә ҡарата метафора ҡулланаһығыҙ.

Шулай ҙа мин һеҙҙең хатты алыу менән, шатланып, дәртләнеп, көслөләнеп, активыраҡ булып китәм.

Бына хәҙер Илья Эренбургтың сығышы башлана... «Психология творчества».

Мәрйәм апа! Һеҙ ҙә булһағыҙ ине бында! Ни тиклем гүзәл кеше был Эренбург! Мин уны Фадеевҡа ҡарағанда ла тулҡынланыбыраҡ тыңланым. Ғәҙәттән тыш тәрән белемле, төрлө яҡлы юғары культуралы кеше. Беҙҙең менән осрашҡан бер яҙыусыны ла әле мин былай күрмәнем.

Ләкин был осрашыуҙан һуң мин бөтөнләй күңелһеҙләнеп ҡалдым. Нисектер үҙемде тамырынан йолҡоп алынған үсемлек кеүек итеп һиҙҙем. Мин нисектер яңылышҡан кеүекмен. Был институтты мин дөрөҫ һайланыммы һуң? Сөнки мин, тормошто әле бөтөнләй күрмәйенсә, профессиональ средаға килеп индем. Ә яҙыусы өсөн иң ҙур мәктәп — тормош һәм үҙ өҫтөндә бик күп эшләү. Әгәр ҙә Горький үҙенең тормош университеттарын бөтмәһә, ул Горький була алмаҫ ине. Әгәр ҙә Толстой үҙе Севастополь ваҡиғаларының шаһиты булмаһа, донъяла «В. и М.» ҙа булмаған булыр ине.

Бөтә нәмә тормошта, уның ҡосағында йәшәү. Ә хәҙер мин үҙемде бер ситлектә кеүек һиҙәм. Бит минең аэроклубта уҡыу ғына ла миңә ни тиклем ҙур тормош мәктәбе ине. Ә 48-се йылдағы сәйәхәт миңә ни тиклем байлыҡ килтерҙе!

Мин ғәҙәттән тыш икеләнәм. Хатта минең баҫылған беренсе шиғырҙар өсөн дә үкендерә. Н. Нәжмиҙең минең турала иғтибарға алыуы өсөн шатланһам да башта, хәҙер мин быға ла риза түгел. Сөнки ул миңә ысын кеүек түгел. Был — минең Мәскәүҙә уҡыған өсөн генә әйтелгән фекер кеүек. Әгәр ҙә мин Өфөлә булғанда, был турала әйтелмәҫ ине. Нисектер был — дөрөҫ булмаған баһа.

Белмәйем, ҡайҙалыр барамын... Ә ҡапыл бер ни ҙә сыҡмаһа, әгәр ҙә мин файҙалы була алмаһам, белмәйем... ҡурҡыта. Хәҙер миндә әллә ниндәй ижади трагедия башлана кеүек. Әлбиттә, мин мастерство яғынан үҙемсә алға атлаған кеүекмен. Ләкин миңә ябай уҡыусылар: «Рәхмәт һиңә, Рәми, һин беҙҙә яңы матур тойғолар уятаһың, көрәшкә, йәшәүгә ҡанатландыраһың», — тип әйтә алырҙамы? Бит минең иң теләгәнем, үҙемдең матур бәхетем, тип ҡараған ҡояшым шул! Башҡаса миңә матур шиғыр нәмәгә? Мин ҙур тормоштоң бөйөк һарайын төҙөүҙә тик бер кирбесте һала алыу бәхетенә ирешә аламмы? Кешеләр матур булһындар ине. Улар бер-береһе өсөн бәхет булһындар, бер-береһенә һоҡланып һәм ғорурланып ҡараһындар, бөтә

ауырлыҡтарҙы еңеп сығыуҙа ярҙам итһендәр. Матур, ҙур, тәрән мөхәббәт менән һөйә белһендәр. Был мөхәббәтте тормошҡа булған мөхәббәт мәғәнәһендә аңлаһындар. Шул теләк менән яҙам мин. Әгәр ҙә был теләгемдең тормошҡа ашыуын күрә алмаһам, ни тиклем ҡурҡыныс, Мәрйәм апа! Әлбиттә, был теләктәр тормошҡа әйләнәләр һәм әйләнәсәктәр. «Я знаю, — будет время, когда люди станут любоваться друг-другом, когда каждый будет как звезда перед другим... Велики будут люди этой жизни...»

(Андрей Находканың һүҙҙәре)

Бына ул теләгән тормош башланды инде. Ләкин бына шул тормоштан ситтә кеүек күрәм мин үҙемде.

Был барыһынан да ауыр.

Быға тағы минең үҙемдең мәңге юйылмаҫ яраның һыҙлауы ҡушыла. Мин был турала нисек тә уйламаҫҡа тырышам. Ләкин мөмкинме һуң? Бит Рәми үҙе лә:

«Тауҙар емерелеп,
таштар баҫһын,
Мөхәббәтһеҙ үтһә,
ғүмерҙе...» —

тип яҙа ине.

«Но ему же нет ответа!..
Таков и ты, поэт!» (П.).

Мин ниңә шул тиклем кешеләрҙә яңылышам! Ниңә һуң шул тиклем һуҡыр ул дауыллы тойғолар.

Сәләм менән, һеҙҙең Рәми.
9/XII—50.

* * *

Мәрйәм апа!

Хатығыҙ өсөн бик ҙур рәхмәт. Мин күптән үк көтә инем инде уны. Бына әле Ленин библиотекаһында яуап яҙып ултырам. «Батырҙар тураһында эпос», Йософ Гәрәйҙең шиғырҙарына заказ бирҙем. Миңә уларҙы тикшереп уҡырға кәрәк. Дошман да яҡшы уҡытыусы, ти Горький. Ә мин бигерәк тә ҡаҙынырға яратам.

Был миңә иң зур ҡәнәғәтлек бирә. Бит ата-әсәһе тартыуҙы тыйған балаға ла тәмәке ниндәйҙер татлы, серле нәмә булып күренә. Ниндәйҙер бер көлкө нәмә бар, һәр тыйылған нәмә ҡыҙыҡһыныу уята. Мин бәләкәй саҡта әсәйҙән һәр ваҡыт:

— Мин нисек тыуғанмын? — тип һорап ҡанғыртып бөтә торған инем.

— Мәүзифа әбейең менән Ахил ҡарсығы ҡойонан алып сыҡҡандар, — тигән яуап мине бик шикләндерә һәм ҡәнәғәтләндермәй. Минең бөтә серҙе беләһем килә. Бында ла шуның кеүек.

Әле яңы ғына «Хыялдан — тормошҡа» тигән циклды бөттөм. Шиғырҙарҙың ҡайһылары менән һеҙ таныш. Ләкин мин яңынан эшләнем. Циклға «Экзамендан һуң» («Пушкин урамы буйлап»), «Һуңғы төн», «Ҡалдың, Өфөм», «Баш ҡала тураһында уйҙар», «Студент көҙө», һәм «Мин — Хужа» тигән алты шиғыр инә. Төп герой — Мин. Унан һуң Зоя тураһында «Ленинсы» газетаһына мәҡәлә яҙырға йыйынам. Был газета тураһында ишетеү миңә зур байрам булды.

Мостай Кәрим менән осрашыуға мин бик шат. Әле мин уның шиғырҙарын ҡат-ҡат уҡып ҡарайым да һоҡланып бөтә алмайым. Ул — теле менән халыҡҡа иң яҡын кеше.

Мәрйәм апа, һеҙ «Әҙәби газета»нан Сергей Смирнов тураһында уҡығанһығыҙҙыр. Һәм уның «О самом сокровенном» йыйынтығын да уҡығыҙ! Гүзәл шағир! Етмәһә, минең мастерство буйынса уҡытыусым. Газеталағы статьяны уҡығас, мин шатлығымдан ни эшләргә лә белмәнем. Үҙеңдең уҡытыусың тураһында яҡшы фекер ишетеү — зур бәхет ул! Мин уның менән ғорур. Унан һуң мин бөтә йөрәктән К. Чуковский ҡартты яратам. Ул — Некрасов өҫтөндә 40 йыл (!) эшләгән специалист! Һәм ул минең йөрәккә ни тиклем матур эҙҙәр һалып ҡалдыра. Ул Некрасов тураһында матур китап яҙып бөттө — уҡырһығыҙ.

— Миңә инде һеҙҙең менән хушлашырға күп ҡалманы, — тип, ул, бер көн уның янында тороп ҡалған бер нисә кешегә һәм миңә йылмайып: — Ә һуң һин үҙ әҙәбиәтеңдә был эште дауам итерһеңме?— тине. Мин өндәшмәнем. Ләкин миндә һәр көн һайын әҙәбиәттә бик күп эшләр өсөн сикһеҙ дәрт тыуа!

Был кешенең уҡыусыһы булыу менән, апа, мин һис шикһеҙ бәхетле. Ләкин мин теләгән бәхет ҡайҙалыр алыҫ һәм юҡ кеүек тойола.

«Тамсылар»ҙы уҡыным. Унда бик һәйбәт шиғырҙар бар. Мин шатландым бының өсөн. Ләкин бында Мостай Кәримдең теле юҡ. Һәм мин уға булған ниндәйҙер матур бер ышаныслы ла юғалттым. Кешеләр күк кешеһе булмаған, тиелә. Мин уның хатын алғас, китабын һорап хат яҙғайным. Ләкин минең тауыш ишетелмәне. Мин бының өсөн бик үкендем һәм үҙемде тиргәп бөтә алманым. Шулай уҡ ғәрләндем дә...

Кеше ни тиклем ябай булһа, шул тиклем ул үҙенә булған ихтирам менән бай була. Ни тиклем кеше үҙенең белеме һәм культураһы менән юғары булһа, шул тиклем ул — был байлыҡтың хужаһы, минеңсә. Ләкин беҙҙә ҡай берәүҙәр бынан мәхрүм булып, үҙҙәрен ерәнгес ебәк эсенә төрөп йәшәй башлайҙар. Был бик бейек түбәнлек һәм түбәнлек.

Был түбәнлек — әҙәбиәтсе өсөн һалҡын ҡәбер. Минең был иң ҡурҡҡан нәмәм булыр ине!

Ә Филемдар ағайҙы мин яратам. Ул кешегә бик иғтибарлы һәм ихлас күңелле. Әлбиттә, мин уның менән бөтә нәмәлә лә риза түгел, ләкин уны мин бик ныҡ ололайым.

Ә Ғәйнан ағай «Дуҫтарға»нан минең үҙем теләгән, нәҡ дуҫтарға әйтергә теләгән фекерҙе киҫеп ташлаған. Мин аптырайым: нисек һуң әҙәбиәтсе намыҫы быға рөхсәт итә. Яҡшыһы, баҫмаһалар, миңә рәхәтерәк булыр ине.

— Не умничай, молокосос! — тигән кеүек был миңә. Тупаҫлыҡ! Әгәр ундағы фекер артыҡ йәки килешмәй икән, ниңә һуң миңә бер-ике һүҙҙән генә торған хат яҙмаҫҡа. Мин Әмиригә өс хат яҙҙым, ләкин ул өндәшмәне.

Һәм бына шул саҡ мин Горькийҙы уҡыйым да, күҙҙәргә йәштәр тула. Бәлки, мин иғтибар итерлек кеше түгелмендер?— тип уйлайым һәм уның миңә бүләк иткән «Ҙур баҡсаһынан»: «Рәмигә ҙур ышаныс һәм өмөт менән» тигән юлдарҙы уҡыйым. Аңламайым.

Ләкин минең хәтер — халыҡ хәтере кеүек...

Уларға һис тә минең псевдоним оҡшаманы булһа кәрәк. Нимәгә һуң уларға һинең Салауатың! Мәрйәм апа, ысынлап та, был минең еңеллек булды. Үкендем мин быға, бик ныҡ үкендем.

Бының өсөн мин, Кәрим ағай әйткәс кенә, үкендем. Ләкин ул дуҫтарса кәңәш итеп әйтте.

— Мин үҙемдең тәжрибәнән сығып әйтәм, Рәми. Һуңынан был шағир булып етешкәс, бик ҡыйынлыҡ тыуҙыра. Бына миңә Мостай Кәрим дә һәм Мостафа Кәримов та булып йөрөргә

кәрәк. Ҡыйын. Әлбиттә, ул йәш саҡта шулай ҡыҙығаһың. Ләкин ҡыҙығы юҡ.

Һәм мин риза булдым.

Ә Зөфәр тураһында, апа, һеҙ нисектер риза булмай әйтәһегеҙ. Ләкин миңә минең бөтә иптәштәр араһында иң бай эске донъя менән йәшәгән булып күренде ул. Ул бит тик тыштан ғына шундай аҡылһыҙлыҡҡа һалына. Ә ни тиклем ул Лермонтовты, Пушкинды һәм Маяковскийҙы яратып уҡый ине! Ә уның сочинениелары!

Ярай, мин уға яҙырмын әле был турала. Әле ул миңә, хат яҙмайһың, тип үпкәләп яҙа. Мин уны әллә нисек яратам. Ул миңә бик искренно була торған ине. Тик һәр кешегә яраҡлы аҫҡыс таба белергә кәрәк — был шулай. Һеҙ, апа, берәй саҡ уның менән һөйләшеп ҡарағыҙ әле.

Мәрйәм апа, һеҙ минең тик һеҙгә генә яҙған хаттарҙы уҡыусыларға уҡымағыҙ. Нәмәләр генә яҙып бөтмәйем инде мин һеҙгә! Бына был хаттың уҡыусылар өсөн ни ҡыҙығы булһын!

Мин әҙәбиәтселәр тураһында әйтәм икән, был минең бөгөнгө фекерем һәм үҙемә генә ҡағылған ерҙә генә әйтелгән. Һәм мин уларҙы тик һеҙгә генә әйтәм.

Барыһына ла күп сәләм!

Яҡшылыҡ теләп, һеҙҙең **Рәми**.

Циклды ебәрермен.

Мәскәү, 1951.

* * *

Мәрйәм апа!

Һеҙҙең шиғырҙар тураһындағы фекерҙәр барыһы ла дөрөҫ. Быны миңә Рафаэль дә, Хәниф тә әйттеләр. Рауил да әйтте. Ләкин һеҙ әйткәндәрҙең ҡайһыларын улар ҙа, Кәрим ағай ҙа әйтмәне. Һәм мин үҙемдең уҡытыусым менән ғорурланам. Рәхмәт апа! Мин уларҙы үҙем һыҙып ташлаған инем инде. Һеҙҙең подтверждение ла килеп, үҙемдең фекерҙәрҙе тағын да бер ҡат нығытҡас, мин фекерҙәрҙең уртаҡ булыуына шатландым. Хәҙер мин уларҙы яңынан әллә нисә ҡат эшләнем инде. Инде һуңғы вариантты тип уйлайһың, аккуратно ғына яҙып ҡуяһың, ләкин аҙ ғына торғас, эштән айырылып, был турала уйлап йөрөһәм, инде яҙғандар иҫкерә башлайҙар. Улар инде икенсе ултырыуҙа

уҡ танымаҫлыҡ хәлгә киләләр. Тағы, тағы... Бына инде 12 ҡабат чистовикка күсерәм, һаман да улар черновикка әйләнә. Һәм мин шиғырҙың эшләнеп бөтә торған сиге юҡ! — тигән фекергә киләм. Һаман да насар, һаман да насар сығалар. Көндән көн миңә был эш ауырыраҡ. Ләкин мин тик был эштән генә үҙем теләгән ләззәтте таба алам. Шиғырҙы ни тиклем яратһаң, ул да шул тиклем һиңә тәрәнерәк, ҙур эске донъя менән һөйгән, һинең үҙең, үҙ ҡаның булған ҡыҙ кеүек күренә.

Һеҙ, апа, был сағыштырыуға, әлбиттә, көлөрһөгөҙ. «Һәр сағыштырыу аҡһай» тиҙәр бит. Ләкин минең нәҡ шулай әйтәһем килә. Сөнки минең ҡатын-ҡыҙға үҙем әле быға тиклем бер кемдә лә күрмәгән ниндәйҙер юғары, романтик ышанығым бар ине. Быларҙы миндә Чернышевскийҙың көндәлектәре тыуҙырҙы. Һәм миңә шулай ышанып йәшәү ниндәйҙер бик ҙур эстәлекле, ҙур һәм матур күренә ине.

Ләкин бына быйыл миндә бик ҙур переворот булды. Нисектер мин уларға өмөтһөҙ ҡарай башланым. Был әлбиттә, минең бик аҙ күреүҙәндер. Ә Айһылыу һаман да йәшәй төҫлө. Нисек мин уны һағынам! Ҡайҙа ул? Ҡайҙа уҡый? Белмәйем. Мин уны тик үҙем генә тыуҙырғанмын. Һәм уның менән йәшәйем. Бына яҙ уның менән тағы ла күңеллерәк.

Был турала Кәрим ағай менән һөйләштек. Ул койкала бер аҙ ял итеп ята. Миңә лә:

— Әйҙә, ятайыҡ, — тине. Ләкин мин уның баш осонда ултырып, уның һәр бер балаларса сафлылыҡ менән бөтә йөрәктән әйткән һүҙҙәрен тыңлап ултырам. Һәм ул миңә ҙур аҡыллы кескәй генә матур Йәмил булып күренә. Минең ҡосоп алаһым килә уны. Әйтерһең дә, Йәмил «Башмаҡтарым аҡты ла китте!..» тигән кеүек, миңә ул күҙҙәрен төбәп, йылмайҙы ла:

— Беҙ бит шундай кешеләр: үҙебеҙ тыуҙырабыҙ ҙа үҙебеҙ һөйәбеҙ, — тине.

Һәм мин үҙемдең генә был урында яңғыҙ булмауымды беренсе тапҡыр аңланым.

Ул шиғырҙарға иҫ киткес иғтибарлылыҡ менән, ниндәйҙер, балаларын бик ныҡ яратҡан ата кеше кеүек, һөйөү менән ҡарай. Ул һөйләгәндә, минең инде үҙем яратып туйған, насар күренгән шиғырҙар ҙа матурайып киткән кеүек тойола. Һәм мин әле үҙемдә әҙәбиәткә был тиклем мөхәббәт булмағанын һиҙәм. Йөрәк ҡыҫыла. Кеше! Ни тиклем үҙ эшең бөйөк һөйөү менән ярата! Минең менән әҙәбиәт тураһында һөйләшкәндә лә, шиғыр

яҙғандағы кеүек, ижад итә! Миңә үҙемдең эшем алдында хатта оят! Үҙемде дилетант кеүек һиҙәм. Ләкин миңә был һөйләшеүҙән һуң ниндәйҙер рәхәтлек тә килә. Был, киләсәккә ышаныу рәхәтлеге! Минеңсә, быны һәр кем татый алмай кеүек. Был һөйләшеүҙә мин үҙемдә көс уянғанын тоям. Мин файҙалы, матур шиғырҙар яҙа алырмын кеүек. Өҫтән, әйтерһең дә, ҙур тау шыуып төшә. Тамаҡ тобондә ойошоп торған ҡом киҫәге ҡаймаҡ кеүек йомшарып ирей. Бик көтөлөп алынған мунсанан таҙарып, рәхәтләнеп сыҡҡан кеүекһең. «Инде кеше күҙенә күренергә мөмкин» тип уйлау һине ҡанатландыра. Йүгерәһең, осаһың, әллә нисек осаһың килә!..

«Мәскәү» гостиницаһынан сыҡҡас та әле мин, яңы донъяға сыҡҡан кеше кеүек, тирә-яҡҡа таң ҡалып ҡарап торам. Әйтерһең, мин беренсе ҡат яҡтылыҡты күрәм! Яҡында ғына Кремль, ҙур рубин йондоҙо тағы ла асығыраҡ! Ҡыҙыл стеналар тағы ла ҡыҙылыраҡ, мөһабәтерәк күренә. Кешеләр миңә ҡарайҙар ҙа йылмаялар, ҡыҙҙар көлошөп китәләр. Мин ҡапыл ғына үҙемде һиҙеп алам һәм тиҙерәк Ленин библиотекаһына ашығам. Ләкин мин бер минутҡа ла был ҙур һәм бала кешенең йылмайыуын, Горький йылылығы менән ҡыҫҡан ҡулдарының ҡыҙыуын ҡулдарымда, тәрән йылылыҡ менән әйтелгән һүҙҙәрҙе йөрәгемдә тере итеп тоям... Был 30 мартта ине...

Кәрим ағай миңә Йәмил тураһында ла, Оксана* тураһында ла, үҙенең беренсе шиғырҙары тураһында ла, һөйөү тураһында ла һөйләне. Һәм миңә һөйләй...

Юҡ, мин уны аңлата белмәйем, апа. Ул маҡтауға һаран. Ғәйепләүсе һүҙҙәргә лә һаран. Ләкин үҙеңдең бик күп етешһеҙлегеңде һәм артабан нимә эшләргә кәрәк икәнлекте асыҡ күрәһең. Ул быныҡ менән тамсы ғына ла үҙенең аҡылын, юғарылығын күрһәтергә тырышмай. Бөтә хәрәкәт тәбиғи. Ул ни тиклем ябай булған һайын, миндә уға булған ихтирам арта ғына бара.

Тик мин бер нәмәнән ҡурҡам. Ул мине Мәскәүҙәге кеше булған өсөнмө, әллә шиғырҙар өсөнмө яҡын күрә? Һуңғыһы булғанда, әлбиттә, миңә күңелле...

Ярай, апа, әллә ҡайҙа инеп киттем. Һеҙ Кәримде мин аңлағанса яраттыра алып уҡытһағыҙ ине!

---

* Йәмил һәм Оксана — «Беҙҙең өйҙөң йәме» повесының геройҙары.

Әлбиттә, минең фекерҙәрҙең аҙ ғына файҙаһы була икән, мин шатмын.

Лауреаттар тураһында мин дә һеҙҙең фекерҙә. Ләкин 51 йылға ышанам. Тик оригиналға яуап бирерлек тәржемә кәрәк. Союздың да етешһеҙлеге бар бында. «Намыҫ» һәм «Яҙғы елдәр» өсөн мин шатландым. Бында поезда бик күп кешеләрҙең уҡып йөрөүҙәрен күрәм дә, рәхәт булып китә. Һатып алып, рустарға уҡытам. Бындағы сторож Сережа ағайға ла уҡыттым. Бик оҡшаны. «Салауат»ты (3 л.), «Абай»ҙы ла уҡыттым.

Был ағай менән бик дуҫбыҙ. Ләкин ул эсә. Бер көн бысраҡтан, канау эсенән, алып ҡайттым. Ҡайтҡас, ҡатынын туҡмарға тотонған.

— Роман! — тигән тауышҡа һиҫкәнеп китеп, китапты ҡалдырып атылып сыҡтым.

Ҡатыныңың муйынынан һығып алған да, тегене ҡысҡыра ла алмай. Мин айырып алып, койкаға ырғыттым. Ҡатындарҙы бындай хәлдә күреү миңә әллә ниндәй онотолмаҫ тәьҫир ҡалдырҙы.

Йәштәрҙе нисек тә шундай сифаттан һаҡларға тырышаһың. Көслө итеп яҙаһы килә.

Яңы ғына әсәйҙең йырҙар менән яҙған хатын алдым. Мин уны үҙ ҡулы менән яҙырға мәжбүр иттем. Әллә нисек мин һаман да бала кеүек яратам уны! Ә йырҙары уның миңә бик ныҡ тәьҫир ҡалдырғандар.

Гүзәлгә яҡшы әсә булып, уға дөрөҫ тәрбиә бирергә тырышығыҙ, апа. Әсә мөхәббәте артыҡ та, кәм дә булмаһын. Кешеләрҙе яратып үҫһен. Быйыл инде ул детсадҡа йөрөй башлар. Ә өләсәһе ҡулында уны тәрбиәләргә ярамай. Коллективта тәрбиәләнһен ул. (Нимәгә һуң «аҡыл» өйрәтергә керештем мин? Һеҙгә былар күптән билдәле һәм көлкөлө, нисектер наивно, шулаймы, апа? Был тик һеҙҙең менән күп итеп һөйләшәһе килгәндән).

Йырҙар яҙа алырмынмы, белмәйем. Сөнки улар халҡына яҙыу өсөн бик нескә психолог һәм белгес булырға кәрәк. Мин уларҙы бик аҙ беләм. Ләкин ныҡ яратам. Мине лә ауылда кескәйҙәр бик ярата торған инеләр. «Ҡартайып бөткән башыңа шул бала булып йөрөйһөң» — тип әсәй улар менән уйнап йөрөгән өсөн асыулана торғайны. Әле лекциянан ҡайтҡанда, бульварҙа уларҙы күрер өсөн генә үтеп йөрөйөм. Әсәләргә рәхмәт әйтәһе килә. Ни тиклем идеаль әҫәрҙәр тыуҙыралар!

Хәҙер мин бик ҙур семья тураһында уйлай ҙа башланым инде. Бер 20 штук сталинецты үҫтерергә план бар! Кризис булыр, тиһегеҙме, апа? Булмаҫ! Мин уларҙы иң беренсе баҡсала эшләтергә, ағастар үҫтерергә өйрәтер инем!.. Бөтөн бер дивизия, һәм һин — командарм!..

Һеҙ ҡаршы түгелме, апа?

Хәҙер бына мине В. О. Перцов группаһына күсерҙеләр. Башта ул миңә оҡшаманы. Ҡоро кеүек тойолдо. Ләкин ул ни тиклем тәрән кеше булып сыҡты! Бик файҙалы. Маяковскийҙың дуҫы һәм уның тураһында китап яҙған кеше. Һеҙгә, апа, барыһын да һөйләйһе килә. Ә мин ҡайтҡансы инде онотоласаҡ. Беҙҙең бергә булмау ҡыҙғаныс. Етмәһә, һеҙҙең хатығыҙ ҙа бик һирәк килә.

Бына бөгөн асыуланып, ялҡытҡансы яҙҙым. Ваҡытығыҙҙы алһам, үҙегеҙ ғәйепле, апа. Хушығыҙ!

Яҡшылыҡ теләп, сәләм менән, һеҙҙең **Рәми**.

Миҙхәт ағай минең был хаттарға аптырайҙыр әле?

Мәскәү. 6/IV—51.

* * *

Мәрйәм апа!

Һеҙ миңә үҙегеҙҙең беренсе яратыуығыҙ тураһында ваҡыт табып яҙа алырһығыҙмы? Бик үтенәм, әгәр мөмкин булһа. (Бөтә психология менән дөрөҫ итеп).

Мәрйәм апа, һеҙгә бер кәңәш: хатты, бик ҡыҫҡа булһа ла, алғас уҡ яҙырға өйрәнегеҙ. Юҡһа, мин быны кешегә булған ғәҙәлһеҙлек тип ҡараясаҡмын. Бына мин, лекцияла уҡ яҙып ебәрәм. Нимә яҙып ултыраһың, тиергә, Мәрйәм апа юҡ бында. Хөрриәт!..

Иркәмә

Һөймә мине, иркәм,
әгәр ҙә һин
Матурлыҡҡа ғына ҡараһаң.
Кеше матур һәр саҡ эше менән.
Был ҡулдарым эшкә яраһа,
Мин үҙемде тулы кеше итеп,

Бәхетле лә итеп тоямын.
Тормош кеүек
    һүнмәҫ маҡсатым бар,
Мин эшемдән
    бәхет ҡоямын.
Тик байрам да түгел
    үтер юлым, —
Яныу,
    уйлау,
        кисереү.
Мөмкин түгел
    күңел бушлығынан
Ҡыҙҙар күҙләп
    миңә кис йөрөү.
Яратма һис, әгәр мине, иркәм,
Егет кенә итеп күрһәң һин,
Сөнки
    мин һөйөргә хаҡһыҙ һине,
Тик ҡыҙ ғына булып йөрөһәң һин:
Уң ҡулым бул,
    ярты йөрәгем бул,
Көсөм бул һин,
    һәр көн,
        һәр эштә.
Бул уҡыусым,
    бул һин уҡытыусым,
Һин дуҫым бул
    минең көрәштә.
Беҙҙең бәхет
    илем бәхете булһын,
Шул саҡ һөйөү
    гүзәл,
        бик әйбәт.
Бит мөхәббәт өсөн
    йәшәмәйҙәр,
Йәшәү өсөн
    кәрәк
        мөхәббәт.

(«Мөхәббәт яҙып, сәсе ағарыр инде был Рәмиҙең», — тиерһегеҙ, апа. Ағара бирһен. Тик мөхәббәт йәшәгән ерҙә генә — йәшлек!)

Рәми.

* * *

13/IV—51.

Мәрйәм апа!

Хатығыҙҙы алдым.

Кисә университетҡа барып, Рамазанов ағайҙан «Литературная Башкирия» һәм «Поэты Башкирии» тигән китаптарҙы алып ҡайттым. Шамил исемле бер татар аспирантынан Туҡайҙы таптым. Бик, бик һағынған инем. Ләкин уҡый башлағас, был һағыныуҙы ҡыҙыҡһыныу ғына түгел, ә ни тиклем миңә унан өйрәнергә кәрәклекте күрҙем. Мин әле быға тиклем һуҡыр уҡығанмын!

Төнө буйы ятҡан көйөнсә уҡыным. Әҙәбиәтте мин бөгөн, бөгөн генә аңлайым. «Милли моңдар» һәм «Эштән сығарылған татар ҡыҙы»н уҡыйым да, Туҡайҙың ни тиклем үҙ халҡының тауышы һәм ҡолағы булған икәнлегенә һоҡланам. «Татар ҡыҙы»н һәм «Әллүки»ҙе көндөҙ генә бер татар шағиры (Ноғман) йырланы. Минең тиҙерәк, тиҙерәк Башҡортостанға ҡайтып, халыҡ көйҙәрен йөрәгем менән тыңлағым килде.

Шамил Назым Хикмәтте төрөк телендә уҡый. Бик көслө. Һәм мин үҙемдең Востоковедческий институтҡа инмәүгә бик үкенәм. Был, Шамил, бик тәрән егет. Кисә көнө буйы бәхәсләштек. Бик киҫкен тәнҡитсе. Ләкин уға минең әйберҙәр оҡшаны. Һәм шиғырҙарҙы оҙаҡ тикшерҙек. Миңә, бәхәсләшеүҙән һуң, рәхәт һәм донъя иркенәйеп киткәндәй булды. «Упрямый башҡорт син!» — ти ул. Миңә бик файҙалы фекерҙәр әйтте.

Сәләм менән, һеҙҙең РӘМИ.

* * *

11/XII—51.

Үҙемдең хәл яҡшы. Былтырғы ауырыу үгте. Хәҙер үҙемдең өҫтән бер тауҙы ырғытып ташлаған кеүек йөрөйөм! Хәҙер бөтә ҡайғырған нәмә шиғыр.

Был арала күп кенә нәмәләр уҡып ташланым. (Балалар әҙәбиәте тураһында). Зачеттар өсөн ике доклад әҙерләйем. Совет әҙәбиәте семинарынан Н. Носовтың «Витя Малеев в школе и дома» повесына анализ. Ә фольклор буйынса Л. Кумачтың йырҙары тураһында һөйләргә бирелгәйне. Ләкин был турала

бик күп һөйләнелгән, икенсенән, минең башҡорт фольклоры тураһында һөйләйһем килә. Профессорға «Башҡорт фольклоры һәм рус яҙыусылары» тигән тема тәкдим иттем. Ул бик шатланды. Был яңы һәм эшләнелмәгән. Миңә күп тырышырға тура киләсәк. Бигерәк тә материалдар өҫтөндә.

Мәрйәм апа, бәлки, һеҙ миңә үҙегеҙ белгән әҙәбиәт күрһәтерһегеҙ. Был бик ярҙам буласаҡ. Үҙем хәҙер Игнатьев, Крашенинников, Даль тураһында уйлап йөрөйөм. Усмановтың мәҡәләһен уҡыным, ләкин тәрән түгел.

Унан һуң Горькийҙың «Телһеҙ» легендаһы тураһында бер ни ҙә белмәйем. Был турала минең ишеткән дә юҡ. Был турала ла әйтәһе килә. Ярҙамығыҙға ышанам, апа.

Үҙегеҙҙең эшегеҙ, пландарығыҙ тураһында күп итеп яҙығыҙ. М. Ауэзов 13 декабрҙә Абай тураһында һөйләй. Бик көтәм.

Мин конькиҙар алғайным, бында ямғыр яуа ла ямғыр яуа. Боҙ юҡ. Спортзалда баскетбол уйнайбыҙ. Зоя мәктәбенә барып йөрөйөм. «Йәшлек»кә яҙырға уйлайым. Хушығыҙ!

Сәләм менән, һеҙҙең РӘМИ.

* * *

1/VI—51.

Мәрйәм апа!

Кисәге һуңғы семинарҙар булды. Катаевта булдым (Прозаны тыңлап ҡарайым, бер ҙә булмағас!). Ә кис, сәғәт 6-ла Симонов мастерство тураһында һөйләне (беренсе ҡат). Яңы ғына Бразилия яҙыусыһы Джорж Амадо менән бик тулҡынландырғыс осрашыу булды. Һәм шул көндә үк Мариэтта Шагинянды тыңланыҡ (очерктар тураһында). Һәм миңә бөтә яҙыусыларҙан бигерәк шул ут ҡарсыҡ оҡшаны.

— Миңә газетала эшләргә кәрәк. Өйрәнергә, йөрөргә, бик күп кешеләрҙең яҙмышы менән йәшәргә!— тип ҡарар иттем.

Бик тәжрибәһеҙ мин һәм бик тәжрибәле кешеләр араһындамын. Шартлар дәрәжәгә етешәм. Ярай, сабырға рәхмәт һәм мине тәрбиәләгән мәктәпкә, уҡытыусыларға рәхмәт. Экзамен 26-һында бөтә. 29-ындағы рус телен досрочно тапшырҙым. Хәҙергә «5». Ләкин был иң еңеле ине. Ә алда Поспелов, Реформатский, Сидельников!..

«Совет Башҡортостаны»н дүрт ҡабат ҡараным. Ләкин ҡурай тауышы ишетелмәй, бик ҡыҙғаныс. Бик матур башлана. «Әллилəү генәйем, бəлилləү генәйем» тип йырлап бейегән балалар иҫ киткес. Ҡымыҙ менән һыйлаған әбейҙең йылмайыуы — башҡорт күңеленең йылмайыуы. Мәктәп өсөн шатланып бөтə алманым. Марият та насар түгел. Ләкин бик тиҙ юғала. Бөмүмән, бик уңышлы картина.

* * *

18/VI—51.

Мәрйәм апа!

Һеҙҙең тиргəп-тиргəп яҙған хатығыҙҙы көткəн инем. Һəм был миңə рəхəтерəк булыр ине. Ләкин һеҙ миңə һаман элеккесə ҡарайһығыҙ. Хəҙер үҙемдең турала бик ныҡ хөкөм итеп, көслө əйтелгəн һүҙҙəр ишетəһем килə. Теләһə нисек булһалар ҙа, мин уларҙы күтəрер инем.

Ярай инде, нисектер тулы түгел мин, ниҙер етешмəй, нимəгəлер йөрəк ҡыҫыла.

Бына бөгөн марксизм-ленинизм нигеҙҙəре буйынса экзамен тапшырҙым. «4»! Современный русский язык буйынса ла «4» булды. Был минең артҡа китеүҙе күрһəтə. Беренсеһе ғəфү ителерлек, ə икенсеһе инде... Крыловтың сиңерткəһе кеүек булдым. Һуңғы өс көн эсендə миңə ҡот осҡос эшлəргə тура килде. Үҙем дə хəҙер аптырап ултырам. Первоисточниктарҙан 10 эш буйынса, ВКП(б) тарихы буйынса 7 глава конспект яҙырға тура килде. Иртəгə экзамен, ə минең 4 глава эшлəнелмəгəн! Төнө буйы ултырҙым. Турникта тартылып, йə гер күтəреп керəм дə тағы ултырам. Арытмай ҙа. Шайтан кеүекһең. Ағастар артына аҙыраҡ ял итеп алырға сыҡҡанда, инде япяҡты, ҡоштар һайрай, өҙөп-өҙөп кəкүк саҡыра. Туймаҫлыҡ һəм һоҡланғыс таң һалҡыны. Əтəстəр ҡысҡыра. Əкиəт кеүек... Төшкə тиклем өҙөп-йолҡоп эшлəнем дə поезға йүгерҙем. Вагонда ла, метрола уҡыйым. Һаман осона сыҡмайым. Тверь бульварына сыҡҡас, һуңғы битте яптым да— эште хоҙайға һуҙҙым. Билет еңел ине. Ләкин өҫтəлмə һорау харап итте: экзаменға əҙерлəнеп, газетаға күҙ ҙə һалмағанмын, тормоштан артҡа ҡалғанмын.

Алдағы бөтə көндəргə һабаҡ был.

Әлбиттә, тапшыра алмағандар ҙа бар. Ләкин улар маяҡмы ни? Инде Поспелов менән Грек-Рим әҙәбиәте ҡалды.

Насип булһа, унан инде — Өфө! Бик һағындырҙы. Тыуған ауылды ла ныҡ һағындым. Сөнки детдом һәм интернаттағы йылдар — иң яҡты йылдарым минең. Ә ауылдағы бала саҡ хәтерләргә лә ҡурҡыныс. Ләкин уның эҙҙәрен дә һағынам. Әллә нисек мин: һәр бер булған ерҙә ярты йөрәгемде ҡалдырҙым, ләкин ул кәмемәне. Бынығына шатмын. Был кәрәк.

Өфөлә инде ҡыйынһынмай ғына барып керерлек ишек тә юҡ. Ләкин шул тиклем күрәһе килә уны. Һәр бер урам буйлап атлап үтәһе килә, һәр бер Өфө кешеһенә туйғансы ҡарайһым, туйғансы үҙ телемдә һөйләшәһем, һағышым ҡанғансы үҙ ҡаныма һеңешкән көйҙәрҙе тыңлайһым килә. Үҙем — Мәскәүҙә, ә йөрәгем — Өфөмдә. Мәскәүҙән дә айырылышыу инде ҡыйын буласаҡ.

Бына, бейек шыршылар аҫтында яҡтырып килгән күккә ҡарап, һанап бөткөһөҙ нәмәләр уйларға өлгөрҙөм. Әсә теле дәресе, әҙәбиәт дәрестәре күҙ алдына килә. Нилектәндер шул тиклем йөрәккә яҡын булып ҡалған уҡытыусым да... Бына уның, дәресте һөйләй башлағас, һәр ваҡыт нилектәндер миңә ҡарап йылмайып алыуы. Был йылмайыуҙа мин аңлап етмәгән әллә ниндәй сер ҙә, һорау ҙа, әмер ҙә, ниндәйҙер мөһим генә бер фекергә килеү ҙә һәм ниндәйҙер бер ҡәтғилек тә бар. (Әгәр мин берәй шифыр менән йәки берәй эш менән мәшғүл булмаған саҡта). Кешенең шундай йылмайыуын бөтөн бер әҙгәмәгә алмаштырмаҫһың. Һүҙҙәр онотола, ә кешенең бер һүҙһеҙ бик күп фекер әйткән күҙ ҡарашы бер ҡасан да онотолмай. Ишеткәнде, яҙмаһаң, онотаһың, ә күргәнде күҙ хәтере ебәрмәй. (Миңә генә шулайҙыр, бәлки).

Шул уҡытыусы хаҡында уйлағанда, миңә нисектер күңелле, иркен һәм рәхәт булып китә. Ҡанымда ниндәйҙер көс һәм дәрт уяна. Күрә торған нәмәләр асығыраҡ булып күренә. Ниндәйҙер осороп алып китерлек еңеллек килә. Нисектер һиңә ауыр тойолған саҡта шул уҡытыусы тураһында уйлайһы килә.

Һәм бына уның хаты! Бер секунд эсендә уның ҡулында үткән тормош килеп баҫа. Уҡытыусы! Ниндәй яҡшы тойғо кисерә кеше уның менән һөйләшкән саҡта!

Ләкин, апа, һеҙ икенсе бер ҡасан да миңә «күп беләһең» тип әйтмәгеҙ. Миңә иң күңелһеҙ фекер шул. Кешегә үҙе тураһында дөрөҫ булмаған баһаны ишетеү — иң күңелһеҙе. Сөнки, аҙым һайын үҙеңдең белмәгәнеңде белеп торғанда, урынһыҙ был.

Нисек күберәк белергә? Бына шул хаҡта үзегеҙҙең тәжрибәгеҙ, фекерегеҙ менән уртаҡлашһағыҙ — миңә иң ҡәҙерлеһе һәм кәрәклеһе шул.

Ә һеҙ әйткән бәхет, апа, ул тик сағыштырмаса ғына, мин үҙем тоймайынса, минең өсөн ул юҡ: бәхет үҫә торған нәмә. Бәхет үҙең өсөн генә булғанда, әле ул бәхет түгел. Уны кешеләр менән уртаҡлаша алырлыҡ булғанда ғына, ул ҙур. Материаль яҡ яҡшы. Рәхмәт, апа. Был турала уйламағыҙ ҙа.

Әсә теленән нисек яҙҙылар? Ниндәй темалар бар? Мария нисек яҙҙы? Ә выпускной вечер ҡасан була? Бер 3-тәрендә булһа, ашығырға тырышыр инем, әлбиттә.

Сәләм менән, *һеҙҙең* РӘМИ.

Бына, апа, һеҙҙең хатты алғас уҡ яуап яҙһам, һәр саҡ әллә нәмәләр яҙып бөтәм. Ә һуңынан үкенеп тик йөрөйөм. Хәҙер бына бер-ике көн үткәс кенә ебәрәм. Вечерға өлгөрөп булмай, һуңғы экзамен — 29-ында.

* * *

8/IV—52.

Мәрйәм апа!

Бик күп сәләм һеҙгә Ленинградтан! Бына бер аҙна инде мин — Ленинград кешеһе. Мораҙына етте малайығыҙ. Күрелмәгән нәмә, кермәгән ер ҡалманы инде. Бик ҡәнәғәтмен. Быйылғы каникул бушҡа китмәне. Бик һағындырҙы. Ҡайтҡас уҡ Ҡыҙыл майҙанды йөрөп сығаһым килә. Уҡыу ҙа, иптәштәр ҙә һағындырҙы. Дачала минең күгәрсен дә бар — ул да һағындырҙы. Рәхәтләнеп урманда саңғыла йөрөйһөм, катокка сығаһым килә.

Күрелгән нәмәләрҙе һеҙгә яҙып бөтөү мөмкин түгел, апа. Бер аҙна эсендә әллә күпме аҡылланып киткәнмен кеүек үҙемә. Эрмитажда көн буйы тик бер бүлектә генә ҡарай алһам да, Возрождение эпохаһын хәҙер тулыраҡ аңлайым. Был миңә бик кәрәк ине. Ҡалғандарҙы күргә әле ғүмер бөтмәгән, әллә күпме йәшәрмен әле мин. Сөнки бик күп йөрөйһөм, бик күп күрәһем, беләһем, үкенес ҡалдырмай йәшәйһем килә минең. Ашығырға, ашығырға кәрәк. Ысынлап та, ниндәй яҡшы нәмә йәшәү, апа! Бик күп ауырлыҡ тура килһә лә, яҡшы! Шулай ҡыҙығыраҡ та, хатта.

Рус музейында 18—19 быуаттар сәнғәтен ҡараным. Ломоносовтың эштәрен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Репинға, Шишкинға, Суриковҡа һоҡландым. Быға тиклем мин скульптураға бик иғтибар итмәй инем, хәҙер аңлай башланым инде. Бик матур скульптуралар бар. Киров музейы бик ҙур тәьҫир ҡалдырҙы. Зоологическийҙа булыу — үҙе бер университет үтеү. Пушкин һәм Некрасов музейҙарында ла күп кенә яңылыҡтар белдем. Белгәндәр нығый, беләсәк нәмәләр күбәйә, белмәгәндәрең асығыраҡ күренә. Үҙ-үҙеңдән оялаһың, үҙ-үҙеңдән ғәрләнәһең... һәм шатланаһың. Пушкин музейында иланым. Китаптарына: «Прощайте, друзья!» тип үлеүе күҙ алдыма үҙем күргән кеүек килеп баҫты. Ганнибалдар, Пушкиндар алтын һалып йөрөткән имән һандыҡта Пушкиндың бер тине лә булмаған. Ул уға шиғырҙарын һалып ҡуя торған булған.

Йөрәккә әрнеүле лә, рәхәт тә.

Бөгөн Петропавловский крепоста булдым. Онотолмаҫ көн! Бында «сәйәхәте» өсөн Радищев ташланған, декабристар язаланған, Чернышевский бында, шундай ҡот осҡос ерҙә, үҙенең әллә күпме кешеләрҙең фекерен яҡтырта торған романын яҙған, Горький еүеш, һалҡын, ҡараңғы 60-сы камерала, үҙенең үпкәһен ҡан менән төкөрә-төкөрә, бер ай эсендә «Ҡояш балалары»н яҙған.

Бик күп ғүмерҙәр серегән был төрмәләрҙә. Ләкин кешеләргә һөйөү, яҡты фекерҙәр, үлемһеҙ эштәр саф ҡалғандар.

Бында булыу 19 быуат әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн ҙур әҙерлек. Минең яҡшы итеп өйрәнәһем килә. Декабристар менән беренсе ҡабат шулай ныҡ ҡыҙыҡһындым. Әгәр мин быларҙы күрмәһәм, бик күп нәмәне юғалтҡан булыр инем. Ә миңә юғалтырға кәрәкмәй. Ашығырға. Был йылдар миңә кире әйләнеп ҡайтмаясаҡтар, апа.

Һеҙгә һәм Ғилемдар ағайға ҙур сәләм! Хәҙергә хушығыҙ!

Сәләм менән, *Һеҙҙең* РӘМИ.

Ленинград.

Сәләмдең ҡәберен таба алманым. Иң ҙур үкенес шул. Союзда белмәйҙәр ҡәберен. Минең күңел тулып китте.

* * *

Мәрйәм апай (тим инде).

Күп сәләм беҙҙән.

Уҡыуҙар башланып китте. Хәҙер инде үҙебеҙ бер ойошма булырлыҡ башҡорттарбыҙ. Тик Ғабдулла ағай ғына килмәгән. Шакир, Рафаэль, Рәис беренсе курста уҡый башланылар. Мин библиотекала ҡаҙынырға тотондом. Салауат хаҡындағы бөтә материалдар һәм фольклор материалдары менән ныҡлап танышыу, башҡорттар тураһында этнографик яҙмаларҙы уҡыу— быйылғы уҡыу йылымдың төп маҡсаты. Уҡылғандарҙың үҙемә иң кәрәкле-ләрен күсереп алам. Әле Нефедов һәм Игнатьевтарҙы уҡыйым. Ф. Нефедовтың «Русское богатство» (октябрь, 1880) журналында «Салауат — башҡорт батыры» тигән бик матур әйбере бар. Салауаттың халыҡтан яҙып алынған йыр, шиғырҙары прозала яҙылған. Игнатьевтың «Башкир Салават Юлаев, пугачевский бригадир, певец и импровизатор» (Казань, 1894) китабынан Дәүләтшин яһаған тәржемәләрен күсереп алдым.

Уҡыйым да, ниңә быларҙы башҡортса баҫып сығармайҙар икән, тип уйлайым. Бөтә первоисточниктар шунда бит, бик яҡшы итеп яҙылғандар.

Кисәге Руденконың «Башҡорттар» китабын уҡый башланым. Этнографик яҡтан был бик ҙур хазина. Бик күп нәмәләрҙе белергә була.Ҡыуанып бөтә алмайым. Тик ваҡыт ҡына шул тиклем тар.

Һеҙ «Абай» тураһында һөйләгәндән бирле, баштан бер уй китмәй — Салауат тураһында, Башҡортостандың шул замандағы тормошон күрһәтеп, ҙур бер әйбер (шиғыр менән) яҙырға ине. Был турала һис тә кешегә һөйләйһем килмәһә лә, һеҙгә әйтәм инде. Шул эш тураһында уйлаһам, бөтә йөрәк ҡалтырап тора. Әгәр шуны үҙем теләгәнсә башҡарып сыҡһам, үҙемдең йәшәгән тормош юлыма үкенмәҫ инем. Үлһәм дә, рәхәтләнеп үлер инем. Алда шундай эш торғанлыҡҡа йөрәк шатлана, аҡыл ҡурҡа.

Был эш минең теләгем генә түгел, үҙем менән бер йылғаның — Йүрүҙән һыуын эсеп үҫкән Салауат алдындағы бурысым да.

... Хәҙер иң беренсе бурыс: ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған әйберҙәрҙе уҡырға өйрәнеү. Ҡәҙимсәһен, йәҙитсәһен, яңысаһын белергә кәрәк. Ленин библиотекаһында бик ҡыҙыҡлы яҙмалар бар. Мин шул кәкре-бөкрө хәрефтәр менән яҙылған һүҙҙәрҙең

эсендә нимә бар икәнен тилмереп ҡарап торам. Тиҙ генә белеп уҡы ла ебәр ине, тип ултырам. Юҡ, бер нәмә лә аңлай алмайым шул. «Записки Оренбургского отдела императорского Русского географического общества» журналында Батыршин тигән кешенең башҡорт йырҙарын яҙған күп биттәр бар; русса подстрочник менән. Башҡортсаға әйләндереп йыр итеп ҡарайым да, ҡайһылары бик матур йыр булып килеп сыға! Ҡайһылары мин яҙып алғанға ла оҡшаған. Ләкин былай ултырыу мөмкин түгел.

Мәрйәм апай! Һеҙ минең был хәлде Хәлимә апайға һөйләп бирегеҙ, әгәр ул мине үҙенең заочно уҡыусыһы итеп әлифба өйрәтергә ваҡыт тапһа, мин бик, бик шат булыр инем. Үҙенә күп сәләм менән уға бик үтенеп ҡалам. Айырым хат яҙманым инде. Һеҙ был турала яҡшыраҡ әйтә ала алаһығыҙ. Хәлимә апа шул ғәрәп әлифбаһының элеккеһен һәм яңыһын яҡшылап өйрәтеп, төрлө үҙенсәлектәрен әйтеп яҙһын ине.

Ышанып көтәм.

Ҡайтҡанда үҙе менән һөйләшеп ултырырға һис тә ваҡыт булманы.

Хатта Өфөнө рәтләп күрә лә алманым. Ләкин был үткән йәй өсөн үкенмәйем. Башҡортостан буйынса был тәүге аҙымдар миңә байтаҡ байлыҡ өҫтәне. Хәҙер минең күҙ алдымда әллә нисә тиҫтәләгән ҡарттар, ҡурайсылар, йырсылар тора... Хәҙер бөтә күрелгәндәрҙе, ишеткәндәрҙе, тыңлағандарҙы тәртипкә килтерәһе, яҡшылап яҙаһы бар. «Халыҡ йөрәге» тип атайһым килә.

Был тәүге аҙым бик күп йөрөргә кәрәклекте әйтте. Институтты бөткәс, бер нисә йыл шул халыҡ ижадын йыйыу, тормошто ныҡлап өйрәнеү өсөн, телде яҡшылап белеү өсөн көньяҡ район газеталарында йәки Стәрлетамаҡ газетаһында эшләргә тип уйлайым әле (баш һау булһа).

Кәйеф һәйбәт. Бүлмәлә дүртәү торабыҙ: Леонид Соловьев (Воронеж шағиры), Михаил Чебодаев (хаккас элекке), Руслан Прохоров — Смоленскиҙан килгән художник егет. Былтырғы Маршак дачаһында торған үҙ кешеләр. Бүлмә ятаҡтағы иң һәйбәте.

Үҙемдең өҫтәл (тартмалы, ҙур) һәм лампа. Теләгәнсә яҙ, уҡы. Китаптарҙы теҙеп ҡуйҙым. Дача ҡарағайлыҡ араһында. Иртән зарядка яһарға уңайлы. Илья Сельвинский дачаһы. Миҙхәт ағайға, Гүзәлгә, әбейгә лә күп сәләм. Барығыҙға ла таҙалыҡ теләп, РӘМИ.

Мәскәү.

Рәсемдәр әле эшләнмәгән. Ебәрермен. Таңға ла сәләм. Беҙ уға хәбәр итә алманыҡ инде, үпкәләмәһен.

Бухгалтер менән әллә эш бешмәнеме икән, апай? Көткән инек. Хәлдәр ул яҡтан шулайыраҡ. Сөнки бер ниһеҙ кителде.

* * *

11 май, 53.

Мәрйәм апа!

Күп-күп сәләм һеҙгә! Юғалдыммы? Үҙем өсөн дә юғалыбыраҡ торҙом шул. Ярай, был турала һөйләп тораһы ла юҡ инде. Хәҙер яңынан йәшәй башланым! В. Ждановтың Добролюбов тураһындағы китабын уҡып сығыу менән үҙ-үҙемде ҡулға алдым. Тургеневтың мәҡәләләрен уҡып сыҡтым да хәҙер романдарына тотондом. Әле «Накануне»һын яратып уҡып, тәржемә итеү тураһында ла уйлап ҡуйҙым. Тик мин өлгөрә алмам инде. Хәҙер «Рудин»ды башланым. Добролюбовтың мәҡәләләре менән бәйләп, өйрәнеп, әкрен генә уҡыйым. Поспеловтың лекцияларын да яратып тыңлайым. Инде Гончаровҡа күстек. Уны ла ныҡлап уҡыйһы бар. Тиҙҙән экзамендар ҙа етә инде. Эш быйыл ғәҙәттән тыш күп буласаҡ. Сөнки Көнбайыш әҙәбиәтенән бер ни ҙә уҡымағанмын. Бер Бальзаҡ ҡына әле ҡот осҡос! Ләкин шатланып көтәм. Әҙерләнәм. Шулай ҙа ваҡыт бик аҙ ҡалды. Практиканан килгәс, бик күп көндәрҙе бушҡа үткәрҙем. Күңелһеҙләнеп тик йөрөнөм. Иптәштәрҙе лә үҙемдән биҙҙереп бөтөрҙөм булһа кәрәк. Өфөнән хәҙер Рифғәт тә, Хәниф тә*, башҡалар ҙа хат яҙмайҙар. Бында Ғабдулла ағайға ла, Даһиға ла, Шакирға ла** асыу килеп йөрөй. Рәис менән дә үпкәләшеп алдыҡ. Ләкин Рафаэль менән Рәис минең өсөн юғалмаҫтар кеүек. Үҙ-ара төрлө ҡаршылыҡтар булып ала, ләкин бынан һуң беҙ нығыраҡ яҡынаябыҙ. Бөтә сифаттар, бергә йәшәгәндә, бергә булғанда, ауырлыҡтар осрағанда ғына, һынала икән. Ғөмүмән, тормош бик ҡыҙыҡ. Ә экзамендарҙан һуң бер-ике көнгә Ленинградҡа барып килергә, унан һуң Рәис менән бергәләп пароходта Ҡазан аша донъя күреп ҡайтырға ниәт бар. Тик материаль яҡ нисегерәк булыр әле. Шулай ҙа теләк бик ҙур. Был ял да итеү буласаҡ әҙерәк. Унан һуң пароходта кешеләрҙе тыңлау уңайлыраҡ буласаҡ. Юл оҙаҡ ҡына, яҙырға ла мөмкин. Ә Рәис быйылғы йәйҙе тағы ла пароходта эшләп үткәрергә уйлай. Сөнки был тормошто хәҙер яҡшы күҙ менән күреү өсөн иң яҡшы, иң уңайлы урын. Берәй

ҙурыраҡ әйбер яҙыу өсөн бында яңынан эшләү бик кәрәкле. Ә мин яңынан сығып китәсәкмен үҙемдең сәйәхәткә. Бәлки, газетанан эш бирерҙәр. Йәйге практиканы ла үтергә кәрәк бит. Редакцияла ултырағы килмәй хәҙер. Белдем инде, етер.

Ҡалдырған шиғырҙарҙы һаман да баҫмайҙар. Үҙҙәре шул тиклем ышандырып ҡалған булдылар. Был минең эште лә туҡтатып тора.

Майҙы күңелле үткәрҙем. Рәғиҙәнең туйы булды. Райондаштың башын да ашаныҡ! Кейәү кеше юрист булып ҡайтасаҡ, ә Рәғиҙә педты бөттө инде. Студенттар туйы тураһында бер әйбер яҙасаҡмын әле.

Кемдәр ҡайҙа китеү тураһында уйлай?

Мәрйәм апа, һеҙ Дилара тураһында, ғөмүмән, шул хаҡта нимәлер әйтергә иткәйнегеҙ, яҙығыҙ. Ҡазанда мин уны күргә тейешмен. Һеҙҙең аҡылдың да кәрәк булыуы бар. Мәктәп тураһында яҙығыҙ. Әминә, Сажиҙә апаларға,*** бөтә уҡытыусыларға күп сәләм. Шулай уҡ класығыҙға, Миҙхәт ағайға, Гүзәлгә, әбейгә. Хушығыҙ!

Һеҙҙең РӘМИ.

* * *

7 гинуар, 1955.

Иптәш Муллабаев!

Һеҙҙең «Яңы йыл тостары», «Яңы клуб», «Партия» һәм «Саҡсауыл» тигән шиғырҙарығыҙ менән танышып сыҡтым.

«Саҡсауыл» үҙенең фекере менән дә, формаһы менән дә йәнле, матур. Баҫыласаҡ! Тик уның һуңғы строфаһын көслөрәк, тапҡырыраҡ итеп эшләргә лә мөмкин булыр ине. Ә башҡа шиғырҙарығыҙ шатландырмай, хатта — борсолдора. Сөнки һеҙ шағир күңелле, эҙәбиәтте ысынлап яратҡан кеше. Көсөгөҙ ҙә бар. Ләкин эҙләнмәйһегеҙ, күрәһең. «Яңы йыл тостары»нда яңылыҡ юҡ. «Яңы клуб» та бик иҫке. Ә партия тураһындағы шиғырығыҙ башынан аҙағына тиклем дөйөм риторик һүҙҙәр менән биҙәлгән. Бер ниндәй ҙә яңы поэтик табыш күренмәй.

Ғөмүмән, һуңғы ваҡытта һеҙ бик пассивлаштығыҙ булһа кәрәк? Тауышығыҙ ишетелмәй. Йәш яҙыусыларҙың һуңғы кәңәшмәһендә ҡатнашмауығыҙҙың сәбәбе лә, минеңсә, шунда булырға тейеш.

Яҙыусылар союзына үпкәләп кенә эш сыҡмаясаҡ. Иң яҡшыһы — үҙеңә үпкәләү, эшләү.

Яңы йылда яңы шиғырҙарығыҙҙы көтәбеҙ. Эшегеҙҙә уңыш теләп, сәләм менән *Рәми Ғарипов.*

* * *

25/II—56.

Хөрмәтле Сөнәғәтов ағай!

Конкурсҡа ебәргән очеркығыҙ тураһында яуап яҙмай, һеҙҙе бик интектергән булһаҡ, ғәфү итегеҙ. Беҙҙе лә бит был очеркығыҙ аҙ интектермәне.

Сөнки, һеҙҙең үҙ һүҙегеҙ менән әйткәндә, — «был очеркта уйланылып яҙылған бер нәмә лә юҡ», дөрөҫөрәге — очерк уйланып еткерелмәгән. Һеҙгә уны, беҙҙең иғтибарһыҙлыҡтан файҙаланып, ике ай эсендә һәр бер һүҙенә тиклем уйлап еткерергә лә, яңынан эшләп сығырға ла мөмкин булыр ине. Матбуғат аша халыҡ менән һөйләшеүҙең ни тиклем яуаплы һәм уйланылған булыуын аңлаған кешеләр, үҙҙәренә ныҡ талапсан булған кешеләр шулай итәләр.

Әлбиттә, һеҙ «уйланылып» тигән һүҙҙе «уйҙырма» — булмаған нәмәне яҙыу мәғәнәһендә алаһығыҙ, очеркығыҙҙа тик «ысынбарлыҡтағы кешеләр һәм факттар» ғына булыуын әйтергә теләйһегеҙ.

Ләкин әҙәби әҫәр яҙаһығыҙ икән (ә очерк ул әҙәби әҫәр булырға тейеш тә), шуны аңларға кәрәк: ысынбарлыҡтағы һәр бер кешене, тормошта осраған һәр бер фактты түкмәй-сәсмәй ҡағыҙға күсереү очеркистың бурысы түгел. Һеҙ, әлбиттә, факттарҙы «бесән сабыу башланғандан уҡ» бик тырышып йыйғанһығыҙ. Ә уларҙың иң кәрәклеһен бөтөнләй кәрәкмәгәндәренән айырып ала белмәгәнһегеҙ. Бына шуның өсөн дә очеркығыҙ ғәҙәттән тыш күп һүҙле, тарҡау, һәм һеҙҙең ниндәй фекер әйтергә теләүегеҙ ҙә асыҡ түгел. Шулай итеп, һеҙ факттар аҫтында күмелеп ҡалғанһығыҙ. Ә очеркист өсөн улар эшкәртелмәгән сырье — руда ғына бит. Факт факт булып ҡала, ә художестволы әҫәр йәки очерк була алмай. Горький Бальзактың «Глуп как факт!» тигән әйтемен килтереп, фактҡа ҡарата ни тиклем талапсан булырға кәрәклекте һәр саҡ күрһәтеп килде.

Унан һуң очеркты документаль фактгар менән генә эш итә тип аңлау дөрөҫ түгел. Очеркта «уйланылып» сығарылған образ һәм картиналар ҙа булырға мөмкин. Тургеневтың «Һунарсы яҙмалары»н ғына уҡып ҡарағыҙ. Уларҙа тик фактография ғынамы икән? Түгел, әлбиттә! Тургенев үҙе фантазияһыҙ, уйлап сығарыуһыҙ әҙәбиәт йәки сәнғәт булмай тигән фекерҙә. Тормошто дөрөҫөрәк, тәрәнерәк сағылдырыу өсөн, әҙәбиәттә «уйлап сығарыуһыҙ» (вымыселһыҙ), дөйөмләштереүһеҙ, типиклаштырыуһыҙ мөмкин дә түгел. Сәнғәттең был мотлаҡ законы очерк жанрына ла туранан-тура ҡағыла, әлбиттә. Мамин-Сибиряк, Николай Крашенинников кеүек Урал яҙыусылары, шулай уҡ Глеб Успенский, Короленко кеүек очерк оҫталары ла бынан һис тә ҡурҡмағандар. Тормошто, кешеләрҙе белмәгән кешенең фантазияһы ла юҡ. Сөнки фантазия нигеҙе ошо уҡ ысынбарлыҡта. Ә ысынбарлыҡтың асылына төшөнмәйенсә, уның төрлө күренештәрен түкмәй-сәсмәй теүәл күсереп алыу ғына дөрөҫлөк була алмай. Фөмүмән, дөрөҫлөк теүәллек түгел, ә эштең асылы.

Эштең бына ошо асылы һеҙҙең очеркта юҡ.

Очеркығыҙ «Малсылыҡ хеҙмәтенең кешеләре һәм эш тәжрибәләре» тип аталһа ла, унда кешеләр ҙә һәм уларҙың эштәре лә күренмәй, ә уларҙың тик исемдәре, бер туҡтауһыҙ һөйләнеүҙәре генә бар.

Һеҙҙең төп бурысығыҙ малдарҙы түгел, ә кешеләрҙе күрһәтеү, уларҙың уй-тойғоларын, характерҙарын асып биреү ине. Ләкин быларҙың береһе лә юҡ. Исмәғилдең төрлө темаға көн һайын докладтар һөйләүе яһалма һәм бик ваҡсыл. Уның һүҙҙәренә бер нисек тә ышанып булмай. Мал ҡараусы Исмәғилде һеҙ бер туҡтауһыҙ ошондай бер төрлө, ялыҡтырғыс ҡабарынҡы һүҙҙәр менән биҙәкләргә тырышаһығыҙ:

«Скотник С. Исмәғил (уның фамилияһы ла юҡ!) һыйырҙар артынан яҡшы күҙәтеү яһап тора. Малдарҙың тәртипле ашанып йөрөүҙәрен, айырылышып урман ағастары араһында инеп китмәүҙәрен, сабынлыҡҡа үрмәләмәүҙәрен ентекле күҙәтеп тора. Урал тауы арҡаларында малдарҙың бөтәһенең дә тигеҙлек өлөштә ашанып йөрөүҙәрен хәстәрләй... Малдарҙы нисек көтөү һәм тиҙерәк уларҙың көрләнеү — һимереүҙәренә диҡҡәт итә. С. Исмәғил Урал тауы итәктәрендә, морон йорт башында мал көтөп барыуын яҡшы аңлай һәм малдар көтөү тәртибенә ныҡ тәьҫир итә белә. С. Исмәғил ауылда эшләү һәм оҫталыҡ менән

мал көтөү эшен ауылдың оло кешеләренән өйрәнгән. С. Исмәғил малдарҙың ашаныуы һәм уларҙың яҡшы тәрбиәләнеүҙәре, һимереүҙәре һәм көрәйә барыуҙары менән ҡыҙыҡһына, малдарҙы яҡшыраҡ тәрбиәләүҙе ҡайғырта».

Мал, мал, мал, малдарҙы, малдарҙан, малдарға! Был әле беренсе биттә генә, ә һеҙ бит ошо телдә ваҡ ҡына хәрефтәр менән яҙылған ҙур-ҙур табаҡ биттәрҙе ун алтыға еткергәнһегеҙ.

— Йәшәһен беҙҙең һыйырҙар! — тигән лозунг әйттереүгә тиклем барып етәһегеҙ.

Хөрмәтле Сөнәғәтов ағай, һеҙгә был урында «кеше ышанмаҫ һүҙҙе ысын булһа ла һөйләмә» тигән бик яҡшы һүҙҙе онотмаҫҡа кәрәк ине.

Очеркығыҙға башҡаса анализ яһап тороуҙың кәрәге юҡ. Сөнки уны яҡшы ғына бәләкәй бер мәҡәлә итеп тә булмай. Әгәр ҙә уны үҙегеҙ кәрәкле тип тапһағыҙ, яңынан йыйнаҡ ҡына бер хәбәр итеп эшләрһегеҙ.

Сәләм менән Р. Ғарипов.

* * *

4 май, 1956.

Зәки!

Бына һинең «Туған партияма» тигән һуңғы шиғырыңды ла алдыҡ. Редакцияла бынан башҡа һинең егерменән артыҡ шиғырың ята. Күләме менән улар ҙур ғына бер йыйынтыҡ була алыр ине. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың береһе лә баҫып сығарырлыҡ түгел.

Сөнки улар бик примитив, бик дөйөм һәм беҙҙең поэзияла бик күп ҡабатланған иҫке шиғырҙар. Уларҙан авторҙың ниндәй ҙә булһа яңы фекер әйтеүен, үҙ тауышын, үҙ моңон ишетеп булмай. Уларҙы уҡығандың һуңында, автор өсөн уңайһыҙланыуҙан башҡа, күңелдә бер ни ҙә тороп ҡалмай. Бындай яңғырауыҡлы һүҙҙәр теҙмәһе, тапалып бөткән традицион образдар, сағыштырыуҙар кемде генә уйландыра һәм тулҡынландыра алһын? Кемгә генә һуң уларҙың кәрәге бар? Юҡ, әлбиттә!

Һиңә, Зәки, үҙеңдең яҙмышың хаҡында бик ныҡ уйлап ҡарарға ваҡыттыр инде. Сөнки һин ҡулыңа тәү башлап ҡына

ҡәләм тотҡан кеше түгелһең, ә күптән бирле бик күп яҙышҡан, бик күптәргә үҙеңде көсәнеп-көсәнеп шағир итеп күрһәтергә тырышҡан кешеһең. Тураһын әйтергә кәрәк, Зәки, төрлө дистанцияларға ялыуҙар яҙып ҡына шағир булып булмай! Был әҙәбиәт тарихында күрелмәгән хәл! Шағирлыҡҡа бер генә юл бар — ул да булһа — яҡшы шиғыр яҙыу, үҙ өҫтөңдә бер туҡтауһыҙ эшләү, уҡыу, өйрәнеү. Ә һин уҡымайһың, иптәш, үҫмәйһең. Был хаҡта һинең һәр бер шиғырыңдың һәр бер юлы әйтеп тора. Юғиһә һин партия тураһында яҙып та бына шундай мәғәнәһеҙ һүҙҙәр әйтмәҫ инең:

Бала сағым, күбәләктәй осоп,
Һөт өҫтөндә үҫеп сыныҡты... (?!)
Ҡоралыбыҙ — белем алыу булды,
Фән тауынан алыҫ торманыҡ... (?!)
Былар барыһы — туған партиямдың
Тоғро юлдан атлау алымы! (?!)

Бына шундай буталсыҡ, нәмә һөйләгәнеңде үҙең дә белмәй яҙған юлдарыңды һин «Туған партияма» тип атайһың һәм иҫеңә ни килә — шуны теҙеп сығаһың. Бындай эшкә партия мохтаж түгел. Был партия исемен түбәнәйтеү, ҡәҙерһеҙләү һәм яуапһыҙлыҡтың да иң яуапһыҙлығы; партия һәм халыҡтың әҙәбиәтселәр алдына ҡуйған талаптарын аңламау был. Ә һин үҙең һәр бер хатың һайын ошо сейлебешле шиғырҙарыңды баҫып сығарыуҙы талап итәһең. Һиңә аҙ ғына булһа ла скромныйыраҡ булыу зарар итмәҫ ине, Зәки. Юҡһа һинең өсөн оялырға тура килә.

Һүҙҙәр менән эш итә белмәйһең: теленә абынып йығылырлыҡ. Ә тел бит, үҙеңә билдәле булыуынса, һинең төп материалың, ҡоралың! Әҙәбиәтсенең теле көрмәлеп торорға тейеш түгел инде.

Очеркың да, фельетоның да, Баймаҡ театры һәм Батыр Вәлид тураһындағы мәҡәләң баҫылып сығырлыҡ түгел. Был хаҡта газеталарҙа ла, журналда ла тейешле фекер әйтелде. Ғөмүмән, һин әҙәбиәттә һуңланың, Зәки. Мин тик һинең тормоштан һуңламауыңды теләйем. Тураһын әйткән өсөн ғәфү ит.

Сәләм менән, Рәми.

* * *

6/IX—56.

Иптәш Исмәғилов!

«Әгәр ҙә мөмкин булһа, ошо шиғырымды, хаталарын төҙәтеп, М. Мәжит псевдонимы аҫтында баҫып сығарыуығыҙҙы үтенәм» тигәнһегеҙ.

Был мөмкин түгел. Сөнки шиғырығыҙ әле бик йомшаҡ һәм тарҡау. Тәү башта һеҙгә шиғыр теорияһының иң ябай төшөнсәләре менән таныш булырға, әҙәбиәт теорияһын өйрәнергә кәрәк. Беҙ һеҙгә М. Горькийҙың «О литературе» тигән китабындағы мәҡәләләр менән бик ентекләп танышып сығырға, шулай уҡ «О писательском труде» тигән йыйынтыҡты уҡырға кәңәш итер инек. Шуларҙы уҡығандан һуң һеҙ «ошо шиғырымды, хаталарын төҙәтеп... баҫып сығарығыҙ» тип әйтеүҙең ни тиклем мәғәнәһеҙ һәм көлкө булыуын үҙегеҙ ҙә яҡшы аңлар инегеҙ.

Үҙ эшеңә шундай еңел ҡарашта булыуҙың әҙәбиәт менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ. Унан һуң һеҙ төрлө псевдонимдар менән мауыҡмағыҙ. Әгәр ҙә яҡшы әҫәрҙәр яҙһағыҙ, үҙ фамилияғыҙ ҙа бик матур яңғырар.

* * *

6/IX—56.

Иптәш Бикбулатов!

Кешене төрлө-төрлө бик күп эштәргә өйрәтергә мөмкин, ләкин шағир булырға өйрәтеү мөмкин түгел. Әгәр ҙә һеҙҙә шиғыр яҙыу һәләтлеге, шиғыр осҡоно бар икән, уны үҙегеҙ генә үҫтерә алаһығыҙ. Әлбиттә, һеҙгә ҡайһы бер кәңәш биреүселәр булыр, ләкин төп эш үҙегеҙҙә. Эшләргә, бик күп эшләргә, бер туҡтауһыҙ өйрәнергә, уҡырға кәрәк.

Редакцияға ебәргән «Тыуған ауыл» һәм «Тыуған ил» тигән шиғырҙарығыҙҙан ғына сығып, һеҙгә был эшкә ныҡлап тотонорға кәңәш итеү бик ситен. Сөнки шиғырҙарығыҙ әле бик йомшаҡ һәм бик дөйөм, һеҙгә тиклем бик күп ҡабатланған һүҙҙәр теҙмәһенән генә тора. Ә үҙегеҙ генә уйлаған уйҙар, үҙегеҙ генә кисергән хистәрҙе күреп булмай.

Маяковскийҙың «Как делать стихи?», Исаковскийҙың «О секрете поэзии», Маршактың «О хороших и плохих рифмах», Паустовскийҙың «Поэзия прозы» һәм Фадеевтың «Труд писателя» тигән мәҡәләләрен «О писательском труде» тигән китаптан табып уҡып сығыу һәм Горькийҙың әҙәбиәт тураһында яҙған мәҡәләләрен, хаттарын уҡыу бик яҡшы булыр ине һеҙгә.

* * *

Йәштәр ижады хаҡында фекерҙәр

Рәшит Назаров

1) Бәхет.
2) Бер һүҙ өҫтәр өсөн.
3) Төнгө уйланыуҙар.
4) Ерҙән.
5) Иртә һайын.
6) Йөрәк.

Киң ҡоласлы образдар, оригиналь фекер, сағыу, яңы, ҡуйы һүҙ буяуҙары, көтөлмәгән ҡыйыу сағыштырыуҙар, донъяны яңы күҙ менән ҡабул итеү, тормош тантанаһын раҫлау һәм йәшлек романтикаһы, ә тел бик башҡортса! Форма төрлөләгә!

Ҙур поэзияның бөтә мөмкинлектәре бар унда. Шул шиғырҙары менән генә лә башҡорт поэзияһының сағыу, үҙенсәлекле бер битенә инәсәк. Мәлих Харис шул бер йыйынтығы менән генә лә йәшәй.

Самородок, тәбиғәт ҡосағында үҫкән бер болан балаһы, тинеләр.

Ләкин Рәшит Назаров һис тә самородок түгел, ә бөтә башҡорт әҙәбиәтенең ҡаҙанышынан тыуған талант. Бабич йоғонтоһон да, Р. Ниғмәти, М. Кәрим йоғонтоһон да тойорға мөмкин, ләкин үҙенсә талант. Буш ерҙә талант тыумай. Үҫештең сифатҡа әйләнеүе, һикереш.

1962 йыл.

Рәшит Әхтәров

Рәшиттә — талант. Үҙенсәлекле талант. Тел байлығы, оригиналь форма. Ләкин мауығып китеп, архаикаға ла барып төшә, тышҡы форма менән эүрәп, йөкмәткегә лә зыян килтерә. Һәм тематика тарлығы, тормош етмәүе һиҙелә. Үҙ ижадына ғәмһеҙ ҡарау, ҡайһы бер кешелек йомшаҡлығы үҫеүен сикләргә мөмкин. Һаманғаса йыйынтығын сығармау ҙа быға булышлыҡ итергә, әҙәбиәт алдындағы яуаплылығын сикләргә мөмкин.

Тормошҡа, уҡытырға китеүе яҡшы, тик был тормошта үҙен яҙыусылар вәкиле итеп тота белһен, халыҡ араһында йөҙөп йөрөп эшләһен, ваҡытын буш нәмәләргә эрәм итмәй, ижадҡа ғына бирһен ине.

Ни өсөндөр, уның ҡайһы бер яҡтарын һиҙенеп, шул теләкте ысын күңелдән теләге килә.

1962 йыл.

* * *

Иптәш Таһирова!

Бына әле генә Сильва Капутикяндың һеҙ тәржемә иткән «Киттең» тигән шиғыры менән танышып сыҡтым да, һеҙгә тәржемәгеҙ хаҡында бер нисә һүҙ әйтергә булдым.

Был бик көслө, матур шиғыр! Күрәһең, ул һеҙгә бик оҡшаған булғандыр. Ләкин тәржемәлә уның ҡоро фекере генә тороп ҡалған, ә бөтә моңо, эске байлығы — шиғриәте юғалып ҡалған.

Нилектән? Беренсенән, һеҙ оригиналды һүҙмә-һүҙ тәржемә итергә тырышҡанһығыҙ. Ә һүҙмә-һүҙ тәржемәнең бер ҡасан да дөрөҫ булғаны юҡ. Пушкин был хаҡта бик тапҡыр әйткән: «Ҡолдарса тоғролоҡ ҡолдарса хыянатҡа ла әйләнергә мөмкин». Теләһәгеҙ ҙә, теләмәһәгеҙ ҙә — был шулай килеп сыҡҡан да инде. Икенсенән, һеҙҙең шиғри техникағыҙ ҙа бик йомшаҡ әле. Рифмаларығыҙ бик ярлы, хатта һеҙ ритмды ла һаҡламағанһығыҙ. Ә был бит шиғырҙың иң элементар талабы!.. Тәржемә оригиналды алыштыра алмай әлбиттә, шулай ҙа тәржемәсе автор менән ярышырға хаҡлы. Шунда ғына ул уға яҡыная ала.

Бына шул ине әйтер һүҙ. Ә һеҙ үҙегеҙ шиғырҙар яҙаһығыҙмы һуң? Яҙһағыҙ — ебәрегеҙ.

Сәләм менән Рәми Ғарипов.

15 октябрь, 1962 йыл.

* * *

Әҙәбиәтте өсәү тыуҙыра. Беренсеһе — мин, икенсеһе — һин, өсөнсөһө — ул. Мин — шағир, һин — уҡыусы, ул тәнҡитсе.

Беҙҙән башҡа әҙәбиәт юҡ һәм булмаясаҡ та. Шуның өсөн өсөбөҙгә лә яҡшы эшләргә кәрәк. Мин яҙыуымды, һин уҡыуыңды, ул үҙенең тәнҡитен генә белеп — бер ниндәй ҙә эш сығара алмаҫбыҙ.

Ә эш ауыр. Ләкин ул кәрәк! Һәм ул шатлыҡлы эш, кешегә тормош бирә торған, рухи аҙыҡ бирә торған һәм кешене кеше булырға өйрәтә торған эш.

Шул эш өҫтөндә беҙ үҫәбеҙ!

Шуға ла был эште туҡтатып тороу йәки уға өҫтән-өҫтән генә ҡарау — енәйәт.

Беҙ бер-беребеҙҙе яҡшы белергә тейешбеҙ. Юғиһә беҙҙең бер-беребеҙгә кәрәгебеҙ ҙә юҡ.

Был ғына ла етмәй. Беҙ тормошто белергә тейешбеҙ. Уның үткәнен, бөгөнгөһөн һәм иртәгәһен күрә белергә тейешбеҙ.

* * *

12/XII—69.

Бөрйән районы,
Байназар ауылы,
Аралбаев Ҡәҙим Абдулғалим улына

Ҡәҙим!

Ни хәл генә? Сәләм! Үҙемдең эш тығыҙ булһа ла, шуны ғына белдереп ҡуймаҡсы булдым.

Әсә хаҡындағы ете шиғырыңды алдым, бик кәрәкле шиғырҙар! Инеш һүҙе-ние менән бер һүҙен дә үҙгәртәмәй, өсөнсө һанға бирергә тип планлаштырып ҡуйҙым. Шәп буласаҡ!

Тик һәр береһенә ваҡ ҡына һүрәттәр ҙә булһа, оторо китер ине. Юҡмы шунда Байназарҙа башҡортса ғына һүрәт эшләрҙәй кеше? Теге Сөләймәнов тигән БДУ егете ҡайҙа икән? Белмәйһеңме? Юғалды ла ҡуйҙы бит! Әнә ул ҡылып ҡуйыр ине, исмаһам.

Ярай, булмаһа, бында эҙләргә тырышырбыҙ. Бәлки, Әхмәт ағайың риза булыр.

Йә, хәлдәрең ҡалай?

Бик һирәк яҙаһың — эш күптер инде. Яҡшы ваҡыт булырын көтәп ятма. Һинән мин бик күпте көтәм. Төрлө жанрҙа көсөңдө һынап ҡара. Һин тормоштоң эсендә ҡайнап йөрөйһөң. Күберәк күреп, елегеңә һендереп ҡалырға тырыш! Һәм, әлбиттә, бөтәһен дә ҡағыҙға тимгетә барырға тырыш!

Беҙҙең хаталарҙы ҡабатламағыҙ инде. Ғүмер үтә лә китә икән ул. Элек шулай тигәндәренә күңел ышанмай торғайны...

Ярай, һиңә өгөт-нәсихәт уҡып тораһы юҡ. Һиндәй егеттәребеҙ күберәк булһын ине лә бит... Булғандары ла илке-һалҡы йөрөй шул.

Журналдың хәле бер көйө, әллә ни ҡолас киреп булмай, бисә-сәсә менән матбуғат эшендә эшләү үтә ҡыйын икән. Ҡатын-ҡыҙ, күрәһең, үҙ затына ғәмһеҙерәк булалыр. Бына һинең кеүек бер-ике егет менән бына тигән журнал сығарырға булыр ине!.. Эштәге ығы-зығы журналдың тиражына ла килтереп һуға. Сығып йөрөп булманы. Шуға бик эс боша. Урындарҙа ла журналдың әһәмиәтен бик аңлап еткермәйҙәр, бөтә нәмә үҙ ағышы менән генә эшләнә. Һеҙҙең Бөрйәндең Бөрйәне лә бит былтырғы кимәлгә еткерә алманы. Хәйбулла, Әбйәлил, Баймаҡ былай арыу ғына. Баймаҡ быйыл 2018-гә еткерҙе, Илеште уҙып, беренсе урынға сыҡты! Бының һыҡшы яҡшы, әлбиттә. Тик унда өс меңгә лә еткерергә булыр ине. Эш етмәй. Ситтән быйылға күп булмаҫ әле, каталогка инмәй ҡалыу бөлдөрҙө.

Әҙерәк конференция-фәләндәрҙә һүҙ ҡуҙғатҡыла әле. Байназарҙа күпме? Бөтә коллективығыҙға, киленгә сәләм әйт. Күберәк яҙышығыҙ! Тәрбиә, ғөрөф-ғәҙәт, яҡшы традициялар темаһын нығыраҡ ҡүтәрергә ине...

Ярай, хатҡа яҙып һүҙ бөтмәҫ, хуш. Сәләм менән Рәми ағайың.

P. S. Тиҙҙән «Аманат» сыға — ебәрермен. Бәлки, яңы йылда барып та сығылыр әле, алла бирһә... Яңы йыл ҡотло булһын!.. Яҙ!

* * *

Хөрмәтле Вәлиев иптәш!

Йырҙарығыҙ менән таныштыҡ. Ләкин уларҙы йыр тип әйтеүе ҡыйыныраҡ. Сөнки улар шиғри яҡтан бик йомшаҡ эшләнгән. Бына, мәҫәлән, «Уф, яныма килһәң ине» тигән йырығыҙҙың тәүге куплеты:

Ҡасан әйләнеп ҡайтырһың,
Һағындым — **күрер инем.** (?)
Иртәнге елдәргә ҡуштым,
Сәләм **әйтерһегеҙ, тип.** (?)

Быны, әлбиттә, көйө менән йырларға булалыр. Ритм һаҡланған. Ә рифма тигән нәмә бөтөнләй юҡ. Ҡолаҡҡа бер ҙә йоғошло булып ишетелмәй. «Аҕиҙелгә таш ырғыттым, шап итеп ҡалды» тигән һымағыраҡ килеп сыҡҡан. Туҡай әйтмешләй, уны «бешеп етмәгән» йырҙар дәфтәренә генә яҙып ҡуйырға мөмкин. Халыҡ ундай йырҙарҙы йырламай. Шуның өсөн дә халыҡта «йырҙың йыртығы юҡ», тигән бик тапҡыр һүҙ бар.

Ә һеҙҙең йыр йыртығыраҡ шул, туғанҡай. «Сәскәләр» тигән йырығыҙҙың тәүге куплеты төҙөк кенә. Ләкин ул үтә билдәле халыҡ йырҙарын хәтерләтә — үҙегеҙҙеке булып яңғырамай.

Унан һуң йырҙарҙың йөкмәткеһе лә бер төрлө. Икеһендә лә һөйгән йәр өсөн илау-һыҡтау ғына: «уф, яныма килһәң ине» лә хәлемде белһәң ине», «түштәреңде биҙәйем» дә «нисек итеп түҙәйем» кеүек үтә сөсө юлдарҙан ғына тора. Ә ысын, тәрән, оло тойғо юҡ.

Халыҡтың үҙ йырҙарын («Шәүрә килен», «Сәлимәкәй», «Һары ла сәс» һәм башҡа шундай мөхәббәт йырҙарына) иғтибарлап тыңлағыҙ әле: уларҙа ниндәй тәрән хистәр күмелгән, таш йөрәктәрҙе лә иретерлек бит!.. Халыҡ уларҙы, уҡый-яҙа белмәһә лә, теләһә ниндәй шағырыңа бирмәҫлек итеп гәүһәр-яҡуттарҙан ҡойоп ҡуйған. Ә шаян йырҙарын тыңлаһаң, исмаһам, рәхәтләнеп көлөп була. Шундай йыр ғына күңелгә ҡанат ҡуя, дәрт өҫтәй, донъяны матурлаша. Үҙ халҡыңдың бына шундай бөйөк, бай ижадынан өйрәнергә кәрәк. Был иң зур мәктәп буласаҡ.

Ә көйҙәрегеҙҙе Композиторҙар союзына килеп, ишеттереп ҡайтһағыҙ яҡшы булыр ине.

Сәләм менән — Рәми Ғарипов.

17 октябрь, 1963 йыл.

* * *

Хөрмәтле Насыров ағай!

«Хат» тигән хикәйәгеҙҙе алдыҡ һәм бына «хат»ҡа ҡаршы хат яҙырға ғына тура килә. Хикәйә килеп сыҡмаған. Уның бик ғәҙәти бер обыватель хатынан бер ниндәй ҙә айырмаһы юҡ шул,

аҕай. Әҙәбиәт, һәр хәлдә, бынан юғарыраҡ булырға тейеш инде. Ул тормош күренештәренең бер мөйөшөн генә фотоға төшөрөп алыу түгел. Факт ул үҙе генә әле бер ни ҙә әйтмәй. Бальзак хатта «факт һымаҡ ахмаҡ» («глуп, как факт») тигән һүҙҙе лә әйткән. Тимәк, фактты художник үҙенсә ҡабул итеп, уға ҡарата үҙенең сәнғәтсә ҡалыплаған бер фекерен әйтергә тейеш. Һин художник икән, тормош күренештәрен дөйөмләштереп, уны бер яңы шәкелдә ҡойоп бир!

Ләкин был яҡтан хикәйәгеҙ бик самалы. Унан һуң шул бер үк нәмәне бер үк кимәлдә күпме тылҡырға кәрәк инде? Яңы бер һүҙ әйтергә кәрәк тә баһа... Был хаҡта күп әйтелде инде. Һеҙ быға бер ниндәй яңылыҡ та өҫтәмәйһегеҙ. Һеҙ арыу ғына журналист, ағай, ләкин был хикәйәгеҙҙән генә сығып, һеҙгә артабан хикәйә яҙыу хаҡында берәй кәңәш бирep булмай.

Сәләм менән Рәми Ғарипов.

24 гинуар, 1964 йыл.

* * *

Ҡәҙерле Зилиә һылыуҡай!

Иң элек һине Әсә булыуың менән ҡотлайым, үҙеңә әсәлек бәхете, эшеңдә, тормошоңда ҙур уңыш теләйем, ғаиләгеҙ күркәм, татыу булһын!

Редакцияға ебәргән шиғырҙарыңды уҡып, мин бик уйға ҡалдым. Уларҙан, бығаса шиғыр яҙғаның булмаһа ла, һинең бик шиғри күңелле булыуың, донъяны үҙеңсә күрә белеүең, өмөт-хыялдар менән йәшәүең күренеп тора. Ләкин был эшкә ысынлап тотонор өсөн бик һуң түгелме икән? Һигеҙ класты бөткәнеңә лә алты йыл үтеп киткән, тормоштаһың. Тимәк, һиңә артабан уҡыу мөмкинлеге бик икеле. «Ә шулай ҙа уйлайһың, хыялланаһың, өмөт итәһең, үҙеңдең йәшәүеңдән нимәлер эҙләйһең». Шуларҙың «саҡ ҡынаһын да» кешеләргә еткереү өсөн һинән бик күп нәмә талап ителә шул, һылыуҡай. Шиғриәт ул иҫ киткес ауыр эш, ул үҙе өсөн бөтә нәмәңде ҡорбан итеүҙе һорай. Бының өсөн һиңә бөтөнләй яңынан йәшәй башларға кәрәк булыр ине. Ләкин һин хәҙер һигеҙенсе класҡа әйләнеп ҡайта алмайһың бит?

Ярай, «Өмөт» кеүек бер-ике шиғырыңды бер аҙ төҙәткеләп баҫып та сығарҙыҡ, ти. («Өмөт» тигән шиғырың баҫып та сығарылыҡ.) Ә унан һуң ни? Бөгөн бөтә ил кимәленә күтәрелгән башҡорт шиғырына һин ниндәй яңы фекерҙәр, ниндәй яңы образдар, быға̀са күрелмәгән ниндәй яңы шиғри шәхес алып килә алаһың?

Поэзияның бына ошо төп талаптарынан сығып ҡарағанда, бер-ике шиғыр яҙған кеше генә түгел, хатта бер-ике китап сығарған әҙиптәребеҙ ҙә әле быға яуап бирә алғаны юҡ. Сөнки һәр ысын шағир үҙе бер донъя, үҙе бер дәүләт бит ул! Уның был дәүләтендә ул тик үҙе генә ҡорған тәртиптәр бар. Уға бер кем дә ҡыҫыла, тығыла алмай. Уны, әлбиттә, ҡайһы берәүҙәр танымаҫҡа ла мөмкин. Ләкин ул бар икән, ҡасан да бер таныясаҡтар. Ысын шиғриәт бер ҡасан да юғалып ҡалмай. Тик бындай шиғриәткә — үҙ дәүләтенә ысын талант тау-ташлы юлдарҙан ялан аяҡ ҡанлы эҙ ҡалдырып ҡына килә ала.

Ә мин һиңә, үҙеңә шундай юл ярып кил, тип әйтә аламмы һуң, Зилиә һылыуҡай? Был бик шәфҡәтһеҙлек булыр ине. Был юлда ниндәй генә таланттар балҡып һүнмәне!..

Әлбиттә, бер-ике шиғыры ғына йыр булып ҡалғандар ҙа бар. Ғилмияза үҙ йырын үҙе сығарған бит. Әгәр ҙә йөрәгеңә һандуғас оялаған икән, һайраһын, күңелеңдә, тормошоңдо биҙәһен. Уй-хыял, шиғри хис менән йәшәү үҙе бер бәхет бит әле. Яҙмайынса булдыра алмайһың икән, яҙ, һылыуҡай, йырла. Тик башҡаларҙың йырына ла ҡолаҡ һал, күп уҡы, өйрән, шиғыр серҙәренә нығыраҡ төшөнөргә тырыш.

Яҙғандарыңды миңә ебәрергә теләһәң, Башҡортостан Яҙыусылар союзына ебәр.

Сәләм менән — Рәми Ғарипов.

* * *

Йылдар үткәс, был хатҡа «Ағиҙел» журналы аша түбәндәге баһа бирәләсәк. Әйтәйек, шағир, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев ошолай яҙған:

«Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың был хаты — уның бай эпистоляр мираҫының кескәй генә бер өлөшө. Хат аныҡ бер кешегә, атап әйткәндә, ул саҡта башлап яҙышыусы ҡыҙыҡай Зилиә Ҡужабәковаға адресланып яҙылһа ла, асылда,

йәш шағирҙарға һәм, ғөмүмән, әҙәбиәт донъяһына яңы аяҡ баҫыусы ҡәләмгирҙәргә тәғәйенләнгән булыуы менән әһәмиәтле. Унда Рәми Ғариповты йәш шағирәнең ижад яҙмышы ғына ҡыҙыҡһындырып ҡалмай, ә бөтә башҡорт әҙәбиәтенең хәлторошо, үҫеше һәм киләсәге борсой. Ижад кешеһенә ниндәй зур яуаплылыҡ, һаҡлыҡ һәм ҡәҙер менән ҡарау ҙа унда («һәр ысын шағир — үҙе бер донъя, үҙе бер дәүләт бит ул!..»), өмөтлө әҙип шәхесен үҫтереү һәм тәрбиәләүгә ни тиклем тәрән уйланылған, төплө яҡын килеү ҙә бар!

Шағирҙың йәш ҡәләмдәше Зилиә Ҡужабәковаға яҙған был хаты бик уйландыра. Хатты ул үлерҙән бер ай элек кенә яҙған. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ул ни тиклем оло өмөт менән һуғарылған. Унда тамсы ла күңел төшөнкөлөгө һиҙелмәй, киреһенсә, шағир үҙен түгел, ә туған әҙәбиәтен ҡайғырта. Ошо яғы менән хат йәш ҡәләм эйәһенә генә түгел, ә бөтә яҙыусыларға ла бер һабаҡ булып тора. Был һабаҡ бөгөн — бөтә мәҙәниәт һәм матбуғат баҙар экономикаһы менән быуылған бер мәлдә, рухи ҡиммәттәребеҙ арзанайып барған бер дәүерҙә — бигерәк тә мөһим яңғырай. Сөнки әҙәби ижад бөгөн бөтәбеҙҙән дә ҡаһарманлыҡ талап итә. «Шиғриәт ул — иҫ киткес ауыр эш, ул үҙе өсөн бөтә нәмәңде ҡорбан итеүҙе һорай...» — тип юҡҡа ғына иҫкәртмәй шағир.

Оло талант эйәһе, халҡы өсөн йөрәк утын аямаған Рәми Ғариповтың хаттары һәм яҙмалары, көндәлектәре — үҙе бер рухи байлыҡ, әҙәби тәжрибә һәм ижад мәктәбе. Уларҙы йыйыу, өйрәнеү һәм донъяға сығарыу — беҙҙең изге бурыс.

Ошо уңайҙа «Ағиҙел» журналы уҡыусыларына бер үтенес тә бар: әйҙәгеҙ, Рәми Ғариповтың хаттарын йыйыу эшен башлайыҡ. Кемдәрҙә уның хаттары йә бүтән яҙмалары һаҡлана, уларҙы Башҡортостан Яҙыусылар союзына ебәреүегеҙҙе һорайбыҙ»*.

---

* Журнал редакцияһынан:

Заманында Рәми Ғариповтың «яҙмайынса булдыра алмайһың икән, яҙ, һылыуҡай, йырла!» тигән фатихаһын алған Зилиә Ҡужабәкова Хәйбулла районының Илəс (Турат) ауылында тыуып үҫкән. Хəҙерге көндə Төмән өлкəһендə йəшəй, өс бала үҫтерə. Донъя мəшəкəттəре күп булһа ла, шиғырҙар яҙыуын ташламаған.

Өфөгə быйыл йəй килеүендə ул Башҡортостан Яҙыусылар союзына Рəми ағайҙың үҙендə нисəмə йыл һаҡлап йөрөткəн хатын һəм шиғырҙар менəн тулы ҡалын дəфтəрен ҡалдырып китте.

Беҙ Зилиəгə ихлас күңелдəн ижад уңыштары һəм уның менəн бергə йəшəгəн нефтсе яҡташтарыбыҙға, əҙəбиəтебеҙҙе онотмауҙарын теләйбеҙ.

* * *

13/I—77

Ҡәҙерле Флорида һеңлем!

Редакцияла һинең үтенес хатың менән бергә Иҫке Мөхәммәт ауылынан Йосопов Гәрәйҙең ҡулъяҙма шиғырҙар дәфтәре ятҡан икән. Шул дәфтәр минең ҡулға килеп юлыҡҡас, мин үҙемдең яҡташымдың күңел аманаты менән танышып сыҡтым да һиңә уны кире ҡайтарырға булдым. Сөнки үҙеңдең үтенесең шулай. Ҡулъяҙманың бик кәрәк булыуы ихтимал — Гәрәйҙең туғандарына, балаларына, тормош иптәше Минзирәгә ҡалдырған аманаты бит ул. Һаҡлаһындар әйҙә, иҫкә алғанда — йыр, шиғырҙарын, көндәлектәрен асып уҡыһындар.

Гәрәй, минеңсә, бик шиғри, матур күңелле кеше булған. Уның яҙғандары күңел тетрәткес. Ләкин ул уҡымай ҡалғанлыҡтан, махсус рәүештә әҙәбиәт менән шөғөлләнмәгәнлектән, был яҙмалар шәхси документ — иҫтәлек кимәленән күтәрелә алмаған. Уларҙа әҙәби культура ла, шиғыр техникаһы ла бик самалы. Шуның өсөн уларҙы матбуғатта файҙаланып булмай. Унан һуң улар йәшәү менән үлем араһында ятҡан кешенең йөрәк аһы булып, баштанаяҡ моң-зар менән тулған. Әлбиттә, бер-ике шиғырын эшләп бирергә лә булыр ине. Ләкин улар барыбер уның үҙ шиғырҙары булмаҫ ине. Быныҡ Минзирәгә лә, ҡыҙы Зәлиәгә лә кәрәге булмаҫ, тип уйлайым. Уларға был шиғырҙар нисек яҙылһа, шул көйө ҡәҙерлерәк, шул көйө ғәзизерәк.

Ҡулъяҙма хаҡында әйтер һүҙем шул.

Әгәр ҙә бик кәрәк тиһәләр, мин Гәрәйҙең Зәлиәгә арналған бер-ике шиғырын эшләп бирермен. Ләкин уларҙы мин үҙемә күсереп алып торманым. Тик Гәрәйҙең инәһенә арналған юлдарын, ҡайһы бер төштәрен генә блокнотҡа күсерҙем. Берәй проза әҫәре яҙғанда, уларҙы файҙаланырға мөмкин. Сөнки беҙ, яҙыусылар, ундай тормошсан төштө күрә лә алмайбыҙ бит. Күп нәмәне үҙебеҙ уйлап сығарабыҙ...

Гәрәйҙең көндәлектәрендә телгә алынған Рафаэль ағаһы — минең менән Өфө интернат-мәктәбендә уҡыған Рафаэль түгелме икән? Пединститутта уҡыны, ауыл Совете председателе лә булып эшләне.

Унан һуң Гәрәй үҙенең яҙмаларында Зәлиә тигән ҡыҙын ғына телдән төшөрмәй. Ике улы аҙаҡ тыуҙымы икән? Әле уның

ғаиләһе ни хәлдә? Минзирә ҡайҙа эшләй? Әгәр мөмкин булһа, шуларҙы асыҡлабыраҡ яҙ әле, Флорида һеңлем. Ә һин үҙең уларға кем булаһың? 25 йәше тулғас, ул 1947 йылғы түгелдер, 41-се йылғы булырға тейеш. Минән уның ғаиләһенә, туғандарына күп сәләм тапшыр. Беҙ яҡташтар бит. Мин үҙем Йүрүҙән буйы, Арҡауыл ауылынанмын.

Ярай, Флорида һеңлем, хәҙергә хуш.

Сәләм менән – Рәми ағайың Ғарипов.

* * *

15/I—77.

Нихәл генә, Әсмә һылыуҡай!

Тыуған-үҫкән яҡтарыңдан, йәмле Дим, Ағиҙел буйҙарынан, бөтә Башҡортостаныңдан күптин-күп, суҡтин-суҡ сәләм!

Һин, редакцияға ебәргән шиғырҙарың тураһында яуап көтә-көтә, төңөлөп тә бөткәнһеңдер инде. Байтаҡ ваҡыт үтеп китте — ғәфү итерһең инде, яҡташ. Хәленде аңлайым, әлбиттә: сит-ят ерҙәрҙә ҡош телендәй генә бер хат килеүе лә оло ҡыуаныс була. Шуның өсөн мин һиңә ҙурыраҡ, шиғырҙарың тураһында ентеклерәк бер хат яҙырмын тип, уларҙы башҡаларҙан айырыбыраҡ һалып ҡуйғайным да, редакцияның көндәлек мәшәҡәттәре менән ығы-зығы килеп, һаман ята бирҙе. Ә ҡалған эшкә ҡар яуа, тигән мәҡәлде һин яҡшы беләһеңдер инде. Бына, ял көнө килеп булһа ла, яҙырға булдым үҙеңә.

Шиғырҙарың ҡатын-ҡыҙ поэзияһы тураһында ла, үҙеңдең яҙмышың хаҡында ла бик уйландырҙы. Улар ысын йөрәк хисе, тыуған ерҙе өҙөлөп һағыныу тойғолары, ниндәйҙер күңел болоҡһоуы менән бер тындан яҙылған. Уйландыра ла, тулҡынландыра ла улар. Күрәһең, был һинең тәүге шиғырҙарың ғына түгелдер. Һәр хәлдә донъяны һин шиғри күрә беләһең. Уй-тойғоларыңды асып биреүҙә ниндәйҙер бер тамамланғанлыҡ, камиллыҡ, эске һиҙемләү, сама тойғоһо бар. Быны уй-тойғо культураһы тип атарға ла мөмкин. Был бик яҡшы.

Инде «ләкин»гә күсәйек: ә бына шиғри культура, шиғри техника тигән нәмә һиңә етешеп бөтмәй әле, Әсмә һылыуҡай. Былай ритмды һин яҡшы тояһың, ләкин рифмаларың бик самалы: гел яҡынса ғына яңғырашҡа ҡоролған. Мәҫәлән, «Төштәремдә

булдым тыуған яҡта» шиғырында: «нараттар — яҡында», «һандуғас — ҡошсоҡҡай» кеүек үтә алыҫ рифмалар ҡулланаһың. «Хыялланған инем»дә «туғайҙы — турғайҙың» тигән рифма бар, әлбиттә. Ләкин ул күптән тылҡынған, традицион рифма. Һинең үҙең генә тапҡаны түгел. «Оҙаталар мине егеттәр»ҙә бөтә рифмалар ҙа йә шау ҡылымға, йә шау исемгә ҡоролған баналь рифмалар: «баралар — ҡағалар», «кистәрҙә — көндәрҙә», «килерһең — инерһең».

Унан һуң «Һөйөү юҡ ул! — тинем үҙ-үҙемә» тигән шиғырың «Һөйөү ул юҡ, тинем, бар тик иртәне, ә мөхәббәт мине утта үртәне» тигән таныш юлдарҙы хәтерләтә. Ә «ышандым — туланы» инде бөтөнләй рифма була алмай. «Көтәм һаман»да ла шул уҡ етешһеҙлектәр. Ә дөйөм алғанда, шиғырҙарың, тематик яҡтан тарыраҡ, бик интим булһалар ҙа, техник яҡтан ҡарап сыҡҡанда, шиғыр булырға ғына торалар.

Тимәк, һиңә, Әсмә һылыуҡай, шиғырҙарҙы (яҡшы шағирҙарҙы, әлбиттә) бик ентекләп, төпсөнөп, уларҙың серҙәренә төшөнөп уҡырға һәм үҙ-үҙеңә бик талапсан булырға кәрәк. Ә һиндә хоҙай биргән шиғри осҡондар бар. Уларҙы үрләтеп ебәреү, әлбиттә, үҙ ҡулыңда. Яңы шиғырҙарың булһа, ебәр, тартынма. Үҙеңдең яҙмышың хаҡында ла, артабан нишләргә уйлауың хаҡында ла хәбәр итһәң ине.

Яңы йылда һиңә яңы илһам теләп, сәләм менән Рәми ағайың.

* * *

Ғаризалар

В Башкирский Обком ВЛКСМ

15 апреля 1970 г.

Дорогие товарищи!

Я не успел выступить в печати по поводу выхода книги стихов Равиля Бикбаева «Автобиография», но как поэт и как бывший комсомольский работник должен сказать свое слово членам комиссии по присуждению премий комсомола имени Г. Саляма.

В лице Равиля Бикбаева в башкирскую литературу пришел большой самобытный поэт, талантливейший представитель молодого поколения нашей многоголосной поэзии 60-х годов.

Равиль Бикбаев прежде всего глубоконациональный поэт, но не ограниченный в своем национальном своеобразии, поэт широкого масштаба и высокого полета. Мир его поэзии многокрасочный, человечный и, я бы сказал, при этом тревожный, как само время. Он как поэт-гражданин очень чуток к голосу времени, самозабвенно верен героической и трагической истории своего народа и весь устремлен в светлое будущее его.

Глаза поэта зорки и видят не то, что лежит сверху, а то, что нужно и необходимо, поэтому он в своих творческих поисках больше находит, нежели ищет. В своем поэтическом мышлении, в образном видении мира он очень смелый, даже дерзкий, но он Поэт-новатор в лучшем смысле, весь опирающийся на лучшие традиции родной поэзии. При этом он поэт большой интеллектуальной культуры, хорошо усвоивший все достижения восточной и русской поэзии, значит, всей современной.

Поэтому-то его «Автобиография» вобрала в себя все лучшее прошлого и современного и так естественно сочетает личное с общим. И его личная автобиография превращается не только в художественное самоописание его поколения, но и своеобразную поэтическую историю своего народа, возрожденного революцией, при этом не теряя индивидуальный почерк, чисто бикбаевский голос его. И голосу этому не внимать нельзя, ибо голос этот чист, искренен и мудр, как сама молодость. Равиль Бикбаев — поэт молодости, ибо настоящая поэзия не может по своей сути жить без молодости. Поэтому поэзия близка и дорога молодежи, нашему комсомолу.

Р. Бикбаев быстро, энергично растущий поэт, поэт большого будущего. Тому порукой является его «Автобиография», потрясающее стихотворение «Сонгми» и великолепная поэма о Ленине, одна из лучших созданных о нем в башкирской поэзии.

Лично я считаю, что сам Салям достоин Бикбаевской премии!

Рами Гарипов.

* * *

Председателю
Совета Министров
Башкирской АССР
товарищу НАБИУЛЛИНУ В. Г.
от редактора
Башкирского книжного
издательства
Гарипова Рами Ягафаровича

З а я в л е н и е

Убедительно прошу Вас, товарищ председатель, помочь нашей молодой семье, нашим детям и моей творческой работе.

Дело в том, что я — литератор и после окончания Литературного института имени М. Горького при Союзе писателей в Москве был направлен на работу в Башкирию. Но вот уже третий год я работаю в Уфе и мучаюсь без своего угла, скитаясь по частным квартирам, и на это уходит половина моей очень скромной зарплаты (800 руб.).

Родился сын, родилась дочка — с ними теперь и в частные квартиры не пускают. А дети совсем маленькие еще: сыну — полтора года, а дочке всего полтора месяца, и им негде жить. И жена, чтобы беречь их, вынуждена была уехать в Москву. Кроме того, она учится в вечерней школе, а я занимаюсь творчеством — работаю над второй книгой стихов и ночую в редакциях, потому что хозяин требует освободить чулан, где я живу...

Но дальше так жить невозможно: приближаются холода, и с первого сентября у жены начинается учеба, и мы в безвыходном положении.

Я, наконец, вынужден обратиться к Вам, товарищ Набиуллин, — помогите нашим детям.

16/VIII—1957. Рами Гарипов.

* * *

Председателю
Совета Министров
Башкирской АССР
товарищу АКНАЗАРОВУ З. Ш.
от поэта, члена ССП СССР
Рами Гарипова

Уважаемый товарищ Акназаров!

Я вынужден обратиться к Вам с этим письмом-заявлением и глубоко надеюсь, что Вы не оставите его без внимания.

